

НАИЛ ҒӘЙЕТБАЙ

# СИТ ПЛАНЕТА ҠЫҘЫ



НАИЛ ҒӘЙЕТБАЙ

# СИТ ПЛАНЕТА ҠЫҘЫ



Мажаралы фантастик роман

КИТАП

ӨФӨ — 2003

УДК 821.51-93.512.141
ББК 84.4 (2Рәс-Баш)
F 65

**ҒӘЙЕТБАЙ Н.**
F 65 **Сит планета ҡыҙы.** Мажаралы фантастик роман. — Өфө: Китап, 2003. — 248 бит.

ISBN 5-295-03284-1

Күренекле драматург һәм яҙыусы Н. Ғәйетбайҙың был романы алты киҫәктән тора: «Ҡара ҡумта», «Хушлашыу», «Сит планетала», «Ҡара ҡумта-2», «Эҙәрләү», «Ҡарсыға» менән алыш».

Әҫәрҙә сит планета ҡыҙы Әмилә менән үҫмер егет Батырҙың мажаралары мауыҡтырғыс һүрәтләнә. Роман мәктәп уҡыусыларын ғына түгел, өлкән йәштәге әҙәбиәт һөйөүселәрҙе лә ҡыҙыҡһындырыр, тип ышанабыҙ.

ТП-117/03
ISBN 5-295-03284-1

УДК 821.51-93.512.141
ББК 84.4 (2Рәс-Баш)

© Н. Ғәйетбай, 2003

## ҮҘЕМ ҺӘМ СИТ ПЛАНЕТА ҠЫҘЫ ХАҠЫНДА

Минең яҙыусы булып китеүемә атайым менән әсәйем сәбәпсе булғандыр, тип уйлайым. Өсөнсө класта уҡығанда уҡ, үҙе аш-һыу менән шөғөлләнгән арала, әсәйем башҡорт китаптарын ҡысҡырып уҡыуымды һорай торғайны. Ҡайһы саҡта ҡартәсәйем дә килеп тыңлап ултыра. Ана шулай итеп мин бер йыл эсендә мәктәп китапханаһындағы бар китаптарҙы (улар araһында Һәҙиә Дәүләтшинаның «Ырғыҙ», Дауыт Юлтыйҙың «Ҡан», Ғәли Ибраһимовтың «Бер полк кешеләре» романдары, «Дуҫ булайыҡ», «Ҙур оркестр», «Беҙҙең өйҙөң йәме» кеүек повестар бар ине) әсәйемә ҡысҡырып уҡып ишеттерҙем. Ҡайһы бер әҫәрҙәрҙе уҡығанда әсәйем менән ҡартәсәйемдең күҙ йәштәрен һөртөп ултырғандары әле лә күҙ алдымда. «Ырғыҙ» романын хатта өс тапҡыр уҡыным.

Ә атайым республикала сыҡҡан бар гәзит-журналды алдыра ине, уларҙа ойошторолған конкурстарҙа (мәҫәлән, иң яҡшы хикәйәгә йәки мәҡәләгә арналғандарында) ҡатнашырға өндәй ине.

Ана шулай итеп әсәйем менән атайым миндә әҙәбиәткә ҡарата һөйөү уятҡандыр һәм мин, институт бөтөп Себерҙә эшләгәндә, Башҡортостанда баҫылған бөтә гәзит-журналға яҙылдым, уларҙы уҡый торғас, үҙемдә яҙып ҡарау теләге тыуҙы.

Әммә унан алда Сибайҙа мәктәп бөттөм. Уҡыу йылдарында спорт менән ныҡлап шөғөлләндем, саңғы, йүгереү, шахмат буйынса ҡала чемпионы булдым.

Магнитогорск тау-металлургия институтында инженер-механик һөнәрен алғас, оҙаҡ йылдар Кузбасста, Сибайҙа инженер вазифаларын башҡарырға тура килде.

Тәүге осор мин өлкәндәр өсөн яҙа инем, бер нисә китабым сыҡты. Шунан дуҫым, «Аманат» журналының (ул саҡта «Пионер» тип атала ине) баш мөхәррире, яҙыусы Динис Бүләковтың һорауы буйынса, балалар тормошо тураһында «Беҙҙең баҡса», «Һуңғы уйын» тигән повестар яҙҙым. Улар ҙа китап булып донъя күрҙе.

Шунан йәнә балалар әҙәбиәтенән ситләштем, өлкәндәр өсөн роман ижад иттем, пьесалар яҙа башланым.

1988 йыл башында «Йәншишмә» гәзитенең (ул осор гәзит «Башҡортостан пионеры» тип атала ине) хеҙмәткәре, шағирә Зөһрә Ҡотлогилдина миңә мөрәжәғәт итте:

— Наил ағай, балалар мажаралы фантастик әҫәрҙәр һорай. Һеҙ бит инженер, яҙығыҙ шундай повесть!

Зөһрә бик ихлас өгөтләгәс, баш тарта алманым, яҙырға һүҙ

бирҙем. Әммә ул осор роман менән мәшғүл инем, балалар өсөн әҫәргә тотонорға һис тә форсат сыҡмай. Тик Өфөгә килгән һайын (ул мәл Сибайҙа йәшәй инем), үс иткәндәй Зөһрәгә тап булам, ә ул һорай:

— Мажаралы фантастик повесть ни хәлдә?

Тәүҙә «ана тотонам, бына тотонам», — тип ҡотола килдем, ләкин бер мәл уңайһыҙ була башланы һәм яҙға табан Зөһрәне тынысландырырға булдым: «Яҙа башланым!» Икенсе күргәндә: «Уртаһына еттем!» Шунан: «Яҙып бөттөм! Машинкаға баҫырға бирҙем». Ә үҙем һаман тотонмағанмын да. Сөнки романдан бушап булмай, етмәһә пьеса ла яҙам.

Ләкин ары алдашыу мөмкин түгел ине, сөнки повесты килтерергә ваҡыт етте. Был 1988 йылдың йәйе булды. Һәм бөтә эшемде ташлап, тиҙ арала «Ҡара ҡумта» исемле мажаралы фантастик повесть яҙып, уны машинкала баҫып, август башында Зөһрәгә килтереп тотторҙом. Шулай итеп, Зөһрәнән ҡотолдом, тип уйлағайным. Әммә яңылышҡанмын булып сыҡты.

Көҙ көнө повесть баҫылып сыҡҡас, уҡыусыларҙан бик күп хаттар килде, балалар әҫәрҙең дауамын яҙыуҙы талап итә ине. Был осорға минең үҙемә лә повесть геройҙарының алдағы яҙмышы ҡыҙыҡлы тойола башланы. Һәм мин әҫәрҙең икенсе, үҙемсә, һуңғы киҫәген яҙҙым.

Тик ул гәзиттә баҫылып сыҡҡас, тағы ла күберәк хаттар килде. Зөһрә өндәшмәй генә уларҙы минең алға килтереп ауҙарҙы. Һәр хатта, йәнә повестың дауамын яҙыуҙы үтенәләр ине. Етмәһә «Башҡортостан пионеры» гәзите үҙенең тәүге битендә, иң өҫкә ат башындай хәрефтәр менән «Наил ағай, повесть давай!» тигән саҡырыу-өндәү баҫып сығарҙы.

Мин — сибек кеше, ҡаршы тора алманым һәм шул үтенеүҙәргә бирелеп өсөнсө киҫәген дә, дүртенсеһен дә, бишенсе-алтынсыһын да яҙҙым. Һәм «Ҡара ҡумта» «Сит планета ҡыҙы» исемле мажаралы-фантастик романға әүерелде. Бөгөн был әҫәр минең иң яратҡан китаптарымдың береһе. Уны яҙырға этәргән шағирә Зөһрә Ҡотлогилдина менән «Йәншишмә» гәзитенең уҡыусыларына ҙур рәхмәтлемен.

80-се йылдар аҙағында, 90-сы йылдар башында был роман бик популяр ине, ҡайһы мәктәпкә барһаң да уҡыусылар ул әҫәр хаҡында, геройҙарҙың артабанғы яҙмышы тураһында һораша, һаман да дауамын яҙыуҙы үтенә ине. Хәҙер ул уҡыусылар үҙҙәре ағай-апайҙар булып китте. Ә бөгөнгө йәш уҡыусылар был әҫәрҙе бөтөнләй белмәй. Шуға «Сит планета ҡыҙы»ның яңы быуын балалары өсөн китап булып сығыуына мин бик ҡыуанам. Хатта Әмилә, Батыр һәм Хәлиттең 18—20 йәшкә еткәс, тағы осрашыуҙары, төрлө мажараларға эләгеүе хаҡында повесть яҙырға ла уйым бар. Барыһы ла һеҙҙән, уҡыусыларҙан тора. Шундай әҫәр һеҙҙең өсөн ҡыҙыҡлы булыр инеме?

*Хаттар көтәп: Наил ҒӘЙЕТБАЙ*



## ҠАРА ҠУМТА

*Ун һигеҙ бала юғалды*

— Улығыҙҙы һуңғы тапҡыр ҡасан күрҙегеҙ?

— Кисә төшкө ашты ашаны ла... — Утыҙ йәштәр тирәһендәге ҡатын, артабан һөйләй алмай, быуылып иларға тотондо.

Милиция өлкән лейтенанты, урынынан тороп, ҡатын янына килде:

— Тынысланығыҙ. Улығыҙҙы табырбыҙ, борсолмағыҙ. Юғалған балаларҙың ошоғаса табылмай ҡалғаны юҡ. Уға нисә йәш тиһегеҙ әле?

— Ун. Ун беренсе китте.

— Дүртенселә уҡыймы?

— Бишенсегә күсте.

— Тимәк, — исеме — Хәсән, фамилияһы — Исхаҡов. Нимә кейгәйне?

— Аҡ футболка, зәңгәр шортик... Аяғында — аҡ кроссовка...

— Ҡиәфәте ниндәйерәк?

— Уртаса буйлы... Сөм-ҡара сәсле...

— Тә-әк... Хәҙер ҡайтығыҙ. Улығыҙ хаҡында ниндәй яңы хәбәр ишетһәгеҙ ҙә, беҙгә хәбәр итегеҙ. Үҙегеҙ тынысланығыҙ. Малайығыҙ һис шикһеҙ табылыр.

Өлкән лейтенант ҡайғыға ҡалған әсәне ишеккә тиклем оҙатып ҡуйҙы. Шунан ауыр һуланы ла урынына барып ултырҙы. Тыштан үҙен сабыр һәм тәүәккәл тоторға тырышһа ла, следователь ҡаушап ҡалғайны. Бер көн эсендә уларҙың кескәй генә ҡалаһында әҙәм ышанмаҫлыҡ хәл булды: унун ике йәштәрҙәге ун һигеҙ бала юҡҡа сыҡты. Бөтәһе лә ике көн элек кенә ата-әсәләре менән бер ни булмағандай һөйләшкән, көлөшкән, ә кисә, ни сәбәптәндер, өйҙәренә ҡайтмаған. Борсолған ата-әсәләр, эҙләп-эҙләп тә таба алмағас, төнгә ҡарай милицияға шылтыратҡан...

Әлбиттә, бындай ваҡиғалар осраштыра. Ҡалала айына бер-ике бала юғалып тора. Ләкин бер көн эсендә, бер юлы ун һигеҙ баланың ғәйеп булыуы... Бындай хәлдең ҡалала түгел, республикала осрағаны юҡтыр. Унан һуң, өйөнә ҡайтмаған малай йәки ҡыҙҙы тиҙ таба инеләр. Өлкән лейтенанттың был яҡтан тәжрибәһе бар: малайҙар, ғәҙәттә, алыҫ илдәрҙе күреү хаҡында хыяллана. Тимәк, уларҙы вокзал тирәһендә эҙләргә кәрәк. Әгәр китергә өлгөрһәләр, киләһе станцияларға хәбәр итеү ҙә етә — сәйәхәтселәрҙең эҙенә тиҙ төшәләр. Ә был юлы...

Вокзал янында иртәнән бирле милиция наряды дежурҙа тора, сумка күтәргән балаларҙың кемлеген, ҡайҙа юл тотҡанлығын тикшерә. Өфөгә тиклем һәр станцияға хәбәр ителгән, автовокзал күҙәтеү аҫтына алынған. Әммә көн үтеп бара, ә юғалған ун һигеҙ бала хаҡында бер генә йылы хәбәр ишетелмәй.

Шуныһы ғәжәп: әгәр бала өйөнән ҡасыр булһа, үҙен ике-өс көн алдан сәйерерәк тота башлай. Йә аҙ һөйләшә, йә әйберҙәрен сумкаға тултыра. Аҙаҡ следователь һорашҡас, ата-әсә баланың һуңғы ваҡыт үҙен ҡайһылайыраҡ тотоуын һөйләп бирә, һәм бөтәһе лә аңлашыла. Үҫмер юлға күптән әҙерләнгән. Яҡындары, үҙ эштәре менән мауығып, быны һиҙмәгән. Ә кисә юғалған ун һигеҙ малай өлкән лейтенантты төрлө яҡтан аптырауға ҡалдыра. Улар һис тә мөғжизә артынан китергә йыйынмаған кеүек. Сөнки үҙҙәрен ғәҙәттәгесә тотҡандар, ул-был ҡылыҡтары һиҙелмәгән. Урамға еңел кейем менән сыҡҡандар ҙа — юҡ булғандар. Теләһәң теләмәһәң дә, башҡа, уларҙы урламанылармы икән, тигән ҡурҡыныс фекер килә. Әммә ун һигеҙ баланы бер көн эсендә урлау... Кемгә кәрәк был? Ни өсөн? Һорауҙар күп, әммә береһенә лә яуап юҡ.

Күрәһең, хәҙер иң тәүҙә башҡа балаларҙың юғалыуына юл ҡуймаҫка кәрәк. Сара күрмәһәң, белеп булмай...

Кис телевидение һәм радио аша ҡала халҡына ошондай иғлан тапшырҙылар:

«Ҡәҙерле ата-әсәләр! Кисә беҙҙең ҡалала ун йәштән алып ун ике йәшкә тиклемге ун һигеҙ бала юғалды. Мили-

ция уларҙы эҙләй. Был көндәрҙә һеҙҙең һағыраҡ булыуығыҙ, балаларығыҙҙы урамға яңғыҙын сығармауығыҙ һорала. Ҡаланың эске эштәр бүлеге».

*Ике эҙәрмән*

— Батыр, уян әле, уян!

Малай ҙур тырышлыҡ менән күҙҙәрен асты һәм тороп ултырҙы. Ни булды икән? Әсәһе эшкә китешләй уны уятмай торғайны. Йомошо булһа, өҫтәлдәге дәфтәргә генә яҙып ҡалдыра ине.

— Уян инде, уян, — тине әсә, улын һелкеткеләп. — Тор ҙа битеңде йыу. Әйтәһе һүҙем бар.

Әсәһенең һүҙҙәре малайҙы һағайтты.

— Мин уяндым инде. — Үҙе битен устары менән ыуғылап алды. — Әйт, нимә?

Әсә малайының янына ултырҙы:

— Яңы ғына радионан әйттеләр: ике көн элек ҡалала ун һигеҙ малай юғалған. Барыһына ла ун-ун ике йәш тирәһе. Юғалмаған, кемдәрҙер урлаған. Ишетәһеңме? Балаларҙың бер үҙен урамға сығармаҫҡа ҡушалар. Миңә эшкә китергә. Һин дә хәҙер минең менән бараһың...

— Унда нисек ваҡыт уҙғарайым мин? — Батыр йөҙөн сирҙы. — Өйҙә ултырам, бер ҡайҙа ла сыҡмайым.

— Әгәр урамға сығып йөрөһәң...

— Сыҡмайым, тием бит.

— Ҡара уны! — тине әсә уҫал тауыш менән. Шунан бармаҡ янап ҡуйҙы. — Мин белермен һине нисек өйрәтергә. — Киләһе секундта әсә туҙған сәсле малайын үҙенә ҡыҫты. — Батыр... Әгәр һинең менән ул-был булһа... Мин нимә эшләрмен, белмәйем... Һин бит минең берҙән-бер йыуанысым!.. Һинән башҡа бер кемем юҡ. Сыҡма өйҙән, йәме?

— Юҡ, тинем бит инде.

— Мин һиҙәм: бандиттарҙың эше был. Бөгөнмө, иртәгәме уларҙы тоторҙар. Шунан урамда теләгәнсә йөрөрһөң...

— Мин былай ҙа өйҙә ултырырға йыйына инем. Китапхананан алған китаптарҙы уҡыйһым бар.

Батыр, урынынан тороп, аш бүлмәһенә үтте. Был минутта уның башында төрлө уйҙар ҡайнаша ине. Ниңә урлағандар? Кемдәр юғалған? Кисә төнгә ҡарай Хәсәндең әсәһе, улымды күрмәнеңме, тип шылтырата ине. Һаман да ҡайтмағанмы икән? Ҡайтмаһа, ул да юғалғанмы? Әсәһе киткәс тә, белешергә кәрәк.

Батыр бит-ҡулын йыуҙы ла тыныс, ғәмһеҙ ҡиәфәт менән ашарға ултырҙы. Йәнәһе, ул бер ҡайҙа ла ҡабаланмай, бөгөн көнө буйы өйҙә ултырырға йыйына.

Быны күреп, әсә тынысланды. Шулай ҙа иҫкәртеү һүҙҙәрен тағы бер ҡабатлап сыҡты һәм эшенә йүгерҙе. Батыр уның ҡаршылағы майҙан аша үткәнен тәҙрәнән ҡарап торҙо. Шунан телефонға үрелде. Яңы ғына ишеткән хәбәр малайға тынғы бирмәй ине. Иң тәүҙә дуҫы Хәлит менән һөйләшеп алырға кәрәк. Тегеһе оҙаҡ ҡына телефонға килмәй торҙо. Күрәһең, ата-әсәһе эшкә киткән, ә был һаман йоҡо һимертә. Биш минуттай ваҡыт үткәс кенә, Хәлит трубканы алды.

Батыр, һүҙҙе оҙаҡҡа һуҙмайынса, хәлде аңлатып бирҙе. Хәҙер үк кинотеатр янында осрашалар, шунан... Тик Хәлит йоҡо аралаш бер ни ҙә төшөнә алманы.

— Ниндәй ун һигеҙ малай? Ҡайҙа булған улар?

— Урлағандар уларҙы, аңлайһыңмы, урлағандар! Беҙ уларҙы табырға тейешбеҙ.

— Кем урлаған? Ниңә?

— Уныһы билдәһеҙ. Кем урлағанын белһәләр, барырҙар ҙа табырҙар ине.

— Ә беҙ нисек белербеҙ?

— Һин минә ярҙам итергә теләйһеңме, юҡмы? — Батырҙың йәне көйә башланы. Шул тиклем аңғыра булыр икән!

— Теләйем дә ул...

— Теләгәс, хәҙер үк кинотеатр алдында осрашабыҙ. Шунда һөйләшербеҙ!

Бына нәҙек оҙон буйлы, ҡуңыр сәсле Батыр кинотеатр ҡаршыһында тора. Ул түҙемһеҙләнеп тирә-яғына ҡаранып ала. Ғүмер буйы ығыш булды инде ошо Хәлит. Әллә йыуантыҡ кәүҙәһен етеҙ генә алып йөрөй алмай, әллә үҙе ялҡау. Ул бер ваҡытта ла Батырҙың тәҡдименә ҡуш ҡуллап риза булмай. Тәүҙә төпсөнөргә тотона: «Ниңә? Ни өсөн?»

Фекерен уға аңлата торғас, Батырҙың теләге һүрелә башлай.

Әммә бөгөн Батыр кире уйларға йыйынмай. Ун һигеҙ баланың юғалыуы уйын эш түгел. Ни ҙә булһа хәл итергә тейеш улар. Милиция ғына булдыра алмаҫ. Батырҙың башында бер идея тыуып тора. Әгәр шиге дөрөҫләнһә, Батыр балаларҙың бөтәһен дә табасаҡ...

Бына майҙандың теге башында Хәлит күренде. Йәшел трико, һары футболка кейгән йыуантыҡ малай был яҡҡа ашыҡмай ғына атлай. Әйтерһең, кисен һауа һуларға сыҡҡан. Батыр түҙмәне, үҙе уға ҡаршы атланы.

— Ниңә оҙаҡлайһың? — тине ул дуҫына, килеп етеретмәҫтән.

— Бер аҙ ҡапҡылап алдым.

— Бында ашығыс эштәр көтә, ә ул... Ярай. Хәҙер Хәсән-

дәргә барабыҙ. Әгәр ул да юғалған икән... Ул саҡта табыуы ҡыйын түгел.

— Ҡайҙан табырһың?

— Мин кисә Хәсәнде күргәйнем.

— Туҡта әле! Ул да юғалғанмы ни?

— Ысынлап та! — Батыр усы менән маңлайына һуғып алды. Уның был хәрәкәтендә, хатта, Хәсән өйҙә генә булмаһа ярар ине, тигән хәүеф тә бар ине шикелле.

Малайҙар, майҙанды арҡыры киҫеп, ҡаршылағы бейек ҡатлы өйҙәрҙең араһына инеп китте. Күп тә үтмәй, улар Хәсәндәрҙең ишеген шаҡый ине инде.

Малайҙың әсәһе малайҙарға ҡайғылы күҙҙәре менән ҡараны ла илап ебәрҙе.

— Хәсәнебеҙ юғалды бит, Батыр. Кисә ҡайтманы. Дуҫығыҙ юғалды. Ун һигеҙ бала... Нимә уйларға ла белмәйбеҙ...

— Тәзкирә апай, һеҙ борсолмағыҙ. Беҙ табабыҙ уны. — Батыр ошо минутта әсә кешегә балаһын юғалтыуҙың оло ҡайғы икәнлеген аңлағандай булды. Ҡапыл үҙенең әсәһе иҫенә төштө. Моғайын, ул, эшенә барып еткәс, өйгә шылтыратҡандыр. Ә телефон яуап бирмәгәндер... Шунан әсәһе... Ярай, былай уйлай башлаһаң, өйҙән дә сығырға ярамай. Ә бында, ана, дуҫы юғалған. Әсәһе ҡайғыра. Эйе, Хәсәнде бер нәмәгә ҡарамай табырға кәрәк.

— Ҡайҙан табаһың һин уны? — Тәзкирә апайҙың күҙендә өмөт датҡылары күренде.

Был туралағы уйҙарын Батыр сисеп торманы, яурындарын ғына һелкетте:

— Эҙләйбеҙ. Бына Хәлит менән.

— Ул бандиттар бөгөн дә... Һаҡ ҡына булығыҙ инде, Батыр. Ана, радионан да балаларҙы яңғыҙ сығармаҫҡа ҡуштылар.

— Беҙ бит икәү.

— Икәү булһағыҙ ҙа... Кеше булмаған ерҙә йөрөмәгеҙ...

Урамға сыҡҡас, Батыр үҙенең планын Хәлиткә асып һалды.

— Кисә китапханаға китеп барғанда Хәсәнде тап иттем. Ҡулына ҡармаҡтар тотоп алғайны. Мине үҙе менән саҡырғайны ла, баш тарттым... Туҡта! Шул саҡ беҙҙең янға Әнүәр килде... Улар икәүләшеп китте балыҡҡа. Беләһеңме, ҡайҙа барабыҙ, тип һөйләште улар? Төйәләҫ ҡаяһына.

— Хәҙер шунда китәбеҙме?

— Тәүҙә Әнүәрҙәргә шылтыратабыҙ. Әгәр ул да юғалһа...

— Юғалған, — тине Хәлит тыныс тауыш менән.

— Ҡайҙан беләһең?

— Кисә төндә атаһы беҙгә шылтыратты.

— Улай булғас, ниңә өндәшмәйһең?

— Өндәштем бит.

— Алданыраҡ әйтергә булмай инеме ни?

— Һин бит һораманың.

Хәлиттең бер ҡатлы фекер йөрөтөүенә асыуы килһә лә, Батыр был хаҡта һүҙ ҡуйыртып торманы.

— Ярай. Тимәк, улар икеһе лә юғалған. Был нимә тигән һүҙ инде? Улар ҡая тирәһендә, тигән һүҙ был, Хәлит иптәш. Хәҙер шунда барабыҙ һәм...

— Әгәр унда беҙҙе лә... — Хәлит фекерен әйтеп бөтөрмәне.

— Нимә?

— Уларҙы бит ниндәйҙер бандиттар урлаған. Радионан шулай тигәндәр. Балаларға яңғыҙ йөрөргә ҡушмағандар.

— Ул бит балаларға. Һин баламы?

— Ну... ун бер йәш ул...

— Ун бер йәш ул — егет тигән һүҙ. Миңә әсәйем гел шулай ти.

— Улайға ҡалһа, Хәсән менән Әнүәр ҙә егет. Ә уларҙы барыбер урлағандар.

— Улар урланырын белмәгән. Ә беҙ беләбеҙ. Шуға һаҡ буласаҡбыҙ...

— Белһәк тә...

— Һин нимә, шөрләйһеңме?

— Юҡ та ул...

— Улайһа, дуҫтарыңды ҡотҡарырға теләмәйһең. Уларға ҡурҡыныс янай. Ә һин бында...

— Милиция эҙләй бит.

— Милиция уларҙың ҡайҙа киткәнлеген белмәй.

— Әйтәйек һуң.

— Әгәр эҙләшергә теләмәйһең икән... Мин бер үҙем дә...

— Теләйем дә... Тик...

— Теләгәс, һөйләнмә. Киттек. Ваҡытты ғына әрәм итәбеҙ.

Батыр шулай тине лә ашығып алға атланы. Йыуантыҡ Хәлит, саҡ ҡына икеләнеп торғандан һуң, ҡыҫҡа аяҡтары менән йыш-йыш баҫып, уға эйәрҙе...

*Ҡара ҡумта йәки оло сер*

Әмиләнең Ер планетаһына килеүенә ике көн үтеп тә китте. Ул кисә үк эргәлә генә ятҡан ҡалаға сығып әйләнергә булғайны ла, атаһы рөхсәт итмәне. Беренсенән, Ерҙәге балаларҙыҡы кеүек кейем тегергә кәрәк. Урҙан нисек килгән шулай сыға алмай бит инде Ер ҡалаһына. Икенсенән, ял итеп алырға ҡушты атаһы. Сөнки Урҙан Ергә тиклем илле парсек араны ярты көн эсендә үтһәләр ҙә, ор-

ганизм оло тиҙлекте ауыр кисерә. Психик ауырыуҙарға бирелмәҫ өсөн, инструкция буйынса, осоштан һуң бер тәүлек ял итергә кәрәк. Әммә был инструкция өлкәндәр өсөн генә яҙылғандыр. Әмилә, мәҫәлән, бер сәғәттән һуң үҙен һәр ваҡыттағыса шат һәм еңел итеп тоя инде инде.

Атаһы эшләгән Ер планетаһына барырға теләүен уҡыу йылының башында уҡ белдерткәйне Әмилә. Уға шунда уҡ Ер шарында уларҙың станцияһы ултырған урындағы телде өйрәнергә ҡуштылар. Атаһы «Башҡорт теле» дәреслеге ебәрҙе. Әммә ҡыҙ, төрлө сәбәптәр арҡаһында, дөрөҫөрәге, үҙенең ялҡаулығына баш була алмайынса, китапты байтаҡ ҡына ваҡыт асып та ҡараманы. Фәҡәт уҡыу йылының аҙағы яҡынлаша башлағас ҡына, үҙенең Ергә барырға теләүен иҫенә төшөрҙө һәм дәреслектәргә ныҡлап йәбеште. Үҙенә ҡалһа, бөгөн башҡорт телен һыу кеүек эсә төҫлө. Станцияға килгәс тә, атаһы уның башҡортса һөйләшеүен тыңлап ҡараны ла серле йылмайҙы, шунан:

— Түҙерлек, — тип ҡуйҙы.

Атаһының һүҙе бер, ә бына Ер ҡалаһына сығып, ундағы кешеләр менән башҡортса һөйләшеп ҡарау — икенсе нәмә, әлбиттә.

Ҡайтҡас, ялды нисек үткәреүҙәре хаҡында инша яҙырҙар. Әмиләнең яҙмалары башҡорт балалары менән аралашыу, уларҙың ғөрөф-ғәҙәтен өйрәнеү тураһында булыр. Телде яҡшы белеүе арҡаһында бындағы кешеләргә үҙенең алыҫ Ур планетаһынан икәнлеген һиҙҙермәүен яҙыр. Күрше ҡаланан, тигәйнем, барыһы ла ышанды, тиер.

Бына кейемдәр әҙер. Әммә ул арала ҡалала төн еткән. Тимәк, таң атыуын көтөргә кәрәк, Әмилә станция буйлап йөрөргә тотондо. Шуныһы хөрт: бында хәҙер бер кем дә ҡалмаған тиерлек. Станция хеҙмәткәрҙәренең барыһы ла Ерҙә тикшеренеүҙәр алып бара, фәҡәт ике көндән генә ҡайталар. Шуға танышып, һөйләшеп китер кеше юҡ. Төрлө ваҡ-төйәк эштәрҙе башҡарыусы роботтарҙы иҫәпкә алмағанда, станцияла Әмиләнең атаһы — станцияның етәксеһе Лайон һәм транспорт карабын йөрөтөүселәр Дукаш менән Баро ғына ҡалған.

Ҡыҙ улай-былай уралды ла йәнә карап янына китте. Ярты тәүлеккә һуҙылған осош осоронда ҡыҙ йыһансылар менән яҡшылап танышырға өлгөргәйне. Дөрөҫөрәге, Дукаш исемле ҡарт менән дуҫлашып китте Әмилә. Баро тигән егет күберәк осош менән етәкселек итте, шуға уның Әмилә менән әңгәмәләшергә ваҡыты ла булманы.

Бәләкәс кәүҙәле, йөҙөн йыйырсыҡ баҫҡан Дукаш һүҙсән генә ҡарт булып сыҡты. Ул Әмиләнең йыһан һәм Ер планетаһы хаҡындағы һорауҙарына ялыҡмай яуап бирҙе, ә ҡыҙ карап менән ҡыҙыҡһына башлағас, уны үҙе менән

алып йөрөп, һәр бүлектең нимә өсөн тәғәйенләнгәнен һөйләп сыкты. Фәкәт карраптың ҡойроҡ өлөшөндә ултырған ҡара ҡумтаның ғына нимә икәнлеген асыҡ ҡына итеп әйтә алманы.

Ул ҡумтаны Әмилә осраҡлы ғына күреп ҡалды. Ярты тәүлек осто улар Ергә тиклем, һәм ярты тәүлек буйы караптың ҡойроҡ өлөшө бикле булды.

Осош ваҡытында уҡ ҡыҙ:

— Ә унда нимә? — тип һорағайны, ҡарт:

— Уны һиңә белергә ярамай, — тип йылмайҙы. Бына бөгөн станцияла эш юҡлыҡтан аптырап йөрөгән Әмилә йәнә карап янына килеп сыҡты. Уның эсенә инһә, бер кем күренмәй. Ошо урында ҡыҙ ҡойроҡ бүлексәһенә илтеүсе ишектең асыҡ икәнлеген күреп ҡалды. Әмилә, әлбиттә, оҙаҡ уйлап тормайынса, шунда атланы һәм ишек төбөндә Дукашҡа тап булды. Ҡарт, Әмиләне күргәс, ҡаушап ҡалғандай итте, үҙе, бүлексәнең эсен күрһәтмәҫкә теләгәндәй ишеккә арҡыры торҙо:

— Нимә эшләп йөрөйһөң бында?

Әммә Әмилә Дукаш артындағы бүлмәгә һынсыл ҡараш ташларға өлгөргәйне инде. Унда ҙур ҡара ҡумтанан башҡа бер ни ҙә юҡ.

Сөм-ҡара төҫтәге был йәшник ҡыҙҙа оло ҡыҙыҡһыныу уятты. Ерҙәге үлсәм менән әйткәндә, ҡумтаның бейеклеге-киңлеге икешәр, оҙонлоғо дүрт метр самаһы булыр.

— Был ниндәй ҡумта? — тип һораны Әмилә.

Дукаш яуап бирергә әҙерләнде лә, икенсе нәмәне иҫенә төшөргән кеүек, һүҙҙе ситкә бороп алып китте. Шунан Әмилә үҙе лә ҡара ҡумта хаҡында онотто. Байтаҡ ҡына ваҡыт үткәс, ҡыҙ ҡарттың теге серле һауыт тураһында бер ни ҙә әйтмәүен хәтерләне. Әмилә, уңайын табып, Дукаштан ул хаҡта йәнә һораны. Ҡарттың сырыш баҫҡан йөҙө уҫаллана төштө.

— Бик күп һорау бирәһең, — тине ул ҡырт ҡына. — Минең һөйләшеп торорға ваҡытым юҡ.

— Һеҙ шуны ғына әйтегеҙ: уның эсендә нимә бар? Мин башҡа һорау бирмәм.

— Эсендәме? Уның эсендә бер ни ҙә юҡ.

— Улайһа, ниңә бикләп тотаһығыҙ?

— Күп белһәң, тиҙ ҡартайырһың, — тиеү менән генә сикләнде Дукаш.

Әмилә, үпкәләгәнен аңлатып, ирендәрен бүлтәйтте.

— Һеҙ мине бәләкәйгә һанайһығыҙ. Ә мин күп нәмәне аңлайым. Беҙ хатта йыһан караптарының төҙөлөшөн өйрәнәбеҙ. Әгәр әйтһәгеҙ...

— Юҡ, әйтмәйем. — Ошо ерҙә Дукаштың йөҙөндә йылмайыу эҫәре барлыҡҡа килде. — Был — оло сер. Оло сер-

ҙең нимә икәнлеген беләһеңме? — тине ул, «оло» һүҙенә баҫым яһап.

— Юҡ, белмәйем. — Әмилә дөрөҫөн әйтте.

— Оло серме? Оло сер күңелдә генә һаҡлана. Уны бер генә кеше белә. Иң күбе өс кеше. Ә башҡа бер кемгә лә әйтмәйҙәр. Ошоғаса был ҡумта хаҡында станцияла мин һәм Баро ғына белә инек.

— Ә атайым? — тип һораны Әмилә. Сөнки станция етәксеһе өсөн билдәһеҙ нәмә юҡтыр кеүек ине ҡыҙға.

— Хатта атайың да белмәй. Бына шулай була ул оло сер. Хәҙер уның хаҡында һин белдең. Инструкция буйынса... Был серҙе белгән һәр яңы кешене...

— Нимә эшләтәләр? Үлтерәләрме?

— Шулайыраҡ, — тип йылмайҙы ҡарт. — Тик серҙе һаҡлай белмәгәндәргә генә ҡағыла был. Минеңсә, һин — ышаныслы ҡыҙыҡай. Быны күҙҙәреңдән күрәм. Шулай бит?

— Шулай, — тине Әмилә. — Тик һеҙ миңә ҡумтаның эсендә нимә барлығын әйтмәнегеҙ. Һеҙ уны ике планета араһында ниңә алып йөрөйһөгөҙ?

— Мин бөтәһен дә әйтә алмайым. — Дукаш етдиләнде. — Ваҡыты еткәс, барыһын да аңларһың. Хәҙергә шуны бел: был ҡумта беҙҙең Урҙағы күп кешеләргә һаулыҡ, йәшлек һәм оҙон ғүмер алып ҡайтасаҡ. Аңланыңмы?

— Аңланым, — тине ҡыҙ, ҡарттың сәйер һүҙҙәренә төшөнөп етмәһә лә. Хәйер, уның башында был мәл икенсерәк уйҙар ҡайнаша ине. Әмилә, ошо йәшенә етеп, бер ҡасан да ҙур эштәр, оло серҙәр менән бәйле булманы. Ә был хаҡта күпме хыялланды ул. Мәҫәлән, уларҙың планетаһына ҙур ҡурҡыныс янай икән, ти. Шул мәл Әмилә үҙенең ғүмерен ҡорбан итеп, планетаны ҡотҡарып алып ҡала. Йәки бына Ур планетаһының иң оло серен уға ышанып тапшырғандар. Көтмәгәндә Әмилә дошмандар ҡулына эләгә. Тегеләр ҡыҙҙан серҙе әйттерергә итәләр, ә Әмилә өндәшмәй. Шулай итеп, үҙҙәренең планетаһын һәләкәттән ҡотҡара. Был турала ҡыҙ йыш хыяллана. Шундайыраҡ серҙе уға Дукаш бүләк итмәксе. Әлбиттә, Әмилә был ҡара ҡумта хаҡында бер кемгә лә әйтмәйәсәк.

— Һеҙ борсолмағыҙ, — тине ул ҡартҡа. — Мин сер һаҡлай беләм. Хатта ошондай Оло серҙе күптән үҙемдә йәшереп тотҡом килә ине. Ышанысығыҙ өсөн рәхмәт. Ҡара ҡумта хаҡында бер кем дә белмәҫ.

— Хатта атайың да, — тине Дукаш.

— Хатта атайым да, — тип ҡабатланы ҡыҙ.

— Бында ҡыҫҡа ғына ритуал да бар. Ант тип атала ул.

— Мин ант бирергә әҙер.

— Әгәр Оло серҙе берәйһенә әйтһәм... Ҡабатла.

— Әгәр оло серҙе бирәйһенә әйтһәм...
— Мин — иң ҡурҡаҡ, иң әшәке, иң насар...
Әмилә карттың һүҙҙәрен ҡабатланы һәм, бер ҡасан да, бер кемгә лә серҙе асмаясағын белгәнгә күрә, үҙенең бер ҡасан да иң насар, иң ҡурҡаҡ, иң әшәке кеше булмаясағын аңланы. Быны тойоуы шундай рәхәт ине...

*Әмилә Ер өҫтөнә күтәрелә*

Күҙәтеү экраны эргә-тирәлә бер кемдең дә юҡлығын белдерҙе. Лифт тауышһыҙ ғына алға йөҙҙө. Күп тә үтмәне, Әмилә Ер планетаһының өҫтөндә яңғыҙы тороп ҡалды. Тирә-йүндә — ҡола ялан, төрлө-төрлө үләндәр үҫә, һирәкһаяҡ ағастар күренә. Ҡайҙа ҡарама, бер үк күренеш. Хатта, ошо тапҡырҙа, аҫта, станция барлығын һиҙҙереүсе әйбер ҙә юҡ. Әгәр сумкаһында станцияны эҙләп табырға ярҙам итеүсе прибор булмаһа, ҡыҙ һис тә кире юлды таба алмаҫ ине.
Әмилә, алыҫтағы ҡаланың саҡ-саҡ ҡына күренгән бейек ҡатлы өйҙәренә ҡарап торғандан һуң, башын күтәрҙе. Ерҙең ҡояшы Урҙыҡына ҡарағанда бәләкәйерәк, әммә яҡтыраҡ яна. Ерҙе Урҙан айырырлыҡ башҡа бер ни ҙә юҡ кеүек. Дөрөҫ, ағастарҙың, үләндәрҙең төҙөлөшө икенсерәк, ә бына төҫтәре шул уҡ. Уйлап ҡараһаң, сәйер бит. Бынан илле парсек алыҫлыҡта, йыһан төпкөлөндә йөҙгән Ур планетаһында тормош ағышы бындағы менән оҡшаш. Ниңә икән? Хәйер, был һорауҙы уға, өсөнсө баҫҡыста шөғөлләнеүсе ҡыҙға, биреүе лә оят. Дәреслектәрҙә бит, тәбиғәт законы бөтә йыһанда бер төрлө, бар йыһан ике йөҙгә яҡын элементтан тора һәм, уларҙың комбинацияһы арҡаһында ҡайҙалыр органик тормош тыуа икән, ундай ерҙәр бер-береһенә оҡшаш, тип яҙылған. Быны ғына аңлай Әмилә, әммә барыбер алыҫ планеталарҙағы тормоштарҙың бер ишлелегенә, унда йәшәгән кешеләрҙең, йәнлектәрҙең ҡиәфәттәренең нык айырылмауына хайран ҡала. Бында ниндәйҙер сиселеп бөтмәгән сер бар кеүек...
Бөгөн атаһынан эргәләге ҡалаға сығып килергә рөхсәт алды Әмилә. Әлбиттә, иң алда, инструкцияның бер пунктын да онотмауын белдереп, уны яттан һөйләп бирергә тура килде: «Кешеләр менән аралашмаҫҡа, һорау бирһәләр генә, ҡыҫҡа яуап ҡайтарырға. Фәҡәт күҙәтергә, үҙеңде тыныс тоторға...» Бөтәһе йөҙ ҙә егерме пункт.
Ҡыҙының инструкцияны яҡшы белеүенә Лайон ҡәнәғәт ҡалды шикелле, артыҡ һорауҙар биреп торманы. Әммә Әмиләнең кейемен ентекләп тикшерҙе. Йәнәһе, Ер йөҙөндә йәшәүселәрҙекенән айырылмаймы икән? Ер кешеләре бе-

рәй нәмә һиҙеп ҡалмаһындар, шик тыумаһын... Шунан Лайон, ни өсөндөр, уфтанып алды һәм тапшырыусы аша биш минут һайын, махсус кнопкаға баҫып, үҙенең ҡайһы ерҙә икәнлеген белдереп торорға ҡушты. Әмиләгә тәүге тапҡыр Ер өҫтөндә ике сәғәт йөрөргә рөхсәт ителде.

Бына ҡыҙ, тирә-яғына ҡарай-ҡарай, ҡалаға табан атлай. Алда ике һын күренде. Ҡыҙ үҙенең тулҡынлана башлауын тойҙо. Сөнки былар бит — Әмиләгә тап булыусы тәүге Ер кешеләре. Улар үҙҙәрен нисек тотор? Ҡыҙ берәй шик тыуҙырып ҡуймаҫмы?

Һындар яҡынлаша төштө. Тегеләр Әмилә йәшендәге ике малай булып сыҡты. Ҡыҙ, һөйләшеп тормаҫ өсөн, уларҙы урабыраҡ үтергә теләне. Әммә малайҙар туҡтап, ҡыҙға бер аҙ ҡарап торҙолар ҙа:

— Эй, ҡыҙыҡай! — тип ҡысҡырҙылар.

Әмилә ҡапыл ни тип яуап бирергә лә белмәне. Ул: «Эй, ҡыҙыҡай», — тигән һүҙҙәрҙең Ер кешеләренсә ни аңлатыуын иҫенә төшөрөргә маташһа ла, булдыра алманы. «Тәүге һынауҙы ла үтә алманым», — тип уйланы ҡыҙ төшөнкөлөккә бирелеп.

— Минән һеҙгә нимә кәрәк? — Әмилә был осраҡ өсөн ошонан да уңайлы һорау тапманы.

— Һин кем? Ҡайҙан киләһең?

Бер юлы ике һорау. Әгәр үҙҙәренең планетаһында булһа, Әмилә уйлап та тормайынса яуап бирер ине. Бында ул һәр аҙымын уйлап баҫырға, һәр һүҙен үлсәп әйтергә тейешле. Инструкция шулай ҡуша.

— Мин — Әмилә. Киләм алыҫтағы ҡаланан. — Шик тыуҙырмаҫ өсөн, малайҙарҙың ике һорауына ла яуап бирергә булды.

Ә тегеләр, ни өсөндөр, бер-береһенә ҡарашып алды. Әмиләнең яуабы уларҙың ҡыҙыҡһыныуын арттыра ғына төштө шикелле, сөнки ҡыҙға табан атланылар. Әмилә уларға ентекләп ҡараны. Малайҙарҙың береһе — нәҙек оҙон буйлы, ҡара сәсле, икенсеһе — ҡыҫҡа йыуантаҡ кәүҙәле, ҡуңыр сәсле. Икеһенең дә өҫтөндә шортик менән футболка.

— Әмилә? — тип һораны тәбәнәк малай. — Ундай исем буламы ни?

— Күрше ҡаланан? — Оҙон буйлы малай ҙа ғәжәпләнеүен белдерҙе. — Баҡыртауҙан киләһеңме? Йәйәүме?

Быларҙың аптырауын күреп, Әмилә үҙенең ниндәйҙер хата ебәреүен һиҙенде. Тиҙерәк ысҡынаһы ине. Тик нисек итеп китергә уларҙың янынан?

— Һеҙҙең һорауҙарығыҙ күп, — тине Әмилә, бер аҙ уйланып торғандан һуң. — Мин уларҙың ҡайһыһына яуап бирергә белмәйем.

Малайҙар бер-береһенә ҡарашып алды.

— Һин берәмләп яуап бир, — тине һонтор малай. — Бәхыртауҙан киләһеңме?

Әмилә күрше ҡаланың исемен дә белмәй, уның был тирәнән ниндәй алыҫлыҡта ятҡанын да картанан ҡарамаған. Шулай ҙа төрлөсә уйлағандан һуң:

— Эйе, — тип яуап бирҙе. — Бәхыртауҙан.

— Йәйәүме? — һонтор малай йәнә шул һорауын ҡабатланы.

Уның ҡиәфәтенә ҡарап, Бәхыртауҙан йәйәү килеү мөмкин түгеллеген аңланы ҡыҙ.

— Юҡ, — тине Әмилә. — Мине ултыртып алып килделәр. Транспортта.

— Ниндәй транспортта?

— Маркаһын оноттом.

— «Жигули»мы? «Волга»мы?

— «Волга». — Ҡыҙ еңел һулап ҡуйҙы. Ул ошо маркалы автомобиль барлығын хәтерләне. — Малайҙар, һеҙ ғәфү итегеҙ. Мин ашығам. — Әмилә китеү өсөн быларҙың рөхсәтен көттө.

Ә малайҙар ҡабаланған ҡыҙҙың ниңә һаман да китмәүен һис тә аңлай алманы. Шул ерҙә Әмилә иҫләне: бында китеү өсөн һөйләшеп торған кешенән рөхсәт алыуҙың кәрәге юҡ.

— Һау булығыҙ, — тине Әмилә һәм ҡалаға ҡарай атланы.

Бер аҙ барғас, Әмилә артына әйләнеп ҡараны. Малайҙар, уның хаҡында онотоп, станция урынлашҡан ҡалҡыулыҡҡа табан атлай ине.

— Әллә иҫәр инде. — Ҡыҙҙы Батыр шулай баһаланы.

— Сәйер һөйләшә. Ул башҡорт ҡыҙы түгел. — Хәлит тә үҙенсә һығымта яһаны. — Рус йәки латышка.

— Эйе, — тип килеште уның менән Батыр. — Ә барыбер башҡортса яҡшы ғына белә. Ярай, хәҙер беҙҙә уның ҡайғыһы юҡ. Ул ҡыҙҙы башҡаса күрәһебеҙ түгел. Ә бына юғалған малайҙар...

Ошо ерҙә Батыр яңылышты. Хәйер, яңы ғына улар менән һөйләшкән Әмилә исемле сәйер ҡыҙҙы бер сәғәттән бөтөнләй уйламаған урында осратырын ул да, Хәлит тә күҙ алдына килтермәне, әлбиттә. Шуға күрә ике малай ҙа, Әмилә хаҡында тиҙ үк онотоп, үҙҙәренең уйҙарына сумдылар.

Алда ҡола ялан. Йәнә бер саҡрымдай үтһәләр, Төйәләҫ йылғаһына барып етәләр. Кисә юғалған Хәсән менән Әнүәр шуның ҡаялы ярында балыҡ тоторға тейештәр. Табырҙармы уларҙы? Әгәр иҫән-һауҙар икән, ниңә кисәнән бирле ҡайтмағандар? Һаман да балыҡ тотоп ултырмайҙарҙыр бит? Улайһа, ҡайҙа булғандар?

Ошондай уйҙарға бирелгән Батыр киң-киң аҙымдар менән атлай. Хәлит, юртанлап, унан ҡалышмаҫҡа тырыша.

*Көтөлмәгән осрашыу*

Ҡалаға килеп ингәс, Әмилә ирекһеҙҙән туҡтап ҡалды. Китаптарҙағы фотолар, һүрәттәр аша үҙен бында ни көтөрөн яҡшы белеүенә ҡарамаҫтан, ҡаланың ысынбарлығына тап булғас, ҡыҙ үҙенең ҡаушауын, хатта, хайран ҡалыуын тойҙо.

Ике планетала — Ерҙә һәм Урҙа — йәшәүсе кешеләр, йәнлектәр, үҫемлектәр бер-береһенә шундай оҡшағандар, ә бына шул планеталарҙа төҙөлгән йорттар, башҡа биналар, киреһенсә, бер-береһенән ныҡ айырыла. Хәйер, бынан бер нисә мең йылдар элек Урҙа ла йорттар бындағы кеүек булған. Хәҙер генә биналар бөтөнләй башҡаса төҙөлә. Мәҫәлән, тәҙрәләрҙә быяла урынына магнит тулҡыны файҙаланыла. Торлаҡтар түңәрәк формала, һәм унда фәҡәт йоҡо бүлмәһе генә бар. Ур планетаһында кешеләр матур итеп йыһазландырылған махсус урында ашай, ҡунаҡтарын ҡабул итә, уҡый һәм башҡа эштәр менән шөғөлләнә, өйөнә тик йоҡлар өсөн генә ҡайта. Ә Ерҙәге һәр ғаилә үҙе өсөн айырым йоҡо бүлмәһе, аш бешереү урыны, ҡунаҡ ҡабул итеү бүлмәһе тота икән. Шуға Ерҙәге өйҙәр ҙур, килбәтһеҙ. Икенсенән, күп ваҡыт буш торған бүлмәләрҙе төҙөү өсөн күпме аҡса сарыф ителә. Әмилә шул йорттарға ғәжәпләнеп ҡарай һәм үҙ планетаһының тарихына әйләнеп ҡайтҡандай була.

Транспорттың барыһында ла шылып йөрөү өсөн түңәрәк диск файҙаланыла икән — сәйер ҙә, көлкө лә. Шул арҡала күпме файҙалы энергия юҡҡа сығарыла. Шуны аңламайҙармы икән ни? Ә Ур планетаһында мәктәптең тәүге баҫҡыстарында уҡ быны өйрәтәләр. Унда транспорт фәҡәт һауа яҫтығы ярҙамында шылып йөрөй. Шулай итеп, бик күп энергияны һаҡлайҙар. Былар, бахырҙар, шуны аңламай икән. Ниңә Әмиләнең атаһы уларға был хаҡта әйтмәй? Гел генә инструкция тип йәшәп булмай ҙа инде! Ерҙең яҙмышына тығылмайым, тип бындағыларҙың ыҙаланыуына күҙ йомоу — үҙе енәйәт! Ярай, уңайы килеп сығыу менән, Әмилә уларға бөтәһен дә һөйләп бирәсәк.

Ер кешеләренең йәнә бер-ике сәйер ғәҙәтен күреп йылмайҙы ҡыҙ. Ирҙәр осрашалар ҙа ҡул ҡыҫышалар. Тәүҙә, әллә һуғышырға итәләрме, тип ҡурҡып киткәйне Әмилә. Баҡһаң, тегеләр шулай итеп бер-береһенә сәләм бирә икән. Ә ҡатын-ҡыҙҙарҙың иҫәнләшеүе тағы ла мәҙәгерәк! Улар ирендәре менән бер-береһенең сикәһенә тейеп ала. Хас тешләшергә иткән кеүек! Хәйер, Әмилә был турала китаптарҙан уҡып белә ине бит. Онотҡан ғына. Әгәр Ер кешеләрен Урға алып барһаң, улар ҙа, тегендәгеләрҙең иҫәнләшеүен күреп, хайран ҡалыр ине, моғайын. Ирҙәр бер-береһенең

ҡолағын тотоп ыуғылай, ә ҡатын-ҡыҙҙар, ике ҡулдарын күтәреп, устары менән өсәр ҡат һуҡҡылап ала. Уйлап ҡараһаң, был да мәҙәк бит...

Үҙәк майҙанға етәрәк, Әмиләнең күҙенә бер таныш һын салынғандай булды. Ҡыҙ, туҡтап, тирә-яғына ҡараны һәм шаҡ ҡатты. Унан егерме аҙым алдараҡ Дукаш китеп бара. Ер кешеләре кеүек кейенеп алған. Ҡартты бер ваҡытта ла бындай ҡиәфәттә күрмәгәс, Әмилә бигерәк тә сәйерһенде. Ә иң аптыратҡаны шул: ике сәғәттән Урға осабыҙ, ваҡытым бик тығыҙ, тип һөйләнә ине лә баһа. Шулай булғас, нимә эшләп йөрөй ул бында? Әмилә Дукашҡа өндәшергә уҡталды ла, үҙе лә һиҙмәҫтән, ҡапыл туҡтап ҡалды. Ниҙер тотто ҡыҙҙы. Дукаштың уҫал ҡиәфәте, күҙҙәренең йәнлек ауларға сыҡҡан һунарсыныҡы кеүек ялтлап китеүе ҡурҡытты, шикелле. Ни булһа ла, ҡыҙ урынында ҡатып ҡалды һәм Дукашты күҙәтергә кереште.

Ҡарт баҡса мөйөшөндә һөйләшеп торған ике малайға яҡынлашты. Ҡапыл ҡарттың йөҙө һауалағы ҡояштай яҡтырып китте. Ул, ниҙер һөйләп, малайҙарҙы көлдөрөп алды. Дукаштың бар ҡиәфәтендә бер нәмәгә ҡарамай ошо малайҙарҙы үҙенә ылыҡтырырға тырышыуы ярылып ята, тик тегеләр генә быны һиҙмәй. Нимәгә кәрәк булған улар Дукашҡа? Ана малайҙарға әллә ниндәй уйынсыҡтар сығарып бирә башланы.

Бына ҡайҙалыр барырға өндәргә тотондо, буғай, ҡулдарын һелтәп, яңы таныштарын ситкә әйҙәргә кереште. Малайҙар саҡ ҡына икеләнде лә риза булды.

Күп тә үтмәне, тегеләр өсәүләшеп урам буйлап китте. Әмилә, ҡыҙыҡһынып, уларға эйәрҙе. Бына улар урам сатына килеп еттеләр.

Унда... Әмилә шунда уҡ таныны: мөйөштә станцияның Ер машиналарының береһенә оҡшатып эшләнгән транспорты тора ине. Бер ҡарауҙа ул урамдарында йөрөгән машиналарҙан айырылмай кеүек. Әммә Әмилә белә: ул атом энергияһы ярҙамында хәрәкәт итә, шуға яғыулыҡ ҡоя торған урыны ла, янған газды сығара торған торбаһы ла юҡ...

Яңылышмайыммы икән, тигәндәй, ҡыҙ машинаға яҡынырак килде, әммә Дукаштың күҙенә салынмаҫҡа тырышты. Һүҙ юҡ: был — станцияның транспорты. Шуныһы ғәжәп: ҡарт ниңә малайҙарҙы машина эсенә ултырта? Инструкцияны белмәйме? Унда бит асыҡ әйтелгән: әгәр станция транспорты менән ҡалаға сығырға тура килһә, Ер кешеләренең береһен дә уның эсенә ултыртмаҫҡа! Юғиһә, уларҙың күп нәмәне аңлап ҡалыуы бар.

Инструкцияла бер ваҡиға миҫал рәүешендә килтерелә. Ниндәйҙер ҡалала станцияның бер хеҙмәткәре үҙенең

икенсе цивилизациянан килгәнлеген һиҙҙергән, ул ғына ла түгел: «Беҙ һеҙҙе күҙәтәбеҙ. Шулай итеп, үҙебеҙҙең үткәнде өйрәнәбеҙ, һеҙҙең киләсәгегеҙҙе юрайбыҙ», — тигән. Ҡала-ла оло ғауға башланған, кешеләр өйҙәрен ташлап ҡасырға тотонған. Ҡала халҡы, урындағы радио, телевидение һәм гәзит аша был хәбәрҙең дөрөҫ түгеллеген ҡат-ҡат әйткәндән һуң ғына, тынысланған. Инструкцияла башҡа ваҡиғалар ҙа миҫал итеп килтерелә. Дукаш, нисек шуларҙы оноторп, был ике малайҙы транспорт эсенә индерә?

Эмилә, ни уйларға белмәй, аптырап ҡалды, ә станция транспорты урынынан ҡуҙғалды. Малайҙарҙы ҡарт ҡайҙа алып китте? Ҡыҙҙың күңеле шомланды. Был ваҡиғаға күҙ йомоу мөмкин түгел ине. Күрәһең, ҡала менән танышыуҙы икенсе юлға ҡалдырып, хәҙер үк станцияға әйләнеп ҡайтырға кәрәктер. Ул үҙе күргән хәлде атаһына һөйләп бирергә тейеш...

*Ер аҫтына әләгеү*

Батыр менән Хәлит ярты сәғәт эсендә йылға буйын йөрөп сыҡтылар. Әммә бында Хәсән менән Әнүәр түгел, уларҙың эҙе лә юҡ ине. Малайҙар, устарын торба кеүек итеп, төрлө яҡҡа һөрән һалып та ҡараны. Тауыштарына йылға буйындағы өйәңкеләрҙә ултырған ҡарғалар ғына осоп китте, ә яуап биреүсе булманы.

Малайҙарҙың кәйефе төштө. Улар йылға буйында дуҫтарының береһен осратыуҙарына өмөтләнгәйне. Юғалған ун һигеҙ малайҙы булмаһа ла, Хәсән менән Әнүәрҙе ошонда тап итербеҙ, тип уйлағайнылар. Тәзкирә апайҙы ла ышандырғайнылар. Хәҙер буш ҡул менән ҡайтырҙармы?

Батыр менән Хәлит тауыш-тынһыҙ ғына кире боролдо. Тимәк, малайҙарҙың юғалыуы уйын эш түгел. Әгәр уларҙы бандиттар урлай икән, хәҙер Батыр менән Хәлитте лә тотоп алып китеүҙәре бар. Етмәһә, ҡаланан алыҫҡа, әллә ҡайҙа сығып киттеләр. Бында енәйәт эшләр өсөн аулаҡ, кешефәлән юҡ. Ярҙам һорап ҡысҡырһалар ҙа, бер кем дә ишетмәҫ. Малайҙар хәүефләнә башланы. Тиҙерәк ҡалаға ҡайтырға кәрәк...

Ҡалҡыулыҡҡа менгәс, малайҙар ҡала яғынан килеүсе бер «Жигули»ға иғтибар итте. Ҡурҡҡанға ҡуш күренә, тигәндәй, икеһе лә, был машина эсендә бандиттар түгелме икән, тип уйлаһ ҡуйҙы. Ирекһеҙҙән аҙымдарын әкренәйттеләр. Малайҙарҙы тағы шул аптыратты: машина, юлһыҙниһеҙ урындан бик ҙур тиҙлек менән елдерһә лә, бөтөнләй һелкенмәй ине. Әйтерһең, тәгәрмәстәре ергә теймәй, осоп килә...

Батыр менән Хәлит был сәйер машинаға ғәжәпләнеп ҡарап торҙо. «Жигули» яҡынлашҡан һайын, малайҙарҙың күңелендәге шом артҡандан-арта барҙы. Ябай машина улай йөрөмәҫ. Бында ҡурҡыныс сер бар кеүек. Хәсәндәрҙең юғалыуы арҡаһында тыуған хәүефкә ошо шик килеп ҡушылды, һәм малайҙар үҙҙәренең әкрен генә үлән араһына сумғандарын һиҙмәй ҙә ҡалдылар.

Бер аҙ ятҡас, Батыр, башын күтәрә биреп, тирә-йүнгә ҡолаҡ һалды. Теге машинаның тауышы ишетелмәй, әргәлә фәҡәт сиңерткәләр генә серелдәй. Батыр башын тағы ла күтәрә бирҙе һәм йылп итеп кире урынына боҫто. Үҙе, ҡыбырламаҫҡа ҡушып, Хәлиттең яурынына ҡулын һалды.

Малайҙың күҙенә эләккән күренеш сәйер ҙә, ҡурҡыныс та ине. Яңы ғына бында табан елгән «Жигули» тауыштынһыҙ ғына яҡынлашҡан да малайҙарҙың баш осонда тиерлек аҫылынып ҡалған. Батыр шул секунд эсендә машинала өс кеше ултырыуын күреп өлгөрҙө.

Ни өсөн өҫтә эленеп тора? Ни өсөн уның тауышы ишетелмәй? Был һорауҙарға яуап эҙләргә ваҡыт юҡ ине. Ҡоттары осҡан малайҙар, тын алырға ла ҡурҡып, ергә һыйынды. Был минутта уларҙың йөрәктәре тамаҡтары төбөндә тыпырсына ине...

Артабан тағы ла ҡурҡыныс ыраҡ хәлдәр башланды. Ҡапыл малайҙарҙың аҫтындағы ер убыла башланы. Ҡото осҡан Хәлит ҡысҡырырға ауыҙын асҡайны, үҙен ҡулға алырға өлгөргән Батыр усы менән уның ауыҙын ҡапланы.

Бына әргәләге ер, яр кеүек булып, өҫкә күтәрелеп китте. Юҡ, ул күтәрелмәне, малайҙар үҙҙәре һаман да аҫҡа төшәләр икән. Бер мәл ҡояш яҡтылығы юғалды, тирә-йүн сәйер йәшкелт төҫкә буялды. Уны-быны уйлағанса, малайҙарҙың аҫтындағы ер, ситкәрәк шылып, ниндәйҙер түбә аҫтына барып инде. Батыр менән Хәлит, ҡолап китмәҫ өсөн, бер-береһенә сат йәбеште. Әммә барыбер, нимәгәлер эләгеп, ятҡан урындарынан тағы ла аҫҡараҡ, таш кеүек ҡаты иҙәнгә барып төштөләр. Хәлит әллә ҡурҡышынан, әллә тәне ауыртыуҙан: «Әсәй!» — тип ҡысҡырып ебәрҙе.

Һауала аҫылынып тороп ҡалған «Жигули», вертолет кеүек осоп, ер өҫтөндә барлыҡҡа килгән тишектән эскә инде һәм әүәлгесә тауышһыҙ-ниһеҙ коридор буйлап китте. Ә малайҙарҙы аҫҡа алып төшкән ер киҫәге, кире өҫкә күтәрелеп, яҡты донъяға илтеүсе тишекте ҡаплап ҡуйҙы. Батыр урынынан ырғып торҙо ла түбәгә текәлде. Әммә унда ер йөҙөнә илтеүсе ҡапҡастың сите түгел, күҙ бәйләнерлек йөйө лә күренмәй ине...

Әмилә станцияға йүгерә-атлай ҡайтты. Юлда ул барыһын да яҡшылап уйланы, үлсәне һәм Дукаш хаҡында атаһына әйтергә булды. Теге ҡара ҡумта тураһында әлегә өндәшмәҫ. Ант итте бит.

Лайон кабинетында ине. Ул, ҡабаланып килеп ингән Әмиләне күргәс, аптырап китте:

— Ни булды? Ниңә тиҙ?

— Мин ҡалала Дукашты тап иттем.

— Дукашты? — Лайондың йөҙөнә борсолоу сыҡты. Станциялағы һәр кеше ҡалаға фәҡәт Лайондың рөхсәте менән генә бара. Ә Дукаш бөтөнләй ер өҫтөнә сыҡмаҫҡа тейеш. Уның төп маҡсаты — Ур менән Ер араһында транспорт карабы осороу. Ни эшләгән ул ҡалала? Был хаҡта ни өсөн станция етәксеһенә әйтмәгән?

— Һин яңылышманыңмы? — тип һораны Лайон ҡыҙынан. — Бәлки, һин ҡартты уға оҡшаған Ер кешеһе менән бутайһыңдыр?

— Юҡ, — тип баш һелкте Әмилә. — Дукаш станцияның транспортында ине.

— Ҡайһы транспортында? «Жигули»ҙамы?

— Мин маркаһын белмәйем. Зәңгәр төҫтәге автомобилдә.

— Бәлки, ул Ер автомобиле булғандыр?

— Уның яғыулыҡ ҡоя торған урыны ла, торбаһы ла юҡ ине.

— Ғәжәп... — Лайон уйға батты.

— Атай, мин һөйләп бөтмәнем әле. — Әмилә йәнә телгә килде.

— Тағы нимә? — Лайон һағайҙы.

— Дукаш ҡалала ике малайҙы беҙҙең транспортҡа ултыртып алды.

— Юҡты һөйләйһең һин! — Лайондың күҙҙәре уҫал йылтыраны. — Дукаш быны ғүмере эшләмәҫ!

— Ултыртты, атай! Үҙем күрҙем. Шунан уларҙы ҡайҙалыр алып китте. Мин шунда уҡ бында йүгерҙем.

— Уныһын дөрөҫ эшләгәнһең...

Лайонды шомло уйҙар солғап алды. Дукашты күптән белә станция етәксеһе. Был ҡарт ҡасандыр йыһанда осоу ҡағиҙәләрен ҡаты боҙғаны өсөн Урҙан сығыуҙан оҙаҡ йылдарға мәхрүм ителгәйне. Күптән түгел, үҙен тәртипле тотоуын күреп, ҡартайыуын иҫәпкә алып, Ер менән Урҙы тоташтырған транспорт карабына йөрөтөүсе итеп тәғәйенләгәйнеләр. Һәм бына... Ул бит бер юлы әллә нисәмә ҡағиҙәне боҙған: рөхсәтһеҙ станциянан сыҡҡан, үҙ транспортына Ер кешеһен ултыртҡан... Ә ҡайҙа алып киткән ул малайҙарҙы? Бында алып килгәнме? Лайон өҫтәл ситендәге

тиҫтәләгән кнопкаларҙың береһенә баҫты. Эргәләге кескәй экран гөлт итеп тоҡанды һәм Дукаштың да, «Жигули»ҙың да станцияла икәнлеген хәбәр итте.

— Бына нимә, Әмилә, — тине Лайон. — Кисә ҡалала ун һигеҙ бала юғалған. Мин, бында беҙҙең станцияның ҡыҫылышы барҙыр, тип уйламағайным. Хәҙер килеп... Ике сәғәттән Дукаш кире Урға оса. Шуға тиклем беҙ... Һин ултырып тор. Мин Дукаш янына барып киләм. Был ҡылығын нимә тип аңлатыр икән?

Әмилә атаһының beләгенә йәбеште:

— Атай, мин ҡурҡам!

— Ниңә? — Лайон йылмайҙы. — Бер ни ҙә булмаҫ. Һин көт. Мин оҙаҡламам.

Атаһының эш бүлмәһендә яңғыҙы ҡалғас, ҡыҙҙың башында төрлө уйҙар сыуалды. Бына бер нисә минуттан атаһы Дукашты ошонда килтерер. Ҡарт ғәфү үтенер һәм башҡаса улай эшләмәҫкә һүҙ бирер. Әллә Дукаш оло сер өсөн берәй эксперимент үткәрәме икән? Бәлки, ул быны Әмиләнең атаһынан да йәшерергә тейештер? Сөнки Ур етәкселәре шулай ҡушҡан...

Ҡыҙҙың башында төрлө-төрлө уйҙар тыуа. Ә ваҡыт елә, ҡабалана. Тик атаһы ғына килмәй ҙә килмәй...

Тағы ла ярты сәғәттәй ултырғас, ҡыҙҙың түҙеме бөттө, һәм ул, урынынан тороп, коридорға сыҡты.

Тынлыҡ. Шылт иткән тауыш та ишетелмәй.

Аяҡтары үҙҙәренән-үҙҙәре Дукаштың карабы урынлашҡан яҡҡа алып китте. Әммә мөйөшкә яҡынайған һайын, Әмилә һағыраҡ атланы, тынын да һиҙелер-һиҙелмәҫ алырға тырышты...

Бына карап. Тик ниңә унын эсенән һөйләшкән тауыштар ишетелмәй? Атаһы менән Дукаш аңлашып айырылышҡандарҙамы? Улайһа, ниңә атаһы кире бүлмәһенә ҡайтманы? Ҡыҙҙың күңелендә шом үҫкәндән-үҫә барҙы. Бына ул әкрен генә баҫып, карап эсенә инде, бар иғтибарын йыйып, бындағы тынлыҡҡа ҡолаҡ һалды. Кабина эсендә кемдер бар. Ана, кнопкаларҙың селт-селт итеп алыуы ишетелә. Кем унда?

Ҡапыл кабина эсенән:

— Ур! Ур! — тигән тауыш ишетелде. Был Дукаш ине. Күрәһең, ул пульт аша алыҫ Ур менән бәйләнешкә инергә маташа.

Әмилә, күренмәҫкә тырышып, караптың ишегенә һыйынды.

— Ур! Был мин — туҡһан беренсе! — тине ул арала Дукаш ҡарлыҡҡан тауыш менән. — Йәнә икәү булды... Эйе... Бөтәһе — егерме малай... Һеҙ ҡушҡанса... Тик бында көтөлмәгән хәл... Станция етәксеһе Лайон белеп ҡал-

ды... Юҡ, ул әле иҫһеҙ ята. Теге егерме бала янында... Әйе, ҡара ҡумтала... Алып ҡайтырға? Лайондыламы? Ҡыҙы ла бында бит. Ул әлегә ҡалала. Хәҙер ҡайтырға тейеш... Уны ла алып ҡайтырғамы? Аңлашылды... Әйе, иҫен юйырбыҙ ҙа... Үтәрбеҙ, борсолмағыҙ... Станцияла беҙҙән башҡа бер кем дә юҡ. Хеҙмәткәрҙәрме? Тикшереүҙә. Ике көндән генә ҡайталар...

Әмиләнең йөрәге ҡурҡыштан ярылырҙай булып тибә башланы. Ул, үҙенең ҡайҙа баҫҡанын белмәйенсә, карап-тан ситкә ташланды...

*Ер аҫтында*

Малайҙарға былар бөтәһе лә ҡурҡыныс төш кеүек төҫлө. Ныҡ итеп тыпырсынырға ғына кәрәк, һәм уянып китерҙәр кеүек. Шул уҡ ваҡытта Батыр үҙенең һәр күҙәнәге менән аңлай: был — төш түгел. Был — өн. Ҡайҙан килеп эләктеләр бында? Нисек ҡотолорға хәҙер? Ғөмүмән, ҡотола алырҙармы? Ә бөгөн кис өйҙәренә ҡайтмаҫтармы икән ни? Әсәһе! Бахыр әсәһе! Ул бит хәҙер бөтөнләй яңғыҙ! Ниңә тыңламаны икән әсәһен? Ниңә сығып китте өйҙән? Нимә эшләргә?

Батырҙың башында йөҙәрләгән һорау. Уларҙың береһенә лә яуап юҡ. Шул уҡ ваҡытта малайҙың күкрәгендә ҡурҡыу менән йәнәш ҡыҙыҡһыныу ҙа уяна бара. Ниндәй ер был? Ни өсөн ҡаланың янында ғына урынлашҡан был сәйер урынды бер кем дә белмәй? Ә теге вертолет кеүек осоп йөрөүсе «Жигули» хаҡында ни әйтерһең?

Юҡ, былай тик тороуҙан файҙа сыҡмаҫ. Ни ҙә булһа эшләргә кәрәк. Батыр шулай уйланы ла коридор буйлап атланы. Хәлит, шуны ғына көткән кеүек, уға эйәрҙе.

Коридорҙың икегә айырылған еренә еткәс, Батыр, мөйөшкә ышыҡланып, ике яҡҡа ла күҙ һалды. Унда тиҫ-тәләгән ишектәр күренә. Әллә ниндәй приборҙар төрлө төҫ-тәге күҙҙәре менән йылтылдай. Шуныһы ғәжәп: улар янында бер кем дә юҡ.

Батыр, нимә эшләйбеҙ тигәндәй, боролоп дуҫына ҡараны. Ә тегеһе ауыҙын ҡыйшайта ла башланы.

— Ҡайтҡым килә...

— Иләп!

— Бынан бер ҡасан да сыға алмаясаҡбыҙ! Бына күрерһең! — Хәлиттең тауышы ҡалтырап китте.

— Етәр һиңә! — Батыр дуҫына асыулы ғына өндәште. — Хәҙер берәй нәмә уйлап сығарабыҙ... Әйҙә әле!..

Алдағы мөйөшкә еткәс, Батыр алға күҙ һалды ла кинәт иҙәнгә сүкте. Шунан, ҡабаланып, йәшеренерҙәй урын эҙ-

ләй башланы. Әмәлгә ҡалғандай, эргәлә генә ҙур станок ултыра ине. Шуның артына тайпылдылар.

Ошо уҡ секундта малайҙарҙың янынан бер ҡыҙ йүгереп үтеп китте.

Туҡта! Был Әмилә түгелме һуң? Батыр кинәт дуҫына боролдо:

— Таныныңмы?

— Кемде?

— Кемде, кемде... Үтеп киткән ҡыҙҙы.

— Юҡ...

— Һинең күҙең тонғанмы әллә? Был бит бая беҙгә тап булған ҡыҙ.

— Ул ни эшләп йөрөй бында?

— Мин ҡайҙан беләйем?

— Теге коридорға инеп китте. Әйҙә артынан!

— Туҡта әле... — Батыр йәнә мөйөштән башын сығарып, коридорҙың арғы осона ҡарап алды. — Тегендә тағы бер әҙәм йөрөй шикелле.

— Әйҙә, шуға барып әйтәйек. Беҙҙе сығарһын бынан.

— Ә сығармаһа? Ун һигеҙ малайҙың юғалыуын оноттоңмо? Бәлки, ошоларҙың эшелер ул.

— Улайһа, беҙ ҙә... — Хәлит иламһырай башланы.

— Тс-с! Бында килә!

Малайҙар йәнә станок артына сүкте.

Күп тә үтмәне, теге әҙәм малайҙарҙың эргәһенә килеп етте һәм туҡтап ҡалды. Был тәбәнәк буйлы, йөҙөн һырҙар баҫҡан оло ғына йәштәге кеше ине. Ҡарт үҙ алдына билдәһеҙ телдә һөйләнеп алды. Шунан коридор буйлап ары атланы. Батырҙың күңелендә: «Ошоға эйәрергә!» — тигән уй тыуҙы ла шунда уҡ һүнде. Сөнки ул йәнә кисә юғалған ун һигеҙ малайҙы иҫенә төшөрҙө. Ошоларҙың эше түгелме икән был? Бәлки, яңылышалыр. Шулай ҙа һаҡ булырға кәрәк — билдәһеҙ урын, билдәһеҙ кешеләр.

Үҙҙәренә бер ниндәй ҙә ҡурҡыныс янамауына тамам ышанғас, малайҙар, урындарынан сығып, коридор буйлап атланы... Ҡапыл:

— Туҡтағыҙ! — тигән тауыш яңғыраны.

Көтмәгәндә саф башҡорт телендә яңғыраған был бойороҡ малайҙарҙы шул урында таш кеүек ҡатырға мәжбүр итте. Кем ҡысҡырҙы һуң? Теге ҡыҙҙың тауышы бит был!

Батыр артына әйләнде һәм үҙҙәренән биш-алты аҙым ситтәрәк баҫып торған ҡыҙҙы күрҙе. Малай шунда уҡ таныны уны. Был, ысынлап та, иртәнсәк тап булған Әмилә ине. Батыр менән Хәлиттең эсенә йылы инде.

— Әмилә! Был һинме! — Малайҙар уның янына йүгереп барғандарын һиҙмәй ҙә ҡалды.

— Мин, — тине ҡыҙ. — Тик әкрен һөйләшегеҙ.

— Ниңә?

— Аҙаҡ аңлатырмын. Һеҙ бында нисек килеп эләктегеҙ?

Малайҙар кем уҙарҙан үҙҙәре менән булған сәйер хәлде һөйләп бирҙе. Ошо ерҙә Әмилә ҡапыл һағайҙы:

— Әкрен! — тине ул. — Бында киләләр! Әйҙәгеҙ! Батыр менән Хәлит һүҙһеҙ генә ҡыҙға эйәрҙе. Эргәләге бер бүлмәгә ингәс, Әмилә ишекте яҡшылап ябып ҡуйҙы. Шунан:

— Һеҙ үҙегеҙҙең ҡайҙа икәнлегегеҙҙе беләһегеҙме, исмаһам? — тип һораны. Үҙе, малайҙарҙың яуабын көтмәйенсә, һөйләргә тотондо. — Был — Ерҙә тикшереү алып барыусы станция. Ул бынан ике йөҙ йыл элек төҙөлгән. Беҙ бынан илле парсек алыҫлыҡта урынлашҡан Ур планетаһынан. Ҡалғанын аҙаҡ белерһегеҙ. Хәҙер миңә һеҙҙең ярҙамығыҙ кәрәк.

— Беҙ әҙер! — Батыр урынынан ырғып торҙо.

— Ошо минутта станцияла минән башҡа ике енәйәтсе генә бар. Улар станция етәксеһен ҡулға алған. Беҙгә нисек тә уны ҡотҡарырға, бандиттарҙы тоторға кәрәк.

— Станцияла башҡа йән эйәләре юҡмы ни?

— Улар — Ер өҫтөндә. — Әмилә ауыр көрһөндө. — Ике көнһөҙ ҡайтмайҙар. Беҙ уларҙы көтөп ултыра алмайбыҙ. Станцияла тағы роботтар бар ине. Күренмәйҙәр. Тимәк, бандиттар уларҙы һүндереп ҡайҙалыр тыҡҡан. Ике сәғәттән бандиттар кире Ур планетаһына оса. Үҙҙәре менән станция етәксеһен дә, ҡара ҡумтаны ла алып китәләр. Ә ҡара ҡумтала... — Әмилә тынып ҡалды.

— Унда нимә? — тип һораны Батыр.

— Һеҙҙең ҡалала кисә ун һигеҙ малай юғалған. Шулай бит?

— Шулай.

— Улар ошо ҡара ҡумта эсендә булырға тейеш.

— Малайҙарҙы алып китмәкселәрме? — Батыр шаҡ ҡатты.

— Илле парсек алыҫлыҡҡа? — Хәлит ике ҡулы менән башын тотҡанын һиҙмәй ҙә ҡалды. — Унан нисек ҡайтырҙар һуң?

— Бөтөнләй ҡайтмауҙары ла бар, — тине Әмилә. — Ҡотҡарырға кәрәк уларҙы.

— Ә унда малайҙарҙы нимә эшләтмәкселәр? — Хәлит ҡурҡҡан күҙҙәрен Әмиләгә төбәне.

— Белмәйем, — тине ҡыҙ.

Ҡапыл Хәлит шат тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе:

— Әмилә, һин бынан ер өҫтөнә сыға алаһыңмы?

— Юҡ.

— Их... — Хәлиттең йөҙөн ҡара болот ҡапланы. Ул бошонҡо ҡиәфәт менән кире урынына ултырҙы. — Һуң һин иртәнсәк ерҙә йөрөй инең бит...

— Өҫкә сығыу өсөн кешегә пароль бирелә. Әммә ул пароль менән ярты көн генә файҙаланырға була.
— Кем бирҙе һуң һиңә ул паролде?
— Атайым. Станцияның етәксеһе.
Малайҙарҙың күҙҙәре ҙурайҙы:
— Һинең атайың етәксеме?
— Эйе. — Ҡыҙҙың күҙҙәрендә йәш күренде. — Ул хәҙер ҡара ҡумта эсендә... Һушһыҙ... Бәлки, тере лә түгелдер...
Батыр ҡулы менән ҡыҙҙың яурынына тейеп алды:
— Ул тере, мин ышанам.
— Һеҙ нимә эшләйһегеҙ? — Ҡыҙ ҡапыл ҡыҙарып китте, уның күҙҙәре уҫал йылтыраны.
— Ни булды? — Бер ни ҙә аңламаған малайҙар бер-береһенә ҡараштылар.
— Ниңә ҡулығыҙ менән минең иңбашыма ҡағылаһығыҙ?.. Оятһыҙ һеҙ!
— Ә ниңә? Ярамаймы ни? Мин бит һине йыуатыу өсөн...
Ҡыҙ уға аптырап ҡарап торҙо ла ҡапыл йылмайып ебәрҙе:
— Ғәфү ит, Батыр... Онотҡанмын. Беҙҙең планетала малай ҡыҙҙың иңбашына тейһә, әҙәпһеҙлек һанала... Ерҙә бит был — иркәләү билдәһе! Ғәфү итегеҙ!
Малайҙар еңел һулап ҡуйҙы. Үҙҙәре эстән генә алыҫ Ур планетаһында был хәрәкәттең ни өсөн әҙәпһеҙлек булыуын аңларға маташты.
— Һеҙ Ер кешеләренән ярҙам һорарға иткәйнегеҙме? — Эмилә Хәлитҡә ҡараны.
— Эйе.
— Ярамай. Ер был станция хаҡында белергә тейеш түгел.
— Ни өсөн?
— Һеҙҙең тәбиғи үҫешегеҙ боҙолмаһын өсөн. — Малайҙарҙың бер ни ҙә аңламауын күреп, Эмилә былай тип өҫтәне. — Бәйләнешкә инһәк, һеҙ беҙҙең тарихты тикшерә башлаясаҡһығыҙ, ниндәйҙер ҡытыршылыҡтарҙы урап үтергә маташасаҡһығыҙ. Ә был — бер ҡарауға ғына дөрөҫ. Диалектҡтарын боҙорға ярамай. Һәр цивилизация тәбиғи рәүештә үҫергә, үҙ юлын үтергә тейеш. Малайҙар ниҙер төшөнгәндәй булды.
— Ләкин бына беҙ икенсе цивилизация кешеләренең бында икәнлеген белдек бит, — тине Батыр. — Беҙҙең башҡаларға һөйләүебеҙ бар...
— Бынан сыҡҡан саҡта һеҙ бөтәһен дә онотасаҡһығыҙ. Станцияны ла, мине лә.
— Нисек? — тип ышанманы малайҙар.
— Махсус тулҡын аша үтәсәкһегеҙ. Һәм бында күргәндәрегеҙҙең барыһы ла хәтерегеҙҙән юйыласаҡ.

Батыр менән Хәлит бер-береһенә ҡарашып алды. Дөрөҫтө һөйләйме ҡыҙ? Әгәр ысын икән — ғәжәп бит был!

— Беҙгә хәҙер ҡара ҡумта хаҡында уйларға кәрәк, — тине Әмилә.

— Уның нимәһен уйларға? — тине Батыр. — Ҡумтаның асҡысын табырға ла...

— Эйе шул! — тип килеште дуҫы менән Хәлит. — Унан һинең атайыңды ғына сығарайыҡ. Шунан...

— Асҡыс Дукашта, — тине Әмилә. — Унан нисек алырбыҙ?

Малайҙар уйға ҡалды. Ул кешенән асҡысты алыуы еңел булмаҫ шул... Улайһа, ни эшләргә?

— Беҙгә иң алда Дукашты табырға кәрәк, — тине Батыр бер аҙҙан. — Ҡайҙа ул? Исмаһам, ярҙамсыһы менән ни хаҡында һөйләшкәндәрен тыңлайыҡ... Бәлки, шунда берәй нәмә асыҡланыр. Бында тик ултырһаҡ, бер ни эшләй алмаясаҡбыҙ.

Был уй Әмиләгә оҡшаны.

— Әйҙә, карапҡа инәбеҙ ҙә йәшенәбеҙ, — тип тәҡдим итте ул. — Дукаш станция буйлап күп йөрөмәҫ. Тик, малайҙар, һаҡ булырға кәрәк. Улар беҙҙе элэктерһәләр, ҡара ҡумтаға индереп бикләйәсәктәр ҙә шунда уҡ Урға осасаҡтар.

Батыр менән Хәлит, аңлашылды тигәндәй, баштарын ҡағып ҡуйҙы.

Бына Әмилә менән малайҙар станцияның коридорына сыҡты. Күп атларға тура килмәне, алда карап күренде. Ул иҙәндә ятҡан ҙур ҡәләмде хәтерләтә ине. Оҙонлоғо — ун, йыуанлығы ике метр самаһы булыр.

Әмилә карапҡа тейеп алды. Шунда уҡ уның ҡабырғаһында ишек барлыҡҡа килде. Ҡыҙ эскә сумды. Уның артынса Батыр менән Хәлит тә карапҡа инде. Бында күҙгә ташланырлыҡ бер нәмә лә юҡ. Стеналар буйлап креслолар теҙелеп киткән. Ике оста ике ишек күренә.

— Алда — карап йөрөтөүсе пульт, — тип аңлатты Әмилә. — Ә был яҡта... Әйҙәгеҙ әле...

Ҡыҙ икенсе ишекте асып ебәрҙе.

Бүлмәлә ҙур ҡара ҡумтанан башҡа бер ни ҙә юҡ ине. Малайҙар, ул һауыттың нимә икәнлеген төҫмөрләгәнгә, оло хәүеф менән тынып ҡалды. Ҙур ҙа түгел... Ә эсендә ошо минутта егерме малай һәм Әмиләнең атаһы ята... Уларҙың хәле нисек? Нисек тын алалар? Тереләрме? Батыр ҡумтаны урап сыҡты. Ишек кеүек нәмәһе түгел, асҡыс тығырлыҡ та урыны күренмәй бит бының! Батыр усы менән ҡумтаға һуғып ҡараны. Шунан ҡолағын яҡынайтты. Эстән шылт иткән дә тауыш ишетелмәне...

— Тс-с! — тине ҡапыл Әмилә. — Киләләр! Малайҙар, нимә эшләргә тигәндәй, ҡыҙға текәлде.

— Әйҙәгеҙ бында! — Әмилә йәһәт кенә урталағы бүлмәгә сыҡты. — Креслолар артына йәшенәбеҙ! Тиҙерәк, тиҙерәк!

Хәйер, малайҙарҙы ашыҡтырыу кәрәкмәй ҙә ине. Улар секунд эсендә креслолар артына йомолдо, хатта ниндәйҙер көсөргәнеш менән кәүҙәләрен дә бәләкәсәйтә алдылар шикелле.

Карап ишеге асылғаны ишетелмәне. Тегеләрҙең килеп инеүе һөйләшеүҙәренең яҡынлашыуынан аңлашылды. Бандиттар, кресло янында тороп, малайҙар өсөн аңлайышһыҙ телдә оҙаҡ ҡына әңгәмәләште. Шунан, ҡара ҡумта янына килеп, уның эргәһендә оҙаҡ ҡына мыштырланылар.

«Их, беребеҙгә шунда ҡалаһы булған! — тип үкенде Батыр. — Бәлки, улар ҡумтаны асалыр. Йәшенеп кенә ҡарап торғанда...»

Бер аҙҙан бандиттар караптан сығып китте. Уларҙың аяҡ тауыштары алыҫайғас, Батыр башын күтәрҙе:

— Киттеләрме?

— Өндәшмә! — Әмилә ҙурайған күҙҙәре менән малайға уҫал итеп ҡараны.

Шунда ғына Батыр караптың асыҡ ишеге аша коридор осонда торған ике кешене күреп ҡалды. Улар, Батырҙың тауышын ишетеп, йылт итеп был яҡҡа боролдо. Малай кресло артына сумырға өлгөрҙө өлгөрөүен, ләкин һуң ине инде. Бандиттар йүгерә-атлай карапҡа килеп инде. Шунан уҫал тауыш менән ниҙер ҡысҡырҙылар. Әммә эргәләге креслолар артына ҡарарға баштары етмәне. Береһе — караптың алғы ишегенә, икенсеһе арттағыһына инеп китте.

Ошо ерҙә Әмилә урынынан ырғып торҙо:

— Ҡасабыҙ! Тиҙерәк! — Үҙе беренсе булып ишеккә йомолдо.

Ҡоттары осҡан малайҙарға бойороҡто ҡабатлап тороуҙоң кәрәге юҡ ине. Улар этешә-төртөшә ҡыҙҙың артынан ташланды. Һуңғы секундта Батыр ике яҡ ишектән килеп сыҡҡан ике бандитты күреп ҡалды.

— Минең арттан! — тип ҡысҡырҙы Әмилә һәм коридор буйлап ҡайҙалыр йәнтәслимгә йүгерҙе. Арттан ҡыуа төшкән бандиттарҙың ҡысҡырғандары ишетелде. Әмилә менән малайҙар, ҡот осҡос тиҙлек менән кәйелә-кәйелә, ике мөйөштө үтеп киттеләр. Артына күҙ ҡырыйы менән ҡараған арала бандиттарҙың, боролошта тиҙлектәрен кәметә алмайынса, ҡаршы яҡ стенаға барып һуғылыуҙарын күреп ҡалды Батыр.

— Бында!

Әмилә яҡынайыу менән, коридор осондағы стенала ишек барлыҡҡа килде. Ҡыҙ һәм малайҙар «һә» тигәнсә шунда сумды. Уларҙың артынса уҡ ишек ябылды. Киләһе секундта бандиттарҙың стенаға килеп бәрелеүҙәре ишетел-

де. Улар ниҙер ҡысҡыра башланы, янарға тотондо. Ҡурҡыуҙан арына алмаған малайҙар, ярға сығарылып ташланған балыҡтар кеүек, ауыҙҙарын ҙур асып, ҡыҙға ҡараны. Йәнәһе, ҡотолдоҡмо? Әллә ул бандиттар, ишекте емереп, бында килеп инерме?

— Борсолмағыҙ, — тине ҡыҙ, йыш-йыш тын алып. — Был атайымдың бүлмәһе. Улар инә алмаҫ.

— Тик беҙ ҙә сыға алмабыҙ шул, — тип көрһөндө Хәлит.

— Яңылыштың, — тине Эмилә. — Бынан запас ишек бар. Уны бандиттар белмәй. Беҙҙе, ошонда ултыралар, тип уйлаһындар. Ә беҙ...

— Улар карапта нимә хаҡында һөйләште? — Ҡурҡыныс янамағанын белгәс, Батыр тынысланa төштө.

— О! — Эмилә йылмайғандай итте. — Әйтергә онотоп торам... Ҡумтаны асыу өсөн бер ниндәй асҡыс кәрәкмәй.

— Нисек? — Малайҙар ҡыҙға ғәжәпләнеп ҡараны.

— Был кабинеттың ишеген нисек асыуымды күрҙегеҙме?

— Һин яҡынлашҡайның, үҙенән-үҙе асылды.

— Улайһа, ниңә бандиттарға асылмай?

— Ысынлап та, ниңә?

— Мин, ишеккә яҡынлашҡас та, паролде әйттем.

Шуға асылды ишек. Ә бандиттар ул паролде белмәй.

— Тимәк, ҡара ҡумтаны асыу өсөн... — Батыр ниҙер һиҙенгәндәй булды.

— Беҙгә паролде белергә кәрәк, — тине ҡыҙ.

— Ә нисек белербеҙ һуң уны? — Хәлит йәнә төшөнкөлөккә бирелде. — Бандиттар бит уны беҙгә әйтмәйәсәк. Ғүмерҙә лә.

— Әйтмәйәсәк, — тип килеште Эмилә бойоҡ тауыш менән. — Әгәр әйттерә алһаҡ... Унда атайым һушһыҙ ята... Тағы егерме малай...

— Әйттерә алабыҙмы-юҡмы, әммә бында йәшенеп ултырырға ярамай, — тине Батыр. — Яңынан карапҡа барырға кәрәк.

— Улар бит беҙҙе тотасаҡ та ҡара ҡумтаға бикләйәсәк, — тине Хәлит борсоулы тауыш менән. — Шунан беҙҙе Ур планетаһына алып китәсәктәр. — Хәлит тағы башын тотто. — Беҙгә хәҙер сығып күренергә ярамай.

— Сыҡмаһаҡ, теге малайҙарҙы алып китәсәктәр! — тине Эмилә уҫал тауыш менән.

— Сығып та, нимә эшләй алабыҙ һуң? — Хәлит аҡланған кеүек өндәште.

— Белмәйем! Белмәйем! — тине ҡыҙ. — Тик атайым менән малайҙарҙы ҡотҡармаһаҡ... Улар менән бандиттарҙың ни эшләре билдәһеҙ! Юҡ! Юҡ! Нисек тә ҡотҡарырға, енәйәтселәрҙе ҡулға алырға!

— Был бит мөмкин түгел! — Хәлит әсенеп ҡысҡырҙы.

— Эйе, — тине Батыр. — Шуға ҡарамаҫтан ҡара ҡумталағыларҙы ҡотҡарырға тейешбеҙ.

*Паролде нисек белергә?*

— Хәл юҡ, — тине Батыр. — Яңынан карап эсенә инәбеҙ ҙә ҡара ҡумта янына йәшенәбеҙ. Бәлки, берәйһе ҡара ҡумтаны асыр, шул саҡта беҙ паролде ишетербеҙ...

— Әгәр асмаһа? — тип һораны Хәлит.

— Ул саҡта... Белмәйем. Тик беҙҙең өсөн башҡа сара юҡ.

Ҡайғыһынан ни эшләргә лә белмәгән ҡыҙ бер ни ҙә өндәшмәне.

— Ҡайҙа запас ишегең? — Батыр урынынан торҙо. — Оҙаҡҡа һуҙырға ярамай. Бандиттар был ишек янында мыштырлағансы, карапҡа инеп йәшеренергә кәрәк.

Әмилә, урынынан тороп, алға ымланы. Күп тә үтмәне, йәнә коридорға килеп сыҡтылар. Ҡайҙалыр алыҫта теге икәүҙең һөйләшкәне ишетелә.

— Тиҙерәк, — тип ашыҡтырҙы Батыр.

Бына ҡара ҡумта янына илтеүсе ишек. Ул анһат ҡына асылды. Әмилә лә, малайҙар ҙа эскә үтте.

— Ошонда йәшенәбеҙ. — Батыр ҡара ҡумтаның артына күрһәтте.

Унда тар ғына урын бар. Бик уңайһыҙ. Әммә һыйырға мөмкин. Иң мөһиме — күренмәй ултырырға була. Әгәр бандиттар ҡумтаның артына ҡарай ҡалһа, ҡотолоу юҡ...

Әмилә, Батыр һәм Хәлит был хаҡта уйламаҫҡа тырышты. Улар, ҡумта артына сүкәйеп, тынып ҡалды.

Батыр әсәһе хаҡында уйланы. Ул ҡат-ҡат өйгә шылтыратҡандыр. Яуап булмағас, йүгерә-атлай ҡайтҡандыр. Шунан Батырын эҙләргә сығып киткәндер. Иң алда Хәлиттәргә барған... Бер ҡайҙа ла булмағас, милицияға хәбәр иткән. Ошо минутта ҡалала: «Ике көн эсендә егерме малай хәбәрһеҙ юғалды», — тип һөйләйҙәрҙер. Хәҙер бөтә ҡала, милиция уларҙы эҙләйҙер. Әсәһенең илай-илай күҙҙәре шешенеп бөткәндер. Ул бит Батырҙы бик ярата. Кис урамда саҡ ҡына оҙаҡлаһа ла, йүгереп килеп сыға. Шул арҡала малайҙар Батырҙы «иркә малай» тип үсекләй. Әсәһенә асыуланғаны ла бар инде Батырҙың: «Ниңә шул тиклем артымдан күҙәтәһең? Малайҙар алдында уңайһыҙ! Башҡа урамға сығып мине эҙләмә. Үҙем ҡайтырмын ваҡыты еткәс». «Ярай, ярай», — тигән була әсәһе. Әммә иртәгәһенә үк был һүҙҙәрен онота, ҡараңғы төшә башлаһа, йәнә Батыры янына килеп етә, уны малайҙар алдында ҡосаҡлай, һөйә... Ни эшләйһең инде? Түҙергә генә ҡала. Уның Батырҙан башҡа бер кеме лә юҡ.

Әсәһе үҙе етем, балалар йортонда үҫкән. Батырҙың атаһы күптән инде ауырып үлгән... Шуға ла, Батырҙы ғүмергә юғалттым, тип бик илайҙыр. Ә малайҙың, ысынлап та, мәңгегә китеүе бар. Әгәр бандиттарҙың ҡулына эләкһәләр... Ҡара ҡумтаға индереп бикләйәсәктәр ҙә йәһәннәм аръяғында ятҡан Ур планетаһына алып китәсәктәр. Унда ни эшләтерҙәре билдәһеҙ. Уйлап ҡараһаң, үлемең уға ҡарағанда яҡшыраҡ һымаҡ...

Батыр, аяҡ тауыштары ишетеп, уянып киткәндәй булды.

Шунда уҡ Әмилә менән малайҙар ҡумта артына нығыраҡ һыйынды, тын алыуҙан туҡтаны.

Дукаш менән Баро карапҡа ингәс, урта бүлмәлә туҡтап, һөйләшә башланылар. Улар нимә арҡаһындалыр талаша ине. Күрәһең, береһе хәҙер үк Урға осорға өгөтләй, икенсеһе, тәүҙә ҡыҙ менән ике малайҙы тоторға кәрәк, ти. Оҙаҡ бәхәсләштеләр. Хатта ҡыбырламай бер хәлдә ултырған Батыр аяғының ойой башлауын тойҙо. Ул, тегеләргә һиҙҙермәй генә, яҡшылап ултырырға теләне. Шул ерҙә аяғы тайып китте һәм шаҡ итеп ҡара ҡумтаға барып һуғылды. Ҡурҡышынан малайҙың сәстәре үрә торҙо.

— Уала! — тип ҡысҡырып ебәрҙе Дукаш.

Бына бандиттарҙың береһе, шарт-шорт баҫып, ҡара ҡумта ултырған бүлмәгә килеп инде. Урта бүлмәлә ҡалғаны ниҙер һораны. «Ни бар унда?» — тип белеште шикелле.

Ҡурҡыштан Батырҙың йөрәге барабан һуҡҡан кеүек тибергә тотондо. Уның дарҫлауы бандиттарға ғына түгел, бөтә ғаләмгә ишетелә һымаҡ. Хәҙер ул ҡумта артына ҡараясаҡ... һәм бөттө! Ниңә аяғын алыштырып баҫырға булды икән? Түҙергә ине! Аяғың өҙөлөп төшһә төшһөн, тик түҙергә ине!

Батыр бандиттың тын алышын асыҡ ишетә. Бына ул яҡынлаша, ошо яҡҡа табан килә...

Һәр береһе тотош сәғәткә торошло тағы ике-өс секунд үтеп китте. Бандит, шымып, ниҙер тыңланы. Был минутта ҡара ҡумтаның ике яғындағы кешеләрҙең һағайыуынан һауа сыңлап китергә әҙер ине.

Енәйәтсе ниҙер өндәште, аяғы менән ҡумтаға тибеп алды һәм уны урап үтә башланы. Ошо минутта Батыр тәненең һәр күҙәнәге менән уның яҡынайыуын тойҙо.

Аяҡ тауышы... Шырҡ... Шырҡ... Йәнә бер секунд... Һәм...

Был нимә?.. Бандит ҡумтаны урап торманы! Ҡабаланмай ғына атлап, ул урта бүлмәгә сыҡты... Йәнә үҙ-ара һөйләшә башланылар.

Әмилә менән малайҙар, әле ҡурҡыныс тулыһынса бөтмәһә лә, ҙур бәләнән ҡотолғандай, еңел һулап ҡуйҙылар.

Бандиттар караптың урта бүлегендә оҙаҡ торҙолармы-

юҡмы — Батыр аңламай. Бәлки, улар унда ярты минут ҡына һөйләшкәндәрҙер, әммә малайға ярты көн буйы әңгәмәләшеп торалар кеүек тойолдо. Бер мәл тегеләр йәнә караптан сығып китте. Күрәһең, станция етәксеһенең бүлмәһенә инеп бикләнгән ҡыҙ менән малайҙарҙы коридорға саҡырып сығарырға маташып ҡарамаҡсы булдылар. Бынан ун минут ҡына элек ҡоттары осоп ошо караптан сығып ҡасҡан балалар, үҙҙәрен ау эсенә ҡыуып индергән йәнлектәр кеүек йәнә бында ултыралыр, тип улар баштарына ла килтермәне, әлбиттә.

Эмилә менән малайҙарҙың иҫ киткес тәүәккәллеге үҙенекен итте — улар тотолоуҙан ҡотолдо, ләкин шуныһы иң үкенеслеһе: төп маҡсаттарына әнә осондай ҙа яҡынлаша алманылар.

Хәҙер бандиттар йәнә килер. Йәнә фашланыу ҡурҡыныcы, йөрәктәрҙе өшөтөп, уларҙың баш осонда ҡара ҡанатын йәйер. Йәнә бандиттар ҡара ҡумтаны асмаҫ, тимәк, паролде лә әйтмәҫ... Ни эшләргә һуң?

Эмилә, Батыр һәм Хәлит ҡара ҡумта артында боҫоп ултырған килеш ошо хаҡта ҡайғырып уйлана...

Тағы күпмелер ваҡыт үтте. Инде балалар үҙҙәренең ни өсөн бында ултырыуҙарын да аңламай башланы...

### *Ҡара ҡумтаның сере*

— Таптым! — тине ҡапыл Батыр әкрен генә тауыш менән.

Хәлит менән Эмилә уға ғәжәпләнеп ҡараны.

— Таптым! — тип ҡабатланы Батыр.

— Паролдеме? — тип һорай һалды Хәлит.

— Түгел. Паролде нисек белергә кәрәклеген...

— Ысынмы? — Хәлит дуҫына яҡынырaҡ шыуышты. — Ҡайһылай итеп?

Шул ерҙә Батыр башында тыуған уйын Эмилә менән Хәлиткә һөйләп бирҙе...

Биш минуттан Батыр, йәшенгән урынынан сыҡты ла ҡыйыу аҙымдар менән караптың алғы бүлегенә үтте, ишекте тартҡылап ҡараны, шунан коридорға илтеүсе ишеккә йүнәлде.

Бер аҙҙан карап янында торған көйө:

— Эһей! — тип һөрәнләне. — Эһей!

Күп тә үтмәне, коридорҙың осонда Дукаш менән Бароның һындары хасил булды. Улар Батырҙың тыныс тороуына бик ғәжәпләнде һәм туҡтап ҡалды. Был берәй яуызлыҡ уйламанымы икән, тигән хәүеф бар ине уларҙың күҙҙәрендә. Шунан бер аҙ тынысландылар һәм, үҙ-ара низер

һөйләшеп алғандан һуң, икеһе ике яҡтан Батырға яҡынлаша башланылар.

Ә малай, бер ни булмағандай, йылмая биреп, уларға ҡарап тороуын белде. Был бандиттарҙы йәнә һағайта төштө. Улар малайҙың сәйер ҡылығын һаман да аңлай алманы, шуға төшөнөргә теләп, бер-береһенә ҡарашып алды. Бер ниндәй ҙә ҡурҡыныс янамауына тамам ышанғас, тиҙ генә килеп, малайҙың ике ҡулынан эләктерҙеләр.

— Ниңә ҡасмайһың? — тип һораны тегеләрҙең ҡарты, Дукаш исемлеһе, саф башҡорт телендә.

— Ниңә ҡасырға? — тип йылмайҙы малай. — Бынан барыбер ҡотолоп булмай.

— Ә тегеләрең ҡайҙа?

— Белмәйем. — Батыр яурындарын һелкетте. Бандиттар үҙ-ара аңлайышһыҙ телдә һөйләшеп алды.

Дукаш карап эсенә ымлап күрһәтте. Күрәһең, Батырҙы ҡара ҡумтаға бикләргә ҡушты.

Бына тегеләрҙең йәше, малайҙы беләгенән тотоп карапҡа индерҙе, шунан ҡара ҡумта янына алып килде һәм әкрен генә өндәште:

— Лалула!

Шул саҡ ялтыр ҡара стенала ишек барлыҡҡа килде. Бандит Батырҙы эскә этеп ебәрҙе. Малай үҙен йомшаҡ мендәр өҫтөнә барып төшкәндәй хис итте: иҫен юғалтты...

Шул саҡ Батыр үҙенең карап эсендә икәнлеген аңлап алды. Уның башы һаман да әкрен генә әйләнә ине. Малай тирә-яғына күҙ һалды һәм шаҡ ҡатты: уны егермеләп малай уратып алған. Араларында Хәсән менән Әнүәр ҙә күренә. Тимәк, уларҙың барыһы ла ҡотҡарылған! Ә арыраҡ ниндәй таныш түгел ағайҙар тора? Станцияның хеҙмәткәрҙәреме икән ни? Шул ерҙә Батыр башҡаларҙан ситтәрәк ултырған ике кешене шәйләп ҡалды. Малай уларҙы шунда уҡ таныны. Былар Дукаш менән Баро ине...

— Бына ошо инде беҙҙе ҡотҡарыусы, — тине Лайон эргәһендәге малайҙарға. — Батыр, һин ҡумтаға бикләнгәс, ни булғанын белгең киләлер. Уны, ана, дуҫтарың Әмилә менән Хәлит һөйләр. Ә мин әлегә барығыҙҙы ла тамаҡ ялғап алырға саҡырам. Күбегеҙҙең кисәнән бирле ашағаны юҡ бит...

Ошо ерҙә Хәлит менән Әмилә Батырға, ул ҡумтаға бикләнгәс, бында ни булғанын һөйләргә кереште.

Бандиттар, Батырҙы ҡумта эсендә ҡалдырып, йәнә караптан сығып киткән. Шунда уҡ Әмилә, паролде әйтеп, ҡумтаны асҡан, янындағы дарыу менән атаһын иҫенә килтергән. Станцияның етәксеһе тиҙ генә хеҙмәткәрҙәрен саҡырып алған. Шунан күмәкләшеп бандиттарҙы ҡулға төшөргәндәр...

Ашарға ултырғас, Батыр Лайондың юҡлығына иғтибар итте.

— Бандиттарҙан һорау ала, — тип аңлатты Әмилә. Ашхананан сығыуға, ярҙамсыларын эйәртеп, Лайон килеп етте.

— Балалар, — тине станция етәксеһе. — Һеҙҙең алда үҙебеҙҙең цивилизация исеменән ғәфү үтенәбеҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы кешенең аңы нисек кенә алға китһә лә, психологияһы үҙгәрмәй шул. Беҙҙең йәмғиәттә лә ҡара уйлы кешеләр осрай. Уларға ҡаршы көрәшәбеҙ. Әммә... — Лайон ҡулын йәйҙе. — Улар ҡот осҡос енәйәт эшләргә йыйынғандар.

Беҙҙең планетала бер ғалим яңы асыш яһаған икән. Башҡалар белмәҫ борон уны насар маҡсатта файҙаланырға булған. Ғалим уйлап сығарған прибор ярҙамында бер кешенең күҙәнәктәрен тулыһынса икенсе кешенекенә алмаштырып була. Улар үҙҙәренең ҡартайған күҙәнәктәрен йәш малайҙарҙыҡы менән алмаштырырға йыйынған. Үҙҙәренең мейеһе генә ҡала, ә тәндәренең бөтә өлөшө яңыртыла. Шулай итеп алтмыш йәшлек ҡарт егерме йәшлек егеткә әүерелә. Ур планетаһындағы малайҙарҙы урлау мөмкин түгел. Унда компьютерҙар һәр кешенең ҡайҙа йөрөүен күҙәтә. Әгәр берәүҙе үлтерәләр икән, был хаҡта шунда уҡ үҙәк станцияға хәбәр ителә һәм енәйәтсе урынында тотола. Шуға былар балаларҙы Ерҙән урларға булғандар... Мин яңы ғына Ур планетаһы менән һөйләштем. Теге ғалим да, уның ярҙамсылары ла ҡулға алынасаҡ. Тимәк, Ер балаларына башҡаса ҡурҡыныс янамай. Ә хәҙер... — Лайон моңһоу йылмайҙы. — Беҙгә хушлашырға ваҡыт...

Ҡапыл:

— Атай, туҡта! — тигән тауыш ишетелде. Был Әмилә ине.

Ҡыҙ йүгереп Батыр янына килде.

— Батыр... Рәхмәт һиңә... Мин һине... бер ҡасан да онотмам! Хуш! — Ҡыҙҙың тауышы ҡалтыраны. Ул ҡапыл боролдо ла ситкә йүгереп китте.

«Мин дә һине онотмам!» — тип әйтергә теләне Батыр. Әммә шул секундта башы әйләнеп китте, күҙ алдары ҡараңғыланды һәм күпмелер ваҡытҡа ул онотолоп киткәндәй булды...

Күҙен асҡанда, Батыр ялан уртаһынан китеп бара ине. Эргәһендә Хәлит, Хәсән, Әнүәр, йәнә ике тиҫтәләгән малай — кисә бер-береһен ҡотортоп походҡа сығып киткән дуҫтары — атлап килә.

Күңелле булды был сәйәхәт. Урман менән һоҡланып туя алманылар, күпме йәнлек күрҙеләр. Ә тотҡан балыҡтары ниндәй тәмле ине — телеңде йоторлоҡ! Тик бына ата-

әсәләренә әйтмәй китеүҙәре хөрт булды. Бик асыуланырҙар инде.

Ҡапыл Батырға ошо балалар араһында кемдер етешмәгән кеүек тойолдо. Туҡта, улар нисәү әле? Батыр менән бергә егерме ике малай булырға тейеш. Ул, артҡараҡ ҡалып, иптәштәрен һанап сыҡты. Теп-теүәл егерме ике бала. Тимәк, бөтәһе лә бында. Әммә Батырға барыбер ҡайҙалыр алыҫта — урмандамы, тау башындамы — бик ҡәҙерле кеше тороп ҡалған төҫлө. Хатта, хәҙер үк кире боролоп, шул билдәһеҙ кешене эҙләп китеү теләге йөрәген әрнетә. Тик ҡайҙан эҙләргә һәм кемде?

Ул арала ҡала күренде. Тиҙҙән балалар, шаулашакөлөшә, ҡала буйлап атлайҙар ине инде...





## ХУШЛАШЫУ

*Айһылыу апайҙы иҫкәртәләр*

Мөйөштө боролғас та Айһылыу апай:

— Туҡтағыҙ! — тигән ҡаты ғына ирҙәр тауышы ишетте. Был бойороҡта янау ҙа, шом да бар ине. Айһылыу апай йәһәт кенә артына боролдо һәм үҙенә яҡынлашып килгән ике ирҙе күрҙе. Ҡара күҙлек кейгәндәр, йөҙҙәре усал күренә. Нимә кәрәк уларға?

Айһылыу апайға ике-өс аҙым ҡалғас, тегеләр туҡтаны.

— Сәләм, Айһылыу, — тине уларҙың оҙон буйлыһы.

— Һаумыһығыҙ. Ғәфү итегеҙ, мин һеҙҙе танымайым.

— Уның ҡарауы беҙ һине таныйбыҙ. — Һонтор ауыҙ мөйөшө менән генә көлөмһөрәне. — Әйтер һүҙ шул — күп соҡсонма. Соҡсоноуыңды ташла. Юғиһә... улың менән хушлашырға тура килер.

Һонтор уң ҡулындағы газета менән һул усына һуҡҡыларға кереште. Ә тәбәнәк ир, бында минең ҡыҫылышым юҡ тигәндәй, ситкә ҡараған көйө өндәшмәй тороуын белде.

— Нисек? — Айһылыу апай бер ни ҙә аңламаны. Батыр

менән берәй нәмә эшләргә уйлаймы әллә улар? — Нисек хушлашырға тура килер?

— Аңламайһыңмы? — Һонтор йәнә көлөмһөрәне. — Батырыңды юғалтыуың бар. Мәңгегә.

— Нимә? — Айһылыу апайҙың йөрәге сәнсеп китте. — Һеҙ уны...

— Эйе. Нәҡ үҙе. Аҡыллы кешеләр менән һөйләшеүҙәре үҙе бер бәхет. Бер һүҙҙән аңлап тора. Ҡаҙынма склад тирәһендә. Был оло ағаларҙың үтенесе. Юғиһә... Әйттем бит...

Ирҙәр боролоп китә лә башланы.

— Юҡ! — тип ҡысҡырҙы уларға Айһылыу апай. — Һеҙҙең хаҡығыҙ юҡ!..

Тегеләр туҡтап торманы.

— Беҙ иҫкәрттек. Ҡалғаны һинең эш.

— Мин һеҙҙеме... — Айһылыу апай үҙенең генә быларға ҡаршы тора алмаясағын һиҙгәндәй булды. — Мин милицияға әйтәм!

— Ха-ха-ха! — Һонтор ғәмһеҙ көлдө. — Әйт, әйт! Бына ул саҡта инде Батырың менән, ысынлап та, хушлашырға тура килер.

Тиҙҙән улар өй мөйөшөнән боролоп китте. Нимә уйларға ла белмәгән Айһылыу апай яңғыҙы тороп ҡалды...

Ана ике малай йүгереп үтте. Бер ҡатын кескәй генә улын етәкләп килә. Ҡала бер ни булмағандай йәшәүен белә, тормош дауам итә. Шул ваҡытта әллә кемдәр Айһылыу апайҙың иң оло ҡыуанысын урламаҡсы, уны донъяға бәйләп торған епте өҙмәксе...

Юҡ! Айһылыу апай һеҙгә быны эшләргә юл ҡуймаҫ! Улмы... Ул... Туҡта, нимә ҡылырға? Әллә милицияға хәбәр итергәме? Әммә улар был хаҡта алдан уйлаған. Ана нимә тип әйтеп киттеләр. Улайһа ни эшләргә? Шулай ҙа уйҙарынан баш тартырға, сигенергә тура килерме? Ә Батыр ҡайҙа икән ошо минутта? Бәлки уның улын урлағандарҙыр!..

Тиҙерәк ҡайтырға, Батырҙы табырға кәрәк.

Айһылыу апай йүгерә-атлай өйөнә ашыҡты.

*Әмилә Батыр менән осраша*

Ер малайҙары станцияла булып киткәндән һуң Әмиләгә аҙна буйы өҫкә күтәрелергә рөхсәт бирелмәне. Ә кисә Лайон ҡыҙға әйтеп һалды:

— Әйберҙәреңде йый. Ике көндән Ер менән хушлашабыҙ.

Әмилә аптырап ҡалды. Уға станцияла йәнә ун-ун биш көн булырҙар һымаҡ ине. Баҡһаң, ҡайтыр көндәр ҙә килеп еткән. Тимәк тиҙҙән Ерҙе, унда йәшәгән кешеләрҙе, Батыр

менән Хәлитте ташлап китерме? Уларҙы башҡа бер ҡасан да күрмәҫме? Мәңге, тип әйтеүе генә анһат. Был хаҡта уйлаһаң тән земберләп китә...

— Ярай, — тине Әмилә атаһына тыныс тауыш менән.

Бына ҡыҙ үҙ бүлмәһенә инеп карауатына ятты. Бөттө. Китәләр. Туҡта! Әгәр ул Ер өҫтөнә һуңғы тапҡыр сығырға рөхсәт һораһа, атаһы рөсхәт итмәҫме икән ни?

Әмилә, урынынан тороп, етәксе итеү пульты янына ашыҡты.

— Юҡ, — тине Лайон. — Һине теге малайҙарҙың күреп ҡалыуы бар.

— Улар бит мине онотто.

— Улар онотһа, һин онотманың.

— Атай, мин һүҙ бирәм. Батырҙарҙы күреп ҡалһам, шунда уҡ боролоп китәм.

Лайон йомшара төштө:

— Әмилә аңла, әгәр Батыр һине танып ҡалһа... Онотторҙоҡ тиһәк тә, белеп булмай. Ә ул һине танырға тейеш түгел. Сөнки ул саҡта малайҙың ни эшләре, ни һөйләре билдәһеҙ. Һин бит беләһең, беҙ бындағы тормоштоң үҫешенә бер ниндәй ҙә йоғонто яһарға тейеш түгелбеҙ.

— Беләм, атай, беләм. Беҙҙең бында икәнде һиҙһәләр, Ер кешеләре үҙҙәрен бөтөнләй икенсе төрлө тота башларҙар. Ул саҡта бындағы тормош йыһан ҡанундарынан ситкә тайпыласаҡ.

— Дөрөҫ.

— Бына бит, бөтәһен дә беләм. Ергә сығырға рөхсәт итәһеңме?

Лайон ҡыҙын ҡосаҡлап алды.

— Һиңә ҡаршы тороп буламы ни?

Ҡыҙға Ер өҫтөндә дүрт сәғәт булырға рөхсәт бирелде.

Әмилә тәүҙә ҡала буйлап йөрөнө. Шунан киноға инеп сыҡты — ҡыҙыҡ бит. Бындағы кино һис тә Урҙағыға оҡшамаған. Уларҙа бит һәр кем киноны махсус күҙлек, наушник кейеп ҡарай. Урманды күрһәтһәләр япраҡ, үлән еҫтәре аңҡып китә залда, диңгеҙ хаҡында һүҙ барһа, диңгеҙ тулҡындарын тояһың. Шуға күрә тамашасы һәр саҡ үҙен геройҙар араһында йөрөгән кеүек хис итә. Ә бындағы киноны стенаһағы аҡ сепрәккә яҡтыртып күрһәтәләр. Тауышы ҡайҙандыр ситтән ишетелә. Ябай ҙа, мәҙәк тә.

Кинонан сыҡҡас, Әмилә туңдырма һатып алды. Шунан эргәләге эскәмйәгә ултырҙы ла уны ашай башланы. Шул ваҡыт ҡыҙ үҙенә табан атлап килгән Батырҙы күрҙе. Әмилә ҡаушауынан ни эшләргә белмәне. Атаһына малай менән осрашмаҫҡа һүҙ бирҙе, ә үҙе... Хәҙер Батыр килеп һүҙ ҡушһа, тороп китә алмаҫ бит инде. Шунда ғына ҡыҙ малайҙың станцияла булған ваҡиғаларҙы хәтерләмәүен иҫенә

төшөрҙө. Эйе, Батыр бит Ер аҫтындағы станцияны ла, Әмиләне лә онотҡан. Дөрөҫөрәге, онотторҙолар. Бер-береһен белмәгән кеүек үтерҙәр ҙә китерҙәрме икән ни?

Әмилә, ни булыр икән тигәндәй, ҡаш аҫтынан ғына малайға ҡарап ултыра.

Батырҙың ҡулында сумка. Магазиндан ҡайтып килә, күрәһең. Йөҙө уйсан, бойоҡ. Берәй нәмәгә ҡайғырамы икән әллә? Бәлки уға ярҙам итергә кәрәктер. Ә Әмилә: «Хәлең нисек?» — тип тә һорамайынса үткәреп ебәрерме малайҙы?

Ул арала Батыр Әмилә янына килеп етте, боролоп ҡыҙға ғәмһеҙ генә ҡараны һәм...

Уларҙың ҡарашы осрашты. Шул мәлдә ҡыҙҙың тәне земберләп китте. Танырмы, юҡмы? Уның хәтерендә Әмилә хаҡында бер ни ҙә ҡалманымы икән ни?

Батырҙың ҡарашы ҡыҙҙа секунд тирәһе туҡталып торҙо. Шунан малай алға ҡараны һәм бер ни ҙә булмағандай атлауын дауам итте.

Әмиләгә ҡыйын булып китте. Ҡыҙҙың:

— Батыр, туҡта! Был мин — Әмилә! — тип ҡысҡырғыһы килде.

Әммә ҡыҙ атаһына биргән вәғәҙәһен яҡшы хәтерләй ине, шуға ла бер ни ҙә өндәшмәне.

Бына Батыр кешеләр араһына инеп күҙҙән юғалды. Әмиләнең ҡалала йөрөргә йәнә ике сәғәттәй ваҡыты бар ине. Әммә ошо осрашыуҙан һуң уның кәйефе китте. Әйтерһең, ниндәйҙер ҡәҙерле нәмәһен ҡулынан төшөрөп ватты... Ҡыҙҙың ҡала буйлап йөрөү теләге бөттө. Ул урынынан торҙо ла ҡайтыу яғына атланы. Әмилә башҡаса Ер өҫтөнә күтәрелеп тормаҫ. Нимә бар уға бында? Батырҙы осратты, әммә һөйләшә алманы... Тиҙерәк Урға ҡайтырға ла бөтәһен дә, бөтәһен дә онотторға!..

## *Айһылыу апайҙың сәйер ҡылыҡтары*

Сәғәт биш тирәһендә, футбол уйынының иң ҡыҙған мәлендә, Батыр майҙансыҡтан ситкә атланы. Күп тә үтмәне, уны Хәлит ҡыуып етте:

— Ни булды?

— Етер. Ҡайтырға ваҡыт.

— Уйын бөтмәне бит әле.

— Әсәйем ҡайтыуға өйҙә булырға кәрәк.

— Ниңә?

Батыр яуап биреп торманы. Аптырауға ҡалған дуҫы уның артынан ҡарап ҡалды. Ғәҙәттә, ҡараңғы төшөп, туп күренмәҫлек булғанса уйнаған Батырға ни булған? Аңлашылмай...

Өйгә ҡайтҡас, Батыр иҙән йыуып алды. Шунан ҡулына сумка тотоп магазинға юлланды. Һөт, икмәк һатып алды.

Ҡайтырға сыҡҡайны, малайҙың күңелен бығаса таныш булмаған һағыш солғап алғандай итте. Әйтерһең, хәҙер уның менән көтөлмәгән хәл буласаҡ — йә күптән күрмәгән кешене осратыр, йә берәүһе килер ҙә шатлыҡлы хәбәр әйтер...

Әммә уның менән бер ни ҙә булманы. Тормош әүәлгесә, бер ни үҙгәрмәгәндәй дауам итә — кешеләр үҙенсә йәшәй, ҡайҙалыр ашыға. Туңдырма һатылған мөйөштә бала-саға сыр-сыу килә. Ике малай Батырҙың янынан ғына йүгереп үтеп китте. Эргәләге эскәмйәлә бер ҡыҙ туңдырма ашап ултыра. Шуның сәйер ҡарашына иғтибар итте малай. Әйтерһең, теге Батырҙан ниҙер һорарға теләй, тик тартына... Ә бәлки малайға ғына шулай тойолғандыр.

Батыр ары атланы. Тиҙҙән теге сәйер тойғо онотолдо...

Ҡайтып инеүенә әсәһе шылтыратты:

— Һин өйҙәме?

— Эйе.

— Бер ҡайҙа ла сыҡма.

— Ниңә? Гел ошолай бикләнеп ултырайыммы?

— Сыҡһаң да, яңғыҙ йөрөмә, — тигән булды әсәһе. Уны аңлай алмай Батыр. Кисә әсәһе ауылға барып ҡайт тип бәйләнде. Унда ниндәйҙер таныштары йәшәй икән. Шунда барып ике-өс аҙна ҡунаҡ бул, йәнәһе. Яҡшылап та белмәгән кешеләр янында нимә эшләһен Батыр? Әлбиттә, малай баш тартты. Ә әсәһе һаман да нимәгәлер борсола. Үҙе асығын ғына һөйләп тә бирмәй. Бына хәҙер урамда йөрөүҙән тыя башланы.

— Ниңә? Ни өсөн? — тип малай күпме генә төпсөнһә лә әсәһенән асыҡ ҡына яуап ишетмәне.

— Урамға яңғыҙ сыҡма! — Бар һүҙе шул. Йәнә көндөҙ ишек шаҡыһалар, асмаҫҡа ҡуша. Әллә Батырҙы кескәй балаға һанай инде...

Киске аштан һуң әсәһе ҡайҙалыр йыйына башланы. Үҙенең йөҙө борсоулы.

— Әсәй, ни булды? — тип һорамайынса түҙә алманы Батыр.

— Бер ни ҙә булманы. — Айһылыу апай тыныс күренергә тырышты.

— Ә ҡайҙа йыйындың?

— Бында бер апайҙарға инеп сығам әле. Йомошом бар.

— Кисә лә шулай тигәйнең...

— Әйтһә һуң? Бөгөн дә күрергә кәрәк. — Айһылыу апай тәҙрәгә күҙ һалды. — Ҡараңғы төшә. Бер кемгә лә ишек асма.

— Кемдән ҡурҡаһың һин, әсәй?

— Төрлө хәбәр ишеттем бөгөн, — тине Айһылыу

апай. — Ҡалала бурҙар йөрөй икән. Фатирҙа балалар ғына ҡалғанын аңдыйҙар ҙа...

Юҡты һөйләй әсәһе. Был бер ҡарауҙа күренеп тора. Ҡапыл Батырҙың башына бер уй килде.

— Ярай, — тине ул әсәһенә. — Өйҙән сыҡмайым, ишекте бер кемгә лә асмайым. Бар, әсәй.

Айһылыу апай тынысланды һәм сығып китте. Батыр ишекте эстән бикләп ҡалды. Әммә бер минут та үтмәне, малай тиҙ генә курткаһын кейҙе лә, аяғына туфлиҙәрен эләктереп, тышҡа ташланды. Уны әсәһе һаман бала-сағаға һанай. Бына хәҙер артынан күҙәтеп барасаҡ та, бөтәһен дә асыҡлаясаҡ.

Малай йүгереп урамға сыҡты. Эңер төшкән. Әммә яҡты әле. Ана, әсәһе китеп бара. Бик ашығып атлай. Әйтерһең, артынан улының күҙәтә сыҡҡанын һиҙгән дә эҙ яҙлыҡтырырға теләй...

Юҡ, әсәһе бер ниндәй ҙә апайға барырға йыйынмай шикелле. Бына ул мөйөштә боролғас, үҙе эшләгән магазинға табан юлланды. Әллә теге апай шунда эшләйме икән? Улай тиһәң, әсәһе уның өйөнә барам тигәйне түгелме? Ниндәйҙер сер бар бында.

Айһылыу апай бик ҡабалана, күрәһең. Батырға унан ҡалышмаҫ өсөн туҡтауһыҙ йүгерергә тура килә.

Бына бер мәл улар Айһылыу апай эшләгән магазинға килеп еттеләр. Эскә инәме тиһә, әсәһе эргәләге ашхананы ураны ла складтар янына үтте. Батыр аҙымдарын йышайтты. Ни эшләй икән әсәһе төнгә ҡарай складтар араһында?

Ашығып атлаған малай, мөйөштән боролғас та, саҡ-саҡ әсәһенә төртөлмәне. Айһылыу апай эргәлә генә тора ине. Ҡарашы ҡайҙалыр алға төбәлгән. Үҙе ҡасҡын кеүек йәшниктәр араһына йәшенгән. Кемде күҙәтә ул? Батыр әсәһе төбәлгән яҡҡа ҡараны. Әммә унда бер ни ҙә күренмәй. Әллә берәйһен көтәме икән? Малай ситкәрәк боҫто. Таң атҡанса ултырһа ултырыр, әммә әсәһенең ниңә килгәнен белмәйенсә китмәҫ.

Бағаналағы уттар тоҡанды. Магазин артындағы майҙансыҡ аҡһыл төҫкә буялды. Складтар ҡара, оҙон күләгәләрен ергә йәйҙе. Тирә-йүн серле лә, шомло ла ҡараңғылыҡҡа күмелде.

Эргәлә генә кемдәрҙеңдер һөйләшеүе ҡолаҡҡа салына. Ашхана янынан ҡыҙҙар менән егеттәр көлөшә-көлөшә үтеп китте. Алыҫта машиналар геүләүе ишетелә.

Йәшниктәр араһына йәшенгән Айһылыу апай кемделер көтә.

Саҡ ҡына арыраҡ уның улы Батыр боҫоп тора...

*Лайондың уйҙары*

Тиҙҙән Лайондың бригадаһы Ерҙәге эштәрен тамамлай. Уларҙы икенселәр алмаштырасаҡ. Был көндә станциялағы һәр кем түҙемһеҙләнеп көтә. Ерҙә эшләүе ҡыҙыҡ, әммә ул барыбер тыуған төйәккә етмәй.

Лайонды ашығырға мәжбүр иткән тағы бер сәбәп бар. Ул да булһа — Әмилә. Һуңғы осор бик күңелһеҙ йөрөй ҡыҙ. Уға теге саҡта станцияла булған ваҡиғалар ныҡ тәьҫир итте, шикелле. Ни тиһәң дә, бала бит әле.

Лайон ҡыҙының күңелен төрлөсә табырға маташып ҡараны. Әммә Әмилә гел генә яңғыҙ ҡалыу яғын ҡарай. Тиҙерәк алып ҡайтырға кәрәк уны Урға, тип борсолдо Лайон. Шуға ла ҡыҙы бер көнө ҡалаға барып килергә уйы барлығын әйткәс, ҡаршы була алманы. Бала бит. Гел ололар араһында ялҡып та киткәндер. Етмәһә, Ер аҫты — Ер аҫты инде. Әйҙә ҡалаға сығып еләп килһен. Кәйефе лә күтәрелеп китер. Уғата борсолмаҫҡа ла мөмкин. Теге малайҙар менән осрашырға ярамағанлығын яҡшы аңлай бит ул.

Ҡалала дүрт сәғәт йөрөргә рөхсәт бирҙе лә ҡыҙының әйләнеп ҡайтырын түҙемһеҙләнеп көтә башланы. Әмиләнең әйткән һүҙендә тороро яҡшы белә, әммә барыбер борсола. Батырҙы осрата ҡалһа, Әмилә тыныс ҡына үтеп китә алырмы? Ер кешеләре менән аралашырға ярамағанлығын белә Әмилә. Ҡыҙыҡһынып, (йәнәһе, Батыр станцияла булыуын, ысынлап та, оноттомо икән?) малай менән һөйләшеп китеүе лә бар.

Әммә Лайонға билдәһеҙлек утында оҙаҡ янырға тура килмәне. Әмилә ике сәғәт үтеүгә станцияға әйләнеп тә ҡайтты. Тик ниңәлер кәйефе юҡ. Атаһы менән һөйләшеп тә торманы, үҙ бүлмәһенә инде лә бикләнде. Ни булған? Ниңә өндәшмәй? Бәлки Батырҙарҙы тап иткәндер, ә тегеләр Әмиләне танығандыр? Быны бик белгеһе килһә лә Лайон ҡыҙын борсоп торманы. Хәҙер уны хафаларға ярамай, тынысланһын, үҙ-үҙен ҡулға алһын. Ваҡыты еткәс, кәрәк һанаһа, барыһын да үҙе асып һалыр. Әйе, Әмилә генә түгел, башҡалар ҙа арыны. Тиҙерәк Урға ҡайтырға кәрәк...

Ошо ерҙә ишек башындағы лампа тоҡанды. Тимәк, кемдер инергә рөхсәт һорай. Лайон эргәһендәге кнопкаға баҫты.

Ишектә Әмилә күренде. Ул йүгереп килеп атаһын ҡосаҡланы:

— Атай, тиҙерәк ҡайтайыҡ Урға! Ҡасан беҙҙе алмаштыралар?

— Йәнә ике көн ҡалды.

— Мин ялҡтым.

— Түҙ, Әмиләкәй... Ниңә улай тиҙ әйләнеп ҡайттың әле ҡаланан? Ниңә өндәшмәйһең? Әллә... Батырҙарҙы тап иттеңме?

— Юҡ. — Ҡыҙ ҡарашын ситкә борҙо.

Тимәк, осратҡан, — тип уйланы Лайон. — Ни булған улар араһында? Һөйләшкәндәрме, юҡмы?

Әммә Әмилә башҡа бер ни ҙә өндәшмәне, атаһы менән хушлашты ла үҙ бүлмәһенә китте.

*Батыр борсола*

Йәнә көнө буйы тиерлек Батыр өйҙә яңғыҙ ултырҙы. Әсәһе иптәштәренә эйәреп урамға сығырға рөхсәт итһә лә, малай тышҡа аяҡ баҫманы. Унда уйын ҡайғыһы юҡ хәҙер. Малайҙы икенсе нәмә борсой. Батыр белә: әсәһе бөгөн эштән ҡайтасаҡ та эңер төшөү менән йәнә: «Бер апайҙарға барып киләм әле», — тип сығып китәсәк. Шунан ашхана артындағы складтар янына барасаҡ. Нимә эҙләй әсәһе унда? Кемде көтә? Һорар ине, әсәһе әйтмәҫ тип ҡурҡа. Етмәһә, ә һин ҡайҙан беләһең минең унда барғанды, тип төпсәнә башлар. Батырҙың күҙәтеп йөрөгәнен белмәгәс, белмәһен әле.

Малайҙы йәнә шул хәүефкә һала. Әсәһе бик тә ҡайғылы йөрөй һуңғы ваҡыт. Уның үҙен тотошонда нимәнәндер ҡурҡҡаны һиҙелеп тора. Кисә шул складтар янына барып ҡайтыуын нисек аңлатырһың? Әгәр унда кемделер осратып, уның менән һөйләшкән булһа — бер хәл. Юғиһә төнгө ун икегә тиклем бер-береһенән йәшенеп шунда ултырҙылар ҙа бер кемде лә күрмәйенсә ҡайтып киттеләр. Бергәләп түгел, әлбиттә. Батыр урауыраҡ юлдан сапты, әммә алдан ҡайтып етте өйҙәренә.

Айһылыу апай үҙе артынан ишекте бикләгәндә, Батыр карауатында ята ине инде. Әсә уның янына инеп, малайының одеялын рәтләне, сәсенән һыйпап арҡаһынан һөйөп алды. Шунан ниңәлер ауыр уфтанды ла үҙ бүлмәһенә үтте.

— Нимә борсой әсәһен? Нимәнән ҡурҡа? Ошоларҙы белергә ине Батырға. Әсәһе йәл уға. Әгәр ярҙам итә алһа икән! Батырҙан башҡа уның яҡлашыр кешеһе лә юҡ бит. Улар яңғыҙ, улар икәү генә был донъяла. Шуға күрә лә Батыр әсәһен кистәрен яңғыҙ ҡалдыра алмай...

Бөгөнгө кис бөтәһе лә яңынан ҡабатланды. Әсәһе эштән ҡайтты ла аш әҙерләне. Юҡ-бар хаҡында һөйләшә-һөйләшә ашанылар. Шунан әсәһе ҡабаланып ҡайҙалыр йыйына башланы:

— Теге апайҙарға барып киләм әле йәнә, — тине ул. Был юлы Батыр төпсөнөп торманы. Сөнки әсәһенең ниндәй

«апайҙарға» йыйынғанын яҡшы белә бит инде. Унын артынса, күп тә үтмәй, Батыр ҙа тышҡа йомолдо.

Егерме минуттан Айһылыу апай кисәгесә магазин артына инеп китте. Йүгереп килгән малай, мөйөштө үткәс тә, шым туҡтаны. Сөнки унын күҙ алдында көтөлмәгән күренеш хасил булды.

Магазин артындағы бер складтың ишеге асыҡ. Шунда йөк машинаһы тора. Унын янында өс ир урала.

Бына Батырҙың әсәһе шәп-шәп атлап шуларҙың янына барҙы:

— Нимә эшләйһегеҙ һеҙ?

Ирҙәр йылп итеп тауыш килгән яҡҡа ҡараны. Әммә Айһылыу апай икәнлеген белгәс, тынысланғандай иттеләр:

— Ә-ә, был һинме ни, Айһылыу? — тип һораны тегеләрҙең береһе.

— Мин бит һеҙгә әйткәйнем! — Айһылыу апайҙың тауышы асыулы яңғыраны. — Йәнә башланығыҙмы?

— Әйткәйнең шул, әйткәйнең! — Теге ирҙәрҙең береһе Айһылыу апайҙың беләгенән тотто. — Әммә беҙ ҙә һине иҫкәрткәйнек шикелле. Шулай түгелме?

— Әгәр туҡтамаһағыҙ...

— Әгәр туҡтамаһаң, малайыңдан ҡолаҡ ҡағасаҡһың, тигәйнек бит беҙ. Оноттоңмо?

— Һеҙ ҡурҡытмағыҙ мине!

— Беҙ ҡурҡытмайбыҙ. Иҫкәртәбеҙ. Бар ҡайт, йәме. Беҙ бында бер ни ҙә эшләмәйбеҙ. Ҡайтырға йыйындыҡ.

Ысынлап та, ирҙәр кабинаға инеп ултырҙы. Киләһе секундта машина яҡтылығы менән ҡаршылағы йорттоң стенаһына ялт-йолт һуҡты ла, урамға сығып, күҙҙән дә юғалды.

Батыр склад янында торған әсәһенә боролдо.

Айһылыу апай, бына ғына булып үткән ваҡиғаны яңынан кисергәндәй, бер аҙ уйланып торҙо ла кирегә атланы. Малай шунда уҡ өйҙәренә ҡарай йүгерҙе. Әсәһе ҡайтыуға ул карауатында ятырға тейеш...

### *Батырҙың ҡарары*

Бына бит ул нисек! Батыр әсәһе хаҡында юҡты уйлап йөрөгән. Ә баҡһаң... Уны бөтөнләй икенсе нәмәләр борсоған. Тимәк, Батырға ла, унын әсәһенә лә ҡурҡыныс янай. Нимә тинеләр әле? Туҡтамаһаң, улыңды юҡ итәбеҙ, тинеләр. Тимәк, Батырҙы урламаҡсылар. Шунан... Үлтерергә итәләрме икән ни? Ни өсөн? Күрәһең, әсәһе тегеләргә нисектер ҡамасаулаған. Ә нисек?

Иртәнсәк Айһылыу апай йәнә Батырға өйҙән сыҡмаҫҡа ҡушты ла эшенә китте. Был юлы малай ҡәнәғәтһеҙлек

һиҙҙермәне. Киреһенсә, әсәһен тынысландырыу өсөн яғымлы һөйләште, өйҙә генә ултырырға һүҙ бирҙе. Шунан үҙ уйҙарына сумды. Ни эшләргә? Әлегә унын өсөн бер нәмә асыҡ: тегеләр менән Батыр үҙе көрәшә башларға тейеш. Әсәһе — ҡатын кеше. Ул күмәк ирҙәргә ҡаршы тора аламы ни? Улар склад янында өсәү ине. Башҡалары ла барҙыр. Ә әсәһе яңғыҙ. Дөрөҫ, Батырға ла бер үҙенә алышырға тура килер, әммә ни тиһәң дә ул ир затынан.

Тик көрәште нисек башларға? Дөрөҫлөк әсәһенең яғында икәнлегенә Батырҙың шиге юҡ. Сөнки унын кеүек ғәҙел, саф кеше юҡтыр ул донъяла. Кескәйерәк сағын хәтерләй Батыр. Бер тапҡыр балалар баҡсаһынан иптәш малайының матур ғына уйынсыҡ машинаһын һорамайынса алып ҡайтҡайны. Әсәһе быны күреп ҡалды ла, шунда кире илтергә, малай алдында ғәфү үтенергә ҡушты. Эй, ауыр булды ла һуң шуларҙы эшләүҙәре. Урамға ғына ташлар ине теге машинаны, әсәһе тикшерәсәген әйтте. Ыңғыраша-ыңғыраша илтте Батыр машинаны, иптәше алдында ғәфү үтенде һәм башҡа ғүмерҙә лә урлашмаҫҡа һүҙ бирҙе үҙ-үҙенә. Эйе, ошо йәшенә етеп Батыр йәнә күп тапҡырҙар әсәһенең ғәҙеллегенә инанғаны булды. Шуға ла малайҙың иманы камил: әсәһе насар кешеләргә ҡаршы көрәш башлаған. Шулай ҙа нимәнән килеп сыҡҡан икән был алыш? Әсәһенән һорау файҙаһыҙ, ул бер ни ҙә әйтмәйәсәк. Ләкин ғаиләләре ҡурҡыныс аҫтында икән, ун ике йәшлек егет ҡул ҡаушарып ултыра буламы?

Күп уйланы Батыр һәм шундай ҡарарға килде: теге ирҙәрҙе үҙе күҙәтәсәк. Аҙаҡ, бәлки, дуҫтарын да ярҙамға саҡырыр. Әммә әлегә үҙе генә тотона. Шулай итеп эштең айышына төшөнә. Шунанмы?.. Шунан... Ары күҙ күрер...

Ошондай фекергә килгәс, Батырға еңел булып китте. Әйтерһең, әсәһе менән үҙенә янаған ҡурҡыныс юҡ ителде...

Тик теге ирҙәрҙе ҡайҙан табырға? Кисә машиналарының номерына ла иғтибар итмәгән. Бөгөн йәнә шунда барырға тура килерме? Ә ирҙәр унда булырмы? Икенсенән, әсәһенең ҡамасаулауы бар. Етмәһә, кискә тиклем көтөүе шундай оҙаҡ!

Ә тукта! Ниңә әсәһе уға урамға сыҡмаҫҡа ҡушты әле? Батырҙы урларҙар тип ҡурҡа бит ул! Бына ҡайҙа ул мәкерлектең әтнәкәһе! Әгәр теге ирҙәр ысынды һөйләһә, бөгөн ошо тирәлә уралырға тейеш. Ул саҡтамы... Ул саҡта... Батыр бит яңғыҙ түгел. Унын дуҫтары бар. Шул уҡ Хәлит! Юҡ, ҡул ҡаушырып ултырырға ярамай. Эргәлә генә хөрт кешеләр йөрөй. Ҡурҡып тормаҫҡа, тәүәккәлләргә, шуларға ҡаршы көрәш башларға кәрәк!

Йәнә бер көндән Әмилә Ерҙе ташлап китә. Мәңгегәме? Кем белә инде? Бәлки бер мәл, күп кенә ваҡыт үткәс, килеп сығыр. Ҡыҙыҡ, шул саҡ таныр инеме икән ул Батырҙы, Хәлитте. Ә улар ҡыҙҙы?.. Хәйер... Ҡыҙҙың йөрәге семетеп ҡуйҙы. Ҡайҙан таныһындар инде. Кисә Батыр бит Әмиләнең янынан ғәмһеҙ генә үтеп китте. Сәйер был. Кешенең мейеһе шундай ҡатмарлы кеүек. Ә ысынында иһә ул меңәрләгән кәштәләргә оҡшаған икән. Махсус тулҡындар ярҙамында шул кәштәләрҙә ятҡан хәтирәләрҙе иретһәң, бер ни ҙә ҡалмай ҙа ҡуя... Ғәжәп тә был, үкенесле лә. Ҡыҙыҡ, әгәр Әмилә ер өҫтөнә күтәрелеп, шул уҡ Батыр менән яңынан танышып китһә, малай теге көндәрҙе саҡ ҡына булһа ла иҫләмәҫ инеме икән? Теге кәштәләге хәтирәләр бөтөнләйгә юйылғанмы икән? Бәлки, унда ни ҙә булһа ҡалғандыр. Быны тикшереп тә була бит әле. Хәйер, атаһына һүҙ бирҙе шул... Вәғәҙәне боҙорға ярамай. Етмәһә, инструкцияла ла яҙылған. Ә былай итһә... Батырҙы осратып, һиҙҙермәй генә артынан күҙәтеп йөрөһә? Ниңәме?.. Былай ғына... Ҡыҙыҡ бит. Урға китер ваҡытты тәүлектән ашыу көтәһе бар. Ваҡытты нисек тә үткәрергә кәрәк тәһә.

Уйлап ҡараһаң, Батыр менән осрашып һөйләшергә хаҡтары булмауы үкенесле. Күпме ҡыйынлыҡтарҙы еңеп егерме малайҙы, хатта станция етәксеһенең үҙен ҡотҡарҙылар, шул мәлде хәтерләп алырға хоҡуҡтары юҡ...

Ошо хаҡта уйҙар тәүҙә ҡыҙҙың башында кескәй генә нөктә кеүек ине. Әммә торған һайын ул үҫә барып оло йомғаҡҡа әйләнде һәм Әмиләнең бар мейеһен ялмап алды. Юҡ, күтәрелә әле ул Ер өҫтөнә йәнә. Һуңғы тапҡыр ҡалаға бара, хушлаша... Әгәр Батыр тап була икән, күҙәтеп тә йөрөр бер аҙ, ә инде осрамаһа... Тимәк яҙмыш шулай ҡуша...

Ярты сәғәт үтеүгә Әмилә ҡала буйлап йөрөй ине инде. Был юлы ла атаһынан Ер өҫтөндә дүрт сәғәт булырға рөхсәт алды ҡыҙ.

— Ниңә шул тиклем? — тип һорағайны Лайон.

— Һуңғы тапҡыр бит. — Ҡыҙ тыныс булырға тырышты. — Ҡаланы тулыһынса урап сығам.

Һәм бына Әмилә, ҡояшҡа күҙен ҡыҫа биреп, ҡала буйлап атлай. Нисәмә тапҡыр булды ҡыҙ бында! Таныш урамдар, өйҙәр, магазиндар. Һәм таныш түгел кешеләр. Уларҙың һәммәһе ҡайҙалыр ашыға, ҡабалана. Береһе лә үҙҙәренә ҡаршы атлаған Әмиләне әллә ҡайҙағы йыһан төбөнән килгәндер тип, башына ла килтермәй. Был хатта үкенесле. Ҡайһы саҡта Әмиләнең туҡтап:

— Эй, Ер кешеләре! Мин — икенсе планетанан! Һеҙгә Алыҫ Урҙан сәләм! — тип ҡысҡырғыһы килә.

Әлбиттә, был уй ҡыҙҙың башына бер генә секундҡа килә лә һүнә. Сөнки, ярамай. Икенсенән, кем ышаныр тиһең? Был ҡыҙ иҫәрләнгән икән, тип уйларҙар. Бындағы кешеләр бит Ерҙән башҡа планеталарҙа тере йән эйәһе юҡ, тип уйлай...

Әмилә бер-нисә магазинға инеп сыҡты, шунан мөйөштән ике туңдырма һатып алды. Эй, тәмле лә һуң ошо ризыҡ! Ер өҫтөнә күтәрелгән һайын ҡыҙ унан ауыҙ итмәй ҡалмай. Әмилә станциянан тәүге тапҡыр сыҡҡанда уҡ туңдырманы ашап ҡараны һәм бик оҡшатты. Йәнә ул бәлеш тигән нәмәне ярата. Ур планетаһында юҡ бындай ризыҡтар. Ниңә икән? Үткәндә атаһынан шул хаҡта һорағайны, ул да белмәй. Атаһы хатта, Әмилә күпме генә һөйләһә лә, бәлеш менән туңдырманың нимә икәнлеген аңламаны. Ҡыҙға белешмәләрҙе аҡтарырға тура килде. Баҡһаң, бынан мең йылдар тирәһе элек Урҙа ла ризыҡтарҙың туңдырма кеүеге лә, бәлеш һымағы ла булған. Һәм уны бик ратҡандар. Аҙаҡ ҡына туңдырманың да, бәлештең дә организмға файҙаһы юҡлығын белгәс, махсус ҡарар менән уларҙы эшләүҙе туҡтатҡандар. Хәҙер Урҙағы ризыҡтың тәме лә, еҫе лә юҡ шул. Сөнки аҙыҡ организм өсөн файҙалы булырға тейеш. Кешенең тәнен кәрәкмәгән нәмәләр менән тултырылған һауытҡа әйләндерергә ярамай. Дөрөҫ, әлбиттә. Әммә туңдырманы ла, бәлеште лә бик оҡшатты Әмилә. Ниндәй тәмле улар! Ә бәлештең еҫе һуң! Уларҙы ауыҙ иткәс кенә Әмилә башҡорттарҙың «телеңде йоторлоҡ!» тигән һүҙҙәренең мәғәнәһен аңланы...

Ошо ерҙә туңдырмаларын тотоп паркка табан атлаған ҡыҙ терт итеп ҡалды. Уға табан (кемдәр тиһегеҙме?) Батыр менән Хәлит килә ята ине. Оҙон буйлы Батыр ҙа, йыуантаҡ, тәпәш Хәлит тә, үткәндәге кеүек, шорты менән футболканан. Аяҡтарында кроссовка. Әйтерһең теге саҡта осрашыуҙарына бер-нисә аҙна үтмәгән, гүйә, яңы ғына айырылышҡандар. Бына хәҙер малайҙар уның янына килер ҙә: «Әмилә», — тип өндәшер...

Ни эшләргә? Ҡыҙ атаһына малайҙар менән осрашмаҫҡа һүҙ бирҙе. Әллә үҙенең икенсе планетанан килгәнен һиҙҙермәй генә һөйләшеп ҡарарға?

Ҡыҙ эргәләге эскәмйәгә ултырҙы ла, туңдырмаһын ялайялай, малайҙарҙы күҙәтергә тотондо.

Был минутта Батыр менән Хәлит ни тураһындалыр ҡыҙып-ҡыҙып бәхәсләшә ине. Ана бит Әмилә яғына күҙ ҙә атмай үтеп киттеләр.

Ҡыҙ туңдырмаһын онотоп уларға текләп ултырҙы. Шунан — әйтерһең билдәһеҙ көс тартты — урынынан тороп малайҙарға эйәрҙе.

## *Бәкер*

Төштән һуң Бәкерҙе шеф, йәғни һатыу селтәре директоры саҡырҙы:

— Һиңә яуаплы задание йөкмәтмәксемен. Нисек ҡарайһың?

— Тыңлайым, Шеф! — Нәҙек оҙон буйлы Бәкер һалдаттарса турайҙы. Ул быны ярым шаярып, ярым етди эшләне. Әммә шулай итеп үҙенең теләһә ниндәй бойороҡто үтәргә әҙерлеген һиҙҙерҙе.

— Айһылыу исемле һатыусыны беләһеңме әле?

— Белмәҫкә... Үткәндә... Һөйләштек бит.

— Эйе. Һөйләштегеҙ. Ҡурҡытып, янап ҡаранығыҙ. Ә ул тыңламай. Тыңламаған кешене нимә эшләтергә?

— Аҡылға ултыртырға! — Бәкер оҙон сәстәрен артҡа һыпырҙы.

— Дөрөҫ! — Шеф — илле йәштәр тирәһендәге тәбәнәк буйлы, йыуантаҡ ир — өҫтәле артынан сығып Бәкер янына килде. Кисә Айһылыу склад янында беҙҙең егеттәрҙе тоторға маташҡан. Ут менән уйнағанын аңламай, иҫәр ҡатын! Беҙ уны иҫкәртмәнек түгел, иҫкәрттек. Хәҙер үҙенә үпкәләһен. Урлайбыҙ малайын!

Бәкер, малайҙы урларға әҙер икәнлеген аңғартып, ҡарашын етдиләндерҙе.

— Эйе, урлайбыҙ! — тип ҡабатланы шеф ҡатыраҡ тауыш менән. — Һин уның малайын таныйһыңмы?

— Юҡ әлегә.

— Танырһың! Бына фотоһы, адресы. Әсәһе әле эштә. Батыр өйөндә булырға тейеш. Булмаһа шул тирәлә өйрөләлер. Айһылыу эштән ҡайтыуға, малайы беҙҙең ҡулда булһын. Аңланыңмы?

— Тауыш күтәрмәҫме урлағанда?

— Һаҡ ҡыланмаһаң, күтәрер. — Шефтың тауышы асыулы ине. — Тап берәй хәйләһен! Һарайға бикләрһең. Бына асҡыс.

— Аңланым.

— Аңлаһаң, бар. Ә-ә, туҡта. Был хаҡта беҙ икәүҙән башҡа бер кем дә белергә тейеш түгел.

— Ярар.

Көн ҡояшлы. Шуға күрә Бәкер ҡара күҙлек кейеп алды. Икенсенән, уға ошолай хәүефһеҙерәк. Теге малайҙың өйө янында әллә кемдәрҙе күрергә тура килер. Үҙеңде танытмаҫҡа кәрәк. Хәтерҙәрендә ҡалмау хәйерле.

Әлбиттә, кеше балаһын урлау — шәп эш түгел. Әммә Бәкер белә: шеф яҡшы түләйәсәк. Бәкер йәш кеше — быйыл саҡ егерме өс тула. Матур итеп кейенәһе лә, ресторан-кафеларҙа күңел асаһы ла килә. Ә йөк тейәүсенең аҡсаһы аҙ.

Шул арҡала һатыу селтәренән китергә лә йыйына ине әле. Бәкерҙең төп һөнәре слесарь бит. СПТУ тамамлағайны. Шунан армияла хеҙмәт итеп ҡайтты. Ҡайтты тиеүе дөрөҫ тә түгелдер. Бәкер — тома етем, балалар йортонда тәрбиәләнде. Һигеҙенсе кластан һуң ошо ҡалаға килеп СПТУ-ла уҡый башланы. Армиянан һуң да бында килде, эшкә урынлашты. Тәү мәл слесарь булып йөрөнө. Әммә аҡсаһы аҙ тойолдо. Күрше заводҡа күсеп шымартыусы булып эшләп ҡараны. Унда ла оҡшаманы. Шулай итеп ике йыл эсендә Бәкер йәнә тиҫтәгә яҡын эш урынын алмаштырҙы. Һәр ҡайһыһының нимәһелер күңеленә ятманы — йә аҡсаһы аҙ, йә эше ауыр. Быйыл йәй йөк тейәүселәр аҡсаны көрәп ала тигәнде ишетеп, һатыу итеү селтәренә килеп юлыҡты. Әммә буш хәбәр булған икән. Эше ауыр, аҡсаһы ла маҡтанырлыҡ түгел. Бәкер йәнә китергә йыйына башланы. Шул мәл ресторанда һуғышып милицияға эләкте. Иртәгеһенә һатыу итеү селтәренең директоры саҡырып алды уны.

— Ниңә һуғыштың?

— Хәтерләмәйем. — Бәкергә, бынан китергә булғас, ҡыйыу ҡыланды. — Күп төшөрөлгән, күрәһең.

— Бында «бер үҙе өс кешене туҡмаған», тип яҙалар. Дөрөҫмө шул?

— Дөрөҫ.

— Һин боксермы әллә?

— Армияла шөғөлләнгәйнем.

— Көсөңдө улай күрһәтеп йөрөһәң... Тоттом да ҡыуҙым булыр.

— Ҡурҡытма. — Бәкер көлөмһөрәне. — Мин үҙем китәм һеҙҙән.

— Ниңә?

— Аҙ түләйһегеҙ.

Директор Бәкер менән йомшағыраҡ һөйләшә башланы.

— Аҙ тиһең... Ә күпме кәрәк һиңә? Бәкер юрамал ҙур ғына һанды әйтте.

— О! Күпте теләйһең икән... Хәйер, түләйем! Хәҙер Бәкергә аптырарға сират етте:

— Нисек?

Директор ҡапыл ғына яуап бирмәне. Әкренләп Бәкерҙең кем булыуын, ҡайҙа йәшәүен, киләсәк хаҡында уйҙарын белеште. Шунан махсус задание бирәсәген әйтте. Әгәр Бәкер шуны үтәһә, һораған саҡлы түләйәсәк. Директор: «Задание», — тигәс, Бәкер ҡатмарлы эш көткәйне. Ә директорҙың ҡушҡаны еңел генә булып сыҡты. Бәкер әйтелгән урында, күрһәтелгән кешене туҡтатып, бер генә һүҙ әйтергә тейеш икән:

— Һеҙҙе иҫкәртәбеҙ. Әгәр соҡсоноуоғоҙҙо ташламаһағыҙ, ҡатыраҡ сара күрергә тура килер.

Шунан һуң Бәкер, теге кешенең ни әйтерен дә көтмәй, боролоп китергә тейеш.

Егеткә задание оҡшаны. Ул ризалығын бирҙе, теге кешегә ҡушылған һүҙҙәрҙе әйтте. Һәм шуның өсөн директорҙан күп кенә аҡса алды.

Унан һуң Бәкер, директорҙың ҡушыуы буйынса, төнөн складтан әйберҙәр тейәп алып китеште, ниндәйҙер бер ирҙе тотоп туҡманы. Бер нисә тапҡыр баҙарға барып, һатыу итеп торған кешеләрҙе ҡыуышып ебәрергә тура килде. Аҙаҡ Бәкергә аңлаттылар: тегеләр урын өсөн шефҡа аҡса түләмәгән икән. Бәкерҙәрҙең директорының бында ниндәй ҡыҫылышы барҙыр инде — быны егет аңламаны. Хәйер, аңларға ла теләмәне. Иң мөһиме: уға түләйҙәр.

Бара тора Бәкер директор янында үҙе кеүек башҡа егеттәрҙең дә барлығын күрҙе. Быларға ҡушылып директорҙы «шеф» тип әйтергә күнегеп китте.

Бынан ике көн элек Бәкер шуларҙың береһе менән һатыусы Айһылыуға иҫкәртеү һүҙҙәре әйтте. Был ҡатын шефтың дәүләт кеҫәһенә ҡул тығыуын һиҙеп ҡалған, тип аңлатты егеттәр. Хужаның асыуы килгән, әлбиттә. Уның ғына түгел егеттәрҙең дә йәне көйә Айһылыуға. Һорамаған ергә ниңә тығыла ул? Әгәр шефты ҡыйратһалар, үҙҙәренә ауырға төшәсәген аңлай егеттәр. Теге саҡта иҫкәртеүгә ҡарамай, Айһылыу алдына алғанын ҡуймай, тимәк. Ә шеф бит шаярырға яратмай. Шуны белмәй, күрәһең, Айһылыу ханым. Бына бөгөн шеф уның улын урларға ҡушты.

### *Эҙәрләү*

— Ниңә урларға тейеш улар һине? — Ҡаушап төшкән Хәлит күҙҙәрен селт-селт йомғоланы.

— Белмәйем, тием бит. — Батырҙың асыуы килә башланы. Инде нисәнсе ҡат һөйләй. Ә Хәлит һаман төшөнмәй. — Әгәр белһәм, һине саҡырыр инемме ни. Барыр ҙа әйтер инем милицияға.

— Ә хәҙер әйтһәк?

— Улар ҙа төпсөнә башлаясаҡ: «Ниңә урларға тейештәр һине?» Юҡ инде!..

— Уларҙы ҡайҙан табырбыҙ?

— Ҡала буйлап йөрөйбөҙ. Теге бандит мине урларға йәки... үлтерергә йыйына.

— Үлтерергә? — Хәлиттең күҙҙәре аҡшайҙы.

— Эйе. Әсәйемә «улыңды юҡ итербеҙ» тигәнде асыҡ ишеттем.

— Юҡ, Батыр. Мин һиңә ярҙам итә алмайым. Ҡурҡа

икән, тип уйлама. Мин бөгөн ауырып торам. Ниңәлер эсем ауырта. Кисә күп итеп еләк ашағайным.

— Их, һин! — Батыр Хәлиткә күҙҙәрен ҡыҫа биреп ҡараны. — Дуҫ тип йөрөгән булам. Ярай, бар кит!

— Мин ҡурҡмайым. Әйтеп торам бит — эсем! — Хәлит Батырҙы ышандырыу өсөн йөҙөн сирҙы, ҡулдары менән эсенә баҫты.

— Ярай, мин һинһеҙ ҙә!.. — Батыр ҡырҡа боролоп ситкә атланы.

Хәлит бошонҡо ҡиәфәт менән алыҫлаша барған дуҫына ҡарап торҙо ла түҙмәне, тегене ҡыуып етте.

— Туҡта әле! Ниңә ҡыҙып барған булаһың? Мин бит бергә йөрөмәйек тип әйтмәнем. Эсем ауырта, тинем генә. Шәп атлама, тимәк. — Хәлит йүгерә-йүгерә шулай һөйләнде. — Ашыҡма, тием бит! Ҡайҙа сабаһың шул тиклем? Бандиттан ҡасмайбыҙ бит әле.

Батыр өндәшмәне, әммә аҙымдарын әкренәйтте.

— Йә, һөйлә. Нимәнән башлайбыҙ?

— Ул мине күҙәтә башлаясаҡ. Бөгөн.

— Ҡайҙан беләһең? — Хәлит тирә-яғына ҡарап алды.

— Күңелем һиҙә... Янымда һин булғас, ул бер ни ҙә эшләй алмаҫ. Шул саҡ беҙ уның үҙен беләбеҙ ҙә, үҙенең артынан күҙәтә башлайбыҙ.

— Ниңә?

— Ниңә, ниңә... Ҡайҙа йәшәгәнен беләбеҙ. Штабтарын табабыҙ.

— Э-э.. — Штаб һүҙе Хәлитте етдиләнергә мәжбүр итте.

Малайҙар ҡала буйлап атланы. Хәҙер һәр кеше Хәлит менән Батырға уларҙы күҙәтә кеүек.

— Туҡта! — тип шыбырланы бер мәл Хәлит. — Мин күрәм уны!

— Ҡайҙа? — Батыр һағайҙы.

— Ана, ҡара әле! — Хәлит артҡа әйәк атты. — Аҡ салбар кейгән ағай. Ул беҙҙе күҙәтә.

— Эйе.. — Батыр етдиләнде. — Иплап! Һиҙеп ҡалмаһын.

Малайҙар бер ни һиҙмәгән төҫ менән алға атланы.

— Хәҙер былай итәбеҙ, — тип план ҡорҙо Батыр. — Мин ары атлайым. Ә һин... артҡараҡ ҡал да уның үҙен күҙәтә башла. Шунан мин ҡапыл ҡасып китәм. Ә һин уның артынан күҙәтә барып ҡайҙа йәшәгәнен беләһең.

— Бер үҙемме? — тип борсолдо Хәлит.

— Ҡурҡма! — Батыр дуҫын тынысландырырға тырышты. — Уға мин кәрәк.

— Ярай, — тип ризалашты Хәлит.

Күп тә үтмәне ул, дуҫынан айырылып, артҡа ҡала башланы.

Әммә малайҙарға был планды тормошҡа ашырырға яҙманы. Теге кеше, гәзит киоскыһы янында бер аҙ туҡтап торғандан һуң, кире яҡҡа китте лә барҙы.

Малайҙарҙың кәйеф кителде. Улар бит Батырҙы урларға тейеш бандитты табыуҙарына тамам ышанғайны...

Хәл юҡ, эҙләүҙе дауам итәһе генә ҡала.

Бер сәғәт эсендә улар йәнә дүрт кешене үҙҙәренең артынан күҙәтеп килгән кеүек күрҙе. Әммә дүртеһендә лә яңылыштылар. Һәммәһе лә осраҡлы рәүештә генә малайҙарға эйәреп килгәндәр икән. Хәлит артҡа ҡалып уның үҙен күҙәтергә әҙерләнгән мәлдә генә тегеләр икенсе яҡҡа боролдо ла китте.

Төштән һуң Батыр менән Хәлиттең бандитты осратыуҙарына өмөттәре өҙөлгәйне.

Ҡапыл Батыр һағая төштө:

— Тс-с!

— Ни булды? — тип шыбырланы Хәлит артына әйләнеп ҡарарға ҡурҡып. Әгәр боролһа, көткән кешеләре берәй нәмә һиҙенер ҙә ҡасып китер кеүек ине малайға.

— Һин иғтибар иттеңме? — тип һораны Батыр. — Беҙгә бер-нисә тапҡыр ҡыҙыл күлдәк кейгән ҡыҙ осраны.

— Ҡулында туңдырмаһы бармы?

— Эйе. Һиҙәм: шул күҙәтә беҙҙе!

— Нимәгә кәрәк беҙ уға?

— Беҙ — иҫәрҙәр, түмәрбаштар!.. Бандиттар бит хәйләкәрерәк. Мине күҙәтеү өсөн һис тә оло кеше кәрәкмәй.

Улар ошо ҡыҙҙы ебәргән. Ул беҙгә эйәреп йөрөй ҙә... Бәлки, минең яңғыҙ ҡалыуымды көтәләр. Шунан кәрәк урынға хәбәр итер һәм...

Хәлит әкрен генә артына боролоп ҡараны. Ҡулына туңдырма тотҡан ҡыҙыл күлдәкле ҡыҙ, ысынлап та, уларға эйәреп килә. Үҙе туп-тура бында ҡарай. Бар ҡиәфәтендә малайҙарҙан артҡа ҡалмаҫҡа тырышҡаны һиҙелә.

— Әйҙә, был яҡҡа боролайыҡ әле!

Батыр менән Хәлит, урам сатына еткәс, ҡырҡа ғына уң яҡҡа тартты. Бер аҙ барғас, һиҙҙермәҫкә тырышып, артҡа күҙ һалдылар.

— Килә! — тип ҡысҡырып ебәрҙе икеһе лә.

— Теге мөйөшкә етәбеҙ ҙә уңға боролабыҙ. Боролдолар — ҡыҙ йәнә уларға эйәрҙе.

— Ошомо икән ни? — Малайҙарҙың ышанғыһы килмәне. — Тағы тикшереп ҡарайбыҙмы?

— Тикшерәбеҙ!

Тикшерҙеләр. Ҡыҙ уларҙан ҡалышманы.

Малайҙар атлап барған көйө план ҡорорға тотондо.

— Мин әйткәнсә эшләйбеҙ, — тине Батыр. — Һин анау

өйгә ин дә тороп ҡал. Ул миңә эйәрәсәк. Ә һин саҡ ҡына көтәһең дә үҙенең артынан төшәһең.

— Ә һиҙеп ҡалһа?

— Һиҙҙермәҫкә тырыш. Уның кеүек яҡын килмә. Алыҫтан күҙәт. Шунан мин ҡасып китәм. Аҙаҡ һиҙҙермәй генә мин дә һиңә ҡушылырмын.

— Булды!

Бер аҙ барғас, Хәлит, ҡырҡа боролоп, эргәләге өйҙөң подъезына инеп китте. Батыр бер ни булмағандай ары атлауын белде. Ҡыҙыл күлдәкле ҡыҙ саҡ ҡына икеләнеп торҙо ла Батырға эйәрҙе. Хәлиткә шул ғына кәрәк ине лә. Ҡыҙ байтаҡ алыҫайғайны, йәшенеп кенә артынан төштө.

Был мәл көн кисләй башлағайны. Ҡараңғыла эҙен яҙлыҡтырмаһа, Хәлит ул ҡыҙҙың ҡайҙа йәшәгәнен беләсәк. Шунан инде милицияға әйтерҙәр. Ә улар быныҡ ни өсөн Батыр менән Хәлиткә эйәреп йөрөгәнен тиҙ асыҡлар...

## *Әмилә Ер менән хушлаша*

Әмиләгә Батыр менән Хәлиткә эйәреп йөрөүе ҡыҙыҡ ине. Тегеләр бик мөһим эш башҡарғандай нимә хаҡындалыр ҡыҙып-ҡыҙып һөйләшеп алалар. Бер ҡараһаң, ҡайҙалыр ҡабалаланалар кеүек. Ә үҙҙәре һаман да бер тирәлә өйрөлә.

Көн кисләй башланы. Әмиләгә ҡайтыр ваҡыт етте. Малайҙарға йәнә бер аҙ эйәреп барыр ҙа станцияға юлланыр...

Батыр менән Хәлит бынан бер-нисә аҙна ғына элек Ер аҫтындағы станция эсендә бандиттарға ҡаршы алыштылар. Ҡаланың ун һигеҙ малайын, ҡыҙҙың атаһын ҡотҡарҙылар... Шул батырлыҡтары хаҡында ошо ике малай бер ни белмәй. Ҡыуып етергә лә барыһын да һөйләп бирергә ине үҙҙәренә. Ышанмаҫтар шул. Хатта Әмиләне иҫәргә һанарҙар...

Ҡыҙҙың малайҙар янында булған һуңғы минуттар етә. Бына хәҙер боролоп станция яғына атлар һәм уларҙың икеһен дә башҡа бер ҡасан да күрмәҫ. Бик үкенесле был...

Көн тағы ла нығыраҡ ҡараңғылана төштө. Етер. Нисек кенә һуҙһаң да барыбер айырылышырға кәрәк. Йәнә биш минуттан Әмилә станцияға табан йүнәләсәк. Күңел эсенән генә, шыбырлап ҡына был ике ҡыйыу малай менән мәңгегә хушлашыр ҙа ҡайтыу яғына атлар. Эйе, йәнә биш минуттан. Бына инде дүрт минуттан...

Ошо ерҙә Әмилә малайҙарҙың уға иғтибар итеүҙәрен абайланы. Һиҙҙеләрме икән? Әйҙә, һиҙә бирһендәр. Барыбер бер ни ҙә аңламаясаҡтар бит. Етмәһә өс минуттан айырылышасаҡтар...

Бер аҙ барғас, Хәлит, ҡырҡа боролоп, эргәләге өйгә инеп китте. Ҡыҙ, күп уйлап тормайынса, Батырға эйәрҙе. Әммә быныһы ла күп барманы — нимәнәндер өркекән йәнлек кеүек ҡапыл ситкә ташланды һәм шунда уҡ күҙҙән дә юғалды. Малайҙарҙың икеһенең дә көтмәгәндә генә юҡҡа сығыуына әсенһә лә, ниһайәт, уларҙан еңел генә айырыла алыуына ҡыуанды ла Әмилә. Юғиһә, ҡалдырып китә алмайынса эйәрер ҙә йөрөр ине уларға, моғайын.

Көн бөтөнләй ҡараңғыланды. Тәҙрәләрҙә уттар ҡабына башланы. Бына ҡаланың сите.

Әмилә Ер ҡалаһына һуңғы тапҡыр ҡараны ла, яланға сығып, станцияға табан атланы. Һуңғы тапҡыр ошо юлдан үтәм, тип уйланы ҡыҙ. Иртәгә ошо ҡалаға йәнә сығырға тура киләсәген Әмилә был минутта белмәй ине әле...

*Бәкер Батырҙы таба*

Бәкерҙең ошондай эшкә кейә торған махсус кейеме бар: аҡ күлдәк, һоро салбар. Егет ятаҡҡа инеп, шул кейемен гәзиткә төрөп алды. Шунан ҡала баҡсаһының аулағыраҡ урынына инеп өҫтөн алмаштырҙы, танау аҫтына мыйыҡ йәбештерҙе. Күп ҡатлы өй янында әбей-һәбейҙәр тулып ултыра торған. Аҙаҡ милиция эҙләргә тотонһа, иң алда шуларҙан һорау аласаҡ. Әбейҙәр аҡ күлдәк кейгән, мыйыҡлы әҙәм хаҡында һөйләр, ә Бәкер иртәгеһенә бөтөнләй икенсе ҡиәфәттә йөрөр. Табығыҙ шунан уны!

Тәүҙә Бәкер Батырҙың фотоһын тикшерҙе. Ябай йөҙ. Шоморт төҫөндәге терпесәс. Башҡа малайҙарҙан айырыуы еңел булмаҫ...

Бына өсөнсө ҡат. Утыҙ дүртенсе квартира. Аяҡ тауыштары ишетелмәй. Бәкер звонокка баҫты. Батыр өйҙә булһа, уға ни әйтере уйланылған:

— Әсәйең ҡаты ауырып китте, — тиәсәк Бәкер. — Һине тиҙ генә алып килергә ҡуштылар.

Фатир эсендә ҡылт иткән дә тауыш ишетелмәне. Өйҙә юҡмы икән ни? Бәкер йәнә өс тапҡыр звонокка баҫты. Яуап юҡ. Хәйер, йәй көнө ниндәй малай фатирҙа бикләнеп ултыра алһын?

Бәкер, подъезд янындағы әбейҙәргә тура ҡарамаҫҡа тырышып, ситкә атланы. Балалар майҙансығында малайҙар күренә. Шуларҙан һорарға кәрәк. Ә бәлки Батыр шуларҙың араһындалыр? Хәйер, фотолағы малайға оҡшағаны күренмәй бында.

— Футбол уйнайҙыр ул, — тине малайҙар. — Яңы шунда йөрөй ине.

Бәкер Батырҙың ниндәй кейемдә икәнлеген һораштты.

Зәңгәр шортикта, аҡ футболкала икән. Түшендә «Спорт» һүҙе бар, арҡаһына «10» һаны яҙылған.

Бәкер, малайҙарға рәхмәт әйтеп, футбол майҙансығына йүнәлде. Хәҙер Батырҙы табыуы ауыр булмаç. Фотоһы бар, кейемен белә.

Тиҙҙән кирбестән яһалған ҡапҡалар араһында шау-гөр килеп туп типкән малайҙар янына килеп сыҡты Бәкер. Егет, майҙансыҡ янында туҡтап, оҙаҡ ҡына уйынсыларҙы күҙәтте. Әммә улар араһында йөҙө менән дә, кейеме менән дә Батырға оҡшағаны юҡ ине. Ҡайҙа йөрөй икән был суҡынғыр?

Бәкер бындағыларҙан малай хаҡында һорашып торманы. Шик тыуыуы бар. Урам буйлап йөрөргә кәрәк. Ҡала бәләкәй. Килеп осрамаç тимә.

Шундай уй менән Бәкер байтаҡ ваҡыт ҡала урамдарын ураны. Батырға оҡшаған малай осрамағас, йәнә утыҙ дүртенсе фатир янына килеп звоногына баçты. Әммә яуап булманы. Бәкер тағы тышҡа сыҡты. Нимә эшләргә? Батырҙы бөгөн урлай алмаһа, шеф һис шикһеҙ асыуланасаҡ. Ул ҡушылған эштең ваҡытында үтәлеүен ярата... Тимәк, малайҙы нисек тә табырға кәрәк.

Ошо ерҙә Бәкер шатлығынан саҡ ҡысҡырып ебәрмәне. Уны уҙып киткән ике малайҙың береһенең арҡаһына ат башындай итеп ун һаны яҙылған ине. Етмәһә футболкаһы аҡ, шортигы зәңгәр төçтә. Бәкер кеçәһенән теге фотоны сығарҙы. Ҡара шоморт сәс. Терпе энәләре кеүек тырпайып тора. Батыр бит был! Әгәр түшендә «спорт» һүҙе бар икән, был һис шикһеҙ Бәкер урларға тейеш малай.

Егет, шәберәк атлап, тегеләрҙе уҙып китте һәм малайҙың түшенә күҙ һалды.

Унда... ҡыҙыл хәрефтәр менән «спорт» тип яҙылған ине. Шул!

Заданиеның иң ауыры Батырҙы табыу ине. Ә инде ҡалғаны... Уныһын «һә» тигәнсә эшләйәсәк. Бына эргәһендәге дуçы ғына китһен дә...

Шундай уйға килгәс, Бәкер малайҙарҙан аруҡ ҡына артҡа ҡалды. Иң мөһиме — кәрәгенән алда уларҙың күҙенә салынмаçҡа! Шик тыуҙырмаçҡа. Юғиһә улар, ана, нимәлер һиҙенгән кеүек алан-йолан ҡаранғалар. Әллә берәүҙе көтәләр, әллә ҡасалар... Малайҙарҙың маршруты ла сәйер тойолдо. Үҙҙәре ҡайҙалыр ашыға кеүек, ә үҙҙәре бер тирәлә өйрөлә. Баралар-баралар ҙа, ҡапыл ҡырҡа боролоп, икенсе яҡҡа атлайҙар. Хәйер, уларҙы аңлай Бәкер. Үҙҙәрен разведчик итеп хис итәләрҙер. Йәнәһе, эҙәрләүҙән ҡасалар. Таныш уйын! Бәләкәй саҡтарында Бәкер ҙә дуçтары менән шулай хыяллана ине. Урамда килгән бер ағайҙы дошман шпионы итеп күҙ алдына килтерәләр ҙә ҡаса баш-

лайҙар. Йәнәһе, тегеһе уларҙың артынан ҡыуа. Үҙҙәрен һәр саҡ изге маҡсат менән йөрөгән совет разведчигы итеп тоя инеләр. Ә тормош ана нимә эшләтте Бәкерҙе. Бөгөн Бәкер, шпион кеүек, үҙҙәрен разведчик итеп күҙ алдына килтергән ике малай артынан күҙәтә. Туҡта, хискә бирелеп китте түгелме? Бирешергә ярамай. Ул бөгөн бер нәмәгә ҡарамай Батырҙы һарайға илтеп ябырға тейеш.

Былар ошолай йөрөһә, тиҙ генә айырылышмаҫтар әле! Батырҙы теге малай эргәһенән алып китке лә килмәй. Милиция эшкә тотонһа, малай уларға Бәкерҙе һүрәтләп бирәсәк. Әлбиттә, ул бөтәһен дә хәтерләй алмаҫ. Шулай ҙа былдай эштә һаҡ булырға кәрәк.

Туҡта! Былар айырылышырға итә түгелме? Эйе, йыуантаҡ малай хушлашты ла эргәләге подъезға инеп китте. Ә Батыр ары атланы. Тиҙерәк ҡыуып етергә үҙен!

Бәкер аҙымдарын тиҙләтте.

Ошо мәлдә Батыр, ниҙер һиҙенгән кеүек, алға йомолдо. Егет уны-быны уйларға ла өлгөрмәй ҡалды, теге күҙҙән дә юғалды. Бәкер, көтөлмәгән хәлдән һуң аңына килә алмайынса, бер-нисә секунд аптырап торҙо, шунан Батырҙың артынан ташланды. Ошо ерҙә ул подъездан килеп сыҡҡан теге йыуантаҡ малайға саҡ-саҡ бәрелмәне.

Бының күҙҙәре ут кеүек яна. Әйтерһең, йәнлек артынан ҡыуа сыҡҡан һунарсы!

Бәкер, ҡырҡа боролоп, ситкә атланы. Бының алдында Батыр артынан сапмаҫ. Шикләнеүе бар. Ошо тирәләге тура юлдан сыға ла ҡуя тегенең ҡаршыһына!

Туҡта, был ни эш? Бәкер саҡ ҡына ла атларға өлгөрмәне, Батыр әллә ҡайҙан йәнә йыуантаҡ дуҫы янына килеп сыҡты.

Бәкер аптырап тора. Нимә ҡылана былар? Йәнә бергәләп йөрөргә итәләрме? Тьфү генә икән дә!

Ул арала малайҙар, кемделер күҙәткән кеүек, һаҡ ҡына баҫып, өй мөйөштәренә йәшенә-йәшенә алға атланылар. Нимә күргәндәр улар унда шул тиклем! Бәкер текләберәк ҡарай. Әммә көн инде бөтөнләй ҡараңғыланды, бер ни күрерлек түгел...

Быларҙың уйындары бөткәнсә эйәреп йөрөргә тура килерме икән? Хәйер, ҡараңғы төшкәс, оҙаҡҡа һуҙмаҫтар ҙа ул уйындарын.

Бер мәл малайҙар бөтөнләй ҡаланан сығып китте. Ҡайҙа баралар төнгә ҡарай? Әллә берәүҙе эҙәрләйҙәрме? Ысынлап та, уларҙан алдараҡ кемдер атлай түгелме? Хәйер, ҡараңғы, бер ни күренмәй...

— Батыр, әсәйең ауырып китте. Ул һине табып килтерергә ҡушты, — тиһә, ышанырмы малай?

Ул арала ҡаланан байтаҡ алыҫлаштылар. Уның уттары

нөктә генә булып күренә. Нимә эшләргә? Һаман эйәреп барырғамы, әллә...

Ошо ерҙә бығаса өндәшмәй килгән малайҙарҙың үҙ-ара һөйләшкәне ишетелде.

— Ҡайҙа булды ул? — тип һораны малайҙарҙың береһе хәүефле тауыш менән.

— Ер йотҡан кеүек булды!

— Ул нимәлер әйтте шикелле?

— Ер — Ур түгел, тине. Мин асыҡ ишеттем.

— Нимә тине?

— Ер — Ур түгел!..

Киләһе секундта малайҙарҙың ҡот осҡос нәмә күргәндәре кеүек, ҡурҡҡан тауыштары ишетелде.

— А-а!..

— Соҡор!..

— Сыҡ тиҙерәк!

Бәкер ни уйларға ла өлгөрмәй ҡалды, ҡараңғылыҡтағы тауыштар ҡапыл юҡҡа сыҡты. Егет күҙҙәрен ҡыҫа биреп алға ҡараны. Малайҙар күренмәй ҙәһә! Ҡайҙа булды улар? Бәкер ергә ятып ҡарашын йәнә алға ташланы. Саҡ ҡына өҫтәрәк ағарып күк йөҙө күренә. Үләндәр әкрен генә елдә сайҡала. Һәм тирә-йүнде ялмап алған шомло тынлыҡ...

Бәкерҙе ҡурҡыу солғап алды. Ҡайҙа юғалдылар. Яңы ғына ошонда һөйләшеп тора ине бит улар. Әллә һаташа башланымы? Егет шәп-шәп атлап алғараҡ үтте. Юҡ! Әйтерһең, әкиәттәге кеүек ер йотто үҙҙәрен!

Ошонда торалар ине. Кемдер әйткән һүҙҙәрҙе ҡабатланылар. Ниндәй һүҙ ине әле?

— Ер — Ур түгел, — тип өндәште Бәкер үҙ алдына. Шул мәл ул аяҡ аҫтындағы ерҙең ҡапыл аҫҡа төшә башлауын тойҙо. Ҡото осҡан Бәкер ситкә ташланды. Әммә шунда уҡ ҡойма кеүек күтәрелгән соҡор ситенә барып төртөлдө. Егет үрмәләп уға менергә итте, тик өлгөрмәне. Стена бик тиҙ күтәрелә ине. Киләһе секундта алыҫтағы ҡала уттары күҙҙән юғалды. Шунан баш өҫтөндәге йондоҙҙар әллә ҡайҙа булды. Тирә-йүнде күҙгә төртһәң дә күренмәҫлек ҡараңғылыҡ солғап алды...

Ер аҫтында Батыр менән Хәлит үҙҙәренең тәпәш кенә түбәле оҙон бер коридорҙың осонда тороуҙарын аңланылар.

Ниндәй урын был? Ер аҫтына килеп төштөләрме? Нисек инде улай? Ҡола ялан уртаһында тор ҙа, ҡапыл уйламағандан, ер аҫтына барып эләк, имеш. Әллә төш күрәләрме?

Малайҙар ҡурҡыштарынан бер-нисә минут иҫтәренә килә алмай торҙолар. Беренсе булып Батырҙың теле асылды. Ул тирә-яғына күҙ һалды ла:

— Ә теге ҡыҙ ҡайҙа? — тип шыбырланы.

— Һиндә ҡыҙ ҡайғыһы! — Хәлит иламһыраны. — Кәрә-

ге бар ине! Шуның арҡаһында ошонда килеп эләктек! Уға эйәреп йөрөгән мин — иҫәр! Һин әле!.. Хәҙер нисек? Унда әсәйем...

Хәлит шыңшый ҙа башланы.

— Мыжыма әле! — Батырҙың да йөрәге шомланып тибә башланы. Әммә быны һиҙҙереп торманы. Хәҙер илауҙан ни файҙа? Ҡотолоу хаҡында уйларға кәрәк. — Әйҙә әле!

— Ҡайҙа? Мин бер ҡайҙа ла бармайым! Һиңә эйәрһәң...

— Улайһа, ҡал! Мин киттем.

— Туҡта! Хәҙер нисек сығабыҙ бынан?

— Илап торһаң, тиҙерәк сығырһың.

Батыр коридорҙың бер яҡ стенаһына һыйына-һыйына алға атланы. Хәлит уға эйәрҙе.

Шул ерҙә малайҙар үҙҙәренең артында ниндәйҙер тауыш ишетте. Ул ҡайнап килгән самауыр шыжлауын да хәтерләтә, самолет геүләүенә лә оҡшап китә. Батыр менән Хәлит тиҙ генә эргәләге бағаналар артына йәшенде. Күп тә үтмәй, яңы ғына малайҙар торған ерҙә, бер ир кеше күренде. Ул да бында осраҡлы килеп эләккән, күрәһең. Ҡара урманда аҙашҡан кешеләй, алан-йолан ҡарана. Күҙҙәре ҙурайған, хәрәкәттәре борсоулы.

— Ниндәй ер был? Ҡайҙа эләктем? Ә тегеләр ҡайҙа булды? — тип хәүефле тауыш менән һөйләнде ул, шунан ҡарана-ҡарана коридор буйлап атланы.

Теге боролошҡа инеп юғалғас, малайҙар бер-береһенә ҡаршты.

— Кем ул? — тип һораны Хәлит.

— Мин ҡайҙан беләйем? — Батыр йәшенгән еренән сыҡты.

— Ошо мәмерйәнең хужаһылыр бәлки?

— Юҡ, — тине Батыр. — Ишетмәнеңме? «Ҡайҙа эләктем?» — тип һөйләнде. Беҙҙең кеүек тәүгә килеп ингән. Әйҙә артынан барайыҡ әле. Ҡайҙа барып сығыр икән?

Малайҙар стена буйындағы бағаналарға йәшенә-йәшенә алға йүгерҙе. Бәлки, был кешенән ҡасып йөрөргә кәрәкмәйҙер. Бергәләшһәләр, был хәлдән ҡотолоу юлын тиҙерәк табырҙар? Шулай ҙа Батырҙың күңелендәге шом, әлегә был иргә күренмәҫкә ҡушты.

Ә теге ҡыҙ ҡайҙа юғалды? Ул да ошонда төшөп китте түгелме? Бында йәшәйме икән ни? Әгәр ысын булһа, ғәжәп был! Малайҙың башында тиҫтәләгән һорау, ә береһенә яуап юҡ.

Башында ошондай уйҙар ҡайнаған малайҙың яурынына кемдер тейеп алды. Хәлит төртә икән тип, Батыр тәүҙә әйләнеп тә ҡарманы, һаман коридорҙың теге осондағы иргә текәлеп тороуын белде.

Бер мәл йәнә уның яурынына төрттөләр.

Батыр артына әйләнде һәм саҡ ҡолап китмәне.

Уның янында ҡыҙыл лампочка-күҙҙәрен йылтыратып робот баҫып тора ине. Ул бөтә ҡиәфәте менән кешегә оҡшаған. Ике ҡулы, ике аяғы бар. Тик улар дүрткел-тимерҙән эшләнгәндәре күренеп тора. Башы ла ҡумта кеүек. Танауы юҡ, ә бына ауыҙ кеүек ере бар.

Робот Батырға ҡарап ниҙер әйтте.

Ҡаушап ҡалған малайҙар ни тиергә лә белмәне. Теге һүҙҙәрен яңынан ҡабатланы.

— Нимә ти ул? — тип һораны Хәлит.

— Мин ҡайҙан беләйем?

— Бәлки ул бынан сығыу юлын беләлер?

— Белә, әлбиттә. Тик безгә әйтмәйәсәк. Ул арала робот йәнә ниҙер әйтте.

Малайҙар бер-береһенә ҡарашып алды ла, хәүефһеҙерәк булыр тип, китеү яғын ҡараны. Әммә ике аҙым да яһарға өлгөрмәнеләр, робот уларҙың ҡулынан эләктереп алды.

— Ебәр! — тип ҡысҡырып ебәрҙе Хәлит. — Ауырта бит!

Робот малайҙың иламһырауына иғтибар итмәне. Боролдо ла, уларҙы етәкләп, ҡайҙалыр алып китте. Малайҙар тартҡылашып ҡараны, әммә ҡулдарын роботтың усынан һурып ала алманы. Теге ныҡ тотҡайны.

— Ҡайҙа алып бара ул? — тип һораны Хәлит.

— Хужаларына.

— Һин ҡайҙан беләһең?

— Башҡа ҡайҙа алып барһын?

— Улар бандиттар булып сыҡһа?

— Ул саҡтамы... Ул саҡта бөттө: беҙҙе юҡ итәсәктәр.

— Мин ысынлап һорайым, ә һин... — Хәлит асыуланды һәм тынып ҡалды.

Коридорҙың бер мөйөшөнә килеп еткәйнеләр, уларҙың ҡаршыһына ер өҫтөндә малайҙарға эйәреп йөрөгән теге ҡыҙыл күлдәкле ҡыҙ килеп сыҡты. Ул бында! Тимәк, ысынлап та, күҙәткән! Тимәк бандиттарҙың ҡушыуы буйынса йөрөгәнме? Бәлки ул хәйлә менән малайҙарҙы эйәртеп алып килгәндер ҙә... Ҡапҡанға эләктеләрме икән ни? Малайҙар ҡаушауҙарынан, ҡурҡыуҙарынан ни өндәшергә белмәне.

Батыр менән Хәлитте күргәс, ҡыҙ ҙа бик ныҡ ғәжәпләнде шикелле. Ҡапыл малайҙар янына йүгереп килде, тәүҙә береһенә, шунан икенсеһенә аптырап ҡараны. Шунан роботҡа ниҙер әйтте.

Теге малайҙарҙы ысҡындырҙы ла китеп барҙы. Ҡыҙ малайҙарҙан:

— Һеҙ бында нисек килеп эләктегеҙ? — тип һораны. Ҡыҙҙың йомшаҡ тауышын ишеткәс, малайҙарға йән инде. Батыр менән Хәлит бер-береһен бүлә-бүлә үҙҙәре менән

булған мажараларҙы һөйләп бирҙеләр. Ҡыҙ тәүҙә ҡысҡырып көлдө, шунан етдиләнде.

— Ә был ниндәй ер ул? — тип һораны Батыр тирә-яғына күҙ һалып.

— Былмы... — Ҡыҙ икеләнде. — Мин быны әйтә алмайым.

— Ә беҙ, ысынлап та, ер аҫтындамы? — тип һораны Хәлит.

— Эйе.

— Ысынмы? — Малайҙар ҡаушауҙарынан ни әйтергә лә белмәне.

Бер аҙҙан Батыр телгә килде:

— Тик уның ишеге ҡайҙа?

— Ә ул күренмәй.

— Ә һин нисек таптың?

— Миндә махсус прибор бар. Уның менән станцияның ишеген ҡап-ҡараңғы төндә лә табып була.

«Станция» һүҙе Батырҙы бөтөнләй аптыратты. Ниндәй станция? Кем төҙөгән? Ниңә ул хаҡта бер кем дә белмәй?

— Бында тормайыҡ әле, — тине ул арала ҡыҙ. — Әйҙәгеҙ минең арттан.

Бер аҙ атлағас, ниндәйҙер ишек янына килеп сыҡтылар. Ҡыҙ нисектер ишекте асты. Был бәләкәй генә бүлмә икән. Өҫтәле, ултырғыстары бар. Ҡыҙ малайҙарға ултырырға ҡушты.

— Ә һин был станцияның ишеген нисек астың? — тип һораны Хәлит.

— Ә һеҙ нисек астығыҙ? — тип көлдө ҡыҙ.

— Беҙ асманыҡ. Ул үҙе асылды ла беҙҙе бында алып төштө.

— Яңылышаһығыҙ, — тине ҡыҙ. — Һеҙ асҡанһығыҙ ишекте.

— Нисек? — Малайҙар бер ни аңламаны.

— Ер — Ур түгел, тип әйттегеҙме?

— Әйттек.

— Минән ишеттегеҙме?

— Эйе.

— Шул һүҙҙәр бөгөнгө кискә станцияның ишеген асыусы асҡыс.

— Ә иртәгә?

— Иртәгә икенсе төрлөһө буласаҡ.

— «Ер — Ур түгел» тигән һүҙҙәр нимәне аңлата? — тип һораны Батыр.

— Улмы?.. Уны әйтергә ярамай әле, Батыр, — тине ҡыҙ.

— Нимә? Һин минең исемемде ҡайҙан беләһең?

— Һинекен дә, Хәлиттекен дә беләм инде. Малайҙар шаҡ ҡатты.

— Ә һинең исемең нисек? — тип һораны Хәлит.
— Әмилә.
— Әмилә, һин беҙҙе бынан сығара алаһыңмы? — Хәлит ҡыҙға ҙур өмөт менән ҡараны.
— Әлегә юҡ.
— Ниңә? — Малайҙарҙың тауышы шыбырлап сыҡты.
— Сөнки ишекте әстән асыусы асҡыс икенсе. Мин уны белмәйем. Шулай ҙа... Һеҙ ултырып тороғоҙ. Мин хәҙер. — Ҡыҙ урынынан торҙо, ишек янына килгәс, ниҙер шыбырланы. Шунда уҡ ишек асылды. Ҡыҙ сығып китте.
Малайҙар бер-береһенә ҡараштны.
— Ишекте нисек асҡанын аңланыңмы? — тип һораны Батыр.
— Ниҙер әйткәйне...
— «Ер — матур планета», тине.
— Ә ҡайҙа китте ул?
— Белмәйем.
— Оҡшамай миңә был ҡыҙ. — Хәлит тирә-яғына ҡаранды. — Минеңсә, ул хужаларын саҡырырға китте. Улар килһә, беҙгә бынан сығыу юҡ! Беҙ бит ҡалаға ҡайтҡас, бөтәһен дә һөйләйәсәкбеҙ. Шуға улар...
— Эйе. — Батыр уйға ҡалды. — Ҡасырға кәрәк. Үҙебеҙгә табырға кәрәк ҡотолоу юлын. Әйҙә!
Батыр ишеккә яҡынлашты:
— Ер — матур планета. Ишек асылды...

## *Робот менән алыш*

Коридор осонда таныш ир күренде. Малайҙар шунда уҡ эргәләге бағаналар артына йәшенде. Ҡыланыштарына ҡарағанда был ағай ҙа Батыр менән Хәлит хәлендә ҡалған. Һаман алан-йолан ҡарана, йөҙө уғата борсоулы. Бынан бәлки йәшенеп торорға ла кәрәкмәйҙер. Бергә тиҙерәк табырҙар ине ҡотолоу юлын. Батыр дуҫына ҡараны. Йәнәһе, ни эшләйбеҙ? Хәлит яурындарын ғына һелкетте.
Батыр саҡ ҡына икеләнде лә тәүәккәлләне:
— Һаумыһығыҙ, — тине малай, тегенең ҡаршыһына сығып. — Һеҙ кем?
Батыр менән Хәлитте күргәс, ят кеше ҡыуанып китте:
— Был һеҙме? Нисек эләктек беҙ бында? — Хәлен иҫенә төшөргәс, йәнә төшөнкөлөккә бирелде. — Ҡайһылай итеп сығырбыҙ?
Батыр был ағайға өмөт бағлағайны. Оло кеше. Ҡотолоу юлын тиҙерәк табыр, йәнәһе. Әммә иламһырап тороуына ҡарағанда унан рәт сыҡмаҫтай күренә. Ана йыуаш Хәлит үҙен унан тынысыраҡ тота. Һөйләштеләр, таныштылар.

Исеме Бәкер икән. Күрше ауылдан ҡалаға ҡайтып барған. Арығас, ялан уртаһында ял итергә ултырған. Шул мәл көтмәгәндә ер уйылып киткән дә Бәкер бында эләккән.

— Нимә эшләйбеҙ? — тип һораны Бәкер, үҙенең тарихын һөйләп бөткәс.

— Борсолмағыҙ, тип тынысландырырға тырышты уны Батыр. — Берәй сараһын табырбыҙ.

Ниндәй сараһын тапһын инде ул? Янындағыларҙы тынысландырыу өсөн генә әйтә инде. Ышаныслы һүҙ ҙур көскә эйә шул. Ана бит Бәкер ҙә, Хәлит тә Батырға өмөт менән текәлеп ни әйтерен көтөп тора.

Батыр тирә-яғына күҙ һалды. Ни эшләргә кәрәклеген белеү өсөн үҙҙәренең ҡайҙа килеп эләгеүен аңларға ине лә бит. Әмилә әйтергә теләмәне. Күрәһең, ер аҫты станцияһы хаҡында бер кем дә белергә тейеш түгелдер...

Ер кешеләре коридор буйлап алға атланы. Тирә-йүнгә ҡолаҡ һалып һаҡ ҡына киләләр. Алда «шылт» иткән тауыш ишетелеү менән эргәләге колонналар артына сумалар. Бына уларҙың янынан бер робот үтеп китте. Ул юғалыу менән йәнә ҡуҙғалдылар. Инде ике боролош артта ҡалды, әммә коридорҙың осо күренмәй. Шундай оҙонмо икән ни? Нисек төҙөгәндәр тиген уны!

Ҡапыл Батыр үҙенең артында ҡысҡырған тауыш ишетте. Әйләнеп ҡарағас, ҡото осто. Уларҙың янында ғына теге робот тора. Ул бер ҡулы менән Бәкерҙең беләгенән эләктергән, икенсеһен Хәлиткә һуҙып маташа. Әммә йылғыр малай үҙенә ҡурҡыныс янауын белгәс тә ситкә ырғыны. Ә Бәкер ҡурҡышынан яу һала.

— Ҡысҡырмағыҙ! — Батыр теге кешене тынысландырырға теләне. — Ишетәләр бит!

— Ҡотҡарығыҙ! — тип ялбарҙы ҡото осҡан Бәкер. — Ҡулымды өҙөп ала бит хәҙер!

Ул арала робот буш ҡулы менән Батырҙы эләктерергә итте. Әммә малай һаҡ тора ине — тайпылырға өлгөрҙө. Батыр мәктәптә электроника түңәрәгенә йөрөгәйне бер мәл. Һәр роботтың һүндерә торған урыны була. Ана түшендә бер ырғаҡ күренә. Әгәр шуны икенсе яҡҡа борһаң, тимер кеше йоҡларға тейеш. Тик нисек эшләргә быны? Яҡынлашыу менән робот тотоп аласаҡ та тумблерға яҡын ебәрмәҫ.

— Батыр, Батыр! — тип һаман һөрән һалды Бәкер. — Ни ҙә булһа эшләгеҙ. Үлтерә бит мине!

Батыр Хәлитте эргәһенә саҡырҙы:

— Мин хәҙер уның янына барам...

— Ул бит һине эләктерәсәк!

— Тәүҙә тыңлап бөт! Мине тотҡас, уның буш ҡулы ҡалмай. Шул саҡ һин, ана күрәһеңме? Түшендә тумблеры бар. Шуны икенсе яҡҡа бороп ҡуйырһың.

— Шунан ни була?
— Ул йоҡлап китә.

Малайҙың тойомлауы дөрөҫ булып сыҡты. Тиҙҙән роботтоң түшендәге тумблер икенсе яҡҡа боролдо. Шунда уҡ ер аҫтында йәшәүсе тимер кеше бәлйерәп төштө. Уның бармаҡтарынан ҡотолған Бәкер Батырҙы ҡосаҡлап алды:

— Рәхмәт! Был яҡшылығыңды ғүмергә онотмам! Ошо хәлдән һуң Бәкер менән Хәлит Батырҙың ауыҙына ҡарап ҡалдылар. Әйтерһең, ул был донъяны яҡшы белә, бына һәйбәтләп уйлар ҙа ҡотолоу сараһын да табыр. Тик малайҙың башына хәлдәрен еңеләйтерлек бер генә лә фекер килмәй.

Нисек кенә уйлаһаң да, коридор буйлап ары атларға ғына ҡала. Бәлки ниндәйҙер яйы килеп сығыр.

Ҡапыл арттан:

— Туҡтағыҙ! — тигән бойороҡ ишетелде. Улар баҫҡан урындарында ҡатып ҡалды.

## *Әмилә ярҙам итергә теләй*

Батыр әйләнеп ҡарамаҫ борон һиҙенде: тауыш теге ҡыҙҙыҡы ине. Хужаларын эйәртеп килгәнме, тигән уй йылт итеп үтте малайҙың башынан. Батыр йәһәт әйләнеп артына ҡараны һәм еңел һулап ҡуйҙы: Әмилә яңғыҙы ине.

— Ниңә ҡастығыҙ? — тип һораны ҡыҙ.

— Һин киткәс. — тип аҡланырға итте Батыр.

— Ер өҫтөнә сығарыусы ишектең паролен тикшергәйнем. Үҙгәрткәндәр, — тине Әмилә. Шунан ситтәрәк торған егеткә боролдо. — Ә һеҙ ҡайҙан килеп сыҡтығыҙ?

Бәкер, ҡыҙҙың яғымлы һөйләшеүен күреп, тынысланды һәм үҙенең тарихын һөйләп бирҙе.

— Станцияла өс сит кеше! — Әмилә башын тотто. — Бөтәһе лә минең арҡала! Әгәр белеп ҡалһалар!.. Әйҙәгеҙ, минең бүлмәгә тиҙерәк. Шунда уйлашырбыҙ.

Ҡыҙ ашығып алға атланы, башҡалар уға эйәрҙе. Күп тә атламанылар йоҡлап торған роботты тап иттеләр. Ҡыҙ уны уятырға итте лә кире уйланы.

— Һеҙ һүндерҙегеҙме?

— Ул үҙе беренсе булып бәйләнде, — тип аҡланырға маташты Хәлит.

Бүлмәгә ингәс, бер аҙ өндәшмәй торҙолар. Ер кешеләре Әмиләнең ни әйтерен көттө.

— Бер юл бар. — Ҡыҙ икеләнде. — Станцияның үҙәк пультында пароль яҙылған.

Хәлиттең күҙҙәре йылтыраны:

— Барайыҡ та беләйек!

— Пультты һаҡлайҙар.
— Их! Булманы... — Хәлит көрһөнөп ҡуйҙы.
— Ә кемдәр һаҡлай? — Батырҙың башына бер уй килде.
— Роботтар.
— Нисәү улар?
Әмилә малайға шикләнеп ҡараны:
— Улар менән һуғышырға итәһеңме?
— Юҡ. Ваҡытлыса ғына һүндереп торғанда... Был уй һәммәһенә лә оҡшаны.
— Тик улар бик көслө, — тип икеләнде ҡыҙ. — Үҙҙәренә бер кемде лә яҡын ебәрмәйҙәр.
— Коридорҙа тап булғаны ла бик көслө ине. — Хәлит көлөмһөрәне.
— Бәлки һынап ҡарайыҡ бәхетте? — Батыр янындағыларға күҙ йүгертте.
— Әйҙә! — Бәкергә лә был уй оҡшаны. — Тик минең ҡулды һындыра яҙҙы бит теге шайтан. Һаман ауыртып тора...
— Ярай, — тине Батыр. — Хәлит менән мин уларҙың ҡулдарынан тоторбоҙ, ә һеҙ тумблерҙы борорһоғоҙ.
— Барып сығырмы икән? — тип борсолдо ҡыҙ.
Улар өсәү. Береһен һүндереү менән ҡалған икәүһе станция етәксеһенә хәбәр итәсәк...
Барыһы ла уйға ҡалды. Бер ни ҙә килеп сыҡмаҫмы икән ни?

## *Айһылыу апай Батырҙы эҙләй*

Айһылыу апай төштән һуң фатирына ҡат-ҡат шылтыратты, әммә трубканы алыусы булманы. Күпме әйтте Батырға: «Өйҙән сыҡма, бикләп дә китап уҡы», — тип. Юҡ, тыңламаған. Әгәр ошолай аптыратыр булһа, ауылға ебәрергә тура килер... Уйлаһаң, ун ике йәшлек малайға көнө буйы өйҙә яңғыҙ ултырыуы ла ауырҙыр инде. Етмәһә, Айһылыу апай үҙе лә улына эштең ниҙә икәнен аңлатманы. Батыр быны әсәһенең үҙ һүҙлелеге тип уйлайҙыр инде. Ә ысынында иһә...
Ҡаланың һатыу итеү селтәренә бурҙар оялағанын Айһылыу апай күптән түгел һиҙҙе. Ул әллә нисә тапҡыр иғтибар итте: складҡа килгән тауарҙар магазиндарға эләкмәй. Шунан ҡайҙандыр аҡсаһын килтерәләр. Нимә ҡыландыралар?
Ярты ай элек Айһылыу апай был хаҡта милицияға хәбәр итте, хатта яңы тауарҙар килгән мәлдә склад янына күҙәтеүселәр ҡуйырға күндерҙе тегеләрҙе. Әммә бурҙар хәйләкәрерәк булып сыҡты. Баҡһаң, уларҙың кемеһелер

милиция менән бәйләнеш тота икән. Күҙәтеү ҡуйылған ике төн складтан тауар алырға килгән әҙәм булманы.

Шунан һуң бер көндө кис ике билдәһеҙ кеше Айһылыу апайҙы ҡурҡытып маташты.

Батырҙың әсәһе тәү мәл ҡаушап ҡалды. Беренсе уйы — милицияға хәбәр итеү ине. Шунан туҡталып ҡалды. Һораһалар, нимә әйтә ала? Шаһиттары юҡ. Складты күҙәтеп, бер ни сығара алмағас, юҡты һөйләйһегеҙ, тигәйнеләр. Йәнә ышанмаҫтар. Улайһа, ни эшләргә? Ярты юлда туҡтарғамы? Тимәк, тегеләр дәүләт елкәһен кимерә бирһенме? Юҡ, әгәр сигенһә, Айһылыу апай үҙ-үҙен күрә алмаҫ. Хәйләкәрерәк булырға кәрәк. Ошондай уй менән ул складты бер үҙе күҙәтә башланы. Яңы тауарҙар килтергәс, ике кис склад янында уралды ул. Әммә килгән кеше булманы. Әллә былар кире уйланымы, тип икеләнде Айһылыу апай. Әммә өсөнсө кис тотто тегеләрҙе. Тик хата ебәрҙе. Йәшенеп кенә ҡарап торорға ла китергә ине. Иртәгеһенә складты тикшереп акт яҙһалар бөтәһе лә асыҡланыр ине. Әммә Айһылыу апай уларҙы тиҙерәк фашларға теләне, склад янына барҙы... Хәйер, быныӊ да файҙаһы тейҙе. Тегеләрҙең береһен танyны.. Ҡалала асылған кооперативта эшләй ул. Тимәк, һәйбәт аяҡ кейемдәрен, башҡа яҡшы тауарҙарҙы кооператив аша ҡыйбат хаҡҡа һаталар. Ябай спекуляция.

Айһылыу апайҙы күргәс, тегеләр складтан бер ни ҙә алып торманы, буш ҡул менән китеп барҙы. Шуныһы үкенесле. Әгәр Айһылыу апай сығып күренмәһә, иртәгеһенә складты тикшерер инеләр ҙә... Ары ни эшләргә? Күрәһең, күҙәтеүҙе дауам итергә тура килер. Тик был юлы аҡыллыраҡ булыр. Бурҙарға күренеп тормаҫ, урлашҡандарын белер ҙә иртәгеһенә кәрәк ергә әйтеп тикшереү ойоштороp. Ә әлегә Батырҙы ауылға оҙатырға кәрәк. Бурҙар үҙҙәренең Айһылыу апайға склад янында күренеүҙәрен ғәфү итмәҫтәр, Батыр менән ни ҙә булһа эшләргә маташырҙар.

Айһылыу апай ошондай уйҙар менән йүгерә атлай ҡайтып етте. Көндөҙ Батыр ашар тип ҡалдырған ризыҡ һыуытҡыстан сығарылмаған да. Тимәк иртәнсәк сығып киткән дә ҡайтмаған. Ҡайҙа ул?

Айһылыу апай ишек алдына сыҡты. Ана, күрше подъезда йәшәгән ҡыҙҙар уйнап йөрөй. Күрмәгәндәрме икән Батырҙы?

Уларҙан һорашҡас, Айһылыу апайҙың теҙ быуындары ҡалтырап китте.

— Төштән һуң Батырҙы ҡара күҙлек кейгән бер ағай эҙләй ине, — тине ҡыҙҙар.

Ниндәй ағай? Тегеләрме?

Айһылыу апай футбол майҙансығына йүгерҙе. Ана, туп

типкән малайҙарҙың береһе Батыр түгелме? Аҡ футболка, зәңгәр шортик кейеп алған. Әммә яҡынлашҡас, әсә үҙенең яңылышҡанлығын күрҙе.

— Юҡ, — тине малайҙар. — Батыр бөгөн бында булманы.

Әсәнең йөрәген ҡурҡыу солғап алды. Ҡайҙа уның бәләкәсе, берҙән-бере, Батыры? Ҡапыл ҡолағы төбөндә: «Әгәр туҡтамаһаң, малайыңды юҡ итербеҙ», — тигән һүҙҙәр ишетелгәндәй булды. Урлағандармы? Ашарға ла, эсергә лә бирмәйенсә бикләп ҡуйғандармы?

Айһылыу апай, ҡайҙа баҫҡанын белмәйенсә, өйөнә ҡарай йүгерҙе.

*Әмиләнең ярҙамы.*

Төнгө ун ике тирәһендә станцияның пульты урынлашҡан ергә яҡынлаштылар. Әмилә тирә-яғына ҡараны. Коридорҙа бер кем күренмәй.

— Һеҙ колонналар артына йәшенегеҙ, — тине ҡыҙ.

Быңа стеналағы ишеккә яҡынлашып ниҙер әйтте. Теге асылып китте. Ҡыҙ шунда инеп китте.

Ер кешеләре, тын да алмай, ары ни булырын көттө. Уларҙың уйы былай: Әмилә пульт янына инә лә роботтарҙы берәмләп коридорға саҡырып сығара. Бында ер кешеләре уны өсәүләп һүндерә. Килеп сығырмы уйҙары?

Күпмелер ваҡыт үтте. Ҡапыл ишек асылды. Унда Әмилә менән бер робот күренде. Быңа ҡыҙ тимер кешене Бәкер менән малайҙар йәшенгән ергәрәк алып килде.

Шул ваҡыт ике малай, колонна артынан сығып, роботтың ҡулдарына йәбеште. Тимер кеше үҙен бик тиҙ ҡулға алды һәм нисектер ысҡынып үҙе Батыр менән Хәлиттең елкәһенән эләктерҙе. Шул ерҙә Бәкергә лә сират етте. Ул йыйын килтерҙе лә роботтың түшендәге тумблерға үрелде. Теге, ниҙер һиҙенеп, малайҙарҙы ысҡындырҙы. Әммә һуң ине инде — Бәкер тумблерҙы борорға өлгөрҙө. Шунда уҡ робот йәнһеҙ тимер һөлдәгә әүерелде.

Икенсе роботты ла анһат ҡына эштән сығарҙылар.

— Быларҙан файҙа юҡ бит, — тине Бәкер.

— Ә улар янына сит кеше инә алмай, — тип аңлатты Әмилә. — Станция етәксеһе менән минән башҡа пульт бүлмәһенең паролен бер кем белмәй.

— Ә һин ни өсөн беләһең? — Хәлит шулай һораны.

— Сөнки... — Ҡыҙ саҡ ҡына икеләнеп торҙо. — Станция етәксеһе минең атайым.

Ер кешеләре шаҡ ҡатты. Быңа бит ул нисек! Бында килер алдынан ғына Әмилә Ер кешеләренә станцияның серен асып һалғайны. Шунан уларҙы иҫкәртеп тә ҡуйҙы:

— Мин һеҙҙе ҡотҡарам. Ҡотҡарырға тырышам. Әммә һеҙ

ҙә миңә һүҙ бирергә тейешһегеҙ. Ер өҫтөнә күтәрелгәс, бында күргәнегеҙҙе оноторға, бер кемгә лә һөйләмәҫкә тейешһегеҙ.

— Ни өсөн?

Ҡыҙ аңлатып бирҙе. Үҙҙәренең Урҙан икәнен һөйләне. Был турала Ер кешеләре белергә тейеш түгеллеген әйтте.

— Һүҙ бирәбеҙ, — тине Бәкер, Батыр һәм Хәлит.

— Ер кешеләренең һүҙеме? — тип һораны ҡыҙ. Былар аңламағас, өҫтәне. — Беҙҙә иң оло ант ул «Ур кешеләренең һүҙе» тип әйтеү. Унан һуң бер ҡасан да биргән һүҙеңдән ҡайтырға ярамай.

— Ер кешеләренең һүҙе, — тинеләр малайҙар.

Һәм бына Ер кешеләре яңы бер хәбәр ишетәләр: Әмилә станция етәксеһенең ҡыҙы. Бынан ҡурҡырғамы? Әллә ҡыуанырғамы? Уларҙың тынып ҡалыуын ҡыҙ үҙенсә аңланы.

— Һеҙ борсолмағыҙ минең өсөн. Атайыма нисек тә аңлатырмын әле.

— Улайһа, тиҙерәк өсөнсө роботты сығар, — тине Бәкер. Малайҙар, урындарығыҙға!

Ярты минуттан Әмилә коридорға өсөнсө роботты алып сыҡты. Шунда уҡ ике малай тимер кешегә ташланды, ә Бәкер тегенең түшендәге тумблерға үрелде. Бына ул бер борҙо, ике... Тик әллә еренә еткергәнсе борманы, әллә икенсе сәбәп булды — ни генә булһа ла робот һүнмәне.

Ул тумблерҙы борғослай башлауҙарын аңлағас та малайҙарҙы ситкә атып бәрҙе лә Бәкерҙең ҡулын шаҡырайта тотоп алды.

— А-а! — тип аҡырып ебәрҙе егет һәм кәкрәйеп төштө.

Киләһе секундта робот ниҙер мығырланы.

— Ул станция етәксеһенә хәбәр итте! — тип ҡысҡырҙы Әмилә. — Тиҙерәк!

Ике малай ырғып тороп, киренән роботҡа ташланды. Нисек тә уны һүндерергә кәрәк! Был мәлдә Әмилә йүгереп пульт бүлмәһенә инде. Уға тиҙерәк төп ишекте асыусы паролде белергә кәрәк! Бына пульт! Ҡыҙҙың ҡарашы уның тиҫтәләгән лампочкалары буйлап йүгерҙе. Ана «төп ишек» тигән кнопка! Ҡыҙ уға баҫты. Шунда уҡ экранда ике һүҙ яҙылды:

*«Бөгөнгө төнгә паролдәр:*
*Сығыу — һуңғы төн.*
*Инеү — Хуш, Ер».*

Әмилә коридорға атылды. Тиҙерәк! Хәҙер бында атаһы килеп етәсәк!

Коридорҙа көрәш дауам итә ине әле. Роботты һүндерә алмағандар. Ярай, исмаһам, тимер кеше малайҙар менән Бәкерҙе ыҫҡындырған.

— Минең арттан! — тип ҡыҫҡырҙы Әмилә Ер ке-
шеләренә һәм коридор буйлап йүгерҙе.

— Ул беҙ ҙән ҡалмаҫ бит! — Батыр ҡыҙға эйәрергә лә
эйәрмәҫкә лә белмәне.

— Роботҡа пультты ташларға ярамай!

Ер кешелә ре Әмилә артынан ташланды. Бер мәл стенаға килеп төртөл дөләр ҙә «аһ» та «уһ» килеп туҡтап ҡалдылар. Әмилә мөйөш тәге микрофон кеүек нәмәгә яҡынлашты.

— Һуңғы т гән! — тип өндәште ул.

Шул мәл Бәкер менән малайҙарҙың баш өҫтөндәге түбә аҫҡа төшә ба шланы, Ер кешеләре ситкә тайпылды. Хәйер, ҡурҡыуҙары бушҡа булған. Түбә эргәләге майҙансыҡҡа ятты.

Әмилә баҫҡ кыс буйлап уға күтәрелде:

— Менегеҙ бында!

Ер кешелә ре «һә» тигәнсә ҡыҙ янына күтәрелде. Бәкер аяҡ аҫтындағ ы үлән-сәскәләргә иғтибар итте. Станцияның ишегеме икә н ни? Киләһе секундта аяҡ аҫтындағы ер өҫкә күтәрелә баш ланы. Бына эргәләге коридор күҙҙән юғалды, уларҙы ҡойм а кеүек уратып алған стена түбәнәйгәндән-түбәнәйергә т отондо, тирә-йүн ҡараңғылыҡҡа сумды һәм... Шул ерҙә Бә кер менән малайҙар үҙҙәренең ҡола ялан ур-таһында торо уҙарын һиҙҙе. Алыҫта ҡала уттары емелдәй, баш өҫтөндә меңәрләгән йондоҙҙар күҙ ҡыҫа. Әкрен генә ел иҫә. Аяҡ аҫт ындағы үләндәрҙең сайҡалған саҡта бер-бе-реһенә тейеп ҡыштырлауы ишетелә...

Бөтәһе лә элеккесә, бер ни үҙгәрмәгән. Әйтерһең, ма-лайҙар ер аҫ тында булмаған, унан нисек сығырға белмәй аптырап йөр мәгән... Бәлки, был, ысынлап та, төш кенә-лер? Юҡ, был на бит уларҙың янында сит планета ҡыҙы — Әмилә тора. Тимәк, алыҫ планетанан килгән кешеләр бар Ерҙә.

— Хушығ ыҙ! — тине Әмилә.

— Рәхмәт һиңә! — тине Батыр.

— Әйе, ҙур рәхмәт. — Уға Бәкер менән Хәлит ҡушылды.

— Биргән һүҙегеҙҙе онотмағыҙ.

— Юҡ, юҡ! — тине Бәкер. — Ант-шинт. Бер кемгә, бер ауыҙ һүҙ ыҫҡ ындырмайбыҙ. Малайҙар, ишеттегеҙме?

— Ишетте к. — Батыр ҡоро ғына өндәште. Бәкерҙең уларға ышан мауына асыуы килде уның.

— Һеҙ бөг ән китәһегеҙме? — тип һораны Хәлит.

— Әйе.

— Башҡа күрешмәбеҙме? — Хәлиттең тауышы ҡайғылы килеп сыҡты.

— Мин ҡа лаға сыға алмам шул... Хәйер.. — Әмилә саҡ ҡына уйланы п торҙо. — Беҙ төштән һуң ғына осабыҙ Урға! Минме... Ми тағы булам әле ҡалала!

— Дөрөҫ! — тине Хәлит. — Беҙ һиңә бүләктәр бирербеҙ! Урҙағы балаларға! Шулай бит, Батыр?

— Молодец, Хәлит! — Бәкер малайҙың яурынына һуҡты. — Эйе, килеп сыҡ ҡалаға, Әмилә. Малайҙар һине көндөҙгө унда кинотеатр алдында көтөр. Ризамы?

Ҡыҙ риза ине. Бында ул Ер кешеләре менән тағы бер хушлашты ла:

— Хуш, Ер! — тип өндәште. Шунда уҡ Әмилә торған ер аҫҡа төшә башланы. Күп тә үтмәне ул станция эсендә тора ине. Ҡыҙ етәксе пультына табан атланы. Роботтар Лайонға бөтәһен дә һөйләгән, әлбиттә. Атаһы бик асыуланыр инде. Әммә Ер кешеләре бит һүҙ бирҙе, тимәк, бер кемгә бер ни әйтмәйәсәктәр.

Коридорҙа һүндерелгән роботтар күренмәй. Тимәк, уларҙы уятҡандар. Ҡыҙ пульт бүлмәһе янына килде. Бына паролде әйткәс, ишек асылды. Ҡыҙ эскә атланы...

### *Мәкерлек*

Әмилә юғалғас та Бәкер, тирә-яғына ҡаранып, ниҙер эҙләй башланы.

— Нимә кәрәк? — тип һораны Батыр.

— Ҙурыраҡ таш йәки таяҡ күренмәйме? — Бәкер эйелеп һәрмәнергә тотондо.

— Нимә эшләтәһегеҙ уны?

— Күп белһәң, тиҙ ҡартайырһың. — Бына ул кипкән ағас ботағы табып алды, шуны торған еренә ҡаҙай башланы.

— Станцияның ишеген билдәләйһегеҙме? — Батыр уҫал ғына өндәште.

— Юҡ та... — Бәкер устарындағы саңды ҡаҡҡыланы. — Ярай, ваҡыт бик һуң. Ҡайттыҡ.

— Әгәр һеҙ станцияға кире килергә уйлаһағыҙ... — Батырҙың тауышы ҡаты сыҡты. — Һеҙ бит һүҙ бирҙегеҙ!

— Бирҙем. — Бәкер тыныс ҡына һөйләшә. — Унан сығырға ла уйлаған юҡ. Ҡурҡма, мин һүҙемдә тора беләм. Әйҙәгеҙ!

— Был ағасты ниңә сәнсеп ҡуйҙығыҙ?

— Вәт бәйләнде! Ана, Хәлит аҡыллы булғас, бер ни ҙә өндәшмәй. Оҡшамай икән ҡаҙалған ботаҡ, рәхим ит, алып ташлайым.

Бәкер, ысынлап та, ағасты һурып алды. Шунан уны бик алыҫҡа елгәрергә теләгәндәй тирә-яғына ҡаранды. Аҙаҡ кире уйланы, аяғы аҫтына ғына ырғытты:

— Киттек! — Бәкер ҡалаға табан атланы. Малайҙар егеткә эйәрҙе:

— Ғәжәп бит! — тине Бәкер үҙ алдына һөйләнгәндәй. —

Ҡаланың эргәһендә генә сит планетанан килгән әҙәмдәрҙең станцияһы булһын әле! Һәм быны бер кем белмәй! Ҡасан төҙөгәндәр тиген?! Ишектәрҙе паролдәр менән генә асалар... Роботтар... Ә Урға оса торған караптары ҡайҙа икән?.. Ә нисә кеше улар станцияла? Ниндәй ҡоралдары бар?.. Улар бит бик теләһә, беҙҙең ҡаланы, ҡаланы ғына түгел бөтә Ер шарын юҡ итә алалар! Ишетәһегеҙме, малайҙар?!

— Ә ниңә юҡ итергә? — тип аңламаны малайҙар.

— Баштарына шундай уй килһә, ҡарап тормаҫтар инде. Ә шул ҡоралдарын ҡулға төшөргәндә, ә?!

— Нимәгә ул?

— Нимәгәме?.. — Ҡапыл Бәкер малайҙарҙың яурынынан ҡосаҡланы. — Ҡарағыҙ әле, әйтергә онотоп торам. — Бәкер Батырға боролдо. — Мин бит һинең әсәйең менән бергә эшләйем. Әйе, әйе, ниңә аптырайһың?

— Аптырамайым.

— Дөрөҫ. Мин Айһылыу апайҙы көндөҙ күрҙем. Урлашалар беҙҙең эштә малайҙар, ух, урлашалар. Әсәйең һөйләгәндер әле?

— Юҡ.

— Юҡмы ни? Ни булһа ла бөгөн төн миңә һеҙҙең ярҙамығыҙ кәрәк. Беҙгә барып складты һаҡларға кәрәк.

— Төнө буйымы? — тип аптыраны Хәлит.

— Юҡ, — тине Бәкер. — Әммә берәй сәғәт ултырырға тура килер. Ризаһығыҙмы?

— Әсәйем беләме быны?

— Белмәй. Әммә белһә, ҡаршы булмаҫ ине.

Батыр аптырап ҡалды. Беренсенән, көнө буйы өйҙә булманы. Һуңлап ҡайтҡан өсөн уға эләгәсәк, әлбиттә. Әммә улар складҡа төшөүсе бурҙарҙы тотһалар!.. Хәҙер аңланы Батыр: теге саҡта шуларҙы һағалаған икән әсәһе. Әйе, тотһалар, әсәһе бер һүҙ ҙә әйтмәҫ ине. Ана бит Бәкер ҙә ярҙам итегеҙ инде, тип тора.

Ризалашты малайҙар. Һәм улар Бәкергә эйәреп складҡа табан атланы. Бер мәл ашхана тирәһенә килеп сыҡтылар.

— Әкрен, — тине Бәкер. — Минең арттан!.. Хәҙер ошо складҡа инеп йәшенәбеҙ ҙә тәҙрәһенән генә күҙәтәбеҙ.

Бәкер кеҫәһенән асҡыс сығарып һарайҙың ишеген асты. Үҙе беренсе булып эскә атланы:

— Инегеҙ бында!

Малайҙар уға эйәрҙе. Ҡараңғы, бер нәмә күренмәй.

— Ут юҡмы ни? — тип һораны Батыр.

— Бар, бар. Хәҙер яндырам.

Киләһе секундта ишектең шарт итеп ябылғаны ишетелде. Шунда уҡ уны тыштан бикләп тә ҡуйҙылар.

Малайҙар ҡараңғыла бер-берәһенә һуғыла-һуғыла ишеккә ташланды.

— Кем япты?
— Асығыҙ!
Тыштан Бәкерҙең тыныс тауышы ишетелде:
— Егеттәр, борсолмағыҙ. Һеҙгә ошонда ултырып торорға тура килер. Унда карауат бар. Арыһағыҙ, ятып ял итегеҙ. Мин иртәгә ашарға килтерермен.
— Ә ниңә бикләнегеҙ беҙҙе? — тип һораны һаман да бер ни ҙә аңламаған Батыр.
— Шундай бойороҡ бирелде миңә. Ярай, киттем. Хушығыҙ! — Бәкерҙең аяҡ тауыштары алыҫлашты.
— Бандит! — тип ҡысҡырҙы Батыр, йоҙроҡтары менән ишекте туҡмап. — Ул беҙҙе урланы! Ә беҙ бер ни белмәйенсә... Их!
Хәлит шаҡ ҡатты. Улар шулай анһат ҡына тотолдомо икән ни? Көнө буйы ошо хаҡта уйлап йөрөнөләр һәм анһат ҡына ҡармаҡҡа эләктеләр! Ниндәй үкенесле!
Тиҙҙән күҙ ҡараңғылыҡҡа өйрәнә төштө. Малайҙар мөйөштә торған карауатты күрҙе. Улар баштарын эйгән хәлдә шул карауатҡа ултырҙылар ҙа тынып ҡалдылар...

### *Бәкер станцияны эҙләй*

Бәкер, малайҙарҙы бикләгәс тә, шефтың өйөнә ашыҡты. Уйҙары тормошҡа ашты. Әммә күпме ҡыйынлыҡтар аша үтергә тура килде уға. Һөйләһәң, кеше ышанмаҫ. Әлбиттә, малайҙы бикләнем тип, иртәнсәк тә әйтә ала ине. Әммә ер аҫтындағы станция хаҡында тиҙерәк белдерергә кәрәк. Таңға бит уның ишеген аса торған пароль үҙгәрәсәк.
Ваҡыттың һуң булыуына ҡарамай, шеф йоҡламай ине. Ул — илле йәштәр тирәһендәге, тәбәнәк буйлы, ҙур башлы, ҡаланың һатыу итеү селтәрҙәре директоры — Бәкерҙе асыулы ҡаршыланы:
— Ҡайҙа йөрөйһөң? Һиңә бит киске етелә бында булырға ҡушылгайны!
— Әле килә алғаныма ҡыуанығыҙ! — Бәкер ишек төбөндә тапанды. — Ҡот осҡос хәлгә осраным, шеф!
— Әйҙә, үт. Ни булды?
Бәкер бөгөн күргәндәрен түкмәй-сәсмәй шефҡа һөйләп бирҙе. Теге ышанырға ла ышанмаҫҡа ла белмәне. Сит планета кешеләре Ерҙә? Етмәһә, ҡала янында ғына станциялары бар, имеш. Аҡылдан шашҡанмы әллә был?
— Миңә ышанмаһағыҙ, теге малайҙарҙан һорағыҙ, — тине Бәкер шефтың шикләнеүен тойоп.
— Улар һин түгел. Һөйләмәҫкә һүҙ биргәндәр икән...
— Әйе шул. — Бәкер төшөнкөлөккә бирелде. Әммә киләһе секундта урынынан ырғып торҙо. — Мин бит паролде беләм! Беҙ станцияға инә алабыҙ!

— Ысынмы? — Шеф Бәкерҙең ҡаршыһына килеп баҫты. — Һин һаташмайһыңмы?

— Минең күҙ алдымда теге ҡыҙ паролде әйтте лә аҫҡа төшөп китте!

— Ул урынды хәтерләйһеңме?

— Мин унда бер ботаҡ ҡалдырҙым. Сәнсеп ҡуйырға иткәйнем дә, малайҙар шикләнә башланы.

— Тәк. — Шеф иҙән буйлап йөрөргә кереште.

Уның башында тиҫтәләгән уйҙар тыуҙы ошо минутта. Әгәр Бәкер һөйләгәндәр ысын булһа... Был иҫ киткес мөмкинселектәр бирә бит! Уларҙың ер кешеһенең башына инеп сыҡмаған машиналары, роботтары, ҡоралдары барҙыр! Әгәр шуларҙы ҡулға төшөргәндә... Был ҡаланы ғына түгел, бөтә республиканы, юҡ, илде, Ер шарын үҙенә буйһондорорға була! Ҡорал ғына тиһеңме! Әгәр шундай ҙур станцияны һиҙҙермәй генә төҙөй алғас, уларҙың мөмкинселектәре иҫ киткестер! Ә кешеләре! Улар белгән нәмәләр үҙе алтынға торорлоҡ!

— Былай итәбеҙ, — тине шеф. — Хәҙер егеттәрҙе йыйырға ҡушам. Ярты сәғәттән юлға сығабыҙ...

Егерме минут үтеүгә бер ҡара «Волга» ҡаланан сыҡты ла, яҡтылығы менән ҡараңғылыҡты тишеп, ялан буйлап елдерҙе. Уның артынан унлап егеттәрҙе тейәгән йөк машинаһы ашыҡты. «Волга»ла шоферҙан башҡа иң яҡын ярҙамсыһы менән шеф ултыра. Яндарында — Бәкер. Ул, алғараҡ эйелеп, станцияға юлды күрһәтеп бара.

— Уңғараҡ... Эйе, туп-тура... Тағы йөҙ метр тирәһе... Туҡта!

«Волга»нан сыҡтылар. Бәкер, ялт-йолт ҡаранып, үҙе ҡалдырған ағасты эҙләргә кереште. Тиҙҙән уға йөк машинаһынан ырғып төшкән егеттәр ҡушылды.

— Нимәгә кәрәк ул? — тип һораша ине егеттәр үҙ-ара.

— Шеф юҡҡа эҙләтмәҫ. Тимәк кәрәк.

Ярты сәғәттәй ваҡыт үтте. Егеттәр Бәкергә инде тиҫтәләгән ағасты килтереп күрһәтте:

— Ошо түгелме?

Әммә береһе лә Бәкер ҡалдырған ботаҡҡа оҡшамаған ине. Быны күреп, шефтың асыуы ҡабарҙы:

— Һин, шайтан малайы, төш күргәнһең дә беҙҙе аптыратаһың!

— Юҡ, шеф, юҡ! Ошо тирәлә ул! Ҡараңғы бит! Бәлки, «Хуш, Ер!» — тип ҡысҡырып ҡарайыҡ. Асылмаҫмы икән?

— Мин һинең кеүек аҡылдан шашмаған. Ағасты табырға кәрәк!

Әммә уныһы ер ярығына ингәндәй юҡҡа сыҡҡайны. Аптырағас, Бәкер бер-нисә тапҡыр, башҡаларҙы аптыратып:

— Хуш, Ер! — тип ҡысҡырып та ҡараны.

Тик Ер аҫты станцияһына илтеүсе ишектең асылыуы күренмәне.

— Иҫәр! Алйот! — тип әрләне уны шеф. — Һиңә ышанған мин — дурак!

— Бар ул станция, шеф, бар! — тип һаман үҙенекен тылҡыны Бәкер. — Һуң булдым бит мин унда!

— Булғас, яҡшылап хәтерләргә ине! Юғиһә тауыҡ мейең менән йөрөйһөң кеше аптыратып.

— Их! Ошонда ғына ине бит! — тип өтәләнде Бәкер. Әммә хәйләкәр егет ошо минутта ике юлдаш малайҙарынан алданғанын белмәне. Бынан бер сәғәт элек, ергә ҡаҙалған ағасты аяҡ аҫтына һалып, ҡалаға табан атлаған мәлдә, Батыр һиҙҙермәй генә ул ботаҡты ҡулына эләктереп алды һәм ҡалаға етеп барғанда ғына ташлап китте. Шулай итеп, малай сит планетанан килгән кешеләрҙе ер бандиттарының һөжүменән һаҡлап алып ҡалды...

Ҡапыл Бәкер маңлайына усы менән һуҡты.

— Шеф! Тағы бер идея бар! Иртәгә сәғәт унда ер аҫты ҡыҙы менән теге малайҙар осрашырға һөйләште! Бәлки...

— Тағы әкиәт һөйләйһеңме?

— Ышанмаһағыҙ, теге малайҙарҙан һорағыҙ. Юҡ. Иң дөрөҫө — ул ҡыҙ менән осрашыуға үҙебеҙ барабыҙ. Аҙаҡ ҡыҙ менән бергә станцияға инәбеҙ ҙә... Нисек?

— Әгәр әйткәндәрең дөрөҫ булһа... — тине шеф. — Тик ҡара уны, Бәкер, әгәр йәнә беҙҙе алдаһаң, үҙеңә үпкәлә. Һинең төштәреңә ышанып йөрөргә мин малай түгел!

— Бөтәһе лә дөрөҫ, шеф!

Шулай һөйләштеләр. Иртәгә Әмиләне тоталар ҙа уның ярҙамында Ер аҫтындағы станцияға инәләр. Ә инде унан һуң... Ҡалғанын күҙ күрер...

### *Лайондың бойороғо*

Пульт янында өс робот һәм Лайон ултыра. Әмилә инеү менән станцияның етәксеһе ҡаштарын емерҙе.

— Йә, һөйлә. Ни булды бында?

— Атай, бөтәһенә лә мин ғәйепле. — Ҡыҙ башын эйҙе.

— Беләм. Хәҙер асығыраҡ итеп әйт. Кемдәр булды бында? Ҡайҙа улар?

— Батыр менән Хәлит. Ҡайтып киттеләр.

— Шәп! — Лайон бүлмә буйлап йөрөргә кереште. — Тимәк, һүҙеңдә торҙоң. «Ул малайҙарға яҡын бармайым. Улар менән һөйләшмәйем» тигән һүҙҙәреңде үтәнең.

— Атай, мин һөйләшмәнем. Мин...

— Улайһа, нисек бында килеп эләккәндәр? Кем алып килгән?

— Улар... минең арттан күҙәтеп йөрөгән дә...

— Нисек күҙәткән? Ниңә күҙәткән? Улар бит һине бөтөнләй белмәй ине.

Ҡыҙ малайҙарҙан ишеткәнен һөйләп бирҙе. Фәҡәт Бәкер хаҡында өндәшмәне.

— Атай, — тип һүҙен осланы ҡыҙ. — Улар һүҙ бирҙе. Бер кемгә лә бер ҡасан да беҙҙең хаҡта өндәшмәйәсәктәр!

— Һин Ер кешеләрен белмәйһең, Эмилә. — Лайон тыныс булырға тырышып ҡыҙына аңлатырға тотондо. — Һин уларҙы беҙҙең кеүек күрәһең. Ур кешеләре үлһә үлә, биргән һүҙендә тора. Ә бындағылар... Уларҙың психологияһы икенсе. Бына күр ҙә тор: бер-нисә көндән беҙҙең хаҡта хәбәр бөтә ҡалаға таралаҫаҡ, шунан улар килеп станцияны эҙләргә тотонасаҡтар. Әгәр паника башланһа...

— Юҡ, атай, юҡ! Батыр менән Хәлит үндай түгел.

— Ә өсөнсө кеше? Ул кем ине?

— Өсөнсө? — Атаһының был һорауын Эмилә көтмәгәйне. Бәкер хаҡында ул белмәй, тип уйлай ине бит ҡыҙ. — Ул малайҙарҙың дуҫы.

— Роботтарҙың аңлатыуына ҡарағанда ул өлкән кеше булырға тейеш.

— Эйе. Ул да һүҙ бирҙе. Бер кемгә лә һөйләмәйәсәк. Лайон бер аҙ уйланып торҙо. Шунан ҡыҙының ҡаршыһына килеп баҫты.

— Бына нәмә, Эмилә. Иртәнән һуңға Урға ҡайтабыҙ. Ләкин урыныбыҙға килеүселәргә бындай сюрприз ҡалдырырға хаҡыбыҙ юҡ. Һин уларҙы таба алаһыңмы?

— Уларҙымы? — Эмилә осрашырға һөйләшеүҙәре хаҡында әйтергә итте лә тыйылды. — Таба алам.

— Улайһа, иртәгә өсәүһен дә бында килтерәһең. Беҙ уларҙы онотторо у тулҡыны аша үткәрергә тейешбеҙ. Ә бөгөнгө ҡылығың хаҡында, Урға ҡайтҡас, яҡшылап һөйләшербеҙ. Ә хәҙер бар, йоҡларға ят.

Иртәгә осрашыу урынына нисек барырмын, тип борсола ине, төйөн анһат ҡына сиселде. Тик... Бер аҙ һөйләшеп йөрөрҙәр. Аҙаҡ Бәкерҙе алырҙар ҙа бында килерҙәр. Ә нимә тип саҡырыр? Ярай, сәбәбен табыр. Һис юғында атайымдың һеҙҙе күргеһе килә, тиер... Тик шунһыһы үкенесле. Уларҙы бында алып ҡайтһа, Эмилә үҙ ҡулы менән малайҙарҙың мейеһенән үҙе хаҡындағы хәтирәне мәңгегә юйҙыраҫаҡ. Көндәр, айҙар үтер. Эмилә алыҫ Урҙа уларҙы уйлар, Ерҙә Батыр менән Хәлит исемле дуҫтарым бар, тип иҫләр, ә шул ваҡытта малайҙарҙың башына ҡыҙ тураһында уй инеп тә сыҡмаҫ. Ниндәй аяныс!..

*Айһылыу апай*

Айһылыу апай Батырҙың бөтә иптәштәренә шылтыратып сыҡты. Тора бара шул асыҡланды: Батыр менән бергә Хәлит тә юғалған. Көндөҙ уларҙы ҡала урамында күргәндәр, хатта икәүләшеп ҡала ситенә китеп барыуҙары хаҡында ла әйттеләр. Шунан да күберәген белеп булманы. Ҡайҙа Батыр? Урлағандармы? Улайһа, Хәлит ниңә юғалған? Теге бурҙарға Батырҙың дуҫы кәрәкмәй бит. Бәлки Хәлит ҡамасаулап йөрөһә, икеһен бергә алған да киткәндәрҙер...

Айһылыу апай барыһын да уйланы ла һатыу итеү селтәре директорын күреп һөйләшмәксе булды. Был ыңғайҙан уның иманы камил: был уның эше.

Айһылыу апай, Ғәлиуллиндың ишеген шаҡығанда кискә сәғәт ун ине. Директор үҙенең ҡул аҫтындағы магазиндарҙың береһендә эшләгән һатыусыны бик яғымлы ҡаршыланы, ултырырға тәҡдим итте.

Айһылыу апай уның төлкө кеүек ҡыланыуҙарына иғтибар итеп торманы. Ингәс тә:

— Ҡайҙа минең улым? — тип һораны туранан-тура. Ғәлиуллиндың күҙҙәре түңәрәкләнде:

— Нимә? Ә ниңә уны минән һорайһың?

— Һинең эш был. Ике тапҡыр һинең кешеләрең мине иҫкәртте. Батырыңды юҡ итәбеҙ, тине. Бына бөгөн...

— Айһылыу, юҡты һөйләмә. Мин бер ни ҙә белмәйем.

— Әгәр хәҙер үк Батырҙы тапмаһаң...

— Нимә эшләрһең?

— Милицияға хәбәр итәм.

— Ха-ха-ха. — Ғәлиуллиндың көлөүе яһалма яңғыраны. — Улар һиңә ышаныр тиһеңме? Ҡайҙа дәлилең?

— Һеҙ складтарҙағы әйберҙәрҙе кооперативтар аша һатаһығыҙ. Мин ҡаршы торғас...

— Һине кем иҫкәрткән, шуларҙан һора малайыңды.

— Һин иҫкәрттең!

— Мин? — Ғәлиуллиндың күҙҙәре аҡшайҙы. — Һин уйлабыраҡ һөйлә, яраймы?

— Һеҙ спекуляция менән шөғөлләнәһегеҙ!

— Айһылыу, тыныслан!

— Юҡ! Хәҙер үк килтерегеҙ малайымды!

— Мин ҡайғыңды аңлайым, Айһылыу. Әммә... мин урламаным уны. Шулай ҙа белешермен... Ярҙам итергә тырышырмын. Әммә...

Айһылыу апайҙың күҙенән йәштәре килеп сыҡты:

— Хәҙер төн була. Ул көнө буйы ашамаған. Ҡайҙа йоҡлар? Юҡ, мин ошо көйө китә алмайым. Табығыҙ малайымды!

— Айһылыу, әйттем бит: мин бер ни ҙә белмәйем. Һин ул тиклем борсолма. Малайыңды урлағандар икән... Кире ҡайтарырҙар. Улар бит йыртҡыс түгел... Барлығы үҙеңә... Ҡыҫылма юҡ-бар ергә... Нимәгә кәрәк һиңә? Әйҙә, урлашһындар. Тоторҙар. Бының өсөн милиция бар... Мин ҡулымдан килгәндең барыһын да эшләрмен...

Ғәлиуллин нисек кенә яғымлы һөйләшһә лә, Айһылыу апай ышанманы уға. Ҡалала күптән һатыу итеү селтәренә бурҙар ояланған икән, тигән хәбәр йөрөй. Уның башлығы Ғәлиуллин үҙе тигәндәрен дә ишеткәне бар. Халыҡ юҡҡа һөйләмәҫ. Батырҙың юғалыуы уның ғына эше...

Милицияға барып үҙенең бар уйҙарын һөйләп биргәндән һуң Айһылыу апай өйөнә ҡарай атланы...

Төнө буйы керпек тә ҡаҡманы әсә. Батырының ошо минутта ситтә, билдәһеҙ ерҙә булыуын иҫләү менән күҙенә йәштәр эркелә. Ә ҡайһы саҡта улы күптән ҡайтҡан кеүек тойола башлай. Айһылыу апай йүгерә-атлай Батырҙың бүлмәһенә барып инә һәм буш карауатты күрә. Шул мәл әсәнең бөтә тәне буйлап һалҡын зымбырлау үтә. Ҡайҙа уның Батыры? Өшөмәйме? Йоҡлар урыны бармы?..

Иртәнсәк эшкә барышлай Айһылыу апай йәнә милицияға һуғылды. Әммә унда берниндәй ҙә яңылыҡ юҡ ине...

Айһылыу апай үҙе эшләгән магазинға табан атланы. Сәғәт ун тулып килә. Ашығырға кәрәк. Ошо ерҙә ул кинотеатр ҡаршыһында торған бер ҡара «Волга»ға иғтибар итте. Был бит Ғәлиуллиндың машинаһы!

Бына «Волга» эсенән ике егет сыҡты. Уларҙы күргәс, Айһылыу апай баҫҡан ерендә ҡатып ҡалды. Ошоларҙың береһе бит теге саҡта уны иҫкәрткәйне! Нимә эшләргә? Их, милицияһы ла күренмәй бит кәрәк саҡта!..

Ул арала теге ике ир кинотеатр алдында торған ҡыҙыл күлдәкле ҡыҙ янына барҙы. Бына уға ниҙер әйттеләр. Ун ике йәштәр тирәһендәге ҡыҙ ирҙәрҙе иғтибар менән тыңланы ла баш һелкте. Күрәһең, нимә менәндер килешергә теләмәне. Ирҙәр ҡыҙып-ҡыҙып өгөтләргә кереште. Ҡыҙ һаман да баш тартҡас, тегеләр уның ике ҡулынан тоттолар ҙа ҡара «Волга»ға табан алып киттеләр.

Быны күреп торған Айһылыу апайҙың башынан төрлө уйҙар йылтылдап үтте. Ҡайҙа алып китмәкселәр ҡыҙҙы? Ул бит теләмәй! Урларға итәләрме? Күрәһең, был ҡыҙҙың да ата-әсәһе бурҙарға ҡамасаулағандыр ҙа... Йыртҡыстар! Нисек ҡулдары бара тиген!

Айһылыу апай түҙмәне, машина янына йүгерҙе:

— Нимә эшләйһегеҙ? Хәҙер үк ебәрегеҙ!

Ул арала теге ирҙәр ҡыҙҙы «Волга» эсенә индереп тә ултыртты. Киләһе секундта машина алға ынтылды. Айһылыу апай, ҡулдарын йәйеп «Волга»ның юлына арҡыры торҙо:

— Туҡтағыҙ! Туҡтағыҙ тием!

Машина ҙур тиҙлек менән Айһылыу апайға яҡынлашты...

*Тотҡонда*

Хәлит менән Батыр төндө йоҡоһоҙ үткәрҙе. Шундай иҫәр рәүештә эләктеләр тоҙаҡҡа! Бәкерҙең мәкер уй менән йөрөгәнен баштан аңларға булған да бит. Ул малайҙарҙы күҙәтеп килгән, шул арҡала ер аҫтына эләккән...

Иң ҡурҡынысы шунда: Бәкер үҙенең бандаһы менән Ер аҫтындағы станцияны баҫып алырға маташасаҡ. Хәҙер шик ҡалманы: ул станцияның ишеге янына теге ботаҡты юҡҡа ғына сәнсеп ҡалдырырға йыйынмаған. Ярай әле Батыр ул ағасты, Бәкергә һиҙҙермәй генә, ҡулына эләктереп алды ла ҡалаға етәрәк кенә ташлап китте. Юғиһә ул бандит төнөн үк станцияны баҫып алырға маташыр ине — паролде белә бит. Бәкер Әмиләнең сәғәт унға кинотеатр янына килерен белә. Тимәк улар станцияға ҡыҙ ярҙамында инергә маташасаҡ!

Һарай эсе яҡтыра башлағайны. Тик ултырырға ярамай. Нисек тә бынан сығыу юлын эҙләргә кәрәк. Төнөн дә ҡул ҡаушырып ултырманы малайҙар. Күҙгә төртһәң дә күренмәҫлек ҡараңғы булыуына ҡарамай, Батыр менән Хәлит стеналарҙы һәрмәп, ҡул һыйырҙай тишек эҙләне. Бына хәҙер яҡтыра төшкәс, малайҙар үҙҙәренең юҡҡа тырышҡанын аңланы. Стеналар бетондан ине. Берҙән бер өмөт түбәлә. Ул таҡтанан эшләнгән. Араларынан өҫтөнә шифер түшәлгәне күренә. Тик һарайҙың бейеклеге дүрт метр тирәһе. Түбәгә нисек менергә? Менгән саҡта ла уны нисек асырға? Әммә ни генә булмаһын, улар сәғәт унға тиклем бынан сығырға тейештәр.

Эҙләнә торғас, төрлө оҙонлоҡтағы арҡан өҙөктәре таптылар. Улар менән ни ҡылырға мөмкин? Бер-береһенә ялғарға була. Шунан?..

Сәғәт туғыҙынсы китте. Һарай эсе тамам яҡтырҙы. Таҡталар бер-береһенә теймәй ятҡан урындарҙа өрлөк менән шифер араһында арауыҡ барлығы күренде. Әгәр арҡанды шунан үткәргәндә, уның бер осонан тотоп торорға, икенсе осона йәбешеп түбәгә тиклем күтәрелергә була бит! Батырҙың был уйы Хәлиткә лә оҡшаны. Бына улар баскетбол уйынсыһы һымаҡ арҡандың бер осон өрлөк өҫтөндәге тишеккә тоҫҡап ырғыта башланылар. Ләкин күпме генә тырышһалар ҙа арҡан кәрәк урынға эләкмәне. Их, бер һайғау булғанда! Йәнә һарайҙың эсен тентергә тотондолар. Ниһайәт, оҙон ғына сым таптылар. Уны өрлөк өҫ-

төндәге өрләк аша үткәреүе ҡыйын булманы — тимер сыбыҡ ҡаты ғына ине. Бына уның осо кире ергә төштө. Уға арҡан бәйләнде һәм тиҙҙән ул өрләк аша үткәрелгәйне!

Был ваҡытта сәғәт унынсы китте.

Бына Хәлит арҡандың бер осона йәбеште, ә ҡулына тимер киҫәге тотҡан Батыр үрмәләп түбәгә тиклем күтәрелде. Бер ҡул менән арҡанға йәбешкән килеш, икенсе ҡулдағы тимер менән түбәлә тишек яһауы еңелдән түгел ине. Батыр тәүҙә шиферҙы ярҙы. Хәҙер таҡтаны айырырға кәрәк. Ләкин ул өрләккә ҡуша нығ ҡына ҡаҙаҡланған. Биш минут та үтмәне малайҙың хәле бөттө, ул шыуып аҫҡа төшөргә мәжбүр булды.

— Ҡана әле үҙем! — Йыуан, ауыр кәүҙәле Хәлит бик ихлас менеп киткәйне үрмәләп. Әммә өҫтә ярты минут та түҙә алманы. Аһ та уһ килеп ергә төштө. — Ҡулымды ауырттырғайным кисә, — тип аңлатты ул.

Батыр икенсе менеүендә лә таҡтаны айырып сығара алманы. Фәҡәт өсөнсө ынтылыуында ғына түбәлә үҙе һыйырлыҡ тишек яһай алды. Батыр ҡулындағы тимерҙе аҫҡа ырғытты ла эргәләге таҡталарға йәбеште. Күп тә үтмәне, ул һарайҙың өҫтөндә тора ине инде.

— Тишекте ҙурайт! — тип ҡысҡырҙы эстән Хәлит. Батыр тағы бер шиферҙы айырып ырғытты, шунан арҡандың бер осон үҙенә тартып алды:

— Әйҙә үрмәлә өҫкә! — тип ҡысҡырҙы ул дуҫына. Ярты минут та үтмәне Хәлит тә Батырҙың янында тора ине.

— Сәғәт нисә? — тип һораны Батыр.

— Өс минуттан ун тула.

Тимәк, Әмилә күптән кинотеатр янында уларҙы көтә. Тиҙерәк! Юғиһә уны Бәкер алып китәсәк! Хәҙер төшөр урынды эҙләп торорға ваҡыт юҡ. Һарайҙың бейеклеге дүрт метр тирәһе булыуға ҡарамай, Батыр күп уйлап торманы, йүгереп килде лә аҫҡа ырғыны. Ер ҡаты ғына ине. Шуға, аяғы зыңҡып китте. Батыр тороп баҫыуға уның янына ғына туп итеп Хәлит килеп төштө.

— Тиҙерәк!

Батыр ҡойма аша ырғып төштө лә кинотеатрға табан йүгерҙе. Хәлит унан ҡалышманы. Бына аптеканы үтеп киттеләр. Күрше урамға сыҡһалар, Әмилә уларҙы көткән урынға тиклем күп ҡалмай. Ана, һуңғы боролош. Йәнә ике йөҙ метр һәм...

Ниңә унда халыҡ йыйылған? Әмилә ҡайҙа? Шунда уҡ ашығыс ярҙам менән милиция машинаһы күренә. Нимә эшләй улар бында?

Батыр йүгереп килде лә халыҡты йырып уртаға үтте...

*Хушлашыу*

Айһылыу апай ҡулдарын йәйеп «Волга»ның юлына арҡыры торҙо:

— Туҡтағыҙ! Туҡтағыҙ, тием!

Машина ҙур тиҙлек менән Айһылыу апайға яҡынлашты. Бына ул саҡ ҡына уңғараҡ тартты, әммә туҡтап торманы, ары елде.

Айһылыу апай «Волга»ның үҙенә тейеп үтеүен һиҙҙе. Бер ере лә ауыртыуын ауыртманы уның. Тик ни өсөндөр ер стена кеүек аяҡ үрә баҫты. Күк йөҙө түңкәрелеп артҡа ҡоланы. Һәм Айһылыу апай үҙен төпһөҙ ҡараңғы соҡорға төшөп киткәндәй тойҙо...

Был минутта һарай өҫтөнән ырғып төшөп кинотеатрға табан йүгереп килгән Батыр үҙенең был донъяла япа-яңғыҙ тороп ҡалғанлығын белмәй ине...

Күп тә үтмәне юл ситендә ятҡан Айһылыу апайҙы халыҡ уратып алды, ашығыс ярҙам менән милиция машиналары килеп етте.

Ошо ерҙә Батыр халыҡты йырып уртаға үтте лә әсәһенә ташланды...

Йүгереп килеп еткән Хәлит Айһылыу апайҙы ҡыҙыл күлдәкле ҡыҙҙы урлаған машинаның төкөп китеүен ишеткәс тә бөтәһен дә аңланы. Бәкерҙең эше был! Улар Әмиләне станцияға алып киткән. Унан астырып әскә инмәкселәр! Малай шунда ҡара «Волга»ның ҡайҙа икәнлеген милиционерҙарға әйтеп һалды. Улар Хәлитте ултыртып, ҡала ситенә ҡарай елдерҙе. Күп тә үтмәне, ялан уртаһында торған ҡара «Волга» менән бер йөк машинаһы күренде. Янында тиҫтәләгән кеше ҡайнаша. Милиционерҙар быны күргәс, рация аша үҙҙәренә ашығыс ярҙам һораны...

Үҙҙәренә табан ҙур тиҙлек менән яҡынлашып килгән бер нисә милиция машинаһын күргәс тә, бандиттар ҡасырға маташты, тик өлгөрмәне...

Айһылыу апайҙы иртәгеһенә ерләнеләр. Зыяраттан Батыр үҙенең иң яҡын дуҫтары — Әмилә һәм Хәлит менән бергә ҡайтты.

Иртәгәнән башлап Батыр балалар йортонда йәшәй башларға тейеш. Тимәк, ул әсәһе менән бәхилләшеү өҫтөнә, фатирынан, бергә үҫкән дуҫтарынан айырылырға мәжбүр...

Әмилә Айһылыу апайҙың старт көнө ерләнергә тейешлеген белгәс, кисә Ур планетаһына осоуҙан ҡырҡа баш тартты. Атаһы тәүҙә:

— Был мөмкин түгел, — тип ҡырталашҡайны ла, ҡыҙ һүҙендә ныҡ торҙо.

Әгәр уны ҡотҡарам тип ғүмерен ҡорбан иткән апайҙы

ерләшмәй икән, Әмиләне кем тип атарға? Етмәһә, ул — ҡыҙҙың иң яҡын дуҫының, Батырҙың әсәһе.

Лайон күнде. Дөрөҫ, бының өсөн оло сәбәп уйлап сығарырға тура килде. Алыҫ планетаға, йыһан карабының боҙоҡ урынын таптыҡ, тип хәбәр итте. Йәнәһе, бер көн йүнәтәсәктәр. Лайонды алдашыуға барырға мәжбүр иткән йәнә бер нәмә бар. Станцияла булып киткән өс Ер кешеһен оноттороу тулҡыны аша үткәреү өсөн алып килмәне Әмилә. Ул ғына ла түгел, үҙе бер ҡот осҡос тарихҡа юлыҡҡан. Үлемгә бәйле бер ваҡиғаға шаһит булған, быны милиция белгән... Ҡыҫҡаһы, эш ҙурға киткән. Лайон Әмиләне һуңғы тапҡыр Ер өҫтөнә сығарыуына үкенеп тә ҡуйҙы.

Бөгөн Әмилә йәнә Ергә күтәрелде. Ул ерләүҙә ҡатнашырға һәм теге өс кешене станцияға алып килергә тейеш. Уларҙы оноттороу тулҡыны аша үткәрһәләр, Лайон тыныс күңел менән Урға ҡайтыр ине...

Был мәлдә Әмилә, Батыр һәм Хәлит ҡалаға килеп инде. Хәҙер Батыр өйөнә ҡайтыр, шунан уҡытыусы апай менән юлға әҙерләнә башлар. Ә Әмилә... Үҙ планетаһына осор... Хәлит кенә бында ҡалыр... Шуға һағышлы өсөһөнөң дә йөҙө.

Батыр һаман да әсәһенең үлеүенә ышана алмай. Бына хәҙер ҡайтып инһә, әсәһе һәр ваҡыттағыса ҡаршы алыр кеүек:

— Ҡайҙа йөрөйһөң? — тип үҙенә ҡыҫыр ул Батырҙы. Шунан арҡаһынан һөйөп алыр. — Асыҡҡанһыңдыр инде. Әйҙә, ашап ал. Яратҡан бутҡаңды бешерҙем.

Был һүҙҙәрҙе инде Батыр башҡа бер ҡасан да ишетмәйәсәк. Бер кем дә уны ошондай йылы итеп ҡаршы алмаясаҡ...

— Батыр, — тине Хәлит оҙаҡ ҡына өндәшмәй барғандан һуң. — Һин китмә балалар йортона.

Батыр һағышлы күҙҙәрен дуҫына күтәрҙе, әммә бер ни ҙә өндәшмәне. Ниңә китмәҫкә? «Китмәһәм, ҡайҙа йәшәрмен?» — тип тә һораманы ул.

— Минме... Мин ебәрмәйем һине, — тине Хәлит. — Хәҙер ҡайтам да әсәйемә әйтәм. Беҙҙә йәшәрһең.

Батырҙың тамағына төйөр килеп тығылды, күҙе әсетеп китте. Ул ситкә боролдо. Һәм риза түгеллеген аңғартып башын һелкте.

— Ниңә? Ни өсөн?

Һүҙгә Әмилә ҡушылды.

— Рөхсәт итмәҫтәр.

— Һин ҡайҙан беләһең? — Хәлит ҡыҙға уҫал итеп ҡараны. — Бында һинең Урың түгел. Беҙҙә рөхсәт итәсәктәр.

— Яңылышаһың, — тине Әмилә. — Беҙҙә кирењенсә рөхсәт итерҙәр ине.

— Юҡ, бына хәҙер беҙгә барабыҙ ҙа...

— Мин бармайым. — Батыр туҡтап ҡалды. — Мин ғәйепле. Бөтәһенә лә мин ғәйепле...

— Ниңә улай тиһең? — Әмилә малайҙың ҡулынан тотто.

— Әгәр өйҙә генә ултырһам... Ҙурайғас, әсәйем өсөн үс аласаҡмын! — Батырҙың йоҙроҡтары төйнәлде.

Әмилә менән Хәлит бер ни ҙә өндәшмәне. Ни әйтә ала улар ҡайғыға ҡалған дуҫын тыныслandырыр өсөн? Әгәр ҡулдарынан килһә, уның хәлен еңеләйтеү өсөн улар бөтәһен дә эшләр ине лә бит...

Бына Батыр йәшәгән өй. Дуҫтар туҡталып ҡалды.

— Ярай, барығыҙ, — тине Батыр. — Мине көтәләрҙер...

— Мин дә бөгөн китәм, — тине Әмилә әкрен генә. — Бөтөнләйгә. Урға.

— Тағы килерһеңме? — Батыр йылмайырға маташты.

— Белмәйем... Юҡтыр... — Ҡыҙ күҙҙәрен ситкә төбәне.

Хәлит Әмиләгә ғәжәпләнеп ҡараны:

— Башҡа бер ҡасан да, бер ҡасан да килмәçһеңме ни?

— Әйе... Мин килер инем дә... Атайымды икенсе эшкә күсерәләр...

— Улайһа, мәңгегә хушлашабыҙмы? — Хәлит шаҡ ҡатты.

— Әйе... — Ҡыҙҙың тауышы ҡалтырап китте. Дуҫтар ни өндәшергә лә, ни эшләргә лә белмәйенсә тынып ҡалды.

— Ә Ур планетаһында нисек? — Тынлыҡты Хәлит боҙҙо. — Һәйбәтме?

— Ун мең йылдан Ерҙә нисек булыр?

— Һәйбәт булыр.

— Ә Урҙың тормошо Ерҙекенә ҡарағанда ун мең йылға алда бара. Шулай булғас, уйлап ҡара.

— Дә-ә... — Хәлит хыялға бирелде. — Бына барып күрергә ине. Шулай бит, Батыр?

— Әйҙә, киттек минең менән, — тип шаярҙы Әмилә. — Бер ай булырһың да киләһе экспедиция менән кире ҡайтырһың.

— Мин барыр инем, валлаһи! — Хәлиттең күҙҙәре йылтырап китте. — Әсәйем генә рөхсәт итмәç шул...

— Ҡарағыҙ әле! — Быға саҡлы Әмилә менән Хәлиттең һүҙҙәренә бөтөнләй иғтибар итмәгән кеүек торған Батыр телгә килде. — Һине атайың, әсәйең тота. Ә мине кем ебәрмәй һуң?

— Ҡайҙа?

— Ур планетаһына.

— Бер кем дә тотмай, — тине Хәлит хәүефле тауыш менән. — Тик һиңә лә ярамай.

— Ниңә?

— Сөнки... Һин китһәң... Нисек инде?.. Ер һинһеҙ ҡалһынмы?

— Ә ниңә мин Ергә? Кемем бар минең бы
яҡын кешем дә... да? Берҙән-бер
— Ә беҙ, Батыр? Ә мин?
— Һинән дә айыралар. Балалар йорто
һалар, унынсыны бөткәнсә бер үҙемде урамға илтеп тыҡ-
тар. Килеп алырлыҡ оло туғаным юҡ. Мин а ла сығармаҫ-
— Батыр... — Әмилә ҡапыл ни әйтергә л китәм, Хәлит.
— Әмилә, дөрөҫөн әйт: алып китә алы белмәне.
аңла. Миңә ауыр бында. Әсәйем хаҡында уй рһыңмы? Һин
тарымды ҡалдырыу... Ауыр миңә... Алыҫ п.. Өйөмдө, дуҫ-
рәк онотормон барыһын да... ланетала тиҙе-
— Был мөмкин түгел, — тип шыбырланы
— Ни өсөн? Ниңә? Әмилә.
— Атайым рөхсәт итмәҫ. Беҙгә Ер кеше
ҡында әйтеү ҙә тыйылған. ләренә Ур ха-
— Их! — Батыр йоҙроғо менән тубығына
та әле! Әгәр атайыңа әйтмәй генә... уҡты. — Туҡ-
— Нисек?
— Карапҡа йәшенеп кенә инеп ултырам
— Белмәйем... — Әмилә бер аҙ уйлап алдыҙа...
Ҡыҙҙың күҙҙәре шатлыҡлы йылтыраны. —ы. — Туҡта! —
китергә теләйһеңме? Һин ысынлап
— Әйттем бит.
— Улайһа... Һине алып китеп була!
— Нисек?
— Ҡара ҡумта!
— Нимә ул? — Малайҙар бер ни ҙә аңлама
— Беҙ Урға бер ҡара ҡумтаны алып китаны.
Мин һине шуның эсенә йәшерәм. ергә тейешбеҙ.
— Атайың һиҙмәҫме?
— Юҡ!
— Улайһа, киттек! — тине Батыр.
— Нимә? Һеҙ хәҙер үкме? — Хәлит хайра
— Өйгә лә инеп тормайым, — тине Батын ҡалды.
сының күҙенә күренһәм, ул мине урамға лар. — Уҡытыу-
башҡа. а сығармаясаҡ
— Мин һеҙҙе оҙатам. Станцияға тиклем.
— Кәрәкмәй, — тине Батыр. — Йөрөмә. Х
— Ниңә? Барһын. — Әмиләнең башына берХуш.
Хәлитте станцияға алып инәсәк. Атаһы унр уй килде. Ул
лашҡан арала, Батырҙы ҡара ҡумтаға йәшерының менән бу-
Бер аҙҙан өс дуҫ ҡаланан сығып, станциярәсәк.
урынға табан атланы. я урынлашҡан
— Бәкер менән уның кешеләренә ни булыр
һорап ҡуйҙы Әмилә. р икән? — тип
— Төрмәгә ултыртасаҡтар, — тип аңлатты
— Төрмәгә? Ә нимә ул? ы Хәлит.

Малайҙар аңлатып бирҙе.

— Ә енәйәт яһаған кешене һеҙҙә ни эшләтәләр һуң? — тип һораны шунда уҡ Хәлит.

— Беҙҙә ундайҙар һирәк осрай. Әгәр килеп сыҡһалар, махсус тулҡын аша үткәрәләр ҙә яуызлыҡ рефлексын кәметәләр. Шунан элекке енәйәтсе изге күңелле кешегә әүерелә лә ҡуя.

— Ҡалай һәйбәт, — тип ҡуйҙы Хәлит. Станцияға төшөр алдынан Батыр туҡталып ҡалды.

Бына ул әйләнеп тирә-яғына ҡараны.

Йылы йәйге көн. Үлән әкрен генә иҫкән елгә ғәмһеҙ сайҡала, сиңерткәләр сырылдаша. Баш өҫтөндә ниндәйҙер бер ҡош һайрай. Алыҫта Батыр ун ике йыл буйы йәшәгән ҡала күренә, унда малайҙың өйө, мәктәбе... Шуларҙы башҡа бер ҡасан да күрмәҫме икән ни? Ҡапыл Батырҙың ниәтенән баш тартып, ҡалаға ҡайтҡыһы килде. Уны барыбер өйөнән, мәктәбенән, дуҫтарынан айырасаҡтар... Юҡ, китә ул!.. Мәңгегә китә!..

Тағы ла биш минут үтеүгә өс дуҫ станцияға төшәсәк.

Әмилә шунда уҡ Батырҙы ҡара ҡумта эсенә йәшерер. Ә атаһына Хәлитте генә күрһәтер. Батыр менән Бәкерҙе килтереп булманы, тиер Әмилә Лайонға. Батыр станция хаҡында ла, Ур планетаһы тураһында ла бер кемгә лә әйтмәҫ, ул ышаныслы малай, тип тынысландырыр ҡыҙ атаһын. Шунан Бәкерҙең ҡулға алыныуын һөйләп бирер. Йәнә ун минуттан онотторо тулҡыны аша үткәрелгән Хәлит ер өҫтөнә күтәрелер ҙә ҡалаға табан атлар. Ул үҙен балыҡтан ҡайтып барған кеүек хис итер. Тағы ла ике сәғәттән ҡара ҡумта эсенә йәшенгән Батыр йыһан карабында алыҫ Ур планетаһына юл алыр...

Былар киләсәктә. Ә хәҙергә ер аҫтындағы станция янында торған Батыр тирә-йүнгә һуңғы тапҡыр ҡараны ла әкрен генә шыбырланы:

— Хуш, Ер! Һаумы, билдәһеҙ планета Ур!..





## СИТ ПЛАНЕТАЛА

### *Лайондың юғалыуы*

Әмилә менән Батыр тәҙрә аша палата эсенә күҙ һалдылар. Әммә унда Лайон юҡ ине. Берәй яҡҡа сыҡтымы икән? Хәйер, уға урынынан торорға ярамай, тигәйне санитар ағай. Ҡайҙа һуң ул?

Ҡыҙ яуап көткәндәй, Батырға ҡарап алды. Малай янынан тәҙрәгә ҡапланды. Туҡта! Палата эсендә кемдер йөрөй. Ир кеше. Әллә Лайонмы?

Ул арала теге кеше стена буйындағы ҡорған артынан сыҡты. Юҡ, был бөтөнләй сит әҙәм дә баһа! Унан һорарға кәрәк...

Ошо ваҡыт ир кеше малай менән ҡыҙҙы күреп ҡалды. Шунда уҡ уға әллә ни булды — йәшеренергә маташҡандай кире ҡорған артына ташланды. Әммә киләһе секундта быны файҙаһыҙ икәнлеген аңланы, буғай — Әмилә менән Батыр барыбер күрҙе бит уны. Шуға ҡасып торманы, йүгереп тәҙрә янына килде. Ул арала палатаға ишек төбөндә торған, бая малай менән ҡыҙҙы Лайон эргәһенә үткәрмәгән санитар килеп инде.

— Атайынды борсорға ярамай, — тигәйне.

Ә ҡайҙа һуң Лайон? Ул бит бында бөтөнләй юҡ.

Бына палаталағы ағай менән санитар тәҙрә аша ҡысҡыра башланылар. Йөҙҙәре бик асыулы. Әйтерһең, Батыр менән Әмилә оло енәйәт яһаған. Әгәр баҫҡыс һөйәп икенсе ҡаттағы палата эсенә ҡарағандар икән — быны ни ғәйебе бар?

— Әйҙә, киттек, — тине Батыр, борсола башлап.

— Ниңә? — Әмилә малайға ҡарап алды. — Хәҙер тәҙрәне асалар. Һорайыҡ — ниңә атайым күренмәй икән?

— Минеңсә, улар беҙҙе тоторға итә. — Батырҙың тауышы хәүефле сыҡты.

Ысынлап та, палата эсендәге ирҙәрҙең ҡиәфәттәре уғата уҫал. Тәҙрәне лә бик ашығып асалар.

— Әйҙә, аҫҡараҡ төшәйек әле. — Батыр ҡыҙҙың ҡулынан тартты.

Әмилә лә икеләнә төштө. Ул малайға эйәрҙе. Бына улар инде стенаға һөйәлгән баҫҡыс янында, тротуарҙа торалар, үҙҙәре икенсе ҡатта асылып киткән тәҙрәгә текәлгәндәр.

— Нимә эшләп йөрөйһөгөҙ бында? — тип һораны санитар, аҫҡа уҫал ҡараш ташлап. — Кем рөхсәт итте тәҙрә аша ҡарарға?

— Атайымды күрергә теләгәйнек, — тине Әмилә аҡланған тауыш менән. — Ҡайҙа ул? Ниңә күренмәй?

— Улмы? Ул... — Санитар янындағы иргә ҡарап алды. — Атайың ошо палатала ята. Тик сыҡҡайны...

— Һеҙ бит уға торорға ярамай, тигәйнегеҙ.

— Тигәйнек тә... Торҙо. — Санитар йылмайғандай итте. — Һеҙ туҡтағыҙ әле. Мин хәҙер янығыҙға сығам. Һәм барыһын да аңлатам. Йәки былай итәйек. Күтәрелегеҙ бында киренән.

— Ярай, — тине ҡыҙ.

Бына улар ауырыуҙар ятҡан йорттоң ишеге янына үттеләр. Ошо ерҙә Батыр ҡыҙҙы туҡтатты.

— Әмилә, ышанмайым мин уларға.

— Ниңә? — тип аптыраны ҡыҙ.

— Күрмәнеңме ни? Тәҙрә аша эскә ҡараған өсөн бик асыуландылар. Аҙаҡ быны һиҙҙереп торманылар. Атайың хаҡында ла сәйер генә әйттеләр. Йә — торорға ярамай, йә — сыҡҡан... Әйтәм бит, улар беҙҙе эләктерергә итә.

— Нимә? — Әмилә көлдө. — Һин бит үҙеңдең Ерендә түгел. Ур планетаһында бандиттар юҡ.

— Барыбер ышанмайым. — Батыр ишеккә борсоулы ҡараш ташланы. — Ниңә улар атайыңды тәҙрә янына саҡырманы?

— Ысынлап та... — Ҡыҙҙың йөҙөн ҡара болот ҡапланы. — Тик нисек инде?

— Башыма ҡурҡыныс уй килде. — Батыр шомло ғына

өндәште. — Бәлки, яңылышамдыр... Әммә әйтмәйенсә булдыра алмайым...

— Йә, әйт.

— Минең һиҙеүемсә, палатала һинең атайың юҡ.

— Ә ҡайҙа ул?

— Белмәйем. Ҡайҙалыр йәшергәндәр. Быны бер кемгә лә һиҙҙермәҫкә итәләр. Шуға ла беҙҙе унда индермәнеләр. Тәҙрә аша ҡарағас, ҡоттары осто. Лайондың юҡлығын һиҙеүебеҙҙән ҡурҡалар. Хәҙер алдаштырып беҙҙе эләктермәкселәр.

— Шунан? — Әмилә хәүефле тауыш менән һораны.

— Шунан беҙҙе... башҡаларға күргәнебеҙҙе һөйләтмәҫ өсөн...

Әмиләнең күҙҙәре ҙурайҙы:

— Үлтерерҙәр, тиһеңме?

— Белмәйем.

— Мине үлтерһәләр, улар шунда уҡ тотола. Мине күҙәткән компьютерҙар үҙәккә хәбәр итәсәк.

— Улайһа, бикләп ҡуйырҙар.

— Юҡ, ышанмайым, — тине ҡыҙ, бер аҙ уйланып торғас. — Әкиәт был. Әйҙә, инәбеҙ.

— Туҡта. — Батыр Әмиләнең ҡулынан тотто. — Әйҙә, былай эшләйбеҙ. Ишектән ситкәрәк китәбеҙ ҙә көтәбеҙ. Әгәр ярты минуттан санитар беҙҙе эҙләп килеп сыҡһа, беҙ уға бик кәрәк. Ул эргәһенә саҡырырға тотонор. Беҙ китә башлаһаҡ, артыбыҙҙан ҡыуа төшөр...

Әмилә шаҡ ҡатты:

— Һин әллә нәмәләр һөйләйһең! Юҡ һүҙ был!

— Юҡ һүҙ булһа, бик һәйбәт булыр ине лә. Әйҙә, һынап ҡарайбыҙ.

Малай менән ҡыҙ ҡырҡ-илле аҙым ситкә атларға өлгөрмәне, ишек асылды, унда санитар күренде. Уртаса буйлы, йыуантаҡ кәүҙәле был пеләш ағайҙың йөҙө бик борсоулы ине.

— Эй! — тип ҡысҡырҙы ул. — Ҡайҙа киттегеҙ?

— Китмәнек. — Әмилә Батырға ҡарап алды. — Ә атайым ҡайҙа?

— Хәҙер күрһәтәм. Килегеҙ бында.

— Ишетәһеңме — саҡыра, — тип бышылданы малай. — Ул беҙҙе тоторға итә. Әйт: бармайбыҙ, тиген. Атайыңды сығарһын.

— Беҙ бармайбыҙ! Атайым сыҡһын бында!

— Уға сығырға ярамай! — Санитарҙың тауышы асыулы ғына сыҡты. — Әйҙәгеҙ, эргәһенә индерәм.

— Алдай, — тине Батыр. — Алдай! Киттек бынан!

Әмилә, ни эшләргә белмәйенсә, бер тупһала торған санитарға, бер Батырға ҡараны.

Ул арала теге ир тупһанан төшөп бында табан атланы.

Батыр ҡыҙҙың ҡулына йәбеште:

— Ҡастыҡ!

Әмилә ҡурҡҡан күҙҙәрен санитарға төбәгән дә ҡатып ҡалған. Малай уның ҡулынан һелкетә тартты:

— Әмилә! Әйҙә!

Киләһе секундта улар торған урындарында ҡырҡа боролдолар ҙа больницаны уратып алған ҡойманың ҡапҡаһына табан йүгерҙеләр.

— Эй, туҡтағыҙ! — тип ҡысҡырҙы санитар. — Ниңә ҡасаһығыҙ?

Батыр артына әйләнеп ҡараны. Санитар уларҙың артынан ҡыуа төшкәйне. Тимәк, шиге дөрөҫләнде — был Батыр менән Әмиләне тотмаҡсы.

— Йүгерә! — тине малай ҡыҙға. — Тиҙерәк!

Ошо һүҙҙәрҙе көткәндәй, Әмилә йәһәтерәк йүгерә башланы. Тик санитар ҡалышырға уйламай ҙа.

Бына урамға килеп сыҡтылар. Ана, Әмиләнең осҡосо! Уға тиклем илле аҙымдар тирәһе. Өлгөрәләрме, юҡмы? Батыр йәнә артына өйләнеп ҡарап алды. Санитар уларға етеп килә. Тиҙерәк!

Бер аҙҙан малай менән ҡыҙ осҡосҡа барып терәлде. Әмилә паролде әйтте — ишек асылды...

Санитар килеп еткәндә, малай менән ҡыҙ осҡос эсендә ине инде. Тағы бер-нисә секундтан Әмиләнең машинаһы ерҙән айырылды. Ни эшләргә белмәгән санитар, ҡулдарын болғап, аҫта тороп ҡалды.

Һаман тыныслана алмаған Батыр, тәҙрәгә һыйынып, тегене күҙәтте. Бер аҙҙан ул, бәләкәсәйеп, бөтөнләй күҙҙән юғалды...

Аҫта Ер кешеһе өсөн сәйер күренеш асылды.

Ҙур шарҙы хәтерләткән өйҙәр. Тәҙрәләре лә түңәрәк, әйтерһең, иллюминатор. Урам тигән нәмә юҡ, улар урынына өйҙәрҙең береһенән икенсеһенә һуҙылған торбалар — уның эсенән ике-өс кеше генә һыйырлыҡ кабиналар елдерә...

Инде нисәнсе ҡат күрә быларҙы Батыр, әммә һаман да күнегә алмай. Бына хәҙер ҙә, яңы ғына үҙҙәренә янаған хәүефте онотоп, аҫтағы күренештәргә хайран ҡалып бара...

— Һин берәй нәмә аңланыңмы? — тип һораны Әмилә, осҡосоноң рулен борғослап.

— Аңланым.

— Нимә?

— Санитар — дошман. Атайың уларҙың ҡулында. Беҙгә лә һаҡ булырға кәрәк.

Әмилә Батырға ҡурҡҡан күҙҙәрен төбәне.

— Улар ҡулында?.. Ә кем һуң улар?

— Белмәйем.

— Һин һаман да Ер ҡанундары менән йәшәйһең, — тине Әмилә, үҙ һүҙләнеп. — Бында Ур! Ур! Беҙҙә енәйәтселәр юҡ! Тимәк, атайымды урлар, ҡайҙалыр илтеп бикләр кешеләр юҡ!

— Ә санитар?

Ҡыҙ, ни тип әйтергә лә белмәйенсә, шымып ҡалды.

— Беҙҙең өсөн ике генә юл бар хәҙер, — тине Батыр. — Йә өлкәндәрҙең береһенә был хаҡта әйтергә кәрәк...

— Әйтә алмайбыҙ. — Әмилә ауыр көрһөндө. — Атайымдың Урҙа икәнлеген бер кем дә белмәй. Һәм белергә лә тейеш түгел.

— Улайһа, — тине Батыр. — Уны үҙебеҙгә ҡотҡараһы ҡала...

## *Оло сер*

Эйе, Лайондың Урҙа икәнлеген бер кем дә белмәй. Ни өсөн тиһәң, Ерҙән ҡайтыу менән уны Ур планетаһын һаҡлау системаһының етәксеһе итеп ҡуйҙылар. Ә был бик яуаплы вазифа. Сөнки ул планетаның иң оло серен белгән берҙән-бер кеше. Хәҙерге ваҡытта йыһандан килгән тырнаҡ осондай әйбер ҙә Урға үтеп инә алмай. Планетаны махсус тулҡындар һаҡлай. Был хәүефһеҙлек өсөн эшләнгән. Ә төрлө яҡтарға караптар нисек осоп китә, әйләнеп ҡайта тиерһегеҙ. Уларҙы сығарып-индереү өсөн йәшерен урын бар. Ана шуны белә лә инде Лайон — һаҡлау системаһының етәксеһе. Ниңә быны башҡаларҙан йәшерәләр һуң? Сөнки бынан бер нисә йыл элек Урға эргәләге сит планетанан һөжүм яһарға маташтылар. Шунан бирле эшләп килә лә инде һаҡлау системаһы. Әммә Урҙа шул планетанан — Мойостан — килгән кешеләр бар тигән шик йөрөй. Сөнки Урҙа ни эшләнгәнен теге планетала белеп торалар. Шул кешеләр, имеш, Урҙың иң оло серен ҡулға төшөрөргә маташа. Дөрөҫтөр. Сөнки ул саҡта һөжүм өсөн ишек асылыр ине... Ошо сәбәпле Лайондың Урҙа икәнлеген бер кем дә белергә тейеш түгел. Хатта уға үҙенең ҡыҙы менән осрашырға рөхсәт ителмәй. Һәммәһе өсөн дә Лайон сит планетала эшләй, тип һанала. Әммә бер көнө Лайон был инструкцияны боҙҙо...

Оҙаҡ ҡына ваҡыт көн тип, төн тип тормай эшләгәнгәме, бер мәл Лайон үҙенең ныҡ ҡына арығанлығын тойҙо. Тикшереү үткәйне, уға ял итеп алырға кәрәк ине.

Лайонға больницаға ятып бер аҙ дауаланып алырға ҡуштылар. Ә унан тиҙ генә сығыу мөмкин түгел. Шуға ла Лайон Әмиләне күреп китмәк булды. Һағынған ине ул ҡыҙын...

Әлбиттә, ул быны йәшерен эшләне. Сөнки ҡыҙы өсөн дә Лайон сит планетала ине бит, тимәк уға ла үҙенең бындалығын һиҙҙерергә хаҡы юҡ.

Әсәһе үлгәндән бирле улар икәүләшеп кенә йәшәй. Шуға ла Лайон һәр саҡ Эмиләне үҙе менән алып йөрөргә тырыша ине. Ошо серле эшкә ҡусҡанға ҡәҙәрле... Хәҙер аратирә телефон аша ғына һөйләшеп алалар. Бер уйлаһаң, борсолорға урын да юҡ кеүек... Эмилә уҡый, махсус роботтар, компьютерҙар уны ашата, тәрбиәләй. Шуға ҡарамай ҡыҙын оҙағыраҡ күрмәһә Лайондың күңелен һағыш солғай башлай, шул мәл Эмиләһен күрмәһә аҡылдан шашыр хәлгә етә. Быңдай тойғоно ҡыҙы ла кисерә, буғай...

Һәм Лайон ҡыҙы янына ашыға. Быныӊ йәнә бер сәбәбе бар шикелле. Һуңғы ике-өс тиҫтә йылдар эсендә Ур планетаһында аҡылдан шашҡан кешеләрҙең һаны артҡандан-арта бара. Уларҙың һәр береһе нормаль булып тыуа, үҫә, уҡый һәм ни сәбәптәндер егерме-егерме биш тирәһендә иҫәрләнә. Инде нисәмә йыл йөҙәрләгән ғалим быныӊ серенә төшөнә алмай. Ана шуға ла Лайон ҡыҙын ҡайғыға, һағышҡа һалмаҫҡа тырыша. Кем белә, бәлки, теге ҡурҡыныс ауырыуҙың сәбәптәренең береһе шулдыр...

Больницаға ятыр алдынан Лайон йәшерен рәүештә ҡыҙына һуғылды. Ата менән ҡыҙ бер-береһен һағынғайнылар, оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙылар, шатлыҡ-ҡыуаныстары менән уртаҡлаштылар. Эмилә уҡыуы тураһында, Лайон сит планетала күргәндәре хаҡында һөйләне. Бик күңелле булды был осрашыу. Лайондың күңеле күтәрелеп китте. Бер нәмә генә күңелен өйкәй. Осрашыу мәлендә, хискә бирелеп китеп, Лайон ҡыҙына үҙенең ҡайҙа эшләйәсәген әйтеп һалды. Аҙаҡ үкенә биреп тә ҡуйҙы. Сөнки ул был хаҡта бер кемгә лә әйтмәҫкә, тип ант итте. Һәм быңа... Ярай, Эмиләгә ышана ул...

Аҙаҡтан Лайон ҡыҙына хәлде аңғартты. Уның Урҙа икәнлеге оло сер. Быны бер кем дә белергә тейеш түгел.

— Ә беҙ ҡасан осрашырбыҙ? — тип һораны Эмилә борсоулы күҙҙәрен атаһына төбәп.

Лайон дауалау урынынан тиҙ генә сыҡмаҫ. Хатта ҡайһы бер ул тиклем серле булмаған эштәрен больницанан алып барырға йыйына. Әммә Эмиләне оҙаҡ күрмәһә... Хәйер, йәшеренеп кенә осрашырға була. Барыбер ҡыҙы белә бит инде уның Урҙа икәнлеген...

Лайон ятасаҡ палата икенсе ҡатта. Әгәр Эмилә тәҙрәгә күтәрелһә... Нисекме? Стенаға баҫҡыс килтереп һөйәйһең дә... Был бит иҫ киткес ябай ысул. Ул бер кемдең дә башына килмәйәсәк...

Лайонды ике санитар ҡарай. Уларҙан башҡа бер кемгә лә Лайон янына инергә рөхсәт ителмәй. Эргәлә кабинет

кеүек урын бар. Унда тиҫтәгә яҡын телефон, телевизор, пульт. Шулар аша Лайон үҙенә кәрәк нәмәне күрә, белешә...

Тәүге көн тыныс ҡына үтте. Иртәгеһенә Лайон тулҡынланып уянды. Ни өсөн? Бөгөн уның янына тәүге тапҡыр ҡыҙы килергә тейеш. Шул мәл санитарҙы нисек тә палатанан сығарып ебәрергә кәрәк.

Ошондай уйҙар менән Лайон телевизор янында ултыра, пульттарҙы күҙәтә. Бына ул санитарҙың ингәнен ишетә, әммә боролоп ҡарамай. Сөнки ваҡыты юҡ. Әммә торған һайын Лайондың күңелен ниндәйҙер бер сәйер тынысһыҙлыҡ солғай бара. Әйтерһең, уға оло ҡурҡыныс янай. Ләкин Лайондың артына әйләнеп ҡарарға мөмкинселеге юҡ, ул телевизорҙағы ваҡиғаларҙан ҡарашын алырға тейеш түгел — унда һаҡлау системаһында барған серле булмаған эштәрҙе күрһәтәләр...

Ә хәүеф үҫкәндән-үҫә бара... Бына инде Лайондың түҙеме бөттө, ул артына әйләнеп ҡарай башланы...

Шул мәл Лайон үҙенең аңын юғалта барыуын тойҙо. Ул шунда уҡ урынынан ырғып торорға итте, тик булдыра алманы. Лайон көтмәгәндә үҙен ҡап-ҡараңғы соҡор эсенә төшөп киткән кеүек итеп хис итте...

### *Батыр Ур планетаһында*

Бындағы иҫәп буйынса Батыр инде Ур планетаһында айға яҡын йәшәй. Быны Әмиләнән башҡа бер кем дә белмәй. Һәр кеше артынан күҙәтеүсе, уларға ярҙам итеүсе меңәрләгән компьютерҙар, роботтар менән тынҡыслап тултырылған планетала ла йәшенеп йәшәргә була икән. Әлбиттә, был еңелдән түгел.

Шуға ла Әмилә Ерҙән Урға ҡарай осҡан мәлдә үк атаһына Батыр хаҡында аңғартып ҡараны.

— Атай, — тине ҡыҙ мөмкин тиклем ғәмһеҙ тауыш менән. — Әгәр берәй Ер кешеһен Урға алып китһәк, ни булыр ине икән?

— Ярамай. — Осоу графигын күҙәткән Лайон ҡыҫҡа ғына яуапланы.

— Беләм ярамағанлығын. Шулай ҙа алып китһәк...

— Был ике планетала ла билдәһеҙ ситуация тыуҙырасаҡ — Урҙың да, Ерҙең дә яҙмышы кескәй генә сәбәп арҡаһында билдәһеҙ яҡҡа боролоп китеүе бар...

— Бер кеше арҡаһындамы? — тип аптыраны Әмилә.

— Эйе. Сөнки ул кешене юғалтҡас, Ерҙә ни булырын бер кем дә белмәй. — Лайон, ҡыҙының аңламауын тойоп, өҫтәп ҡуйҙы. — Күҙ алдыңа килтер: Батырҙы алып киттек

икән, ти. — Ошо урында Әмиләнең йөрәге жыу итеп ҡалды. — Ә Ерҙә ҡалһа, бәлки, ул юл сатында торған бер кешене туҡтатып ниҙер һорар, шул арҡала тегеһе ҡайҙалыр һуңлар ҙа, уйламағанда, бер ҡыҙ менән танышыр, уларҙың балаһы иҫ киткес аҡыл эйәһе булыр, ул Ерҙә һуғыш булдырмау ысулын уйлап табыр. Ә Батыр Урға китһә, тегене туҡтатмаҫ ине, шул арҡала ул баяғы ҡыҙ менән таныша алмаҫ. Тимәк балалары ла даһи булмаясаҡ. Бына бит...

Әмилә бер аҙ өндәшмәй торҙо.

— Әгәр мин Батырҙы үҙем менән алып киткән булһам... Ул саҡта ни эшләр инең?

Лайон ҡыҙына шикле ҡараш ташланы. Әмилә көлөп ебәрҙе.

— Ҡурҡма. Былай ғына һорайым бит.

— Алып киткән булһаң, хәҙер үк карапты кире борор инем...

Һәм Әмилә атаһына Батыр хаҡында өндәшмәне.

Урға килделәр. Әмилә ҙур ҡыйынлыҡтар менән, бер кемгә лә һиҙҙермәйенсә, Батырҙы ҡара ҡумтанан, аҙаҡ караптан сығара алды һәм быға бик ҡыуанды. Әммә иң оло ауырлыҡтар алда булған икән...

Тәүҙә, Батырҙы ҡайҙа йәшәтергә, тигән һорау килеп тыуҙы. Ярай, атаһы өйҙә барлығы өс көн генә булды ла оҙайлы командировкаға юлланды. Ул мәл Батыр ҡыҙҙың осҡосо эсендә йәшәп торҙо. Шунан ҡыҙҙың фатирына күсте.

Йәнә Батырға ашарға ла кәрәк бит. Урҙа, Ерҙәге кеүек, магазиндар юҡ. Бында бер ҡайҙан да инә һалып кәрәк нәмәне һатып алып булмай. Һәр кем ашханала ашай. Ә унда махсус компьютерҙар ризыҡты һәр кемгә һанап ҡына бирә. Өҫтәл артына ултырыу менән ҡаршылағы экранда килтерелгән ризыҡта күпме май, нисә калория барлығы хаҡында һандар яна. Унда аҡһым менән витаминдың күпмелеге лә яҙылған. Әгәр ашап бөтөрмәһәң, экран йәнә күрһәтә: күпме аҡһым, витаминдар һинең организмыңа эләкмәне. Ошо һандар һәр кемдең карточкаһына теркәлә бара икән. Бына мөғжизә!

Врач-роботтар ун йыл үткәс тә бөгөн һинең ни ашағаныңды белә ала.

— Нимәгә кәрәк ул? — тип һораны Батыр быны ишеткәс.

— Кеше ауырып китә ҡалһа, уның нисек туҡланыуына ҡарап дауалау ысулын әйтәләр.

Бөтә нәмәне күҙәтеп барыусы роботтар арҡаһында сит планетанан килгән кеше ашханала рөхсәтһеҙ ашай алмай. Шуға күрә ашау мәсьәләһен нисек хәл итергә тип, малай менән ҡыҙ оҙаҡ ҡына уйланды. Тәүҙә Әмилә роботтар янына барып, үҙенең туймауы хаҡында әйтте, рационды ике тапҡыр арттырыуҙарын һораны.

— Ярамай, — тине робот ғәмһеҙ тауыш менән. — Һин алған порция ун ике йәшлек ҡыҙ өсөн таман.

— Ә мин туймайым. — Эмилә уҫал итеп өндәште. Әммә робот эмоцияларға бирелә торғандарҙан түгел шул.

— Ярамай, — тип ҡабатланы ул йәнә тыныс ҡына. — Һин алған порция ун ике йәшлек ҡыҙ өсөн етерлек.

Уйлай торғас, сараһын таптылар. Эмилә врачҡа барып, үҙенә күпме ашарға кәрәклеге хаҡында ҡағыҙ яҙҙырып алды ла бер аҙҙан йәнә робот-врач янына барып инде.

— Миңә программаны ҡабаттан яҙып бирегеҙ, — тине ҡыҙ.

— Һиңә бирҙек.

— Мин уны юғалттым.

Ни эшләйһең — ҡыҙҙы күрә тороп ас ҡалдырып булмай бит — роботтар ҡабаттан яҙып бирҙеләр. Ашханала Эмилә ике программаны ла компьютерға тапшырҙы, шулай итеп ашарға ике порция ала башланы.

Кейем мәсьәләһен анһатыраҡ хәл иттеләр. Урҙа кер йыуыу юҡ. Һәр кейемде кешеләр ниндәйҙер ваҡыт кейеп йөрөйҙәр ҙә, быҫрана төшкәс, махсус урынға илтеп тапшыралар, урынына яңыларын алалар. Компьютерҙар бында ла һәр кемде иҫәпкә алып тора. Батыр Урға килгәс тә Эмиләнең салбарға оҡшаш кейемдәрен кейеп алды. Тегеләр кәрәкһә, Эмилә бер үҙе генә барып, икеһе өсөн дә яңы кейемдәр алып килә.

— Иҫкеләрен ҡайҙа итәләр? — тип һорағайны Батыр. Баҡһаң, уларҙы махсус рәүештә эшкәртеп, буяп, яңыртып сығаралар икән.

Көндәр үтә торҙо. Батыр инде сит планетаға күнегә лә башланы, ул инде юҡ-бар нәмәгә аптырамай, роботтар менән еңел генә һөйләшә. Ҡыҙҙың ике кеше генә ултырырлыҡ осҡосон йөрөтөргә лә өйрәнеп алды. Батыр менән Эмилә һәр саҡ бергә. Шуға малайға бойоғорға ваҡыт та юҡ тиерлек. Әммә Ер Батырҙың иҫенә йыш ҡына төшә. Унда дуҫтары, класташтары ни эшләй икән? Урҙа тәүлек оҙонораҡ. Тимәк Ерҙә инде өс ай ҙа үткәндер. Көҙ килгәндер. Мәктәптәрҙә уҡыуҙар ҙа башланғандыр. Бөтәһе лә үҙҙәренең урынында ултыралыр, тик Хәлит янында Батырҙың урыны ғына буштыр. Уның ҡайҙа юғалғанын бер кем дә белмәйҙер... Бына уйламағанда ҡайтып төшәп, барыһын да аптыратаһы ине!..

Бушыраҡ ваҡытта Батырҙы ана шундайыраҡ уйҙар солғай, ул үҙенең Ерҙе һағына башлауын тоя. Шунан йәнә нәмә менәндер мауыға һәм онотола...

Бына шулай йәшәп ятҡанда ҡыҙҙың атаһы больницаға эләкте.

Ә бөгөн Батыр менән Эмилә Лайондың юғалыуын белде.

Тимәк, Лайонды Батыр менән Әмилә генә ҡотҡара ала — планетаны һаҡлау системаһы етәксеһенең юғалыуын уларҙан башҡа бер кем дә белмәй бит. Һиҙә балалар: теге санитар ҡара уй менән йөрөй. Ул Лайонды ҡайҙалыр йәшереп, урынына икенсе кешене һалып ҡуйған. Быныһы инде Урҙағы һәр кемдең артынан күҙәтеүсе компьютерҙарҙы алдаштырыу өсөн. Йәнәһе, Лайон палатала...

Ниңә урлағандар ҡыҙҙың атаһын? Ҡайҙа иткәндәр? Был һорауҙар Әмилә менән Батырға тынғы бирмәй. Хәйер, Лайонды ни өсөн генә урлаһалар ҙа, уны ҡотҡарырға кәрәк.

Ҡыҙ менән малай байтаҡ уйлағас, ошондай фекергә килде: нисек тә больница эсенә үтеп инергә һәм санитарҙы күҙәтергә. Ул, моғайын, ҡыҙҙың атаһы янына баралыр, уның менән осрашалыр. Әгәр Лайондың ҡайҙа икәнлеген белһәләр... Ҡалғанын күҙ күрер...

Һәм бына Әмилә менән Батыр йәнә больница янында торалар.

Эскә инеүе ул тиклем ауырҙан булманы. Бер врач ағай, шифр йыйып, ишекте асты. Үҙенә эйәрергә йыйынған балаларға һораулы ҡараш ташлағайны:

— Беҙҙең атайыбыҙ ошонда ята, — тине Әмилә.

Бына улар һаҡ ҡына икенсе ҡатҡа күтәрелде. Ана, Лайон ятҡан бүлек. Теге санитар ошо тирәлә өйрөлөргә тейеш. Хәйер, төптәге өҫтәл артында ултырған әҙәм үҙе түгелме? Шул бит!

Малай менән ҡыҙ тиҙ генә баҫҡыс артына һыйынды. Теге, ниҙер һиҙенгән кеүек, урынынан тороп, бүлексәнең ишеге янына килде, тирә-яғына ҡаранып алды. Хас бур кеүек ҡылана. Ана, еңел һулап ҡуйҙы. Күрәһең, нимәнәндер ҡурҡа, борсола.

Бына ул палатаға инеп китте. Бер аҙҙан унан һөйләшкән тауыштар ишетелде. Тимәк, унда кемдер бар. Тик ул Лайон түгел — бөтөнләй икенсе кешенең тауышы. Бик борсоулы һөйләшәләр — әллә талашалар, әллә нимәнәндер ҡурҡҡандар...

Бер аҙҙан санитар, палатанан сыҡты ла, ҡайҙалыр йыйына башланы. Әмилә менән Батыр бер-береһенә ҡараштты. Әгәр теге больницаны ташлап китһә, ни эшләргә? Бында ҡалырғамы, әллә уға эйәрергәме? Малай менән ҡыҙ ҡабаланып уйланы. Шунан ошондай фекергә килделәр. Батыр, бында ҡалып, палатаны күҙәтә, ә Әмилә санитарға эйәрә...

Санитар, больницанан сыҡҡас, өйҙәрҙе тишеп, йыуан торба эсенән елеүсе йәшниктә алға елдерҙе. Киләһенә Әмилә инеп ултырҙы.

Йәшник бәләкәй генә — эсендә ике кешелек кенә ул-

тырғыс бар. Пульт keүек ерендә төрлө кнопкалар, тумблерҙар күренә. Уларға баҫып кабинаны хәрәкәткә килтерәһең, кәрәк ерҙә туҡтатырға мөмкин.

Был юлы Әмилә йәшниккә шундай фарман бирҙе: санитарҙың кабинаһы артынан эйәрергә! Аҡыллы машина аңланы ҡыҙҙы һәм ҙур тиҙлек менән алға йомолдо.

Әмилә тәҙрәнән ҡарашын алға ташланы. Ана, санитар ултырған йәшник. Боролоштарҙа күҙҙән юғалып ала, тура урынға сығыу менән йәнә күренә. Йыуан торба эсендәге уттар емелдәй, тимер юлы ялтырап ята. Ваҡыт үтә, өйҙәр эсендәге станциялар йылтлап артта ҡала, унда ара-тирә кешеләр күренгеләй...

Бер аҙҙан Әмиләнең йәшниге тиҙлеген кәметә башланы. Ҡараһа, алдағы һауыт туҡтаған, санитар унан сығып бара. Ҡыҙ уға күренмәҫкә тырышты. Бына санитар йәшниген юлдан ситкә сығарып ҡуйҙы. Шунан өйҙөң баҫҡысы буйлап өҫкә күтәрелә башланы.

Әмилә лә тиҙ генә йәшниген тимер юлынан ситкә алды һәм тегенең артынан йүгерҙе.

Санитар, өсөнсө ҡатҡа еткәс, бер ишек янында туҡтаны. Бына ул артына ҡарап алды. Һаҡ торған ҡыҙ шунда уҡ баҫҡыс артына ныҒыраҡ һыйынды, тын алмаҫҡа тырышты. Санитар яҡында ғына, хатта ныҡлап ҡолаҡ һалһа, ул Әмиләнең дарҫлап типкән йөрәгенең тауышын ишетер кеүек.

Санитар, эргәһендә бер кемдең дә юҡлығына ышанғас, әкрен генә өндәште:

— Ур беҙҙеке булыр!

Киләһе секундта ишек асылды, санитар фатирға инеп китте.

Әмилә йүгереп килеп ишеккә терәлде — берәй нәмә ишетмәҫме? Юҡ, шылт иткән тауыш та килмәй.

Ни эшләргә? Ул паролде белә!.. Әммә эскә инһә, үҙе теләп тоҙаҡҡа эләккән кеүек килеп сыҡмаҫмы? Бәлки, ошонда йәшенеп кенә санитарҙың сыҡҡанын көтөргәлер? Ләкин ул саҡта бер ни ҙә белә алмаясаҡ! Паролде ишеткәс, бында ҡалырға нисек түҙеме етһен?! Юҡ, эскә инергә лә унда нимәләр эшләнгәнен белергә кәрәк! Ә сыға алмаһа?

Әмилә уйға батты. Оҙаҡҡа һуҙырға ярамай, тиҙерәк берәй ҡарарға килергә! Бына ул тотолдо икән, ти... Ул саҡта Батыр һис шикһеҙ икенсе юлы санитарға эйәреп киләсәк... Туҡта!.. Әмилә стенаға был ишектең паролен яҙып ҡалдыра! Башҡорт телендә! Ул саҡта санитар, был яҙыуҙы күрһә лә, бер ни аңламаясаҡ!

Ҡыҙ ҡәләмен сығарҙы ла тиҙ генә стенаға һыҙғысланы.

«Батыр! Мин 18-се фатирҙа. Ишектең пароле: «Ур беҙҙеке булыр!» Ур телендә әйтергә кәрәк. Әмилә».

Әмилә һиҙенә: атаһы ошонда! Шулай булғас, ул инмәй түҙә аламы ни?

— Ур беҙҙеке булыр! — тине ҡыҙ тәүәккәл тауыш менән.

Ишек асылды, ҡыҙ эскә атланы.

*Лайон тотҡонда*

Лайон иҫенә килгәс, үҙе менән ни булғанын аңламай ятты. Шунан һуңғы көндәрҙәге ваҡиғаларҙы хәтерләргә тотондо. Ул больницала... Әмиләнең килергә тейешлеге... Санитар... Уның эргәлә генә мыштырлауы... Ҡалғанын иҫләмәй. Тимәк, санитар уның иҫен юғалттырған!..

Был уй Лайонды тертләтте. Дошмандар ҡулына эләктеме икән ни? Тимәк былар уның оло сер менән бәйләнгәнен белгәндәр!

Лайон, ни ҙә булһа эшләргә теләп, урынынан ырғып торорға итте лә киләһе секундта ыңғырашып кире карауатына ҡоланы.

Әйтерһең, ҡалҡына ғына башлағайны, уның өҫтөнә ҙур таш килеп төштө — бөтә тәне ауыртып китте. Лайон ҡулаяғына күҙ һалды — әллә бәйләгәндәрме? Юҡ... Эш ниҙә һуң? Лайон йәнә торорға маташып ҡараны, әммә киренән баяғы хәл ҡабатланды. Шунда ғына Лайон аңланы. Уны карауатҡа магнит тулҡындары менән ҡыҫҡандар. Саҡ ҡына урынынан ситкә шылһа, йәки күтәрелә башлаһа, Лайон шул тулҡындар эсенә эләгә һәм тәндә түҙеп торғоһоҙ ауыртыу тыуҙыра... Хәҙер бер ниндәй шик ҡалманы: ул тотҡонда! Тимәк, быларға Лайондың сере кәрәк. Хәҙер улар нисек тә уны Лайондан әйттерергә тырышырҙар. Ләкин ул сер сиселһә, Ур планетаһының ишеге теләһә кем өсөн асылыр. Иң алда күрше планетаның — Мойостың — кешеләре һөжүм итәсәк...

Юҡ! Лайон Урҙың серен бер кемгә лә, бер ҡасан да әйтмәҫ. Ул бит планетаның хәүефһеҙлеге өсөн яуап бирә, Урҙа йәшәүселәрҙең тыныс, бәхетле тормошо уның ҡулында...

Тәүге көн ашарға килтереүсе ирҙән башҡа Лайон янына бер кем дә инмәне. Лайон бының менән һөйләшергә тырышып ҡараны, әммә теге, ауыҙына һыу уртлағандай, ләммим өндәшмәне.

Шулай итеп икенсе көндөң яртыһы үтте...

Төштән һуң ғына Лайон янына теге больницала уралған санитар менән бер бәләкәс, сандыр кәүҙәле һаҡалтай ир килеп инде.

Тәүҙә Лайон, күкрәген йырып килгән асыуға түҙә алмайынса, санитарға ҡысҡырмаҡсы итте лә, киләһе секунд-

та кире уйланы. Был бит файҙаһыҙ! Хәҙер улар үҙҙәренең маҡсатына ирешмәйенсә барыбер Лайонды бынан сығармаҫтар. Тимәк, сығырҙан сығып бармаҫҡа, тыныс булырға һәм түҙергә... Лайон инеүселәргә иғтибар итмәне һәм бер ни булмағандай урынында ята бирҙе.

Санитар менән һаҡалтай карауатҡа яҡынлашты.

— Йә, хәлдәр нисек? — һаҡалтай шулай тип һораны.

— Һәйбәт, — тине Лайон тыныс тауыш менән.

— Үҙеңдең ҡайҙа икәнлегеңде beләһеңме?

— Һиҙенәм.

— Мойос планетаһын ишеткәнең барҙыр?

— Әлбиттә. Мойоста ҡанһыҙ әҙәмдәр йәшәй, — тине Лайон. — Улар башҡа планеталарҙы баҫып алып, унда йәшәүселәрҙе ҡолға әйләндерәмәкселәр.

— Уҫал әйтәһең, — тине һаҡалтай. — Әммә һүҙҙәреңдә хаҡлыҡ бар. Бөтә эш шунда: кем аҡыллыраҡ, шулар йыһанға хужа булырға тейеш. Тәбиғәт юҡҡа ғына беҙгә аҡылды күберәк бирмәгән бит.

— Тимәк, һеҙ Мойос планетаһынан?

— Эйе. Хәҙер ни өсөн урланғаныңды аңлайһыңдыр?

— Һиҙенәм.

— Бына шулай. Һинең юғалыуыңды бер кем белмәй. Һәм белмәйәсәк. Сөнки больницала һинең урында беҙҙең кеше ята. Һеҙҙең компьютерҙар уны һин тип уйлай. Шуға бер кем борсолмай. Нисек кенә борһаң да, беҙгә Урҙың серен асырға тура килер.

— Юҡҡа өмөтләнәһегеҙ, — тине Лайон. — Мин уны һеҙгә әйтәсәгем юҡ.

— Ихтыярың. — Һаҡалтай көлөмһөрәне. — Беҙ һиңә ике көн уйларға бирәбеҙ. Ә шунан... Махсус камерабыҙ бар. Ул әлегә эшләмәй. Ике көндән йүнәтәбеҙ. Шунан... Махсус камераға индереп иҫтән яҙҙырасаҡбыҙ ҙа мейеңдә ни бар бөтәһен дә уҡыясаҡбыҙ. Унан һуң һин иҫәр булып ҡаласаҡһың.

Лайон бер ни ҙә өндәшмәне. Һаҡалтайҙың ысынды һөйләгәнен белә ул. Ундай камера Урҙа ла бар. Яңыраҡ уйлап тапты бер ғалим. Шунда уҡ уны бер ҡасан да ҡулланырға ярамай тигән ҡәтғи закон сығарҙылар. Ул камерала булып сыҡҡан кеше бит тере мәйеткә әүерелә. Башҡа планеталарҙы баҫып алырға, унда йәшәүселәрҙе ҡолға әүерелдерергә теләүселәр өсөн был сүп, әлбиттә... Тик барыбер Лайон өсөн башҡа юл юҡ. Ул серҙе әйтмәйәсәк. Әгәр камераға индерәләр икән, индерһендәр. Лайон үҙен ҡорбан итер, әммә намыҫын һаҡлап ҡалыр...

Туҡта! Уларҙың камераһы әлегә эштән сыҡҡан. Тимәк, Лайондың алда әле ике көнө бар. Ошо арала ҡотолоу сараһын табып булмаҫмы икән ни?..

Фатирға ингәс тә Әмилә, шымып, тирә-яғына ҡолаҡ һалды. Эстәрәк һөйләшкән тауыштар ишетелә. Туҡта! Унда атаһы ла бар бит!

Әмилә ҡыуанысынан алға уҡталды ла... ҡапыл тыйылды. Ашығырға ярамай. Атаһы бит тотҡонда! Хәҙер барып инһә, Әмиләне лә эләктерәсәктәр. Ни эшләргә? Бында ла оҙаҡ тороп булмай. Килеп сығыуҙары бар...

Ҡыҙ, ҡабаланып, йәшенерҙәй урын эҙләргә кереште. Бына кейем шкафы! Ишеге бикле түгел. Әмилә уны асты ла эскә инде. Бында күренмәй ултырырға була... Әмилә шымып ҡалды.

Теге бүлмәлә һаман һөйләшәләр. Атаһының тауышы ара-тирә ҡыҙҙың ҡолағына килеп бәрелә. Һүҙҙең нимә хаҡында барыуын аңлап булмай. Шуныһын ғына тойомларға мөмкин: таныш түгел әҙәмдәр ниҙер төпсөнә, ә Лайон уларға ҡаты ғына итеп яуап бирә...

Күпмелер ваҡыт үтте.

Бер мәл тауыштар тынды, бына алъяҡҡа яҡынлаша башлаусы аяҡ тауыштары ишетелде. Күп тә үтмәй, таныш түгел кешеләр туҡтап ҡалды һәм шыбырлашып ҡына үҙ-ара һөйләшергә кереште.

Улар Әмиләнең эргәһендә генә, шкафтың йоҡаҡ ишеге артында ғына тора. Хатта тегеләрҙең тын алыуын асыҡ ишетә ҡыҙ. Шуға ла үҙе бик шым ултырырға тырыша. Әгәр саҡ ҡына ҡыштырлаһа, тегеләр ишетәсәк...

— Һин ике көндән, тинең. — Санитарҙың тауышын Әмилә шунда уҡ таныны. — Был оҙаҡ!

— Өлгөрмәйбеҙ.

— Ашыҡтырырға кәрәк. — Санитар ҡәнәғәтһеҙ өндәште. — Бөгөн үк камераға тығырға ине үҙен!

— Камераһыҙ әйттерергә тырыш, — тине икенсе кеше бойороҡ биргән төҫлө. — Лайон беҙгә кәрәк буласаҡ әле. Ә камеранан һуң... Үҙең беләһең, ул мәйеткә әүереләсәк...

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, Әмиләнең тәне әҫеле-һыуыҡлы булып китте. Атаһына оло ҡурҡыныс янай! Ҡыҙҙың йөрәге дарҫлап тибә! Хәҙер бандиттар уның йөрәк тауышын ишетә төҫлө.

— Мин бер нәмәгә борсолам, — тине бер аҙ торғас санитар. — Кисә Лайондың ҡыҙы, ниндәйҙер бер малайҙы эйәртеп, больницаға килеп китте.

— Шунан? — Икенсе ирҙең тауышы бик хәүефле ине.

— Мин палатаға индермәнем. Шунан улар әллә ҡайҙан баҫҡыс тапҡандар ҙа тәҙрәгә күтәрелгәндәр. Ә карауатта, билдәле, Лайон түгел, беҙҙең кеше ята...

— Улар күрҙеләрме?

— Минеңсә, күрҙеләр. Тик эштең ниҙә икәнлеген аңланылармы, юҡмы — билдәһеҙ.

— Ниңә был хаҡта кисә үк әйтмәнең? — Билдәһеҙ кеше асыулы итеп өндәште.

— Мин уйлағайным...

— Уйлағайным... Шунда уҡ тоторға ине!

— Булдыра алманым. Улар ҡасып китте.

— Хәҙер Лайондың етәкселәренә барып әйтәсәктәр!

— Әйтерҙәрме икән? — тип шикләнде санитар. — Лайондың Урҙа икәнлеген бер кем дә белмәй. Был сер. Әгәр уны ҡыҙына әйткән икән, тимәк Лайон инструкцияны боҙған. Уның өсөн Урҙа ла баштан һыйпамаҫтар. Күрәһең, ул ҡыҙына Урҙа икәнлеген әйткән, әммә иҫкәрткән: быны бер кемгә лә белдермә, тигән.

— Һин тынысландырма мине! — Билдәһеҙ кеше бөтөнләй ҡыҙып китте. — Бөгөн үк ул ҡыҙ менән малайҙы тап һәм... юҡ ит! Операцияның яҙмышын улар ҡулына тапшырырға хаҡыбыҙ юҡ!

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, Әминә ҡурҡышынан ҡалтырарға кереште. Әгәр ҡыҙҙың бында икәнлеген һиҙһәләр, уны... үлтерәсәктәр! Был бит ҡот осҡос! Ҡыҙ дерелдәй башланы. Шул арҡала тын алышы өҙөк-өҙөк булып китте. Хәҙер алъяҡта торғандар уны ишетә бит! Әминә, бар ихтыяр көсөн йыйып, тынысланырға теләй, әммә булдыра алмай. Бына-бына ҡурҡышынан һулҡылдап илап ебәрер төҫлө.

— Аңлашылды! — тине ул арала санитар. — Бөгөн үк уларҙы табырбыҙ!

Ҡапыл билдәһеҙ ир һағайҙы:

— Туҡта! Бында беҙҙән башҡа кеше бармы?

— Юҡ. — тине санитар. — Ни булды?

— Мин ниндәйҙер ҡыштырлау ишетәм!

Алъяҡта торған кешеләрҙең улай-былай атлауы ишетелде. Бына шкафтың ишеге асылып китте!..

Уның эсендә торған ҡыҙҙы күргәс, һаҡалтай, ҡото осоп, ситкә ырғыны:

— Кем был? Нисек килеп эләккән бында?!

Әминә, ни эшләргә белмәйенсә, тышҡа атылды, әммә уны шунда уҡ тотоп алдылар.

— Был Лайондың ҡыҙы! — тине санитар Әминәне танып ҡалып.

Һаҡалтай шаҡ ҡатты:

— Нисек ингән бында?

— Белмәйем. — Санитарҙың да иҫе китте. — Теге малайы юҡмы эргәһендә?

Санитар ашығып башҡа шкафтарҙы асып ҡараны.

— Һинең эш еңеләйҙе, — тине һаҡалтай. — Быныһы эләкте. Хәҙер тегеһен генә табаһы ҡалды. Ҡыҙҙы бикләп тор. Был беҙҙең ҡулда булғас, Лайонды сисәбеҙ!..

*Ауыр уйҙар...*

Йәшенгән урынында Батырға оҙаҡ ҡына ултырырға тура килде. Палатаға ингән дә, унан сыҡҡан да кеше юҡ. Әмилә лә китте лә юғалды. Малайға билдәһеҙлектә бына шулай хәрәкәтһеҙ ултырыу бик ҡыйын. Уйлап ҡарағыҙ: Лайон ауыр хәлдә, Әмиләнең ҡайҙа икәнлеге билдәһеҙ, ә Батыр бер ни эшләмәй, тик ултыра. Юҡҡа санитарҙың артынан үҙе китмәгән. Ни тиһәң дә, малай бит, ә Әмилә... Ҡыҙҙың батырлығына шиге юҡ, әммә берәй ауыр хәлгә эләкһә, юғалып ҡалыуы ла бар... Һин Урҙы бөтөнләй белмәйһең, тип үҙе күҙәтергә булғайны шул Әмилә... Хәйер, хәҙер бер ни ҡылып булмай, көтөргә генә ҡала.

Йәнә ике-өс сәғәт ваҡыт үтте. Шул арала эшһеҙлектән арыған Батыр нимәләр генә уйлап бөтмәне.

Байҡай башлаһаң, уғата сәйер был тормош тигәнең... Ысынлап та, Ер планетаһында тыуған Батыр йәһәннәм төбөндә урынлашҡан Урҙа әллә ниндәй яуыз кешеләргә ҡаршы көрәшеп йөрөһөнсө әле! Һөйләһәң, кеше ышанмаҫлыҡ хәл бит был! Ошоларға хатта ҡайһы саҡта Батыр үҙе лә ышанмай башлай. Былар бөтәһе лә төш кеүек. Ҡапыл уянып китер ҙә, яңынан Ерҙә йәшәй башлар төҫлө. Бәлки, әсәһе лә терелер әле. Дуҫтары ла, класташтары ла янында ғыналыр. Бына уяныр ҙа, йыуынып, ашағас, мәктәпкә барыр, кластарына барып инер һәм Хәлиттең янына, үҙенең урынына барып ултырыр...

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы был төш түгел шул, ә өн, өн!.. Уйлаһаң, ҡот осҡос бит был! Батыр Ерҙе һағына, дуҫтарын күргеһе килә... Бер ҡараһаң, бында бар нәмә лә Ерҙәге кеүек. Ағастар ҙа, үләндәр ҙә бер нәмәһе менән дә айырылмай тиерлек... Әммә барыбер бында бөтә нәмә сит... Шуға ла күңелдә әллә ниндәй һағыш йәшәй. Бигерәк тә яңғыҙ ҡалған саҡтарҙа ул малайҙың бар булмышын ялмап ала... Шулай ҙа ул бында ғүмерлеккә ҡалырмы икән ни?..

Ҡапыл аҫта ниндәйҙер тауыш ишетелде. Кемдер килә! Батыр йәшенгән урынына нығыраҡ һыйынды... Бына аяҡ тауыштары яҡынлаша башланы һәм баҫҡыста санитар менән бер һаҡалтай ир күренде.

— Башыма һыймай, — тип һөйләнә ине санитар. — Ул малай аҡтығын ҡайҙан эҙләргә?

— Исмаһам, исемен белгәндә лә. — Һаҡалтай борсоулы тауыш менән шулай тине. — Иң ҡурҡынысы — Лайондың етәкселәренә әйтеп ҡуймаһын...

«Минең хаҡта һөйләшәләр, — тип һиҙенде Батыр. — Бахырҙар! Минең дә улар кеүек йәшенеп йәшәүемде белмәйҙәр шул...»

— Әгәр Әмиләнең дуҫы икән, ул бында килеп сығырға тейеш, — тине санитар.

Малайҙың күңелен оло хәүеф солғап алды. Ниңә Батырҙы тотоу хаҡында ғына һөйләшәләр? Әмилә уларҙың ҡулындамы икән ни? Юҡ, юҡ! Дөрөҫ түгел был! Бына хәҙер санитар менән һаҡалтай палатаға инеп китер. Һәм уларҙың артынан күҙәтеп килеүсе ҡыҙ күренер...

— Бәлки, Әмиләнән әйттерергә кәрәктер ул малайҙың исемен, — тине санитар.

— Ул әйтер тиһеңме?

Санитар менән һаҡалтай палатаға инеп китте. Ә Батыр яңы ғына ишеткән һүҙҙәрҙән һуң иҫәңгерәп тороп ҡалды. Тимәк, Әмилә тотолған! Их! Ниңә санитарҙың артынан уны ебәрҙе икән? Үҙенә күҙәтергә ине! Хәҙер ни эшләргә? Ҡайҙа барырға? Нисек табырға Әмиләне, Лайонды? Ҡайһылай итеп уларҙы ҡотҡарырға?

Малайҙың яңы ғына һағыш утында янған күңелен үкенеү менән ҡурҡыу солғап алды. Башына бер ниндәй фекер килмәй. Әгәр Ерҙә булһа, берәй сараһын уйлап табыр ине. Ләкин хәҙер ул сит, билдәһеҙ планетала. Ошондай хәлдә ҡайҙа барырға, ни эшләргә тейеш Батыр? Ул һис тә аңлай алмай...

### *Тоҙаҡ*

Күпме генә уйлаһа ла Батырҙың башына: «Көтөргә!» — тигәндән яҡшыраҡ уй килмәне.

Санитар менән һаҡалтай палатанан сығып, ҡайҙалыр йүнәлгәс, малай уларға эйәрергә уҡталып та ҡуйғайны. Аҙаҡ кире уйланы. Тәүҙә бындағы эште бөтөрөргә — палатаның эсен байҡап сығырға кәрәк.

Бая йәшенгән урынынан сығырға ла ҡурҡып ултырһа, Әмилә тотолған тигән хәбәр малайҙы тәүәккәллерәк булырға мәжбүр итте. Лайон бындамы, түгелме? Иң алда шуны асыҡларға! Әгәр юҡ икән, санитарҙың тағы килеүен көтөп алыр ҙа уға эйәреп китер. Ә инде Лайон бында икән, уны ҡотҡарырға тырышыр. Икәүләшеп Әмиләне лә тиҙерәк табырҙар...

Ошондай уй менән малай палатаға яҡынлашты. Эстән шылт иткән дә тауыш ишетелмәй. Батыр, һағайып, оҙаҡ ҡына тыңланы. Әллә палатала бер кем дә юҡмы икән?

Бына Батыр, бар ҡыйыулығын йыйып, ишекте этте. Ул тауышһыҙ-ниһеҙ анһат ҡына асылып китте...

Батыр, тупһала торған көйө, һағайып тыңланы. Шикләнерлек нәмә лә, тауыш та юҡ...

Бына ул алға атланы. Киләһе секундта, артында ғына

«тыҡ» иткән тауышты ишетеп, малай терт итеп ҡалды. Тәне әҫеле-һыуыҡлы булып китте, башынан тиҫтәләгән хәүефле уйҙар йүгереп үтте...

Әйләнеп ҡараһа, ишек үҙенән-үҙе ябылған. Батыр уға ташланды, әммә ишекте асыу өсөн тотҡаһы ла юҡ ине... Нисек сығырға бынан хәҙер? Үҙен-үҙе тотҡонға бикләне түгелме? Малай ҡурҡып китте, әммә үҙ-үҙен тынысландырырға тырышты. Хәҙер үкенеүҙән файҙа юҡ, тик тороп, эште бөтөрөп булмай. Тәүҙә палата эсен ҡарап сығырға! Кемдәр бар? Лайон бындамы?..

Батыр, һаҡ ҡына баҫып, алға атланы. Алъяҡтан сығыусы ишеккә киң ҡорғандар эленгән. Уның артында төп бүлмә башлана...

Малай ипләп кенә шаршау ярығынан эскә ҡараны. Ана — карауат! Унда кемдер ята. Ҡулында китап. Эргәһендәге кескәй өҫтәлдә — аҙыҡ-түлек. Уларҙы күргәс, Батыр үҙенең асыҡҡанын тойҙо. Тик хәҙер был турала уйлар ваҡыт түгел.

Палатала башҡа бер кем дә юҡ. Мөйөштәге ишек артында ғына берәйһе булмаһа...

Ә был кем? Лайонмы? Әллә икенсе берәүме? Уйлап ҡараһаң, бында ҡыҙҙың атаһы ятырға тейеш һымаҡ. Әммә тәҙрә аша ҡарағанда уны палатала күрмәнеләр. Шуға ла күңелендәге шик малайҙы карауат янына барыуҙан тыйҙы. Унда сит кеше ята кеүек...

Нимә эшләргә? Йәнә көтөргәме? Моғайын, ул кеше урынынан торор. Әгәр шуға тиклем тыштан берәүһе килеп инһә? Ул бит шунда уҡ Батырға төртөләсәк. Батыр, тирәяҡҡа ҡаранып, йәшенерҙәй урын эҙләне. Ҡорғандың арты иркен генә икән. Шунда ҡасыр...

Ҡапыл Батырҙың ҡолағына сәйер тауыш салынды. Нимә ул? Машина геүләүенә оҡшаған төҫлө... Туҡта! Был бит карауатта ятҡан кеше! Ғырылдай! Тимәк, йоҡлай!.. Әгәр иплэп кенә янына барғанда? Шунда уҡ уның кемлеген белер ине!

Батыр ҡыҫҡа ғына ваҡыт икеләнеп торҙо, шунан алға атланы... Ҡапыл иҙән шығырлап ҡуйҙы! Малайҙың йөрәге өҙөлөп төштө тиерһең! Ул ни үле, ни тере көйө торған ерендә ҡатып ҡалды. Теге әҙәмдең ғырылдауы туҡтаны, карауат шығырланы...

Карауаттағы кеше борола башланы. Шунан ҡабырғаһына ятты ла... ҡабаттан тынып ҡалды.

Батыр, тын алырға ла ҡурҡып, урынында тора.

Бер аҙҙан тегенең йәнә тигеҙ генә һулауы ишетелде. Ҡабаттан йоҡоға талды, буғай...

Батыр, тағы алға уҡталды. Бына карауатҡа тиклем өс аҙым ҡалды, ике аҙым... Йөҙө һис тә күренмәй. Карауатты

урап теге яҡҡа сығырға кәрәк... Йәнә ике аҙым... Иҙән генә шығырлап ҡуймаһа ярар ине. Йәки берәйһе килеп инмәһен. Мөйөштәге ишек тә ҡурҡыныс. Киләһе секундта унан кемдер килеп сығыр ҙа... Батыр бер ҡайҙа ла ҡаса алмаҫ!..

Малайҙың йөрәге, үҙ уйҙарынан ҡурҡып, дарҫ-дарҫ тибә. Ул өҙөк-өҙөк тын ала... Тиҙерәк! Юғиһә хәҙер ниҙер була! Йә кемеһелер килеп инә, йә был уяна!..

Батыр йәнә бер аҙым алға атланы...

Теге кешенең йөҙө асыҡ күренде.

Ул Лайон түгел ине!

Малай, ағыулы йыланға тап булғандай, артҡа ташланды. Йәнә иҙән шығырлап ҡуйҙы. Батыр шаршау артына сумды. Уяндымы, юҡмы? Йөрәге бына-бына ауыҙынан килеп сығыр төҫлө.

Бер аҙҙан ғына Батыр бүлмәләге тауыштарҙы ишетер хәлгә килде. Бына тигеҙ генә ғырылдау ҡолағына салынды...

Батыр тәрән итеп тын алды, аҙыраҡ тынысланғандай булды.

Тимәк, бында Лайон юҡ! Уны ҡайҙалыр йәшергәндәр ҙә урынына икенсе кешене һалып ҡуйғандар. Кемдәрҙең эше был? Ниндәй маҡсат менән эшләгәндәр?

Хәҙер Батырҙың алдында өс оло эш тора: нисек тә бынан сығырға, шунан Лайон менән Эмиләне табырға һәм икеһен дә ҡотҡарырға! Ауыр, бигерәк ауыр быларҙы эшләүе! Әммә Батыр бер нәмәгә ҡарамай уларҙы тормошҡа ашырырға тейеш...

## *Эмилә менән Лайон*

Һаҡалтай менән санитар Эмиләнән Батырҙың ҡайҙа икәнлеген һорашып ҡаранылар ҙа, ҡыҙ ләм-мим өндәшмәгәс, уны Лайон янындағы бүлмәгә бикләп, киренән больницаға ашыҡтылар.

Эмилә бында нисек эләгеүен әйтмәне, әммә санитар һиҙенә — ҡыҙ уны күҙәтеп килгән. Көнө буйы больницала булғайны, күрәһең, Эмилә уға шунда «тағылған». Ә теге малай моғайын, Лайон ятҡан палатаны һағалайҙыр. Ошо фекер санитар менән һаҡалтайҙы больницаға алып килде лә инде.

Тик бында малай күренмәне, Лайон урынына ҡалған кеше лә ул-был һиҙенмәгән. Әммә санитарҙың иманы камил — Эмиләне юғалтҡас, малай тыныс ҡына ултыра алмаҫ, ҡыҙҙы эҙләргә тотонор. Ә бының өсөн ул иң алда ҡайҙа барырға тейеш? Әлбиттә, больницаға! Тимәк, тоҙаҡ

ҡоророға кәрәк! Санитар Лайон ятырға тейеш палатаның ишеген тыштан бикләмәҫкә ҡушты. Әммә был — теләһәм инәм, теләһәм кире сығып китәм, тигән һүҙ түгел. Ингән саҡта ул анһат ҡына асыласаҡ, әммә кире сығармаясаҡ!

Лайон урынында ҡалған кешегә лә һаҡ булырға ҡушты. Юғиһә, тик ятырға өйрәнеп алды ла, йоҡонан башы сыҡмай. Ул малайға ышаныс юҡ, инеп, үлтерә һуғып китеүе лә бар.

Санитар менән һаҡалтай киренән Лайон янына юл алды. Ата менән ҡыҙҙы осраштырырға кәрәк. Ҡыҙының да улар ҡулында икәнлеген белгәс, ни эшләр икән Лайон? Элеккесә киреләнеп маташырмы? Ҡыҙының ғүмере ғәзиз булмаһа, әйҙә үҙ һүҙләнеп ҡараһын әле!..

Теге малай иректә. Тимәк, ашығырға кәрәк.

Санитар менән һаҡалтай йәнә Лайон янына инде, тағы иртәнсәк биргән һорауҙарын ҡабатланы. Әммә Ур планетаһын һаҡлау системаһының етәксеһе бер ни өндәшмәне. Уның ҡарашында үҙ һүҙендә ныҡ торасағын аңлатҡан ихтыяр көсө йылтылданы. Быны күреп, һаҡалтай мыҫҡыллы көлөмһөрәне. Әйҙә, әйҙә, ҡылана бир, иҫәр! Хәҙер, ҡыҙыңды күргәс, нисек йырларһың икән?..

Һаҡалтай бармаҡтарын шартлатты:

— Килтерегеҙ! — Үҙе Лайонға текәлде.

Әмилә килеп ингәс тә уның йөҙөндәге тыныслыҡтың ҡапыл ҡурҡыу, хәүеф менән алмашыуын күргеһе, шулай итеп ләззәт алғыһы килде.

Бына артта ишек асылып ябылды. Ҡыҙҙың аяҡ тауыштары ишетелде. Һаҡалтай Лайондан күҙен алмай. Тик нимә был? Атаның йөҙөндә бер мускул да ҡыбырламаны. Әйтерһең, дошмандарының ҡулына уның ҡәҙерле ҡыҙы түгел, бөтөнләй сит бала эләккән.

— Таныйһыңмы был ҡыҙҙы? — Һаҡалтайҙың түҙеме бөттө.

Лайон Әмиләгә ғәмһеҙ генә ҡараш ташланы:

— Юҡ.

Быны ишеткәс, һаҡалтай санитарға боролдо. Тегеһе урынынан ырғып торҙо:

— Ниңә алдашаһың? Ул бит һинең ҡыҙың!

— Түгел.

— Нисек түгел? Ул кисә генә һине эҙләп больницаға килде... Ярай... — Санитар Әмиләгә боролдо. — Ҡыҙым, исемең нисек әле һинең?

— Әмилә.

Был һүҙҙәрҙән һуң Лайондың ҡаштары һораулы күтәрелде, ә санитар ҡыуанысынан урынында өйөрөлөп китте:

— Ишеттеңме? Ул һинең кеүек алдаҡсы түгел! Молодец,

һеңлем! Һинән һәйбәт кеше сығасаҡ!.. Тимәк, был һинең атайың, эйе бит?

— Юҡ, — тине Эмилә көтмәгәндә.

— Нимә? — Санитарҙың һөмөрө ҡойолдо. — Ниңә юҡты һөйләйһең? Һин бит уның ҡыҙы!

— Мин уның ҡыҙы түгел, — тине Эмилә аптыраған тауыш менән.

— Һуң исемең Эмилә бит!

— Урҙа Эмилә исемле ҡыҙҙар күп!

Санитар аңлайышһыҙ телдә ниҙер мығырлап алды, шунан һаҡалтайға боролдо:

— Мин ышанмайым! Улар алдаша! Һаҡалтай, урынынан тороп, Эмилә янына килде:

— Эмилә, ярай, мин ышандым: һин уның ҡыҙы түгел. Тик аңлат әле: бында нисек килеп эләктең?

— Минме?.. Мин әхирәтемә килгәйнем. Ул ошо йортта йәшәй. Шунан ошо ағай, — Эмилә санитарға күрһәтте, — мине үтеп китте лә ишек янында өндәште: «Ур беҙҙеке булыр!» Шул мәл ишек асылды, ул эскә инеп китте. Миңә был ҡыҙыҡ тойолдо. Үҙем дә аңламайым, ниңәлер шул һүҙҙәрҙе ҡабатланым да, килеп индем. Аҙаҡ, ҡурҡып, шкафҡа йәшендем.

Санитар менән һаҡалтай бер-береһенә ҡараштты. Улар Эмиләнең һүҙҙәренә ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәне. Бер ҡараһаң, ҡыҙ дөрөҫтө һөйләй кеүек, әммә сәйер урындары ла уғата күп... Исеме — Эмилә; бында килеп ингән; йәшенеп маташҡан. Былар осраҡлымы? Әллә Лайон менән Эмилә хәйлә ҡорамы?

— Ярай, — тине бер аҙҙан һаҡалтай. — Тимәк, һин әхирәтеңә килдең инде? Ниндәй фатирҙа тора ул? Исеме нисек?

Эмилә ҡапыл юғалып ҡалды. Ул был һорауҙы көтмәгәйне. Эмилә, ҡабаланып, бергә уҡыған ҡыҙҙарын күҙе алдынан үткәрҙе — кемеһен әйтергә? Ҡайһыныһы ошо тирәлә тора? Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уның бер әхирәте лә был өйҙә йәшәмәй шул...

— Нара, — тине бер аҙҙан Эмилә. — Алтынсы секторҙа, өсөнсө рәттә тора. Фатирҙары ун икенсе... — Моғайын, тикшереп тормаҫтар әле.

Ҡараһаҡал санитарға боролдо:

— Хәҙер былай эшләйбеҙ. Һин тиҙ генә больницаға барып кил. Тоҙаҡҡа берәйһе эләкмәгәнме? Ә мин был ҡыҙ менән Нара янына инеп сығам.

Ошо һүҙҙәрҙән һуң санитар тиҙ генә сығып китте. Бер аҙҙан һаҡалтай ҙа, Эмиләнең беләгенән эләктереп, ишеккә йүнәлде.

Ҡапыл карауаттың шығырлауы ишетелде. Батыр, һағайып, ҡорған артына һыйынды. Хәҙер бөтәһе лә хәл ителәсәк! Йә был ир малайҙы эләктерә, йә булмаһа...

Батыр ҡулындағы ағасты яҡшылабыраҡ тотто. Әгәр ошо тирәгә килеп сыҡһа, елкә төбөнә ҡундырасаҡ!.. Ныҡ һуғырға ғына ярамай — йән биреп ҡуйыуы бар. Иҫтән яҙһа, еткән... Шунан был тоҙаҡтан ҡотолоу яғын ҡарар ине.

Бына теге кеше ахылдай-ухылдай тороп баҫты. Танау аҫтынан мығырлап ниҙер һөйләнеп алды.

Малайҙың йөрәге тамағы төбөндә тибә. Уның өсөн һәр секунд бер йыл кеүек оҙаҡҡа һуҙыла, һәр секунд көтөлмәгән ҡурҡыныстар менән янай. Хәҙер ишек асылып китер ҙә санитар килеп инер кеүек. Йә иһә был ирҙең иҫен китергәнсә һуғырға көсө етмәҫтәй тойола...

Иҙән шығырланы. Аяҡ тауыштары шаршауға яҡынлаша башланы!..

Ҡурҡма, Батыр!.. Ышан үҙ-үҙеңә!.. Тыныслан!.. Һин бит көслө малай!..

Ир шаршау янына килеп етте... Бер ҡулы менән уны ҡайырып асты һәм алъяҡҡа атланы...

Киләһе секундта Батыр нык һелтәнеп тегенең соңҡаһына ҡундырҙы. Ир «ыһ» тине лә сүгәләп төштө, шунан иҙәнгә һуҙылып ятты. Батыр, быны мин эшләнемме тигәндәй, уға ҡурҡҡан күҙҙәре менән текәлеп ҡатты. Ҡапыл теге ир ырғып торор ҙа уға йәбешер кеүек.

Әммә секундтар, йөрәк дарҫлауына ҡушылып, үтә торҙо, ә ир иҙәндә һуҙылып ятыуын белде.

Батыр, бар ҡыйыулығын йыйып, ир янына килде. Шунан эйелеп тегенең пульсын ҡапшаны. Йөрәге тибә! Тере! Малай еңел һулап ҡуйҙы. Үлтерә һуғып ҡуйыуҙан ҡурҡҡайны. Дошман булһа ла йәл бит...

Батыр йүгереп бүлмәгә инде. Ҡапыл мөйөштәге ишек күҙенә ташланды. Унда нимә? Кешеләр бармы икән? Ул иплəп кенә ишекте тартып ҡараны. Асылмай. Тимәк, унда бер кем дә юҡ! Малай йәнә алъяҡҡа сыҡты. Ир ята... Бәлки, ишекте асып булыр, тигән өмөтө бар. Тик уның тырнаҡ менән дә йәбешерлек урыны күренмәй. Тимәк, бынан сығып булмай. Батыр бүлмәгә инде. Берҙән-бер юл — тәҙрә! Икенсе ҡат! Бәлки, ырғырға ла төшөргәлер? Бигерәк бейек икән шул. Ергә тиклем ун метр самаһы булыр.

Туҡта! Әгәр простыняларҙы бер-береһенә бәйләһә? Батыр шатлығынан саҡ ҡысҡырып ебәрмәне! Бында алты простыня бар икән! Етә! Тиҙерәк тәҙрәне асырға! Һиҙенә Батыр: хәҙер килеп етәсәк һаҡалтай менән санитар! Нисек тә өлгөрөргә! Тик тәҙрәләре генә һис тә Ерҙәге кеүек түгел — се-

рен ҡапыл ғына аңлауы ауыр. Батыр, аптырағас, иҙәндә ултырған гергә оҡшаған ауыр ғына тимер менән тәҙрәнең өлгөһөнә килтереп һуҡты ла шаҡ ҡатты. Теге тимер киҫәге, резинаға бәрелгәндәй ҡаҡлығып, кире яҡҡа ырғыны, хатта саҡ-саҡ Батырҙың башына теймәне. Бына һиңә кәрәкһә! Быларҙың тәҙрәһен ярып булмаймы икән ни! Батыр, ситкәрәк тороп, тәҙрәгә йәнә тимер менән һуҡты. Шул уҡ хәл ҡабатланды... Ярылмай!

Малай тәҙрәнең йоҙағын борғосларға кереште... Юҡ, асылмай! Нимә эшләргә! Тотолоуы ошомо? Әгәр ул да эләкһә быларҙың ҡулына, Лайонды, Эмиләне кем ҡотҡарыр?

Ҡапыл Батырҙың күҙенә стеналағы пульт салынды. Аптырауынан ни эшләргә белмәгән малай, йүгереп барып шуның кнопкаларына баҫырға, тумблерҙарын борғосларға тотондо. Үҙе менән бер-бер хәл булыр тип тә ҡурҡманы. Сөнки уның өсөн ошо тотҡондан да хәүефлерәк нәмә юҡ ине был минутта.

Тәүәккәллек үҙенекен итә шул. Һуңғы кнопкаға баҫыуға, көтмәгәндә мөйөштәге ишек асылып китте. Малай шатланып та, ҡурҡып та ишеккә атылды. Берәйһе килеп инһә... Юҡ, һис кем күренмәй. Батыр алға атланы һәм тиҙҙән, асыҡ торған ике ишекте үткәндән һуң, больницаның үҙәк коридорына килеп сыҡты. Ана — баҫҡыстар! Ул ҡотолдо! Ул йәнә иректә! Тик хәҙер ни эшләргә? Ҡайҙа йүгерергә? Эмиләне нисек табырға?

## *Һорау алыу*

Санитар менән һаҡалтай Эмиләнең алдашыуына тиҙ төшөндө. Ун икенсе фатирҙа ҡыҙҙың бер ниндәй ҙә әхирәте йәшәмәй ине. Тимәк, санитарҙың артынан күҙәтеп килгән, шулай итеп атаһының эҙенә төшөргә уйлаған.

Санитар менән һаҡалтай һорау алыуға күстеләр. Оҙаҡҡа һуҙып торорға ваҡыт юҡ. Мойостан килгән отрядтар күптән инде Ур тирәләй өйөрөлә, уларға «ишектең» асҡысын ғына бирергә кәрәк.

— Ҡыҙыңдың ғүмере һинең ҡулда, — тине һаҡалтай Лайонға. — Үҙеңде ҡайғыртмаһаң, уны уйла.

Лайон өндәшмәне. Хәҙер, Эмилә минең ҡыҙым түгел, тип ҡырталашыу файҙаһыҙ. Санитар менән һаҡалтай барыһын да аңланы. Ни эшләргә тейеш һуң Лайон? Күрә тороп Эмиләне өҙгөсләргә бирә алмай. Нисек тә уны ҡотҡарырға кәрәк. Ләкин Урҙың серен сисергә лә хаҡы юҡ уның! Планетаны һаҡларға, бында бер сит кешене үткәрмәҫкә ант итте бит ул!

Лайондың күҙҙәрендәге яфаланыуҙы күреп ҡыуанды һаҡалтай. Тимәк, ғәмһеҙ булып ҡыланған етәксене ҡалтыратыу сараһы табылды. Хәҙер уны саҡ ҡына нығыраҡ һелкетергә генә кәрәк. Һәм кәрәкле мәғлүмәттәр үҙенән-үҙе ҡойола башлар!

Һаҡалтай санитарға Эмиләне индерергә ҡушты.

— Һин хәҙер нисек итеп Урға үтеп инергә икәнлеген әйтәһең, йә булмаһа... — һаҡалтай ҡыҙҙы елтерәтеп Лайон янына килтерҙе.

Эмилә, ҡулының ауыртыуына түҙә алмайынса, илап ебәрҙе. Лайондың сикә мускулдары ҡалтыранды, ул күҙҙәрен йомдо...

Ошо ерҙә Эмилә телгә килде:

— Һеҙ — бандиттар! Йыртҡыстар! Тик ҡыуанмағыҙ! Һеҙҙең бында икәнлегегеҙҙе беләләр!

— Кем белә? — тип һағайҙы санитар.

— Минең менән булған малай!

— Малай? Ул ҡайҙан белһен?

— Ул беҙҙең юғалыуыбыҙ хаҡында әйтәсәк! — тип ҡысҡырҙы ҡыҙ асыуына түҙә алмайынса. — Һеҙҙе барыбер табасаҡтар! Табасаҡтар!..

Ҡыҙға ышанып етмәһәләр ҙә, уның һүҙҙәре һаҡалтай менән санитарҙың күңеленә шом һалды. Улар ҡыҙ менән уның атаһы аңламаған телдә үҙ-ара һөйләшеп алдылар. Лайондың телен тиҙ генә сисеп булмаҫ. Ул арала малайҙың әллә нимәләр эшләп ташлауы бар. Һорау алыу менән бергә уны тотоу сараһын да күрергә кәрәк. Ул күп булһа, шул больница тирәһендә уралалыр. Бәлки, тоҙаҡҡа ла эләккәндер әле!

Тиҙҙән санитар больницаның икенсе ҡатына күтәрелә ине инде.

Палата эсендәге күренеш уны шаҡ ҡатырҙы. Лайон урынына ҡалған кешеләре алъяҡта иҫһеҙ ята. Тимәк, бында кемдер бар! Санитар, сүгә биреп, стенаға һыйынды, ҡуйынынан лазер пистолеты килтереп сығарҙы. Тик шылт иткән дә тауыш ишетелмәй. Ул һаҡ ҡына эскә атланы... Бәй, бында бер кем дә юҡ та баһа! Ә нисек сығып киткән ул? Паролде белмәй... Туҡта! Ә түптәге ишек?.. Ул бит асыҡ! Санитар шунда ташланды. Бына нәмә хаҡында онотҡандар! Теге әҙәм бит пульттағы кнопкаларҙы төрткөсләп кенә асҡан да ҡуйған ошо ишекте! Хәҙер ни эшләргә?

Санитар, аптырағас, арғы ишектәрҙе лә барып тикшерҙе. Улары ла шар асыҡ ине... Тимәк, сығып киткән! Их, асыҡ ауыҙҙар! Ҡулға үҙенән-үҙе килеп ингән әҙәмде ысҡындырҙылар бит! Теге малай йөрөнөмө икән бында? Әгәр ул булһа, барыһын да аңланы, әлбиттә! Хәҙер ярҙам саҡырырға йүгергән, әлбиттә! Тиҙерәк бынан юғалырға кәрәк!

Санитар, иçһеҙ ятҡан дуçы хаҡында онотоп, кире яҡҡа сапты... Ул ҡайтып ингәндә, һаҡалтай ҡыҙҙан һорау ала ине. Санитар уға хәлде һөйләп бирҙе. Теге бер аҙ өндәшмәй ултырҙы, шунан йәнә Әмиләгә боролдо:

— Һин ҡурҡма беҙҙән, — тине ул, ҡыҙҙы тынысландырырға тырышып. — Ултыр... Беҙҙең һиңә бер һорауыбыҙ бар... Кисә һиңә эйәреп йөрөгән малайҙың исеме нисек әле?

— Әйтмәйем! — тине ҡыҙ.

— Ярай, әйтмә... Кәрәкмәй... — Шунан элемтә аша махсус камераны йүнәтеүселәр менән һөйләшеп алды. — Ҡасан әҙер була?.. Иртәгә? Шәберәк ҡыланығыҙ! Ситуация бик ҡурҡыныс! Эйе, беҙҙе тотоуҙары бар! — Һаҡалтай йәнә ҡыҙға ҡараны. — Ә ҡайҙа йәшәй ул малай?

Әмилә ҡабаланып уйланы. Ни тиергә? Әгәр дөрөçөн әйтһә? Ул саҡта ни тиерҙәр икән? Ысынлап та шулай итергә! Ваҡытты һуҙырға!..

— Уның йәшәгән урыны бик алыç!

— Ҡайҙа?

— Ҡояш системаһындағы Ер тигән планетаны беләһегеҙме?

— Нимә? — Һаҡалтай менән санитар бер-береһенә ҡарашып алды. — Ул малай шунан, тимәксеһеңме?

— Эйе.

— Ә бында нисек килеп эләккән?

Әмилә Батырҙың яҙмышын ҡыçҡаса ғына һөйләп бирҙе. Тегеләр ышанырға ла, ышанмаçҡа ла белмәй ине. Шунан Батыр тураһында төрлө һорауҙар бирергә керештеләр. Шулай итеп Әмилә, малай тураһында дөрөçөн әйтеп, төп маҡсатына өлгәште — бандиттарҙың иғтибарын ситкә йүнәлтте. Әммә тегеләр үҙҙәрен тиҙ генә ҡулға алып, Батырҙың бөгөн ҡайҙа икәнлеге хаҡында һорашырға тотондолар... Әмилә быны әйтергә теләмәне. Санитар менән һаҡалтай кәңәшләшеп алды. Сит планетанан Әмиләгә эйәреп килгән малай ҡайҙа йәшәһен инде? Әлбиттә, Лайондарҙа!

Күп тә үтмәне, санитар Батырҙы эҙләп Әмиләнең өйөнә табан юлға сыҡты, ә һаҡалтай ҡыҙ янына ашыҡты. Етер! Нисек тә телдәрен сисергә кәрәк быларҙың!

### *Батырҙың батырлығы*

Батырға палатаға инеп киткән санитарҙы оҙаҡ көтөргә тура килмәне. Ул «һә» тигәнсә малай үткән юлдан йәнә коридорға килеп сыҡты һәм ирегә ташланды. Тегендә иçһеҙ ятҡан дуçы хаҡында уйлап та тормауы ғәжәпләндерҙе Батырҙы... Бар уйы уны тотоумы икән ни? Улай тиһәң, арты-

на ла әйләнеп ҡарамай. Ашығыуы шул тиклемдер, күрәһең... Хәҙер нисек тә күҙенә салынмаҫҡа!..

Батыр уның артынан, Әмилә өйрәткәнсә, ике кешелек кабинаға ултырып килде. Бандит барған машинаның туҡтағанын күргәс, аппаратын әкренәйтте... Ана, ул кабинанан ҡабаланып сыҡты ла, тирә-яғына ҡаранып алғас, ситкә атланы... Тиҙерәк! Иң мөһиме уны күҙҙән яҙлыҡтырмаҫҡа! Батыр килеп етте... Тегенең аяҡ тауыштары өҫкә күтәрелә... Ниндәйҙер ишек янында туҡталды шикелле. Их, яҡыныраҡ барып, ҡайҙа инеп киткәнен күрергә ине! Тик ярамай, күреп ҡалыуы бар!..

Малай, бар иғтибарын йыйып, тыңлай башланы... Тынлыҡ!.. Ҡайҙа булды? Инеп тә киттеме? Малай өҫкә ташланды. Бында ишектәр!.. Ҡайһыһының артында ул? Кәрәклеһен тапты ла икән, ти... Унда нисек инергә? Ул, моғайын, пароль менән асылалыр... Малай, ни эшләргә белмәйенсә, улай-былай йүгергеләне. Туҡта! Стенаға башҡортса һүҙҙәр яҙылып ҡуйылған түгелме?

«Батыр! Бандиттар 18-се фатирҙа. Пароль: Ур беҙҙеке булыр. Әмилә».

Батыр шаҡ ҡатты. Тимәк, Әмилә бында! Ул тотолған! Хәҙер ул да инеү менән бандиттарҙың ҡулына эләкмәҫме?

Малай ашығып уйланды... Юҡ, ҡабаланырға ярамай! Тегеләрҙең сығып китеүен көтөргә кәрәк!.. Үҙе шулай уйлай, әммә йөрәге түҙемһеҙләнеп тибә, «тиҙерәк тә тиҙерәк» тип малайҙы ҡыуалай. Әйтерһең, хәҙер барып инһә генә теләгенә өлгәшә алыр, ә инде оҙаҡҡа һуҙып торһа, бәхетен ҡулынан ысҡындырыр. Айҙар кеүек тойолған бер-нисә секунд үтте... Ары көтөргә малайҙың сыҙамлығы етмәне. Ул ун һигеҙенсе фатирға яҡынлашты:

— Ур беҙҙеке булыр!

Ишек тауышһыҙ ғына асылды. Батыр, мөмкин тиклем һаҡ баҫып, эскә атланы. Бына уның артында ишек ябылды. Инде артҡа юл юҡ. Ул ошонда йә уңышҡа өлгәшә, йә булмаһа...

Малай эскә ҡолаҡ һалды. Ҡайҙандыр мөңгөрләп һөйләшкән тауыш ишетелә. Был — санитар. Уға кемдер яуап бирҙе. Ошо ерҙә малайҙың йөрәге өҙөлөп төшә яҙҙы! Әмиләнең тауышы бит! Тапты, тапты уны! Батыр шатлығынан саҡ-саҡ бүлмәгә атылып барып инмәне. Ярамай! Улай итһә, тотола бит!

Ни эшләргә? Ҡотҡара алырмы ҡыҙҙы? Уның янында ике ир кеше бар! Исмаһам, берәү булһа... Ул саҡта... Ул саҡта ни эшләр ине?.. Туҡта! Кемеһелер был яҡҡа килә түгелме? Әйе шул! Аяҡ тауыштары рәхимһеҙ рәүештә яҡынлаша! Тотола хәҙер! Ҡайҙа йәшенергә? Малай алан-

йолан ҡаранды. Бына — шкаф! Ишеге асыла! Батыр күп уйлап тормай шуның эсенә сумды.

Киләһе секундта кемеһелер алъяҡҡа инде. Сығырға бара түгелме? Малай шкафтың ишегенә ҡолағын терәне. Паролде ишетергә кәрәк!

— Урға юл асыҡ!

Тиҙҙән алъяҡта тынлыҡ урынлашты. Күрәһең, теге әҙәм сығып китте.

«Урға юл асыҡ!» Бынан сығыу өсөн пароль! Тимәк, Батыр ҡотолоу юлын белә! Хәҙер нисек тә...

Батыр алға атланы һәм оҙон ғына коридорға килеп инде. Бында ике ишек бар. Һаҡалтай менән Әмиләнең тауышы арғыһынан ишетелә... Ә бынныһында кеше-фәлән юҡмы икән? Бәлки, улар күмәктер... Батыр ҡолаҡ һалды... Былай хәүефләнерлек нәмә ишетелмәй... Малай әкрен генә ишекте этте. Уныһы тауышһыҙ ғына асыла башланы...

Батыр терт итеп ҡалды. Эстә кеше бар! Кемдер карауатта ята! Тәүҙә малай ҡурҡышынан ситкә тайпылды, йөрәге дарҫлап тибергә кереште. Әммә бер аҙҙан тыныслана төштө, кире ишек ярығына яҡынлашты...

Эйе, унда кемдер ята. Туҡта, уның аяҡ-ҡулы бәйле түгелме һуң? Кем ул? Ниңә бындай хәлдә? Дошманымдың дошманы — миңә дуҫ! Тимәк... Малайҙың күңеленә йылы йүгерҙе. Ул күҙен ҡыҫа биреп йәнә алға текәлде. Һәм ҡыуанысынан саҡ ҡысҡырып ебәрмәне! Карауатта бәйле ятҡан кеше Лайон бит! Бына ҡайҙа икән ул! Хәҙер үк сисергә уның ҡул-аяғын, ҡотҡарырға! Туҡта! Ашығырға ярамай... Бүлмәлә унан башҡа кеше күренмәйме? Былай ул-был һиҙелмәй... Малай, һаҡ ҡына ишекте киңерәк асты, башын тығып, эскә күҙ йүгертте. Бер кем дә юҡ!..

Батыр, тауыш сығармаҫҡа тырышып, карауат янына килде...

Шул мәлдә Лайондың аптырауын күрһәгеҙ икән! Ул Батырҙы шунда уҡ таныны, әлбиттә. Ер аҫтындағы станцияға ике тапҡыр килеп инеп оло хәүеф тыуҙырған малайҙы онота буламы ни Лайон?! Ләкин нисек итеп йөҙ ҙә илле парсек алыҫлыҡтағы Ер планетаһында йәшәгән малай бында килеп инде? Ошоға төшөнә алмай Лайон! Был бит әкиәт, фантазия! Тормошта булырҙай хәл түгел!

Ер кешеләре осоп килгәндер, тиер ине, улар әле бындай алыҫлыҡҡа осорҙай караптар төҙөй белмәй. Икенсенән, Урға инеү юлы ябыҡ, бында тырнаҡ осондай әйбер ҙә үтә алмай. Әммә шуға ҡарамай Ер малайы Батыр уның карауаты янында йылмайып ҡарап тора! Бәлки, был Батырға ғына оҡшаған малайҙыр?

Лайон башҡортса өндәште:

— Һин кем?

— Батыр. Мине оноттоғоҙмо ни?

— Юҡ, — тине Лайон. — Тик һин нисек...

— Аҙаҡ аңлатырмын. — Батыр ашығып Лайондың бәйләнгән аяҡ-ҡулын сисергә кереште. — Бер бандит китте. Бында икенсеһе генә ҡалды... Ул Эмилә янында...

Лайон аяҡ үрә баҫҡас та, Батырҙы күкрәгенә ҡыҫып, рәхмәтен белдерҙе. Шунан, тауышланмаҫҡа тырышып, ишеккә йүнәлде. Малай уға эйәрҙе...

Ана һаҡалтай менән Эмиләнең тауыштары килгән бүлмә...

Лайон ишек ярығынан эскә күҙ һалды. Һаҡалтай уға ҡабырғаһы менән тора... Саҡ ҡына көтөргә кәрәк... Бәлки, арҡаһы менән боролор... Юҡ, киреһенсә, ул ишеккә ҡарабыраҡ торҙо... Ара ла алыҫ ҡына шул. Лайон барып етергә өлгөрә алмаҫ, теге пистолетын сығарыр...

Сәғәттәр кеүек оҙон тойолған секундтар үтте. Былай көтөп тороуы ла хәүефле. Башҡа бандиттарҙың килеп инеүе бар... Ни эшләргә?..

Лайондың борсолоуын Батыр ҙа һиҙенде. Бына ул Лайонды күрше бүлмәгә саҡырҙы...

Тиҙҙән малай һаҡалтай менән Эмилә торған бүлмәнең ишеген шар асып ебәрҙе... Уны күргәс, бандит шаҡ ҡатты, ярты секундтай ни әйтергә белмәй торҙо. Малай ҙа бик аптыраған булып ҡыланды. Шунан ишекте шарт япты ла кире яҡҡа ташланды. Бандит уның артынан төштө. Эммә уға күп йүгерергә тура килмәне. Коридорға сығыу менән, Лайондың аяғына эләгеп, һөрләгөп барып төштө. Киләһе секундта ҡыҙҙың атаһы уның ҡулдарын артҡа шаҡарҙы...

### *Лайон борсола*

Беҙ ҡапсыҡта ятмай. Бына кешеләрҙең артынан күҙәтеүсе робот-компьютерҙар Батырҙың эҙенә төштө. Улар, Урҙа иҫәптә тормаған йәнә бер кеше бар, ул һис шикһеҙ сит планетанан булырға тейеш, тип хәбәр һалды. Был планетала оло шау-шыу ҡуптарҙы. Яңы ғына Мойостан килгән бандиттарҙы тотоп, еңел тын алғайнылар, йәнә кемдер Урға үтеп ингән! Бәлки быныһы ла Мойостандыр. Ул саҡта был әҙәмгә ни кәрәклеге аңлашыла. Тиҙерәк тоторға үҙен! Һәм Батырҙы эҙләүгә Оло Кәңәшмә ағзалары күп көс ташланы...

Быны ишеткәс, Лайонға Батырҙы нык ҡына йәшерергә тура килде. Уны хәҙер бөтөнләй тиерлек урамға сығармайҙар... Ярай әле ашханала Эмиләнең хәйләкәрлеге арҡаһында малайға ашарға алырға була... Ләкин ары ни эшләрҙәр? Батырҙың планетала йәшәүенә айҙан ашып киткәс,

был хаҡта һүҙ ҡуҙғатыуы уғата ауыр. Сөнки тиҫтәләгән һорауҙар килеп тыуасаҡ. Нисек эләккән бында? Ҡайһылай итеп һәм ҡайҙа йәшәгән? Кемдәр ярҙам иткән?.. Бының өсөн Лайонға хөкөм ҡаты буласаҡ. Инструкцияны боҙған! Тимәк, уға башҡаса бер ҡасан да эш бирмәйәсәктәр! Астан да үлмәйәсәк ул, яланғас та булмаясаҡ. Барлығы эшһеҙ ҡаласаҡ, ә был Ур кешеһе өсөн иң ҡаты яза. Нисек итеп, бер ни башҡармайынса, ашап-эсеп кенә йәшәмәк кәрәк? Юҡ, нисек тә бер кемгә лә һиҙҙермәй генә малайҙы Ергә оҙатыу сараһын күрергә кәрәк... Ҡайҙан килеп сыҡты ул бында? Әммә төптән уйлаһаң, Батыр йәшенеп кенә Урға килмәһә, теге бандиттар менән булған ваҡиғаның нисек бөтәрө билдәһеҙ булыр ине. Малай ҡотҡарҙы бит Лайон менән Әмиләне. Бәлки, уларҙы ғына түгел, бөтә планетаны-лыр... Шуға ла Батыр Лайонға уғата яҡын. Улы кеүек күрә уны. Бигерәк ихлас, асыҡ күңелле малай. Етмәһә, тома етем... Ергә ҡайтып та ни ҡыуаныс күрер тиһең? Үҙенә Лайон менән Әмилә кеүек яҡын кешеләр табырмы ул алыҫ планетала?.. Ҡыҙ менән малайҙың дуҫлашып китеүҙәрен күрһәң... Бер-береһенән ҡыҫҡа ваҡытҡа ла айырыла алмайҙар... Батыр инде күптән Урҙағы рәсми телде өйрәнеп алған. Уға тәүге көндәрҙә үк Әмилә өйрәткән. Малай йоҡлаған саҡта уның мейеһенә телдең бөтә ҡағиҙәләрен һеңдергән...

Кис өсәүләшеп ултырһалар, китә һүҙ, китә хәбәр... Лайон менән Әмилә Ур хаҡында һөйләй, малайҙың теленән Ер планетаһы, тыуған Башҡортостаны, Сибай ҡалаһы төшмәй... Әгәр нимәлер аңлашылмай икән, Әмилә иртәгәһенә үк малайға шул хаҡта кино күрһәтә... Батыр өсөн Урҙа ғәжәпләнерлек нәмәләр уғата күп. Барыһын да төшөндөрөргә тырышалар. Фәҡәт һуңғы фәнни асыштар хаҡында ғына Лайон Батырға һөйләмәҫкә тырыша. Малай Ергә ҡайтһа, ошо хаҡта кемгәлер әйтер... Был Ер цивилизацияһын яһалма рәүештә алға тартыу булыр...

Бер көнө Батыр ҡыҙыҡ ҡына һорау бирҙе:

— Ә ни өсөн Мойос планетаһында йәшәүселәр шулай усал?

Лайон аңлатып бирҙе:

— Улар ҙа беҙҙең кеүек Ерҙәге тормошҡа ҡарағанда күпкә алға киткәндәр. Әммә бик һуғышсан, агрессив халыҡ. Үҙ-ара ла һыйыша алмайҙар. Мойоста туҡтауһыҙ һуғыш, талаш бара. Ул ғына ла түгел, сит планеталарға һөжүм итәләр. Ниңә шундай холоҡло һуң улар? Бөтә бәлә Мойос кешеләренең рухи ярлылығында. Улар, ниндәйҙер бер кимәлдә фәҡәт фән, экономика һәм техника тураһында уйлап, культуранан, рухи аҙыҡтарҙан баш тартҡандар. Уларҙың кешеләре фәҡәт байлыҡҡа мөкиббән киткәндәр.

Шул арҡала унда туҡтауһыҙ талаш, һуғыш һәм ҡан ҡойош...

Бына шулай көндәр үтә торҙо.

Урамға сыға алмағас, Батыр бөтөнләй бойоға башланы. Ул, йыш ҡына тәҙрәгә ҡарап, уйланып тора. Быны күреп, Әмилә бигерәк нык ҡайғыра. Малайға төрлө мауыҡтырғыс уйындар таба, әммә Батыр аҙға ғына улар менән ҡыҙыҡһынған кеүек була ла йәнә моңһоулыҡҡа бирелә.

Малайҙың хәле Лайонды бигерәк нык борсой. Ни өсөн тиһәң, яңыраҡ Урҙа яһалған бер асыш уны ауыр уйҙарға һалды.

Быға тиклем планетала күп кенә йәш егет менән ҡыҙҙарҙың аҡылдан шашыуы хаҡында әйтелгәйне бит. Был сәйер ауырыуҙың оҙаҡ ҡына сәбәбенә төшөнә алмайынса ыҙаланылар. Күптән түгел бер ғалим шуның серен асҡан.

Инде бер нисә быуат буйы Урҙа бөтә халыҡ бер телдә һөйләшә, бер культураға инана. Бөтәһе лә бер-берећен аңлай, һәр кемдең рухи ынтылышы башҡаларға аңлайышлы. Был бик уңайлы. Әммә теге ғалим яһаған асыш ҡот осҡос...

Баҡһаң, аҡылдан шашыусы йәштәрҙең ата-бабалары бер нисә быуат элек хәҙерге рәсми телдә түгел, ә башҡа телдә һөйләшкән, башҡа йырҙар йырлаған, ғөмүмән икенсе культураға табынған. Был иһә, меңәр йыл быуынға күсә килеп, шул халыҡтың холоҡ-фиғеленә, булмышына һеңгән. Һәм бына ул тел, ул культура бөтөрөлгән, бар халыҡтар бер телгә, бер культураға күскән. Ҡасандыр икенсе телдә һөйләшкән кешеләрҙең ейәндәре күңелендә, дөрөҫөрәге, гендарында ошо арҡала эмоциональ көсөргәнеш тыуған. Был ауырыуҙан ҡотолоу өсөн онотолған телдәрҙе, культураны кирегән терелтергә кәрәк, ти ғалим. Был берҙән-бер юл икән... Хәҙерге мәлдә Урҙың Оло Кәңәше ошо хаҡта фараз итә... Ә Лайонды Батыр борсой. Малайҙы әллә Урҙа ҡалдырырға ла ҡуйырғамы икән, тип уйлай башлағайны Лайон. Әммә теге ғалимдың асышы Әмиләнең атаһын уйға һалды. Батыр менән Урҙа бер ни ҙә булмаҫ. Ә бына уның ейәндәре, башҡорт телен, башҡорт моңон, культураһын юҡһынып, аҡылдан шаша башлар. Тимәк, Батыр һис шикһеҙ үҙ планетаһына ҡайтырға тейеш. Быны нисек эшләргә? Караптар Ергә осоп тора, әлбиттә.

## *Һағыш*

Ошо минутта Батырҙың иң яҡын дуҫы Хәлит ни эшләй икән? Ул бит үҙенең Ер аҫты станцияһында булыуын онотто. Тимәк, Батырҙың ҡайҙа икәнлеген белмәй. Нимә уйлай

икән? Ул ғына түгел, бөтә халыҡ аптырайҙыр инде. Әсәһе үлгәйне, малайы ла юҡҡа сыҡты... Ошо хаҡтағы уйҙар малайҙың башынан сыҡмай. Әш унда ла түгел. Батырҙың Ергә ҡайтып, үҙҙәренең өйөн, мәктәбен, класын күргеһе килә. Был тойғо ниндәйҙер бер ауырыуға оҡшаған, күңелде һыҙлатып тик тора. Малайға бында бөтә нәмә сит, сәйер шул... Аҙыҡтарын ғына алайыҡ. Ул тоҙһоҙ, тәмһеҙ... Тоҙҙоң ни икәнлеген дә белмәйҙәр. Үткәндә Батыр аңлатҡас, Эмилә белешмәнән тапты: баҡһаң, Урҙа ла ҡасандыр тоҙ булған. Уның зарарлы икәнлеген белгәс, аҙыҡты тоҙламай ашай башлағандар. Тәүҙәрәк ашамлыҡтарҙың һыу кеүек булыуына ҡарамай ашай ине, һуңғы осор майһыҙ, тоҙһоҙ ашты ауыҙына ла ҡаба алмай башланы. Ауыҙына алдымы, уҡшырға тотона.

Бындай хәл Лайон менән Эмиләне оло борсоуға һалды. Ҡыҙ көсләп тиерлек Батырҙы ашатырға маташып та ҡараны, тик уның тырышлығы юҡҡа китте, ни эшләргә лә белмәне. Врач-робот саҡырырҙар ине, шунда уҡ Батырҙың Ур кешеһе түгеллеген һиҙәсәктәр. Был хәлдән ҡотолоу юлы ҡайҙа? Батыр күҙгә күренеп ябыға башланы...

Лайон белә: әш тоҙһоҙ, майһыҙ ризыҡта ғына түгел. Кәрәкһә, майын да, тоҙон да табырға булыр ине. Төп сәбәп шунда: Батыр тыуған планетаһын һағына... Уны, бер нимәгә ҡарамай, ҡайтарырға кәрәк. Тик быны нисек эшләргә? Теге саҡта Лайон менән Ерҙә булған кешеләрҙең барыһы ла икенсе урында эшләй — сит планетаға осоусыларҙы йыл һайын тулыһынса алмаштыралар. Шуға ла хәҙер Лайон Ергә караптарҙы кемдәрҙең осорғанын белмәй, унда барып ҡыҙыҡһынып йөрөргә лә хаҡы юҡ...

Шулай итеп һуңғы осор Батыр Урҙа үҫкән бер ағастың һутын ғына эсә. Теге бик әсе, малайҙың күңеленә ятып тора. Эмилә уны ауыҙ итте лә төкөрөнә башланы:

— Нисек эсәһең?

Әсәһе бешергән бәлештең тәме килә ошо һуттан — быны белмәй шул Эмилә. Ә ҡоймаҡтары ниндәй тәмле була торғайны! Ошоларҙы уйлаһа, әсәһе күҙ алдына килә һәм күҙенә йәштәр эркелә. Башҡаса бер ҡасан да күрмәҫме икән ни әсәһен?.. Хәйер, әсәһен генә түгел... Ә ниңә шундай төшөнкөлөккә бирелә әле ул? Тоторға ла ҡайтырға Ергә!.. Урҙа һәйбәт, әммә үҙҙәрендә барыбер яҡшыраҡтыр... Әйе, ҡайтырға кәрәк Ергә. Шунһыҙ булмай. Йәшәй алмаясаҡ Батыр ғүмер буйы бында. Ер үлсәме менән бер ай ғына үтте, шул арала, ул үҙенең ҡалаһын, класын, дуҫтарын үлә яҙып һағынды... Ергә ҡайтып төшһә, уны әсәһе ҡаршы алыр кеүек. Улай булмаясағын яҡшы аңлай малай, шулай ҙа ниндәйҙер эске тауыш күңелдә эстән генә туҡып тик тора:

— Ҡайт Ергә, Батыр, ҡайт, һинең әсәйең тере. Ул һине көтә...

Төшөндә лә күрҙе Батыр әсәһен. Имеш, ул ҡулын һуҙып ҡаршы килә:

— Улым, һин ҡайҙа юғалдың? Мин бит тере. Миңә һинһеҙ бик ауыр. Ҡайт, улым, ҡайт. Мин һине көтәм...

Уянғас та Батыр оҙаҡ ҡына тыныслана алмай ятты. Эйе, ҡайтырға тейеш ул... Бында Әмилә бар... Ләкин тегендә, Ерҙә, уның өсөн яҡын кешеләр күберәк! Унда класташтары, дуҫтары... Унда әсәһенең ҡәбере... Батыр бында китеп барғас, уның ҡәбере янына барып ураған кеше лә юҡтыр... Улар икәү генә инеләр...

Интернатта йәшәргә тура килер. Ләкин уға сығып йөрөргә рөхсәт итерҙәр бит.

Бының өсөн иң алда караптарҙың Ергә ҡасаныраҡ осорға тейешлеген белергә кәрәк. Әмиләнән ул турала һораштырғылағайны, атаһының хәҙер ул эшкә ҡыҫылырға хаҡы юҡлығын әйтте ҡыҙ. Тимәк, үҙенә белешергә кәрәк. Әмилә караптарҙың ҡайҙан стартҡа ебәрелерен белә. Уның менән бергәләшеп барырға ла... Артабан ни эшләрен башына ла килтермәй. Әммә тик ултырырға ярамай, карапҡа эләгеү сараһын эҙләргә кәрәк! Малайға ҡамасаулаған тағы бер нәмә — ул Ур кешеһе түгел. Батырҙы эҙләйҙәр. Мойостан килгән бандит тип уйларҙар. Әгәр тотолһа, Ерҙән килдем, тиеүенә ышанмаҫтар. Батыр белеште: теге бандиттарҙы махсус тулҡын аша үткәреп, һәйбәт кешегә әүерелдергәндәр, Мойос планетаһынан икәнлектәрен дә онотторғандар. Хәҙер беҙ Ур кешеләре тип, бик ҡәнәғәт ҡиәфәт менән йәшәп яталар, имеш... Бының һис тә насар яғы юҡтыр, бәлки. Әммә Батырҙың тотолғоһо килмәй. Ер хаҡында, дуҫтары, класташтары, әсәһе тураһында онотторға теләмәй. Эйе, Батырға тотолорға ярамай. Нисек тә Ергә караптар осороусы станцияға эләгергә, шунан күренмәй генә карап эсенә үтеп инергә... Мөмкинме был? Әмиләгә уйын асып һалғайны, ҡыҙҙың күҙҙәре шар булды:

— Быны эшләп булмаясаҡ, — тине ул.

— Ниңә?

— Сөнки станцияны һаҡлайҙар.

— Әгәр Урҙа гел һәйбәт кешеләр йәшәй икән, кемдән һаҡлайҙар?

— Урға сит планетанан үтеп инеүселәр була.

— Һеҙ бит Урҙы һаҡлаусы магнит тулҡындары менән уратып алғанһығыҙ.

— Эйе, тулҡындар һаҡлай. Әммә сит планетала ул тулҡындарҙы тишеү ысулын уйлап табыуҙары бар бит. Батыр, һин ҡайтырға булдыңмы ни? — Әмиләнең тауышы күңелһеҙ яңғыраны.

Батыр башын эйҙе:

— Бында һәйбәт, Әмилә. Һин дә, атайың да миңә бик яҡынһығыҙ... Ләкин... Унда әсәйемдең ҡәбере... ҡайтырға кәрәк миңә...

— Ҡайтһаң, мин һине башҡаса бер ҡасан да күрмәҫмен-ме?

— Күрешербеҙ. Ҙурайғас. Һин үҙең Ергә килерһең... Ә хәҙер ярҙам ит миңә, Әмилә.

— Ярай, — тине ҡыҙ. — Тик нисек...

— Бәлки, атайыңа әйтәйек?..

— Юҡ. — Ҡыҙ башын сайҡаны. — Станцияның ҡайҙалығын мин унһыҙ ҙа беләм. Ә ҡалғанын хатта уға ла әйтмәйҙәр...

Шул кис улар станцияға табан юлға сыҡты...

*Станцияла*

Әмилә станцияны анһат ҡына тапты. Әммә ул бейек ҡойма менән уратып алынған ине. Ҡапҡа бикле. Нисек уның эсенә инергә?

— Ҡапҡаны асыу өсөн паролде белергә кәрәк, — тине Әмилә.

Станцияның эсенә ара-тирә ниндәйҙер кешеләр инә, сыҡҡандары ла күренә. Эргәләренә барып, ҡапҡаны нисек астырғандарын тыңлап торорға ине лә, унда йәшеренерҙәй урын юҡ.

— Әйҙә, былай итәбеҙ, — тине Батыр. — Станциянан сыҡҡан берәй кешегә: «Атайыбыҙ янына килдек, тик паролде онотҡанбыҙ», — тип әйтәбеҙ.

— Ә атайығыҙ кем, тиһә?

— Берәй исем әйтербеҙ. Бында кеше аҙ тиһеңме? Барыһы ла бер-береһен белмәйҙәр әле.

— Юҡ, — тип ҡаршы төштө Әмилә малайҙың уйына.

— Ниңә?

— Был алдашыу була.

— Булһын, — тип ҡаршылашты малай. — Юғиһә эскә инә алмаясаҡбыҙ.

Әмилә барыбер ризалашманы.

Бына улар ҡойманы урап киттеләр. Тәпәшәгерәк урыны юҡмы икән? Ул саҡта... Мәҫәлән, Әмилә Батырҙың яурынына баҫып ҡоймаға менер, ә малай унһыҙ ҙа күтәрелер. Ә инде берәй арҡан киҫәге тапҡанда бигерәк тә шәп булыр ине. Уны ҡойманың башына эләктерерҙәр ҙә йәбешеп менер ҙә китерҙәр...

Станцияны тулыһынса урап сыҡтыҡ тигәндә ҡойма янында ғына үҫеп ултырған бер ағасҡа тап булдылар. Ерҙәге ти-

рәккә оҡшаған йыуан олонло бейек ағас. Малай менән ҡыҙҙы иң ҡыуандырғаны шул — уның ботаҡтары ҡойма аша һалынып эскә төшә биргән. Был ағас Әмилә менән Батыр өсөн генә үҫеп ултыра! Әгәр ботаҡ буйлап үрмәләһәләр, ҡойманың теге яғына ырғып төшөүе бер ни ҙә тормай.

Тик бына ағастың иң аҫҡы ботағы ғына бейегерәк, ҡапыл ғына йәбешеп менеп китерлек түгел. Әммә сараһын тапты Батыр. Эргәлә генә ятҡан бер нисә ташты алып килеп ағастың олоно янына өйгәйне, ҡулдары ботаҡҡа етте лә ҡуйҙы.

Тәүҙә Батыр Әмиләгә менергә ярҙам итте, күп тә үтмәне үҙе лә ботаҡ өҫтөндә ултыра ине инде.

Малай ҡыҙға урынынан ҡыбырламаҫҡа ҡушты, үҙе ботаҡ буйлап алға атланы. Бына ҡойма... Станцияның эсе асыҡ күренә. Унда кешеләр йөрөй, роботтар... Нисек тә шуларҙың күҙҙәренә күренмәйенсә эскә ырғып төшөргә кәрәк. Эргәлә генә һарай кеүек бер нәмә күренә. Был бик шәп. Төшкәс тә шуның артына йәшенергә була...

Батыр, кеше күренмәгәнерәк ваҡытты самаланы ла, аҫҡа ырғыны. Тиҙҙән Әмилә лә уның янында ине.

Ошо ерҙә малай үкенгән тауыш менән:

— Их! — тип ҡуйҙы.

— Ни булды?

— Һиңә бында инмәҫкә ине!

— Ниңә?

— Хәҙер нисек сығырһың?

— Сығыуы ҡыйын булмаҫ, — тине ҡыҙ. — Мин һинең Ергә осоп китеүеңде белергә тейешмен. Әйҙә!

Малай менән ҡыҙ биналарҙың артына йәшенә-ҡаса карaптар ултырған урынға яҡынлашты.

— Бына ошо бина эсендә караптар, — тине Әмилә.

— Ә унан караптар нисек осоп сыға?

— Бинаның уртаһында түбә юҡ...

Батыр менән Әмиләнең алдына хәҙер иң ауыр мәсьәлә килеп торҙо: нисек итеп бында инергә лә, ҡайһылай итеп карапҡа эләгергә? Ә ул ҡасан оса? Әгәр фәҡәт бер айҙан ғына Ергә табан юл алырға тейеш булһа, Батыр бында шул тиклем ваҡыт нисек йәшәр? Улар был хаҡта уйламаҫҡа тырышты...

Бына бинанан бер робот килеп сыҡты. Ул туп-тура ҡаршылағы йортҡа табан атланы.

— Мин был роботты беләм, — тине Әмилә. — Атайым бында эшләгәндә лә бар ине ул. Шифры ла иҫемдә: К-1.

— Нимә ул шифр?

— Исеме, тип әйтергә була. Бәлки, ул беҙгә ярҙам итер?

— Робот һине иҫләй тиһеңме?

— Әлбиттә, — тине Әмилә. — Тик ул минең был стан-

цияға бер ниндәй ҙә ҡыҫылышым юҡлығын да белә. Йәнә уға сит кешеләрҙе тоторға тигән программа ла бирелгән.

Батыр ҡабаланып уйларға кереште. Ул арала робот теге йорттан сыҡты ла кире атланы. Әмилә, саҡ ҡына икеләнгәндән һуң, тәүәккәлләне.

Бына ҡыҙ роботҡа ҡаршы сыҡты:

— К-1, — тип өндәште ул. Робот туҡтап ҡалды:

— Һин — Ә-ми-лә, — тине ул өҙөк-өҙөк тауыш менән.

— Эйе! — тип ҡыуанып китте Әмилә. — Таныйныңмы?

— Ни-ңә кил-дең?

— Миңә караптар янына инергә кәрәк.

— Я-ра-май.

— Ярай, К-1, ярай. — Ҡыҙ уны өгөтләргә тотондо.

— Һин сит ке-ше. Мин һи-не то-тор-ға те-йеш. — Робот Әмиләгә табан атланы.

Ошо ерҙә Батыр түҙмәне, урынынан йүгереп сыҡты.

— Әмилә, ҡас!

Ҡыҙ ситкә тайпылды:

— Тиҙерәк китәйек бынан, — тине ул малайға. — Хәҙер ул башҡа роботтарға хәбәр итәсәк!

Ысынлап та улар шунда уҡ роботтың кемгәлер өндәшеүен ишеттеләр:

— Яр-ҙам-ға! Стан-ци-я-ла сит ке-ше-ләр!

Батыр менән Әмилә, бинаны уранылар ҙа, ҡойма буйындағы ағаслыҡҡа табан йүгерҙеләр. Әммә робот та ҡалышырға теләмәй ине. Үҙе туҡтауһыҙ кемгәлер хәбәр итә:

— Стан-ци-я-ла сит ке-ше-ләр!

Бына малай менән ҡыҙ ағастар араһына сумды. Робот эскә инеп торманы, туҡтап ҡалды:

— Мин Б-3 квадратында! Сит ке-ше-ләр бын-да!

— Ҡастыҡ! — тине Батыр һәм беренсе булып алға ташланды.

Әмилә уға эйәрҙе. Асыҡ ергә сыҡҡас та улар үҙҙәренә табан шәп-шәп атлап килә ятҡан тиҫтәгә яҡын роботтарҙы күрҙе. Батыр, ҡырҡа боролоп икенсе яҡҡа йүгерҙе. Әммә ул яҡтан да роботтар яҡынлаша... Ҡамалғандар! Батыр менән Әмилә улай-былай итте лә кире ағастар араһына ҡасты. Тотолғандарын улар инде аңланы. Хәҙер ни эшләрҙәр? Әмиләне сығарып ебәрерҙәр, әлбиттә. Ә Батырҙың сит планетанан икәнлеген белһәләр... Ер хаҡында онотторол, Ур кешеһенә әйләндерерҙәрме? Батыр бит быны теләмәй! Юҡ, теләмәй!..

Роботтар Әмилә менән Батырҙы станцияның ҡапҡаһы янындағы бинаға алып килде. Бына ишек асылып китте һәм унан оҙон буйлы, мыйыҡлы ир килеп сыҡты.

— Сит кешеләр ошомо? — тип һораны ул аптыраған тауыш менән.

— Ошо, — тине роботтар.
— Былар бит балалар! — Мыйыҡлы ағай көлөп ебәрҙе. — Ярай, ҡалдырығыҙ.
Роботтар китте. Мыйыҡлы ағай Батыр менән Әминәне үҙенең кабинетына саҡырҙы:
— Әйҙә, үтегеҙ...

*Станцияның етәксеһе*

— Йә, һөйләгеҙ, кем булаһығыҙ? Исемдәрегеҙ нисек? Батыр? Сәйер исем. Ишеткәнем юҡ. Нисек үтеп индегеҙ бында?
Әминә һөйләп биргәс, ир кеше ҡаштарын сөйҙө. Шулай анһат ҡына бында инеп булғанына аптыраны, буғай.
— Ярай, — тине шунан. — Бында сит кешеләргә инергә ярамағанлығын белмәйһегеҙме ни?
— Беләбеҙ.
— Белгәс...
— Беҙгә бик кәрәк ине, — тине Батыр.
— Ниңә?
— Эш шунда... — Батыр саҡ ҡына икеләнде. Был ағай һәйбәт кешегә оҡшаған. Тоторға ла әйтергә! — Мин Ур кешеһе түгел.
Быны ишеткәс, мыйыҡлы ир урынынан ырғып торҙо:
— Ҡайҙан һин?
— Ерҙән.
— Ҡайҙан? Ҡайҙан? — Күрәһең, ул Батырҙы Мойос планетаһынан тип уйлағандыр. Ер һүҙен ишетеп бик аптыраны. — Ерҙән, тиһеңме? Ә нисек килеп эләктең һин беҙҙең планетаға?
Ошо ерҙә Батыр менән Әминә, бер-береһен бүлә-бүлә, үҙҙәре менән булған ваҡиғаларҙы һөйләп бирҙеләр. Бүлмәнең хужаһы һаман да уларға ышанырға теләмәне.
— Ерҙән, тиһең инде? Ә Ерҙәге беҙҙең станция янындағы ҡаланың исемен беләһеңме?
— Беләм. Сибай.
Ир кеше йылмайҙы:
— Унда ниндәй халыҡ йәшәй?
— Башҡорттар. Мин үҙем дә башҡорт, — тине Батыр был ағайҙы ышандыра башлауын һиҙенеп.
— Башҡортса беләһеңме һуң? — тип һораны мыйыҡлы ағай ҡапыл саф башҡорт телендә.
— Беләм! — тип өндәште Батыр ҙур ҡыуаныс менән.
— Мин ышандым. Һин, ысынлап та, Ер малайына оҡшағанһың. Аҙаҡҡы һорау. Әгәр уға дөрөҫ яуап бирһәң... Сибайҙың төп урамы нисек атала?
— Таусылар проспекты!

— Дөрөҫ! — Ағай кеше килеп Батырҙың ҡулын ҡыҫты. — Һин, ысынлап та, Ер кешеһе... Мин ышандым быға... Тимәк, һинең бында икәнлегенде бер кем дә белмәйме?

— Юҡ.

— Шулай ҙа тикшереп ҡарайыҡ. Икегеҙ ҙә бында килегеҙ.

Мыйыҡлы ағай Батыр менән Әмиләне бер кабинаға индерҙе. Шунда уҡ ҡаршылағы экранда ниндәйҙер һандар барлыҡҡа килде.

— Компьютерҙар уға минең хаҡта бөтәһен дә әйтеп бирҙе, — тип аңлатты ҡыҙ. — Ә һинең турала бер ни ҙә юҡ...

— Сығығыҙ. — Ағай кеше ултырғыстарға күрһәтте. — Ултырығыҙ. Һинең турала Ур компьютерҙары бер ни белмәй. Әммә һеҙ оло баш-баштаҡлыҡ ҡылғанһығыҙ. Батырҙың бында китеүе арҡаһында Ерҙә ҙур үҙгәрештәрҙең башланыуы бар ине бит... Мин Батыр хаҡында Ур планетаһының етәкселәренә әйтергә тейешмен. Әммә мин әйтмәйем, сөнки уларҙың ниндәй ҡарар сығарыры билдәһеҙ. Беҙ бөгөн Ергә осабыҙ...

— Ур-ра! — Батыр, ағайҙың һөйләп бөтөүен көтмәйенсә, урынынан ырғып торҙо.

Мыйыҡлы ағай йылмаймайынса булдыра алманы:

— «Ура» — Ер кешеләренең ҡыуанған саҡта ҡысҡыра торған һүҙҙәре бит әле... Барығыҙ, хушлашығыҙ. Ярты сәғәттән Ергә осабыҙ...

### *Хуш, Ур!*

Ур планетаһында төн. Ул һис тә Ерҙәге төндән айырылмай тиерлек. Фәҡәт күк йөҙөндә йондоҙҙар ғына эрерәк һәм күберәк. Болоттар араһында төрлө ҙурлыҡтағы өс ай йөҙөп йөрөй...

Шул уҡ ел иҫә, эргәлә генә япраҡтар ҡыштырлай...

Әмилә менән Батыр теге ағайҙың кабинетынан сыҡҡандар ҙа өндәшмәй генә ҡараңғылыҡҡа ҡарап торалар...

Нимә өндәшергә, ниндәй һүҙҙәр әйтергә ошондай минутта?

Улар хушлашырға тейеш. Бәлки, башҡа бер ҡасан да бер-береһен күрә алмаҫтар. Быға ышанғы килмәй. Батыр, әлбиттә, бүтән Урҙа була алмаҫ, әгәр Әмилә генә, ҙурая төшөп, үҙе Ергә килеп сыҡмаһа. Ул саҡ Батыр ҡайҙа булыр? Таба алырмы уны Әмилә? Һорауҙар күп. Береһенә лә яуап юҡ. Шуға ла өндәшмәй генә үҙ уйҙарына бирелеп тора улар...

Әмиләне йәнә шул борсой. Ул хәтерләйәсәк Батырҙы. Хатта башҡаса осрашмаһалар ҙа ғүмер буйы иҫләйәсәк.

Уның батырлыҡтарын гел генә күҙе алдынан үткәрәсәк, улар менән һоҡланасаҡ һәм малайға рәхмәттәр уҡыясаҡ. Тимәк, ҡыҙ өсөн Батыр һәр ваҡыт ҡәҙерле һәм яҡын булыр. Ә бына Батыр... Уны бит Ер аҫтындағы станциянан сығарғанда махсус тулҡын аша үткәрәсәктәр. Һәм ул бөтәһен дә, бөтәһен дә — Ерҙә бергә йөрөүҙәрен, Урҙа санитар менән һаҡалтайға ҡаршы көрәшеүҙәрен — барыһын да, барыһын да онотасаҡ. Ул хатта үҙенең Урҙа булыуын да хәтерләмәйәсәк. Уйлаһаң, был ҡот осҡос!.. Ҡапыл ҡыҙҙың тамағына ниндәйҙер төйөр килеп тығылды, күҙҙәре йәшкәҙәне...

Шул саҡ ишектә мыйыҡлы ағай күренде:

— Хушлаштығыҙмы? Улайһа, Батыр, беҙгә осорға ваҡыт.

Ошо ерҙә Әмилә ағайҙың янына йүгереп барҙы:

— Минең һеҙгә үтенесем бар...

— Әйт.

— Һеҙ Ергә барғас... Батырҙы станциянан сығарған мәлдә... махсус тулҡын аша үткәрмәгеҙ...

— Ни өсөн?

— Ул онотмаһын Урҙы... мине... — Ҡыҙҙың тауышы ҡалтырап китте.

— Ауыр мәсьәлә ҡуяһың, Әмилә. — Ағай уйға ҡалды. — Был бит инструкцияны боҙоу!

— Булһын... Мин үтенеп һорайым... Мин уны иҫләйәсәкмен... Ғүмере онотмаясаҡмын... Ә ул... Мин ҙурайғас, ҡабаттан барам Ергә... Беҙ осрашырға тейешбеҙ... — Әмилә битен ҡулдары менән ҡапланы.

Мыйыҡлы ағай Әмиләне үҙенә ҡыҫты.

— Ярай, тыныслан, Әмилә... Күрәһең, инструкция буйынса ғына йәшәп булмайҙыр... Ярай, Батырыңды махсус тулҡын аша үткәрмәм. Әйҙә онотмағыҙ бер-берегеҙҙе!

— Һеҙ һүҙ бирегеҙ!

Ағай йылмайҙы:

— Ур кешеһенең һүҙе!

Әмилә лә, ике күҙен ҡаплаған йәштәре аша йылмайҙы һәм быға са, бер ни өндәшмәйенсә, ситтәрәк торған Батыр янына килде:

— Хуш, Батыр...

— Әмилә, хуш...

Улар ҡул биреште.

Бына мыйыҡлы ағай Батырҙы, яурынынан ҡосаҡланы ла, ишеккә алып китте...

Бына улар ҡыҙҙан секунд һайын алыҫлаша...

Бына ишеккә барып еттеләр...

Бына Батыр һуңғы тапҡыр боролоп ҡыҙға ҡараны, йылмайҙы һәм ҡулын күтәреп хушлашты ла юғалды...

Батыр!.. Ҡыҙҙың йөрәге ауыртып ҡыҫылды! Малайҙы шундай яҡын күрә башлағайны бит Әмилә! Уны башҡа күрмәҫме икән ни? Ҡыҙҙың күҙҙәренән йәштәре тәгәрәне. Ур планетаһында япа-яңғыҙ тороп ҡалған кеүек итеп хис итте ул үҙен. Әйтерһең, Батыр уның бар донъяһын, бар шатлыҡ-ҡыуаныстарын үҙе менән алып китте...

— Хуш, Батыр, — тип шыбырланы Әмилә үҙ алдына. — Хуш... Тик һин бел: беҙ барыбер осрашасаҡбыҙ!..





# ҠАРА ҠУМТА-2

## БАТЫР ҠАЙҘА?

— Батыр юғалды, — тине Хәлит ҡурҡҡан тауыш менән.

— Нисек юғалды? — Ҡыҙ малайға борсолоп ҡараны.

— Бына ошонда бәләкәй генә ҡара ҡумта тора ине. Шуға ингәйне...

Эмилә һиҫкәнеп китте:

— Шунда ингәйне? Ә ҡумта ҡайҙа?

— Юҡҡа сыҡты...

— Их, һеҙ! — Ҡыҙ, ни эшләргә белмәйенсә, тирә-яғына ҡаранды. — Унда инергә ярамай бит! Бөтөнләй ярамай!

— Беҙ бит белмәнек... — Хәлит ҡаушап төштө.

— Әгәр Батырҙы бөгөн тапмаһаҡ...

Ҡыҙ әйтеп бөтөрмәне, шул арҡала Хәлиттең күңелен шом яулап алды.

— Ни була?

— Батыр юғаласаҡ... мәңгегә!.. — Ҡыҙҙың тауышы ҡалтыранды.

— Мәңгегә? — Хәлит ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәне. Нисек инде мәңгегә? Яңы ғына ошонда торған дуҫы бөтөнләйгә юҡҡа сыҡтымы? Улай булыуы мөмкин

түгел! Әммә Әмилә шаярғанға оҡшамаған. Улайһа, Хәлит башҡаса Батырҙы күрмәйме? Ә ниңә күрмәй? Әгәр тере икән... Әллә... — Үлде... тимәксеһеңме?

— Юҡ. Батыр тере буласаҡ. Тик беҙ барыбер Батырҙы башҡа бер ҡасан да күрә алмаясаҡбыҙ...

Коридор осонда һөйләшкән тауыштар ишетелде.

— Кемдер килә! — Әмилә, һағайып, малайҙың беләгенән тотто. — Йәшендек!

Улар эргәләге тумба артына боҫоуға, коридорҙа ике кеше күренде. Ә малай менән ҡыҙ тын да алмайынса ҡатып ҡалды.

Бер ваҡыт тегеләр, Әмилә менән Хәлит йәшенгән ерҙең янында туҡталып, нимәлер хаҡында бик борсолоп һөйләшергә кереште. Улай-былай йөрөшөп алдылар, тирә-яғына ҡарандылар. Улар нимәлер эҙләй ине шикелле. Тик аңлайышһыҙ телдә һөйләшкәнгә Хәлит бер ни ҙә төшөнмәне. Бер аҙҙан улар ҡысҡырып һөйләшә-һөйләшә китеп барҙылар.

— Улар — ҡара ҡумтаның хужалары, — тип аңлатты Әмилә, йәшенгән урындарынан сыҡҡас. — Ошонда ҡалдырғандар, ә ҡумта юғалған. Шуға борсолалар...

— Нимә эшләйбеҙ? — Хәлиттә улар ҡайғыһы юҡ. Уның дуҫы юғалды бит!

— Батырҙы эҙләйбеҙ!

— Ул ошонда берәй мөйөштә боҫоп ултыралыр. Яҡшылап ҡараһаҡ...

— Юҡ шул, — тине Әмилә. — Батыр бында юҡ.

— Нисек юҡ?

— Бына шулай. — Ҡапыл ҡыҙҙың күҙҙәрендә өмөт сатҡылары йылтыраны. — Станцияла тағы бер ҡара ҡумта бар! Тик Ер аҫты станцияһының етәксеһенән башҡа бер кемдең дә уны алырға хаҡы юҡ. Ул ҡумта менән Батырҙы табырға була.

— Ҡайҙа һуң ул ҡумта?

— Әйҙә!

Ҡыҙ менән малай, һаҡ ҡына баҫып, оҙон коридор буйлап атланы. Күп тә үтмәне, улар бер ишек ҡаршыһына килеп туҡтаны.

— Бына ошонда! — тине ҡыҙ. Хәлит ишекте тартҡылап-этеп ҡараны.

— Нисек асабыҙ?

— Паролде әйтергә кәрәк.

— Ниндәй пароль тағы?

— Бер нисә һүҙ. Шуларҙы әйтһәң, ишек асыла. Тик уны станция етәксеһенән башҡа бер кем дә белмәй.

— Бәлки, үтенеп һораһаң...

— Юҡ. Мин ҡыҙыҡһына башлаһам, ниңә кәрәк ул һиңә,

тип һораясаҡ. Ә мин асығын әйтә алмайым. Ул Ер кешеләре менән аралашҡанымды белһә, бөгөн үк Урға ҡайтарып ебәрәсәк.

Малай менән ҡыҙ, ни эшләргә лә белмәйенсә, аптырап ҡалды...

## ҒӘЖӘП НӘМӘЛӘР

Артынан ҡыуып килгән роботтан ҡотолоу өсөн эргәлә торған ҡара ҡумтаға сумғас та, Батыр, артынан ишекте тиҙерәк ябырға теләп, пульттағы кнопкаларға ашығып баҫты. Бер ваҡыт ишек ысынлап та ябылды, шунан малай өсөн ғәжәп нәмәләр башланды.

Тәүҙә машина (ҡара ҡумтаның ниндәйҙер машина икәнлеген ингәс кенә аңланы Батыр) әкрен генә геүелдәне, шул минутта пульттағы тиҫтәләгән лампочкалар емелдәне, таблола һандар ашығып сабырға кереште.

Батыр, ни эшләргә белмәйенсә, аптырап ҡарап тора. Ҡурҡыу тойғоһо кисермәне ул, киреһенсә, теге роботтан аһһат ҡотола алғанына ҡыуанды. Ҡапыл малайҙың ҡолағы тонғандай итте. Хас та самолетта осоп барғандағы кеүек. Әллә ысынлап та осоп китteләрме икән? Тышҡа ҡарап белер ине, ҡумтаның тәҙрәһенән бер ни күренмәй. Ябыҡ, күрәһең. Ҡумта бәләкәй генә. Киңлеге-бейеклеге ике метрҙан артмай. Алда — пульт, уртала — кресло кеүек нәмә. Ниндәйҙер машина, күрәһең.

Ул арала ҡумта һелкенеүҙән туҡтаны. Геүелдәүе лә ишетелмәй. Батыр бер аҙ шымып ултырҙы.

Ни эшләргә хәҙер? Бында ғүмер буйы ултырып булмай бит. Әммә ҡапыл ғына сығырға ла ярамай. Унда теге робот көтөп торалыр. Хәлит менән ни булды икән? Ул ғына эләкмәһә...

Туҡта! Батыр бынан нисек сығыр? Малай ишекте улайбылай тартҡылап ҡараны. Ҡымшанмай ҙа!.. Батыр пульттағы яҙыуҙарҙы уҡырға кереште. Ул бит әле Ур планетаһының телен хәтерләй.

Кнопкалар аҫтына сәйер генә һүҙҙәр яҙылған: «Алға», «Артҡа», «Йылдар иҫәбе», «Пароль»...

Ниндәй пароль был? Шул ишекте асырға ярҙам итмәҫме?

Батыр кнопкаға баҫты, шунда уҡ таблола Ур телендә ике һөйләм хасил булды:

«Инеү — Ваҡытты еңеү». «Сығыу — Ваҡытҡа һөжүм».

Былар бит — ҡара ҡумтаға инеү-сығыу өсөн паролдәр! Тик ниңә бындай сәйер һүҙҙәрҙе һайлағандар икән? Ниңәлер икеһендә лә «ваҡыт» һүҙе бар...

Батыр күп уйлап торманы, ишеккә боролдо ла паролде әйтте. Әгәр теге робот эргәлә көтөп торһа, яба берә!

Бына бер мәл ишек асылып китте. Батыр тышҡа күҙ һалды — яҡын-тирәлә робот күренмәйме? Киләһе секундта малай күҙенә ташланған күренештән шаҡ ҡатты. Теге робот ҡына түгел, ошо ҡыҫҡа ваҡыт эсендә Ер аҫты станцияһы ла юҡҡа сыҡҡан даһа! Ҡара ҡумта ҡола ялан уртаһында тора! Малай, быға ышанырға теләмәйенсә, күҙҙәрен селт-селт йомғолап алды. Шунан тупһа аша атланы.

Был ниндәй мөғжизә? Ул ысынлап та Ер өҫтөндә! Ә станция ҡайҙа? Хәлит аҫта ҡалдымы? Хәҙер уны нисек табырға? Әмиләне күрәм тип, Батыр ҙур ҡыйынлыҡтар менән Ур планетаһының Ер аҫтындағы станцияһына эләккәйне. Ҡыҙҙы таптым тигәндә, йәнә киренән Ер өҫтөнә килеп сыҡтымы? Ул станцияға яңынан нисек эләгергә хәҙер? Һорауҙар күп, тик береһенә лә яуап юҡ. Хәлит Батыр тураһында насар уйлауы ихтимал. Йәнәһе, ҡурҡҡан да ташлап ҡасҡан! Ҡайҙан ултырҙы был ҡара ҡумтаға? Ә нисек килеп сыҡты ул кире Ер өҫтөнә?

Батыр тирә-яғына ҡаранды. Ана, алыҫта Сибай күренә.

Туҡта! Был ни эш? Быйыл ғына төҙөлгән, ҡала ситендәге берҙән-бер туғыҙ ҡатлы өй ҡайҙа? Малай күҙҙәрен ыуғыланы ла тағы ҡараны. Юҡ! Туғыҙ ҡатлы өй юҡҡа сыҡҡан! Әллә был Сибай түгелме? Малай ҡалаға ныҡлабыраҡ баҡты. Сибай бит! Эргәлә генә ҡала ситендәге бер ҡатлы өйҙәр — таусылар поселогы ята. Бирерәк Түңәрәк тау күренә. Улайһа, туғыҙ ҡатлы өй ҡайҙа булған?

Батыр аптырауға ҡалды. Бәлки, ул булмағандыр? Батыр яңылышалыр. Улай тиһәң, кисә генә улар Хәлит менән шул туғыҙ ҡатлы йорттоң лифтында өҫкә-аҫҡа шыуып йөрөнөләр. Сибайҙың башҡа өйҙәрендә бит лифт юҡ. Хәҙер шул йорт юҡҡа сыҡҡан!

Ярай, юҡ икән — юҡ булһын! Хәҙер ул хаҡта ҡайғырып торор ваҡыт түгел. Ер аҫты станцияһына кире инергә, Хәлитте ҡотҡарырға, Әмиләне табырға кәрәк. Тик станцияның ишеге ҡайһы тирәлә икән?

Ошо ерҙә генә Батыр тыштағы күренештең бик ныҡ үҙгәргәнлегенә иғтибар итте. Бөгөн генә иртәнсәк, станцияға төшкәндә, үләндәр йәм-йәшел ине, сәскәләр үҫеп ултыра ине, һауала турғайҙар һайрай, үлән араһында сиңерткәләр серелдәшә ине. Ә хәҙер тирә-йүн һап-һары, сәскәләр юҡ, сиңерткәләрҙең тауышы ишетелмәй. Ул ғына ла түгел, һалҡын ямғыр яуа, ел иҫә. Бәй, ике-өс сәғәт эсендә ер өҫтөнә ысын көҙ килгән түгелме? Ниңә улай? Әле бит йәйҙең башы ғына? Ни арала йәм-йәшел үләндәр һарғайырға өлгөргән? Быны бит булыуы мөмкин түгел. Батыр тамам аптырауға ҡалды.

Ошо ерҙә генә ул ямғыр ҡатыш һалҡын елдең һөйәктәргә тиклем үтеп ингәненә иғтибар итте. Шулай булмай ни — ул бит майка менән шортиктан ғына!

Батыр улай-былай итте лә, өшөүгә түҙә алмағас, кире ҡара ҡумтаның эсенә инеп бикләнде. Әммә бында йылынырлыҡ түгел, машинаның эсе һыуынырға өлгөргән. Малай үҙенең ҡалтырана башлауын тойҙо...

## ҠАРА ҠУМТА ОСА

Батырҙың башында төрлө һорауҙар ҡайнаша. Ер аҫты станцияһының ишеге ҡайһы тирәлә? Был ҡара ҡумта менән ни эшләргә? Ошонда ғына ташлап китер ине, кешеҡараның күреп ҡалыуы бар. Батыр бит Ур планетаһынан ҡайтҡан саҡта һүҙ бирҙе. Сит планета хаҡында бер кемгә лә бер нәмә лә һөйләмәй. Сувенир итеп Урҙан бер значок алғайны, уны бер кемгә лә күрһәтмәй... Шулай булғас, Батыр ҡара ҡумтаны ла ер кешеләренә күрһәтергә тейеш түгел. Тик уны нисек йәшерергә? Киңлеге-бейеклеге икешәр метр бит.

Ә Батыр бында ҡала алмай. Көндәр былай һыуып киткәс, ҡалаға ҡайта һалып, йылыраҡ кейенеп килергә кәрәк. Үҙенең йылы кейемдәре Сибайҙа юҡ, Өфөлә ҡалды. Хәлиттекен алып торор. Тик уның ата-әсәһе Хәлит хаҡында һораша башлар инде. Улдарының өйгә ҡайтмауын нисек аңлатыр икән?

Ошондай уйҙарға батҡан малай ирекһеҙҙән пульттағы яҙыуҙарҙы уҡыуын дауам итте. Әлбиттә, Ур телен яҡшы белмәй, әммә байтаҡ һүҙҙәрҙе аңлай бит әле. Бынау кнопка өҫтөнә яҙылған һүҙ башҡортса «осоу» тигәнде аңлата. Осоу? Нисек — осоу? Был ҡумта оса аламы икән ни?

Батыр бер аҙ икеләнде лә теге кнопкаға баҫты. Шул уҡ секундта ҡара ҡумта йәнә геүелдәй, һелкенә башланы. Ҡапыл алдағы тәҙрә асылып китте, тирә-йүн ап-асыҡ булып күҙгә ташланды.

Туҡта! Был нимә? Ер аҫҡа төшөп китте түгелме? Юҡ, ҡара ҡумта үҙе өҫкә күтәрелә икән! Ул оса! Батыр тәҙрәгә һырылды. Ысынлап та оса! Туп-тура өҫкә күтәрелә. Әгәр былай барһалар, йыһанға сығып китә икән! Батыр ашығып осоуҙо туҡтатыусы кнопканы эҙләргә керешә. Юҡ бит! Бына бер рычаг! «Осоуҙың йүнәлеше» тип яҙылған үҙенә! Малай шуны ҡырҡа рәүештә ситкә этте. Киләһе секундта ул башы менән түбәгә бәрелде. Ҡараһа, ҡумта ер өҫтөнән осоп бара. Батыр, ауыртҡан ерен ыуалай-ыуалай, йәнә теге рычагка тотондо. Тик был юлы һағыраҡ ҡыланды. Рычагты әкрен генә улай-былай ауҙарып ҡараны. Ҡумта рычагтың һәр хәрәкәтенә үҙенең йүнәлешен үҙгәртте. Ҡыҙыҡ!

Малай ҡара ҡумтаны бер алға, бер артҡа алып китте, йә өҫкә күтәрҙе, йә аҫҡа төшөрҙө. Ғәжәп бит был! Ҡанаты юҡ, ә нисек анһат ҡына оса! Ошолай осоп йөрөү малайҙың бар булмышын ялмап алды, хатта ул үҙенең өшөүе хаҡында ла онотто.

Бына бер мәл Батыр ҡара ҡумта менән ҡалаға табан осоп китте. Өйҙәр, урамдар ус төбөндәге кеүек күренә. Теге туғыҙ ҡатлы өй ысынлап та юҡ. Ул ғына түгел ҡаланың ошо яғында төҙөлгән башҡа өйҙәр ҙә күренмәй. Ҡайҙа булған улар? Батыр яҡыныраҡ осоп барырға иткәйне лә, ҡара ҡумтаны кешеләргә күрһәтергә ярамағанлығын иҫенә төшөрҙө. Улайһа, ни эшләргә? Көн һыуынғандан-һыуый бара бит. Ана, ҡар күҙҙәре лә төшә башланы. Батыр дерелдәп ҡуйҙы. Ни булды был көнгә? Бөгөн икенсе июнь. Иртәнсәк кенә Батыр менән Хәлит эҫегә түҙмәй йөрөй ине. Ә хәҙер, ана, яландар һарғайған, ҡар яуа...

Ҡараңғы төшөү менән Батыр Хәлиттәрҙең өйө янына осоп барыр ҙа, йүгереп кенә инеп, йылы кейемдәр алып сығыр. Ә хәҙер нисек кенә һыуыҡ булһа ла түҙергә кәрәк. Батыр кире Ер аҫты станцияһы булырға тейеш урынға осоп килде. Бәлки, аҫтан осоп сығырҙар, шулай итеп Батыр станцияның ишеген табыр. Ул саҡта станцияға яңынан инергә тырышып ҡарар ине. Тамам туңмаҫ өсөн ҡара ҡумта эсендә гимнастика яһай-яһай, Батыр ошо хаҡта уйланы.

## ҺОРАУҘАР КҮБӘЙӘ

Ҡара ҡумтаның иҙәнендә торба кеүек бер нәмә ята. Батыр уны ҡулына алып улай-былай әйләндерҙе. Бинокль дә баһа! Малай уны күҙенә килтерҙе лә икенсе осон ҡалаға табан йүнәлтте. Бәй, был бит әллә ҡайҙа ятҡан нәмәне ус төбөндәге кеүек күрһәтә. Күҙ менән ҡараһаң — ҡала шундай алыҫта, өйҙәрҙе саҡ-саҡ төҫмөрләйһең. Биноклде күҙеңә килтереүең була, урамдағы кешеләрҙең йөҙө ап-асыҡ күренә, хатта таныштарың осраһа, танырға мөмкин. Өй эстәрендә кемдәрҙең йөрөүен дә төҫмөрләүе ҡыйын түгел.

Туҡта, Хәлиттәрҙең өйө ҡайһы тирәлә әле? Ата-әсәһе өйҙәме икән? Их, күренмәй, башҡа өйҙәр ышыҡлай икән! Ә үҙенең өйө, былтыр ғына әсәһе менән икәүләшеп йәшәгән өйө күренмәйме? Ана ултыра! Малай биноклен таныш тәҙрәләргә йүнәлтте.

Ҡапыл малай терт итеп ҡалды. Фатирҙа кемдәрҙер бар! Дөрөҫөрәге, бер ҡатын һәм Батырҙан ике-өс йәшкә кесерәк малай. Кемдәр улар? Батыр бит белә: уларҙың элекке фатирында хәҙер яңыраҡ ҡына өйләнешкән ир менән ҡатын йәшәй, йәштәр йәшәй...

Батыр ныҡлабыраҡ текәлде. Туҡта! Нимә был? Әллә һаташа башланымы? Теге ҡатын бит... Теге ҡатын... Булмаҫ! Быныҡ булыуы мөмкин түгел! Батыр йөрәгенең дарҫлап тибә башлауын тойҙо, биноклде үҙҙәренең тәҙрәһенә тура төбәй алмай ыҙаланы.

Ысын был, ысын! Нимә генә тимә, ә теге ҡатын Батырҙың әсәһенә оҡшаған! Күлдәге лә уныҡы! Ул күлдәкте Батыр йөҙәрләгән, меңәрләгән күлдәк араһынан танып ине! Әсәһенеке! Тик уның йөҙөн генә бынан асыҡ күреп булмай. Әсәһеме әллә?

Тик быныҡ булыуы мөмкин түгел! Әсәһе бит былтыр үлде. Батыр хәҙер тома етем. Ул Ур планетаһында булып ҡайтҡандан һуң инде бер йыл Өфөлә сәнғәт интернатында уҡый. Бынан бер нисә көн элек, каникул башланғас, Хәлиттәргә ҡунаҡҡа килде. Ә Батырҙарҙың фатирында инде бер йыл икенсе кешеләр — йәш ҡатын менән йәш ир йәшәй. Ә бына хәҙер ҡараһа, уларҙың элекке фатирында әсәһенә оҡшаған ҡатын менән Батырҙан саҡ ҡына кесерәк малай йөрөп ята. Кемдәр һуң улар?

Ул арала күҙ бәйләнә башланы. Шуны ғына көткән Батыр осоусы аппаратын ҡалаға табан йүнәлтте.

Хәлиттәрҙең өйөнән алыҫ түгел бер урында гараждар теҙелгән. Шуларҙың артында аулаҡ, ҡараңғы урын бар. Ҡара ҡумтаны шунда төшөрөп ултырта ла, йүгереп кенә инеп, Хәлиттәрҙән йылы кейемдәр алып сыға. Юғиһә бөтөнләй туңдырҙы. Бер юлы үҙҙәренең фатирына ла тәҙрә аша яҡыныраҡтан күҙ һала...

Күп тә үтмәне, Батыр ҡала өҫтөндә йөҙә ине. Ҡумтаның ҡара төҫтә булыуы һәйбәт, ҡараңғыла ул бер кемгә лә күренмәйҙер. Ана, Батыр былтыр ғына йәшәгән өй, фатир. Тәҙрәлә ут бар. Батыр түҙмәне, ҡулына бинокль алды...

Киләһе секундта Батыр тулҡынланыуынан биноклен саҡ-саҡ төшөрөп ебәрмәне. Сөнки ул шаҡ ҡатырлыҡ нәмә күрҙе: уларҙың элекке фатирында Батырҙың әсәһе йөрөп ята ине. Былтыр үлгән әсәһе! Яңылышыуы мөмкин түгел! Әсәһенең йөҙөндәге һәр һыҙатты ап-асыҡ хәтерләй бит ул. Быйыл ғына уның ике портретын яһап ятаҡтағы карауаты өҫтөнә элеп ҡуйҙы. Күлдәге лә таныш — әсәһенеке!

Әсәһе! Һис шикһеҙ әсәһе! Ә уның янында ниндәй малай күренә? Батырға ҡарағанда ике-өс йәшкә кесе... Таныш та кеүек... Ҡайҙалыр күргәйне шикелле. Кем икән?

Батыр ни эшләргә лә белмәне. Хәҙер үк өйҙәренә йүгереп кенә барып инер ине, ниҙер тота, икеләндерә. Әгәр бинокль аша күргәндәре дөрөҫ булмай сыҡһа?.. Ул саҡта... Әммә ошо күргәндәренең дөрөҫ булыуы һис мөмкин түгел бит! Батыр тамам аптырауға ҡалды...

Ул арала ҡара ҡумта Хәлиттәрҙең өйөнә яҡынлашҡан.

Батыр биноклен уларҙың тәҙрәһенә төбәне. Бында малайҙы тағы бер ғәжәп нәмә көтә ине.

Ер аҫты станцияһында ҡалған иптәше Хәлит өйөндә йөрөп ята! Батыр үҙ күҙҙәренә үҙе ышанырға теләмәне. Нисек инде? Хәлитте станция аҫтындағы шкаф эсенә йәшерҙе, үҙе ҡара ҡумта эсенә сумды ла, көтмәгәндә, ер өҫтөнә килеп сыҡты. Ошонан һуң Батыр Ер станцияһының ишеге тирәһендә өйөрөлдө, әммә Ер аҫтынан күтәрелеүсе булманы. Ә бына хәҙер биноклдән ҡараһа, Хәлит өйөндә ултыра!

Туҡта, туҡта! Батыр дуҫына ныҡлабыраҡ текәлде. Был бит Хәлит түгел! Юҡ, Хәлитлеген Хәлит ул! Тик бөгөн генә Батыр күргән Хәлит түгел. Ул кесерәйгән! Бөгөнгө Хәлиткә, станцияла ҡалған Хәлиткә ун өс йәш булһа, әле өйөндә йөрөгән Хәлиткә ун йәш тирәһе генә!

Был нимәне аңлата? Тимәк, бөгөн донъяла ике Хәлит бар? Береһенә — ун өс йәш, икенсеһенә — ун!

Батырҙың башына төрлө уйҙар килде. Станцияға төшөр алдынан тышта йәй ине, сыҡһа — көҙ. Иртәгәнсәк кенә Сибайҙың туғыҙ ҡатлы йорто бар, уның янында ғына больница ҡаласығы йәйелеп ята ине. Батыр ер өҫтөнә күтәрелгәс ҡараһа, больница ҡаласығы ла, туғыҙ ҡатлы йорт та юҡ. Хәлиттең ун йәшлек булып кесерәйеп китеүе! Әсәһенең терелеге! Туҡта! Әсәһенең янында уралған ун йәштәр тирәһендәге малай — Батырҙың үҙе түгелме? Эйе, үҙе бит! Шуға ла таныш кеүек күренгән икән. Әгәр малайҙың томлауҙары хаҡ булып сыҡһа...

Батыр үҙ уйҙарына ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәне...

## ӘМИЛӘ ЕРГӘ КИЛГӘН!

Өфөлә уҡып йөрөгән Батыр Әмиләне күрәм тип Сибайға килде лә бына ошондай ҡатмарлы хәлгә эләкте. Ә нисек белде һуң Батыр ҡыҙҙың Ергә килгәнлеген?

Май айының башында Батыр республика газетаһында осоусы билдәһеҙ объект хаҡында бер хәбәр уҡыны. Сибайҙа йәшәүсе бер ағайҙың сәйер күренешкә тарыуы хаҡында яҙылғайны унда.

Киҫкә табан был ағай быҙауын эҙләргә сыҡҡан. Ялан буйлап китеп барғанда, өҫтән тәрилкәгә оҡшаған нәмәнең төшөп килгәнен күреп ҡалған. Ағай кеше ҡуйы үләндәр араһына йәшенгән дә теге «тәрилкә»нең артынан күҙәтә башлаған.

Бер мәл баяғы «тәрилкә» ағайҙан егерме-утыҙ метр алыҫлыҡта ергә килеп төшкән. Күп тә үтмәй, тегенең эсенән ике кеше сыҡҡан. Береһе уның ир кеше икән.

Икенсеһе ун ике йәштәр тирәһендәге ҡыҙ ине, тип һөйләгән ағай. Ҡиәфәттәре лә, йөҙҙәре лә ер кешеләренекенә оҡшаған. «Уларҙы мин ап-асыҡ күрҙем, хатта йәнә бер тап итһәм, икеһен дә таныр инем», — тигән теге ағай.

Ары тағы ла ғәжәберәк хәл була. Көтмәгәндә «тәрилкә» лә, ир менән ҡыҙ ҙа ер аҫтына төшөп юҡ булалар. Ағай кеше, үҙ күҙҙәренә ышанмайынса, оҙаҡ ҡына йәшенгән урынында ята, тегеләр кире килеп сыҡмаҫмы тип көтә. Бер ниндәй ҙә тауыш ишетелмәгәс, урынынан тороп, яңы ғына тегеләр торған урынға бара. Әммә унда башҡа ерҙәге кеүек тип-тигеҙ ялан, үләндәр үҫеп ултыра икән. Статьяның аҙағында ошо хәл булған урын атап әйтелә. Ул юлдарҙы уҡығас, Батырҙы оло тулҡынланыу ялмап алды. Ул ағай осоусы «тәрилкә»не Ур планетаһының Ер аҫтындағы станцияһы урынлашҡан тирәлә осратҡан ине...

Ошо көндән алып Батыр тыныслығын юғалтты. Теге ҡыҙ — Әмилә бит! Бында бер ниндәй шик юҡ! Әмилә килгән! Батырҙы күрер өсөн килгән! Тик нисек итеп тапмаҡсы икән ул малайҙы! Батыр хәҙер Сибайҙа йәшәмәй, инде бер йыл Өфөлә сәнғәт интернатында рәссамлыҡҡа уҡый...

Эйе, Әмилә, уны, күпме генә эҙләһә лә, таба алмаҫ. Уның урынына Батыр үҙе Әмиләне таба! Тиҙҙән бит йәй етә, каникулдар башлана. Тик Әмилә, Батырҙы табыуына өмөтөн өҙөп, кире Урға китеп бармаҫмы? Юҡ, булмаҫ! Шунын сама ара үтеп килгән икән, Батырҙы күрмәйенсә китмәҫ. Батырға ғына тик ятырға ярамай, тиҙерәк Сибайға барырға, ҡыҙҙы эҙләргә тотонорға кәрәк!

Тәүҙә Батыр редакцияға барып, Сибайҙа йәшәгән теге ағайҙың адресын белеште. Хәлиткә, каникулдар башланыу менән, уларға ҡунаҡҡа барасағын белдереп хат яҙҙы...

Ниһайәт, уҡыуҙар бөттө. Йәйҙең тәүге көнөндә үк Батыр Сибайҙа ине инде. Ул үҙе менән Әмиләнең ике портретын алып килде.

Хәлит, әлбиттә, Әмиләне хәтерләмәй ине. Нисек хәтерләһен? Уны бит теге саҡта махсус магнит тулҡыны аша үткәрҙеләр, һәм ул Ер аҫты станцияһында күргәндәренең барыһын да онотто.

Әмиләне яңғыҙ эҙләүе еңел түгел. Шуға ла Батыр дуҫына серен асып һалды. Үҙҙәренең нисек итеп Ер аҫты станцияһына эләгеүен, ундағы мажараларын һөйләне, ике ай Ур планетаһында булып ҡайтыуын да йәшермәне.

Хәлит шаҡ ҡатты, төрлө һорауҙар бирергә тотондо, ҡайһы бер урындарҙы ҡат-ҡат һөйләтте, туҡтауһыҙ Әмиләнең портреттарын ҡараны, әммә барыбер бер ни ҙә хәтерләй алманы. Шуға ла Батыр һөйләгәндәргә бөтөнләй ышанырға теләмәне. Фәҡәт Батырҙың ике ай ҡайҙалыр

юғалып йөрөүе генә Хәлитте уйға һала ине. Әгәр, ысынлап та, Ерҙән ситкә китмәһә, бер туғаны ла булмаған үкһеҙ етем Батыр ҡара көҙгә тиклем ҡайҙа йөрөгән?

Хәлит ышанманы дуҫына, әммә ярҙамлашырға әҙер икәнлеген әйтте.

## ОСОУСЫ «ТӘРИЛКӘ» КҮРГӘН АҒАЙ

Хәлит менән Батыр тәүҙә теге ағайға киттеләр. Үҙҙәре менән Әмиләнең ике портретын алдылар.

Ағай кеше гәзиткә яҙылғандан артығын һөйләй алманы.

— Һеҙ ул ҡыҙҙың йөҙөн хәтерләйһегеҙме? — тип һораны Батыр.

— Ныҡ хәтерләйем. Кисә генә күргән кеүек күҙ алдымда тора.

— Әгәр хәҙер күрһәгеҙ йәки фотоһын ҡараһағыҙ, таныр инегеҙме?

— Танымай ни...

Батыр үҙе эшләгән портреттарҙы сығарҙы. Уларҙы күргәс, ағай ултырған урынында ырғып китте:

— Шул! Шул ҡыҙ! Үҙе! Ҡайҙан алдығыҙ?

— Ағай, яҡшылап ҡарағыҙ, — тине Батыр тыныс булырға тырышып. — Яңылышмайһығыҙмы?

— Нисек яңылышайым ти? Бөгөнгө кеүек иҫемдә! Тап үҙе! — Ағай тулҡынланыуынан осоусы «тәрилкә»нең нисек ергә килеп төшөүен, ҡайһылайтып унан ир менән кескәй ҡыҙҙың килеп сығыуын киренән тасуирлап һөйләргә кереште.

Батыр менән Хәлит барыһын да аңланы, шуға улар хушлашып китергә ашыҡты.

— Инде ышандыңмы? — тип һораны Батыр, урамға сыҡҡас.

— Әллә. — Хәлит яурындарын һелкетте. — Ул «тәрилкә»ләр ысын түгел, тиҙәр бит.

— Күрмәгән кешеләр шулай ти.

— Минең дә күргәнем юҡ.

— Һинме? Һин бит!.. — Батыр уға икәүләшеп Ер аҫты станцияһына эләгеүҙәрен йәнә һөйләй башларға итте лә туҡтап ҡалды. Инде күпме тылҡыны бит! Һаман ышанмай! Шул тиклем дә кире кеше булыр икән!..

Эште Ер аҫты станцияһының ишеген табыуҙан башларға булдылар. Әмилә унда. Быға Батырҙың шиге юҡ. Тимәк, хәҙер нисек тә станцияға эләгергә кәрәк.

Батыр былтыр Ер аҫты станцияһының етәксеһенә биргән анты хаҡында уйламаҫҡа тырышты.

«Бер кемгә лә бер ҡасан да Ер аҫтындағы станция хаҡында, Ур планетаһы тураһында бер һүҙ ҙә һөйләмәм. Станцияны эҙләп йөрөмәм», — тип һүҙ биргәйне Батыр. Әммә эштәр ана нисек боролоп китте. Әмилә килгән бит Ергә! Батырҙы күрер өсөн килгән! Шундай саҡта нисек итеп былтыр биргән антыңа тоғро булып ятырһың? Батыр бит станцияға зыян килтермәйәсәк. Һүҙ биргән мәлдә малай Әмилә хаҡында бөтөнләй уйламаған. Бөгөн шул антына тоғро ҡалһа, ҡыҙҙы таба алмаясаҡ...

Эйе, Батыр антын боҙҙо — станция хаҡында Хәлиткә һөйләне, хәҙер уның эсенә төшөргә йыйынып йөрөй. Әммә быны Хәлит менән Батырҙан башҡа бер кем дә белмәйәсәк...

Малайҙар, балыҡҡа барабыҙ тигән һылтау менән, станцияны эҙләргә юлға сыҡты. Ике көн күҙәтәсәк улар. Шул арала станциянан кем дә булһа сығырға тейеш, йә булмаһа кемдер ер аҫтына төшөр. Малайҙар шулай итеп станцияның ишеген беләсәк. Шунан инде ер аҫтына төшөргә маташып ҡарарҙар...

## КҮҘӘТЕҮ

Хәлит менән Батыр Ер аҫтындағы станцияны табыу уйы менән китеп бара.

— Юҡ, ышанмайым мин быға, — тип ҡуйҙы Хәлит йәнә.

— Тағы башланыңмы? — Батырҙың асыуы килде.

— Башламайым. Ур планетаһына ышандым тиерлек. Бында уларҙың станцияһы ла булһын. Ер аҫтында. Мин үҙебеҙҙең шул станцияға эләгә алыуыбыҙға ышанмайым.

— Мин дә ышанмайым, — тип уфтанды Батыр. — Улайһа, нимә эшләйек? Әйт.

— Белмәйем. — Хәлит көрһөндө.

— Ана шулай шул.

Көн эҫе. Июнь ҡояшы арыу ғына ҡыҙҙыра. Малайҙар ҡыҙыныу өсөн майкаларын сисеп, ҡулдарына тотоп алдылар.

— Уйлаһаң, ғәжәп бит был, — тип ҡуйҙы Хәлит бара торғас. — Ерҙән башҡа урында кеше юҡ, тип килделәр ошоғаса. Ә баҡһаң, танау төбөндә... Станция! Нисек һиҙҙермәй төҙөгәндәр тиһең, ә?! Шулай ҙа унда төшөп сыҡҡанда шәп булыр ине лә... Беҙҙең хаҡта гәзиткә яҙып ебәрһәләр... Малайҙарҙың күҙе дүрт булыр ине.

— Һин миңә һүҙ биргәнеңде онOTTOңмо?

— Әй, эйе бит әле! — Хәлит ҡулын һелтәп ҡуйҙы. — Ә ниңә ҡурҡаһың әле һин? Һөйләһәк ни була? Ана, башҡалар һөйләй, гәзиткә яҙа. Беҙ кемдән кәм?

— Башҡалар күргәнен яҙа.

— Беҙ ҙә...

— Беҙ күреү генә түгел, беләсәкбеҙ. Ярай, етер был хаҡта!

— Етер икән, етер, — тине Хәлит күңелһеҙ генә.

— Туҡта! — Батыр иптәшенең беләгенән тотто. — Ошо тирәлә булырға тейеш.

— Һуң, бында ҡола ялан бит.

— Ә һин, ҙур ҡапҡа торорға тейеш, тип уйлағайныңмы?

— Уйламаным, шулай ҙа...

— Әйҙә, бындараҡ.

Малайҙар үләндәрҙең ҡуйыраҡ урынына йәшенде лә тынып ҡалды.

— Әгәр бер кем дә сыҡмаһа, ни эшләйбеҙ? — тип һораны бер аҙҙан Хәлит.

— Сығасаҡ.

— Сыҡмаһа, тием бит мин.

— Улайһа, кемдер асҡа төшәсәк.

— Төшмәһә?

— Ул саҡтамы?.. Ул саҡта берәйһе сыҡҡансы йәки төшкәнсе көтәбеҙ.

— Улай икән. — Хәлит көрһөнөп ҡуйҙы.

— Әгәр арый башлаһаң, ҡайтып килерһең.

— Ниңә мин генә? Алмашлап ҡайтып килербеҙ... Көн әкренләп кискә ауышты, ҡояш Ирәндек тауҙарына табан тәгәрләне. Малайҙар ике тапҡыр ашап алдылар, һыуыған сәйҙәрен эстеләр. Ошо арала улар иҫтәренә төшкән бар ҡыҙыҡ ваҡиғаларҙы бер-береһенә һөйләп бөттөләр, тик ер аҫтындағы станцияға төшөүсе лә, унан сығыусы ла булманы.

Бер мәл ҡояш байыны, бер аҙ һалҡынайтып ебәрҙе. Малайҙар үҙҙәре менән йылы кейем алмағандарына үкенде. Ярай әле, одеял алырға баштары еткән. Шуны ябындылар.

Тирә-йүн ҡараңғыға күмелгәс, төрлө ҡурҡыныс ваҡиғалар иҫкә төшә башланы. Малайҙар шуларҙы һөйләп, бер-береһен ҡурҡытып алды. Алыҫта матур уттары менән емелдәүсе Сибай менән дә һоҡландылар. Батырҙың ҙурайғас — рәссам, Хәлиттең летчик буласағы ла беленде. Инде малайҙарҙың йоҡоһо килә башланы.

Малайҙар алмашлап йоҡларға булды. Ике сәғәт берәүһе күҙәтә лә, икенсеһен уятып, йоҡларға ята.

Тәүҙә Батыр күҙәтте. Шунан ул ике сәғәттәй йоҡлап алды. Хәлит Батырҙы дүрттәр тирәһендә уятты...

## ОСОУСЫ «ТӘРИЛКӘ»

Батыр тәүҙә күктәге йондоҙҙарҙы күҙәтеп ятты. Бынан Ур планетаһының ҡояшы күренәме икән? Шул хаҡта уй-

ланы. Ғәмүмән, ҡайһы тирәлә икән ул планета? Әмиләне тапҡас, һорарға кәрәк.

Ҡапыл күк йөҙөндәге бер йондоҙ ҙурая башлағандай тойолдо. Батыр урынынан тороп ултырҙы. Ысынлап та анау йондоҙ ҙурайғандан-ҙурая бара. Тимәк, был — йә ракета, йә булмаһа — осоусы «тәрилкә»!

Тағы бер нисә секунд үтеүгә, теге «тәрилкә»нең тура Батырҙар йәшенгән ергә төшөп килеүе асыҡланды. Быны аңлағас, малай иптәшен тәрткесләргә тотондо:

— Хәлит! Хәлит, тор!

— Кит әле! — Хәлит икенсе яғына әйләнеп ятты.

— Тор, тим! Осоусы «тәрилкә»!

— Кәрәкмәй тәрилкәң, ашағым килмәй.

— Ашау өсөн түгел, осоусы «тәрилкә»! — Батыр Хәлитте бар көсөнә һелкетте. — Хәлит!

Ниһайәт Хәлит тороп ултырҙы, күҙҙәрен ыуғыланы:

— Ни булды?

— Ана, ҡара! — Хәлиттең күҙе шар булды:

— Нимә ул?

— Осоусы «тәрилкә»! Хәҙер ер аҫтындағы станцияға төшәсәк!

— Кит әле! — Хәлит тора башланы.

— Ят!

Малайҙар бер килке ергә яҡынайыусы «тәрилкә»гә өндәшмәй генә ҡарап ятты.

— Мин осоусы «тәрилкә»не тәүгә күрәм, — тип шыбырланы Хәлит. — Матур, әйе бит!

Батыр үҙе лә зәңгәрһыу төҫтәге «тәрилкә»гә һоҡланып ҡарап ята. Тегенең уртаһында — яп-яҡты ут. Унан нәҙек булып төрлө яҡҡа һигеҙ нур һуҙыла. Әйтерһең, күктән ергә ҙур бер үрмәксе төшөп килә инде! Үҙенең бер ниндәй тауышы юҡлығын әйт әле! Ғәжәп!

— Хәҙер нимә эшләйбеҙ? — тип һораны Хәлит.

Батыр үҙе лә ошо хаҡта уйлап ята. Әгәр тегеләр ер аҫтына төшкәндә, паролде ишетә алһалар икән! Әммә улар, моғайын, паролде аппарат эсенән тура ер аҫтына ебәрәләрҙер. Тимәк, малайҙар бер ни ҙә ишетмәйәсәк. Ни эшләргә уларға? Ҡапыл Батырҙың башына бер уй килде.

— Әйҙә, минең арттан!

— Ҡайҙа?

— «Тәрилкә» станцияның ишегенә төшәсәк. Беҙгә уның аҫтына инеп йәшенергә кәрәк.

— Нимә? Иҙеп ҡуйһа! Күрмәйһеңме — уның тояғы ла, тәгәрмәсе лә юҡ!

— Булмаһа, эргәһенә йәшенәбеҙ. Әйҙә!

Батыр Хәлитте ары өгөтләп торманы, тоҫмаллап «тәрилкә» төшөр ергә табан шыуышты.

— Ҡайҙа ашығаһың шулай? — Арттан Хәлиттең ҡәнәғәтһеҙ тауышы ишетелде.

— Тиҙерәк, юғиһә өлгөрмәйбеҙ!

Ысынлап та, «тәрилкә» ергә ҙур тиҙлек менән яҡынлаша. Ә уның төшөр урынына тиклем утыҙ-ҡырҡ метр тирәһе барҙыр. Нисек тә өлгөрөргә кәрәк! Тороп йүгерерҙәр ине, күреп ҡалыуҙары бар. Өлгөрмәҫтәрме икән ни? «Тәрилкә» бит бигерәк тиҙ елдерә!

Малайҙарҙың бәхетенә, «тәрилкә» тиҙлеген кәметә төштө һәм ергә яй ғына яҡынлаша башланы. Бар көстәрен һалып үлән араһынан шыуышҡан Батыр менән Хәлиткә шул етә ҡалды, улар «тәрилкә» янына килеп еттеләр. Баҡһаң, ул һис тә тәрилкәгә оҡшамаған, ә бишме, алтымы мөйөшлө призманы хәтерләтә. Стеналарынан һирпелеп торған зәңгәрһыу яҡтылыҡ уны «тәрилкә»гә оҡшатып күрһәтә икән. Ҡабырғаларында самолеттыҡы кеүек түңәрәк тәҙрәләре лә бар.

Ергә төшөргә бер метр тирәһе ҡалғас, аппарат аҫылынды ла туҡтаны. Батыр менән Хәлит йәнәшәлә генә ята, икеһенең дә йөрәктәре ҡурҡыштан дөп-дөп тибә. Әгәр яңғыҙ булһа, береһе лә ошондай хәүефкә түҙмәҫ әллә ҡасан ҡасып китер ине, моғайын.

Көтмәгәндә, эргәлә генә ер аҫҡа төшә башланы. Малайҙар ҡаушап ҡалды.

Нимә был? Станцияның ишегеме? Ни эшләргә? Көтөргәме? Әллә... Ҡыҫҡа секундтар эсендә Батырҙың башында тиҫтәләгән һорау ҡайнаны. Ашығыс рәүештә хәл итергә кәрәк. Юғиһә...

Батыр күп уйлап торманы, түбәнәйә башлаған ер өҫтөнә ырғыны:

— Әйҙә!

Ҡурҡыуҙан күҙҙәре ҙурайған Хәлит, ни эшләргә белмәйенсә, улай-былай итте. Бәлки ул өҫтә тороп та ҡалыр ине, әммә киләһе секундта Батыр уның беләгенән эләктереп, аҫҡа тартып төшөрҙө.

Ул арала эргәләге ер, яр кеүек күтәрелеп, күҙҙән юғалды. Ә малайҙар ултырған ер киҫәге байтаҡ ҡына аҫҡа төшкәс, ситкә шылып эргәләге түбә аҫтына барып инде. Шунан өҫтән «тәрилкә» килеп төштө лә тауышһыҙ-ниһеҙ оҙон коридор буйлап шыуып китте.

Бына малайҙар ултырған ер киҫәге йәнә хәрәкәткә килде. Уның кире өҫкә күтәрелеп ишекте ҡаплаясағын аңлаған Батыр тиҙ генә иҙәнгә ырғып төшә һалды. Хәлит тә уға эйәрҙе.

Күп тә үтмәне, станцияның ишеге күтәрелеп урынына ҡапланды.

— Ҡара әле, — тип шыбырланы иҫенә килә алмай торған Хәлит. — Йөйө лә күренмәй, исмаһам!

— Тс-с! — Батыр тирә-яғына ҡаранды.

## ЕР АҪТЫНДА

— Инеүен индек тә ул бында... — Хәлиттең тауышы бойоҡ ҡына сыҡты.

— Әкрен! — тине Батыр. — Беҙгә хәҙер ҡайҙа ла булһа йәшенергә кәрәк.

Батыр әйтеп бөтөргә өлгөрмәне, һөйләшкән тауыштар ишетелде. Малайҙар, ауға эләккән йәнлек кеүек, улай-былай ташланды. Ни эшләргә? Ҡайҙа йәшенергә? Күп уйлап торорға ваҡыт юҡ, эргәләге тумбалар артына сумдылар.

Күп тә үтмәне, коридор осонда ике кеше күренде. Уларҙың кейемдәре һис тә ер кешеләренекенә оҡшамаған, өҫтәрендә ялтырап торған комбинезон, аяҡ кейемдәре роликлы, шуға улар бик шәп атлап йөрөй.

Тегеләр юғалғас, малайҙар урындарынан сығып план ҡора башланы.

— Берәй ергә йәшенәбеҙ ҙә күҙәтәбеҙ, — тине Батыр. — Ҡасан да булһа Әмилә килеп сығыр әле.

— Ә ҡайҙа йәшенәбеҙ?

— Эҙләйек.

Малайҙар һаҡ ҡына баҫып коридор буйлап атланы. Әммә тәүге мөйөшкә етеү менән, күтмәгәндә, күҙҙәре урынына лампочкалары балҡып торған түңәрәк башлы тимер кешегә тап булдылар. Был — ер аҫты станцияһында эшләүсе робот ине. Малайҙар ҡото осоп кире яҡҡа ташланды.

Артта роботтың үҙ алдына һөйләнгәне ишетелде. Бәлки, ул кемгәлер станцияла сит кешеләр барлығын хәбәр иткәндер? Бер мәл робот Батыр менән Хәлиттең артынан төштө.

Коридорҙар оҙон-оҙон һәм күп тармаҡлы. Малайҙар мөйөшкә килеп етәләр ҙә, ялтана-ялтана боролоп, икенсе яҡҡа сабалар. Бына бер коридорҙың осонда шкаф кеүек нәмә тора, эргәһендә ниндәйҙер ҡара ҡумта күренә. Малайҙар шуларға еткәс, арттарына әйләнеп ҡараны. Робот күренмәй!

— Ин тиҙерәк! — Батыр шкафҡа күрһәтте.

Хәлит саҡ ҡына икеләнде лә тегенең эсенә сумды. Батыр ҙа уның янына инергә иткәйне, һыйманы. Ул тиҙ генә сыҡты ла шкафтың ишеген ябып ҡуйҙы. Ә үҙенә ҡайҙа йәшенергә?

Ул арала коридор осонда робот күренде. Ул Батырға табан йән-фарман йүгерә! Тотолоуы ошомо икән?

Батыр тирә-яғына күҙ ташланы. Эргәлә теге ҡара ҡумтанан башҡа бер ни юҡ. Ишеге асыҡ. Малай тиҙ генә шуның эсенә инде. Ишеген ябырға иткәйне, унһы, Батырҙы көтөп тормайынса, шарт итеп ҡапланып та ҡуйҙы.

Киләһе секундта ҡара ҡумта һелкенә, геүелдәй башланы

һәм, ярты минут та үтмәне, Батырҙы кире ер өҫтөнә килтереп сығарҙы...

Ә Хәлит теге шкаф эсендә ултырып ҡалды. Ни булды уның менән? Тотолдомы, әллә һаман да Батырҙың килеп сыҡҡанын көтөп ултырамы?

Бына ошоларҙы хәтерләне Батыр Сибай өҫтөндә осоп йөрөгән саҡта.

## ХӘЛИТ ӘМИЛӘНЕ ТАБА

Хәлит шкаф эсендә оҙаҡ ҡына торҙо. Ишектәге ярыҡтан ул Батырҙың ҡара ҡумта эсенә йәшенгәнен дә, эргәгә роботтың килеүен дә күрҙе. Тегенең малайҙарҙы тота алмағанына асыуҙан, күрәһең, ҡысҡырып үҙ алдына һөйләнеүен ишетте.

Шунан ҡара ҡумта нисектер ҡапыл ғына юҡҡа сыҡты. Ҡайҙа булды ул? Быны Хәлит аңламаны. Бер аҙҙан робот та кире яҡҡа китеп юғалды.

Хәлит тауыш-тын сығармай тора бирҙе. Кәрәкһә, Батыр үҙе килеп асыр ишекте, әлегә килергә ярамайҙыр. Шкаф бик тар булғанға малайҙың аяғы ойоп китте, ниндәйҙер осло нәмәгә терәлгән арҡаһы ауырта башланы. Ҡыбырлар ине, ҡурҡа — шкаф асылып китер ҙә уны тотоп алырҙар...

Тағы күпмелер ваҡыт үтте. Хәлиттең янынан сәйер генә кейенгән кешеләр ҙә, бер-береһенә ғәйәт ныҡ оҡшаған роботтар ҙа бер-нисә тапҡыр үтеп китте. Тик Батыр ғына күренмәне. Ҡайҙа булды ул? Һаман да шул ҡара ҡумта эсендә ултырамы? Әллә берәй хәл булғанмы? Бәлки тотолғандыр. Хәлит хәүефкә ҡалды. Батыр тотолһа, Хәлит ни эшләргә тейеш? Ғүмер буйы ошонда тора алмай бит...

Ана, тағы кемдер үтте. Туҡта! Бәләкәй генә кәүҙәле бит. Батыр түгелме? Хәлит шкафтың ишеген аса бирҙе. Ҡыҙ ҙа баһа! Ул нимә эшләп йөрөй бында? Әллә теге Әмилә тигәне ошомо? Туҡтатырғамы? Әгәр Әмилә булмаһа? Ул бит Хәлитте тотторасаҡ. Ни эшләргә? Ҡыҙ секунд һайын алыҫлаша, хәҙер ул күҙҙән юғаласаҡ! Хәл итергә кәрәк! Юғиһә... Ни булһа, шул булыр!

— Әмилә! — тип әкрен генә өндәште Хәлит шкафтың ишеген киңерәк асып.

Ҡыҙ ҡырҡа боролдо, малайға аптырап ҡарап торҙо, шунан йүгереп уның янына килде.

— Хәлит! Был һинме?

— Мин, — тине аптыраған Хәлит шкафтан сыға-сыға.

— Нисек бында эләктең? Бер үҙеңме?

Хәлит түкмәй-сәсмәй үҙҙәренең нисек итеп ер аҫтына төшөүҙәрен һөйләп бирҙе. Шунан:

— Ә һин минең исемде ҡайҙан беләһең? — тип һораны.

— Беҙ бит әллә нисә тапҡыр осраштыҡ, — тине Әминә. — Батыр һөйләмәнеме ни?

— Һөйләне лә ул. Тик мин ышанмағайным.

— Ә Батыр ҡайҙа? — Әминә тирә-яғына ҡараны.

— Юғалды.

— Нисек юғалды? — Ҡыҙҙы хәүеф ялмап алды.

Ә инде Хәлит Батырҙың нисек юғалғанын һөйләп биргәс, Әминә тамам ҡайғыға ҡалды... Әле улар икенсе ҡара ҡумта бикләнгән бүлмәнең ишеге төбөндә туҡталып ҡалдылар. Нисек унда инергә? Ҡайһылай итеп ҡара ҡумтаға ултырып Батырҙы эҙләп сығырға?

Әммә бында оҙаҡ торорға ярамай. Берәйһе, килеп сығып, Хәлитте күрһә...

— Әйҙә, минең бүлмәгә, — тине ҡыҙ.

Оҙон коридор буйлап атланылар. Бер-ике урында Хәлиткә, эргәләге тумбалар артына йәшенеп, ҡаршы килгән робот менән кешеләрҙе үткәреп ебәрергә тура килде.

Ниһайәт, улар Әминәнең бүлмәһендә. Бында Хәлиткә бер ниндәй ҙә ҡурҡыныс янамай. Малай ер аҫтына төшкәндән һуң тәүге тапҡыр еңел һулап ҡуйҙы.

Бүлмә бәләкәй генә. Бында телевизор кеүек нәмәнән башҡа бер ни ҙә юҡ. Ҡыҙ теге телевизорҙың кнопкаларына баҫыу менән стенала ике ултырғыс хасил булды.

— Ултыр, — тине ҡыҙ.

Тәүҙә Хәлит ултырғысты, ныҡмы тигәндәй тотҡолап ҡараны, шунан ҡыҙыҡһынып тирә-яғына күҙ һалды:

— Һин ошонда йәшәйһеңме?

— Эйе.

— Ә карауатың ҡайҙа?

Ҡыҙ йәнә бер кнопкаға баҫты. Шунда уҡ стенанан сәңгелдәккә оҡшаған кәштә килеп сыҡты. Ҡыҙ икенсе кнопкаға баҫҡайны, теге юғалды.

Малай баш сайҡап ҡуйҙы:

— Ҡыҙыҡ!

— Ярай, Хәлит, — тине Әминә. — Беҙҙең яйлап ултырырға ваҡытыбыҙ юҡ. Батыр ваҡыт машинаһына ултырып киткән. Беҙгә уны тиҙ генә табып кире ҡайтарырға кәрәк.

— Ниндәй ваҡыт машинаһына?

— Батыр бөгөнгө көндә түгел, ә нисәләр йыл алға йәки артҡа киткән.

— Нисек алға йәки артҡа? — Хәлит һаман да бер ни аңламаны.

— Бөгөн нисәнсе йыл?

— 1990 йыл, июнь айы.

— Ә Батыр ошо минутта йә 1988 йылда, йә 1987 йылда, ә бәлки, киреһенсә, 1993 йылдалыр.

Хәлит урынынан ырғып торҙо:

— Кит әле! Шулай буламы?

— Була. Теге ҡара ҡумтаның бар хикмәте шунда ла инде. Ул машинаны Ур планетаһында яңыраҡ ҡына уйлап сығарҙылар. Һынау үткәрергә беҙ бында ла алып килгәйнек.

— Улайһа, Батыр бит үткән йылға ҡайтып әсәһен ҡотҡара ала!

— Ярамай! Әгәр ваҡыт машинаһы ярҙамында икенсе заман кешеләренең яҙмышына ҡыҫылһаң... Был оло ҡыйралыш килтерә!

— Нисек?

— Бөтә цивилизацияның юҡҡа сығыуы бар.

— Их! — Хәлиттең ҡайғыһы йөҙөнә сыҡты. — Шулай ҙа үткән ваҡытты күреүе!.. Бушҡа мин дә ул ҡара ҡумтаға йәшенмәгәнмен! Хәҙер китер инем дә һуғыш йылдарына! Автомат менән!.. Тд-тд-тд!

— Ул машинаның көсө өс йыл алға, өс йыл артҡа барыу өсөн генә етә.

— Фи! Шулай ғынамы? Юҡ, барыбер ҡыҙыҡ! Ике йыл артҡа ҡайтып, класҡа барып инһәм... Нимә — унда мин үҙемде осратырмынмы? Үҙемдең ун йәшлек сағымды?

— Әлбиттә.

— Ух, шәп, ә?! — Хәлит бүлмә буйлап улай-былай йөрөп алды.

— Хәлит! — тине Әмилә. — Беҙгә Батырҙы ҡотҡарыу хаҡында уйларға кәрәк.

— Ниңә ҡотҡарырға кәрәк тиһең әле? — Хәлит ҡыҙға аптырап ҡараны. — Хәҙер унан да бәхетле кеше юҡ! Үткән заманда йөрөй! Йөрөр-йөрөр ҙә, ялҡһа, ҡайтыр әле.

— Бөтә бәлә шунда: Батыр ҡара ҡумтаның ваҡыт машинаһы икәнлеген белмәй. Уның хәҙер, икенсе ваҡытҡа барып эләккәс, әллә нәмәләр эшләп ташлауы бар.

Батыр ул заман кешеләре менән аралашырға тейеш түгел!

— Борсолма, Әмилә! — Хәлит ғәмһеҙ ҡыланды. — Батыр иҫәр түгел. Вот бит, ә! Батыр ошо минутта ваҡыт буйлап сәйәхәт итә! Ә мин...

— Сәйәхәт итә алмай шул.

— Ниңә?

— Батыр машинаны ваҡыт буйлап йөрөтә белмәй. Осраҡлы рәүештә ниндәйҙер ваҡытҡа эләккән дә шунда йәшәп ята. Иң ҡурҡынысы шунда. Мин быны бая беҙҙең эргәлә һөйләшеп торған ике кешенән ишеттем. Машиналағы батареяның көсө тик бер тәүлеккә етә. Әгәр ошо

ваҡыт эсендә беҙ Батырҙы табып ҡайтара алмаһаҡ... — Әмилә тотлоҡто.

— Ни була? — Хәлит ҡурҡҡан күҙҙәрен ҡыҙға төбәне.

— Әйттем бит инде. Батыр юғала. Ул был ваҡытҡа ла ҡайта алмай, теге ваҡытта ла оҙаҡ йәшәй алмай.

— Ә ниңә теге ваҡытта йәшәй алмай?

— Икенсе ваҡытҡа эләккән кешенең биоэнергияһы ул ваҡытта йәшәү өсөн фәҡәт ике-өс көнгә етә. Шунан ул үлә...

Хәлит тулҡынланып йөрөргә кереште.

— Улайһа, әйт станцияның етәксеһенә! Эҙләһендәр, тапһындар Батырҙы!

— Тәүҙә үҙебеҙ эҙләп ҡарайыҡ. Әгәр беҙ тапмаһаҡ, улар нисек табыр? Икенсенән, һинең менән осрашҡанымды белһәләр... бөгөн үк Урға оҙатасаҡтар! — Әмиләнең тауышы ҡалтырап китте. — Ул саҡта Батырҙы күрергә өлгөрмәйем. Ә мин уны күреү өсөн генә... Юҡ, Хәлит! Нисек тә үҙебеҙгә ҡотҡарырға кәрәк Батырҙы!

## БАТЫР — ҮТКӘН ЗАМАНДА

Быны аңлағас, Батыр шаҡ ҡатты.

Ул, баҡһаң, бөгөнгө Сибайға түгел, бынан ике-өс йыл элекке Сибайға ҡайтҡан! Йәйгә түгел, көҙгә эләккән. Тимәк, был ҡара ҡумта — ваҡыт буйлап сәйәхәт итеүсе машина! Шуға ла уның ишеген астырыусы паролдәр ҙә сәйер генә икән: «Ваҡытты еңеү», «Ваҡытҡа һөжүм».

Батыр ҡаушап ҡалды. Хәҙер ни эшләргә? Былай булғас, Хәлиттәргә инеп, кейем һорау тураһында уйларға ла ярамай. Үҙҙәренә лә ҡайта алмай ул. Беренсенән, әсәһе уның Батыр икәнлегенә ышанмаясаҡ. Нисек ышанһын, өйҙә ун йәшлек Батыры ултырғас? Икенсенән, шул шикләндерә: әгәр бер цивилизация кешеләре икенсе цивилизация вәкилдәренең тормошона ҡыҫылырға тейеш түгел икән, киләсәктән килгәндәрҙең үткән заманда йәшәүселәр менән аралашырға хаҡы бармы? Был, бәлки, алдан уйланмаған ҡот осҡос бороломштарға килтереп сығарыр! Ошоларҙы уйлағас, Батыр хатта үҙенең өшөп ҡалтырауын онотто. Юҡ, уға бында бер ни ҙә эшләргә ярамайҙыр. Тик нисек итеп кире үҙ ваҡытына ҡайтырға? Әгәр ҡайта алмаһа? Ғүмергә ошо заманда ҡалырмы?

Батыр ашығып машинаның пультындағы яҙыуҙарҙы уҡырға кереште. Юҡ шул, малай Ур телен тулыһынса белмәй, бындағы яҙыуҙарҙың күбеһе аңлашылмай!..

Малайҙы ҡурҡыу солғап алды. Бәй, ул, ғүмерҙә лә ҡото-

ла алмаçлыҡ тоҙаҡҡа эләккән! Ни эшләргә? Нисек итеп был хәлдән ҡотолоу юлын табырға?

Был ваҡытта ҡара ҡумта, ҡаланан сығып, ялан өçтөнән осоп бара ине. Батыр, иçенә килеп, машинаны кире Сибайға табан борҙо. Ул ни эшләргә лә белмәй, фәҡәт ҡаланан, кешеләрҙән алыç китмәçкә генә тырыша. Уларға яҡын булғанда ныҡ өшөмәй кеүек, күңеле лә бер аҙ тынысланған һымаҡ.

Батыр йәнә үҙҙәренең өйөнә яҡынлашты. Әсәһе менән Батыр кухняла ашап ултыра!.. Ошо минутта малайҙың тамағына бер төйөр килеп тығылды. Ҡапыл тегеләр йәл булып китте бөгөнгө Батырға. Һөйләшеп ултыралар, нимәгәлер көләләр... Үҙҙәрен иртәгә, бер йылдан ни көткәнен белмәйҙәр. Күпмелер ваҡыт үтер, шунан әсәһе вафат булыр, ә Батыр яңғыҙ — етем ҡалып, михнәт күрә-күрә, ун өс йәше тулыуға йәнә ошо ваҡытҡа әйләнеп ҡайтыр һәм үҙ ҡалаһының өçтөндә, ни эшләргә белмәйенсә, осоп йөрөр...

Бәлки, хәҙер үк инеп уларҙы ни көткәнен һөйләп бирергәлер? Юҡ, ярамай! Нимәлер тота Батырҙы. Нимә? Батыр быны ҡапыл ғына аңлай ҙа алмай... Бәлки тойомлауылыр... Әгәр, хәҙер инеп, әсәһе менән кескәй Батырҙы иçкәртһә, иң алда ул үҙе киләсәктә Урға бармаясаҡ, интернатҡа, уҡырға китмәйәсәк, тимәк, ошолай итеп осоп йөрөмәйәсәк — ул юҡҡа сығасаҡ! Ни булһа ла был ҡатмарлы, аңлайышһыҙ... Ярамай.

Әкренләп Батыр тыныслана төштө һәм үҙенең өшөүҙән ҡалтырана башлауына иғтибар итте. Ниндәй һыуыҡ! Ни эшләргә? Әгәр ошолай тағы бер-ике сәғәт йөрөһә, ул туңып үлә! Туҡта! Үҙҙәренең балконында кейем эленеп тора түгелме? Эйе, куртка, трико күренә! Был бит уның кейемдәре! Хәйер, унығы түгел, теге ун йәшлек Батырҙыҡы. Булһын! Алып торғанда... Ваҡытлыса ғына. Сит кешенекенә ҡул һуҙырға хаҡы юҡ, әммә бына үҙенең элекке кейемдәрен бер-ике көнгә алып торорға ярайҙыр.

Үҙ заманына ҡайтырға форсат тыуғас та, кире бирер. Тик ун йәшлек Батырҙың кейемдәре ун өс йәшлек Батырға бәләкәйҙәрҙер инде. Әммә башҡа сара юҡ.

Батыр тәүәккәлләне. Хәҙер ҡара ҡумтаны гараждар артына, ҡараңғы урынға, төшөрә лә... Унда бер кем дә күрмәç. Шунан йүгереп бара ла... Батырҙарҙың фатиры икенсе ҡатта. Балконға нисек күтәрелергә малай яҡшы белә.

## ИКЕНСЕ ҠАРА ҠУМТА

— Ул машина янына станция етәксеһенән башҡа кем инә ала? — тип һораны Хәлит.

— Бер кем дә инә алмай, — тине Әмилә. — Ә, туҡта! Уның ярҙамсыһы — робот инә ала шикелле.

— Робот? Ул беҙгә ишекте асыусы паролде әйтерме?

— Юҡ.

Ҡыҙ менән малай йәнә уйға ҡалды. Улар төрлөсә план ҡорҙо, әммә береһе лә тормошҡа ашырҙай түгел ине. Ниһайәт, Хәлит иң ябай сараға әйләнеп ҡайтты.

— Станция етәксеһенән булмай, — тине ул. — Паролде шул роботтан ғына белә алабыҙ.

— Нисек?

— Белмәйем. Уны нисек тә йоҡлатып булмаймы?

— Һүндереп була.

— Уны ниңә әйтмәй тораһың? Һүндерәбеҙ ҙә... Уның хәтере барҙыр бит?

— Бар, әлбиттә.

— Шуны аса ла ҡарайбыҙ! Унда пароль яҙылған.

— Ысынлап та. — Әмилә уйға ҡалды. — Бының өсөн уның хәтерен уҡый белергә кәрәк. Туҡта! Миндә компьютер бар! — Әмилә эргәләге телевизор кеүек нәмәгә күрһәтте. — Ул роботтың хәтерен сисә алырға тейеш!

Тиҙҙән малай менән ҡыҙ, коридорға сығып, станция етәксеһенең кабинетына табан атланы. Унда үҙҙәренә кәрәк роботты оҙаҡ көтөргә тура килмәне. Бына ул кабинеттан сыҡты ла станция етәксеһенең сираттағы йомошон үтәү өсөн ҡайҙалыр йүнәлде. Ошо ерҙә уның ҡаршыһына Хәлит килеп сыҡты.

— Томука! — тине малай. Был Ур телендә «туҡта» тигәнде аңлата ине.

Робот, ҡаршыһындағы таныш түгел әҙәмде күреп, шаҡ ҡатты, шунан, мейеһенә яҙылған программаға буйһоноп, Хәлитте эләктереп алырға итте. Малайға шул ғына кәрәк ине. Ул ҡаршылаша башланы. Ошо ерҙә Әмилә йүгереп килде лә роботты һүндерҙе. Теге, малай менән булашып, ҡыҙға ҡамасаулай ҙа алманы. Робот үлгән кеүек ҡатып ҡалды. Малай менән ҡыҙ шунда уҡ, роботтың ҡул-аяҡтарынан эләктереп, коридор буйлап алып китте. Тимер кеше ауыр ғына, тик уны коридорҙа ошо килеш ҡалдырырға ярамай. Уның программаһы алынғанын белһәләр, шау-шыу күтәрәсәктәр.

Көс-хәлгә роботты Әмиләнең бүлмәһенә индереп һалдылар. Бына — уның программаһы Әмиләнең ҡулында. Уны шунда уҡ компьютерға һалдылар һәм таҫмаға яҙылған паролде табырға ҡуштылар. Компьютер оҙаҡҡа һуҙманы, ярты минуттан экранда ур телендә:

Бүлмәгә инеү — «Ваҡыт менән осрашыу».
Аппаратҡа инеү — «Оло сәйәхәт».
Аппараттан сығыу — «Һаумы, заман», тигән яҙыуҙар емелдәне.
Хәлит түҙемһеҙләнеп Әмиләгә ҡараны:
— Нимә? Булдымы?
— Эйе. — Әмилә программаны ала һалып кире роботтың күкрәгенә тыҡты. — Әйҙә, тиҙерәк коридорға сығарып ҡуйябыҙ!
Әмилә, ишекте асып, тышҡа күҙ һалды. Шунан Хәлиткә шауламаҫҡа ҡушты. Күрәһең, кемдер үтеп барғандыр. Бына бер мәл коридор бушаны. Малай менән ҡыҙ йәнә роботты ҡул-аяғынан эләктереп коридорға сығарҙы, аяғына баҫтырҙы.
— Киттек! — тине ҡыҙ.
— Бәлки, уны тоҡандырырға кәрәктер? — Хәлит туҡтап ҡалды.
— Ярамай! Ул шау-шыу күтәрәсәк! Ә беҙгә ҡара ҡумтаны алып сығырға кәрәк әле!
Әмилә менән Хәлит коридор буйлап йүгерҙе. Бәхеткә ҡаршы ҡара ҡумта ултырған бүлмәгә тиклем уларға бер кем дә осраманы.
Бына Әмилә паролде әйтте. Шунда уҡ ишек асылды. Малай менән ҡыҙ «һә» тигәнсе эскә сумды. Бүлмәлә бейеклеге-киңлеге икешәр метрлыҡ ҡара ҡумтанан башҡа бер ни ҙә юҡ ине.
Хәлит уға һоҡланып та, ғәжәпләнеп тә ҡарап торҙо.
— Ошо ваҡыт буйлап йөрөй аламы инде?
— Эйе.
— Ҡарап торһаң... Ябай ғына ҡумта бит! Ул арала Әмилә ҡара ҡумтаны асып ебәрҙе.
— Әйҙә, ин!
Хәлит Әмилә артынан аппарат эсенә инде. Бында пульт бар ине. Әллә ниндәй лампалар йымылдай, күп кенә кнопкалар, тумблерҙар, аңлайышһыҙ яҙыуҙар күҙгә ташлана.
Әмилә ашығып бер-ике тумблерҙы шартылдатты, кнопкаларға баҫты. Бына ҡара ҡумта әкрен генә геүелдәргә, һелкенергә тотондо.
— Киттек! — тине Әмилә тулҡынланған тауыш менән.
— Ҡайҙа?
— Әлегә бер йыл артҡа! Һеҙҙең 1989-сы йылығыҙға!.. Беҙгә бынан тиҙерәк ысҡынырға кәрәк!
— Ә ниндәй көнгә?
— Ниндәйенә теләйһең?
— М-м, — тип уйлап алды Хәлит, машинаның иҫ китерлек һәләтенә ышанырға ла ышанмаҫҡа ла белмәйенсә. — Әйҙә, беренсе ғинуарға! Яңы йылға! — Ләкин өҫтөндәге

шортик менән майкаға ҡараны ла кире уйланы. — Әй, юҡ! Әйҙә, йәйгә! Июль айына!

Әмилә йәнә кнопкаларға баҫты. Экранда ниндәйҙер һандар йылтылданы, машина тигеҙ генә геүләне, һелкенде. Хәлит тын да алмай тора. Ысынлап та, улар ошо минутта ваҡыт буйлап сәйәхәт итәме, үткән йылға ҡайтып барамы? Ғәжәп бит был, мөғжизә!

Тиҙҙән машинаның ишеге асылып китте.

## ҠАРА ҠУМТА — ОСОУСЫ «ТӘРИЛКӘ»

Батыр ҡара ҡумтаны гараждарға табан йүнәлтте. Ошо ерҙә ул ҡала урамдарындағы кешеләрҙең туҡтап, өҫкә текәлеп тороуына иғтибар итте. Нимә ҡарай улар? Малай биноклен ҡулына алды һәм шаҡ ҡатты. Ерҙәге бөтә кешеләр туп-тура Батырға текәлмәһенме! Уны күрәләрме икән ни? Булыуы мөмкин түгел! Күк йөҙө ҡапҡараңғы. Унда йөҙгән ҡара ҡумта күренергә тейеш түгел дә баһа!

Юҡ, Батыр яңылыша. Күрәһең, улар башҡа нәмәне күҙәтә. Малай бинокле аша ерҙәгеләргә ныҡлабыраҡ ҡараны. Бына ғәжәп! Бинокль уларҙы шул тиклем яҡын күрһәтә, хатта тегеләр ике метр ғына алыҫлыҡта Батырға тишә яҙып текәлеп торған кеүек. Малай ҡурҡа төштө.

Шул саҡлы кеше һиңә туп-тура ҡарап торһон әле! Шик юҡ — улар ҡара ҡумтаны күрә. Тик ҡара нәмәне ҡараңғы күктә нисек таба һуң улар?

Батыр, һиҙемләүен тикшереп ҡарау өсөн, ҡаланың икенсе осона табан йөҙҙө. Ерҙәгеләр, боролоп, йәнә уға текәлде! Күрәләр!

Ни эшләргә? Нисек итеп быларға һиҙҙермәй генә үҙҙәренең балконында торған йылы кейемдәрҙе ҡулға төшөрөргә? Әгәр былай итһә: ҡала ситенә сығырға, шунан ергә мөмкин тиклем яҡынайырға ла, ҙур тиҙлек менән осоп килеп, гараждар артына сумырға?! Ул саҡта, моғайын, бер кем дә күреп өлгөрмәҫ!

Тиҙҙән Батыр шулай итте лә. Машинаһын гараждар артына йәшереп, тиҙ генә тышҡа сыҡты.

У-у, ҡалай һыуыҡ! Шулай булмай ни! Аяҡ аҫтында ҡар ята, һалҡын ел өрә. Ә Батыр майка менән шортиктан!

Малай алға уҡталды. Ҡапыл ул утыҙ-ҡырҡ аҙымдар ситтәрәк бер-нисә кешенең үҙенә текәлеп тороуон күрҙе. Уның кейеменә аптырайҙарҙыр инде.

Батыр, ғәжәпләнерлек бер ни ҙә юҡ тигәндәй, йәһәт кенә үҙҙәренең өйҙәренә табан йүгерҙе. Һуңғы секундта артына әйләнеп ҡараны. Ҡара ҡумтаны ныҡ йәшерҙеме? Сит

күҙҙәргә күренмәйме? Ҡараны һәм таш һын кеүек урынында ҡатып ҡалды.

Ул ҡара ҡумтаны ҡалдырған урында гараж бейеклегендәге яп-яҡты шар ята ине! Малайҙың ҡото осто! Нимә был? Ҡара ҡумта шулай яҡтырамы? Ул бит ҡумта ҡиәфәтендә ине, ниңә түңәрәк булып киткән? Яҡтыра! Тимәк, ул ҡараңғы төшкәндән бирле шулай яҡтылыҡ сәсә! Бына ни өсөн ерҙәге бар кеше уны күреп торған икән! Тимәк, анау кешеләр ҡара ҡумтаның осоп килеп ергә төшкәнен күргән, уның эсенән Батырҙың сығыуын күҙәткән! Осоусы «тәрилкә» килде тип ҡарап торalарҙыр әле хәҙер.

Батыр аңланы: быңдай саҡта ҡара ҡумтаны ташлап китеү мөмкин түгел. Һиҙҙермәй генә үҙҙәренең балконына ла менә алмаясаҡ ул. Машинаны ла, малайҙы ла уратып аласаҡтар бер минуттан. Унан һуң ни булырын алдан күҙ алдына килтереүе лә ҡурҡыныс.

Батыр кире йүгерҙе. Яҡынайғас ҡына ут көлтәһенең эсендә ҡара ҡумта ултырғаны күренде. Күрәһең, машина нур сәсә, шуға ла ҡараңғыла яҡты йомғаҡҡа әүерелә.

Батыр ҡара ҡумтаны ерҙән айырҙы ла тиҙ генә ҡаланан ситкә осто.

## БАТЫРҘЫ НИСЕК ТАБЫРҒА?

Әмилә менән Хәлит тышҡа сыҡты. Ҡара ҡумта ҡола ялан уртаһында тора. Өҫтә июль ҡояшы рәхимһеҙ ҡыҙҙыра. Әкрен генә ел иҫә. Алыҫта ҡала күренә. Сибаймы? Эйе, Сибай бит! Тик хәҙер бында, ысынлап та, 1989-сы йылмы икән? Бәлки, һаман да 90-сы йылдыр?

Малайҙың уйҙарын аңлағандай, Әмилә:

— Беҙ 1989-сы йылдың беренсе июлендә, — тине.

— Ҡайҙан беләһең? — Хәлит ҡыҙға шикле ҡараш ташланы.

— Машинаға шундай бойороҡ бирҙем. Ул беҙҙе шул көнгә алып килде лә инде.

— Ышанғым килмәй, — тине Хәлит. — Минеңсә, беҙ 90-сы йылдың беренсе июнендә.

— Һин ҡалаға ҡара. Унда үҙгәреш күрмәйһеңме ни?

— Юҡ. — Хәлит йәнә ҡалаға баҡты. — Туҡта әле? Анау туғыҙ ҡатлы йорт... Ул ниңә төҙөлөп бөтмәгән? Унда бит күптән кешеләр йәшәп ята! Кисә генә уның лифтында Батыр менән өҫкә-аҫҡа шыуып йөрөнөк!

— Үҙең уйлап ҡара.

— Ысынлап та беҙ 89-сы йылдамы икән ни?! Ғәжәп бит был! Өй төҙөлөп бөтмәгән! Ә ул кисә генә!.. — Хәлит аптыраған күҙҙәрен ҡаланан ала алманы. Шунан йәнә ҡара

ҡумтаны урап сыҡты. — Вәт машина, ә!.. Ваҡыт аша!.. Әмилә, ҡара әле! Ә унда, ошо ҡалала, мин бармы? Ун ике йәшлек мин, Хәлит? Бармы?

— Әлбиттә, бар.

— Нисек бар? — Хәлит һис тә ышанырға теләмәне. — Мин бит бына! Янында торам!

— Бында ун өс йәшлек Хәлит, 90-сы йылда йәшәүсе Хәлит тора. Ә ҡалала 89-сы йылда йәшәүсе, ун ике йәшлек Хәлит бар. Һеҙ икегеҙ ике заман вәкиле, шуға икегеҙ ике кеше.

— Юҡ, был минең башыма һыймай! — Хәлит улай-былай йөрөп алды. — Былай булыуы мөмкин түгел! Нисек инде? Мин — икәү! Ышанмайым! Юҡ!

— Хәлит, етер был хаҡта, — тине Әмилә. — Батырҙы ҡайҙан эҙләйбеҙ? Беҙгә шул хаҡта уйларға кәрәк.

— Батырҙымы? Уның машинаһы нисә йылға китә ала тинең әле?

— Өс йыл артҡа, өс йыл алға.

— Өс йыл арттан башлайбыҙ, һәр көндө тикшерәбеҙ...

— Нисек тикшерәбеҙ? Бына беҙ 89-сы йылдың беренсе июлендә торабыҙ. Бәлки Батыр ҙа ошо көндәлер. Тик уны нисек табырға? Бөтә ҡаланы һөҙөп сыға алмайбыҙ ҙаһа!

Хәлит тә төшөнкөлөккә бирелде:

— Һәр көндә ҡала буйлап йөрөй башлаһаҡ... О!

— Ә беҙ уны бер тәүлек эсендә табырға тейешбеҙ, — тип ҡабатланы Әмилә. — Юғиһә... Батареяның көсө...

— Былай ултырырға ярамай! — Хәлит ҡыҙға һөйләп бөтөрөргә бирмәне. — Тәүге көндән башлайбыҙ! Батыр йә үҙенең, йә беҙҙең өй тирәһендә өйрөләлер. Киттек!

Әмилә менән Хәлит ултырған ҡара ҡумта, ваҡыт арауығын тишеп, 1987-се йылға осто. Ваҡытты әрәм итмәҫ өсөн мөмкин тиклем шәберәк эҙләргә булдылар. Бының өсөн ҡара ҡумтаны Батырҙарҙың өйҙәре янындағы гараж артына килтереп ҡуйҙылар. Икеһе ике яҡтан тиҙ генә Батырҙы ҡарап килә лә ҡара ҡумтаны йәнә бер көн алға күсерәләр...

Бер мәл 87-се йылдың көҙөнә килеп еттеләр. Әммә Батырҙың эҙе лә күренмәй...

Тиҙҙән малай менән ҡыҙ төшөнкөлөккә бирелде. Улар Батырҙы көндөң бер генә осоронда, йәғни көндөҙгө сәғәт бер тирәһендә, эҙләй. Ә бит Батыр шул көндөң башҡа ваҡытында тороп ҡалыуы бар!

Тимәк, файҙаһыҙ, файҙаһыҙ Батырҙы эҙләү! Уны табыу мөмкин түгел! Көндөң бит егерме дүрт сәғәте бар, меңдән ашыу минуты бар! Шуларҙың ҡайһыһында эҙләргә Батырҙы? Ә Әмилә менән Хәлит Батырҙы бер йылда түгел, алты йыл эсендә эҙләргә тейеш! Етмәһә, уны бер тәүлектә та-

бырға кәрәк. Исмаһам, Батыр ултырған ҡара ҡумталағы батареяның көсө оҙаҡҡараҡ етһә! Юҡ шул! Ул егерме дүрт сәғәттән бөтәсәк, һүнәсәк! Шунан һуң Батыр...

Ни эшләргә? Тик ултырырға ғына ярамай! Инде өмөттәре өҙөлгәндәй булһа ла, Әмилә менән Хәлит ныҡышмалы рәүештә Батырҙы эҙләүҙәрен дауам иттеләр...

## СӘЙЕР ВАҠИҒАЛАР

Батырҙың әсе һыуыҡҡа башҡаса түҙерлеге ҡалманы. Ни булһа — шул булыр! Ул ҡара ҡумтаны ҙур тиҙлек менән үҙҙәренең балконына мөмкин тиклем яҡынайтты. Шунан ишекте асты ла бауҙа эленеп торған трико менән куртканы йолҡоп алды. Күҙ ҡырыйы менән генә эстә ут барлығын, тәҙрәләрҙең ҡорғанлы икәнлеген күреп ҡалды...

Тиҙҙән ҡара ҡумта, нимәнәндер ҡурҡҡан ҡарлуғас кеүек, ҡаланан ситкә оса ине.

Трико менән куртканы кейгәс, малайҙың тәненә йылы йүгерҙе. Иртәгә кейемдәренең юғалыуын белгәс, кескәй Батыр нимә уйлар икән?

Ошо ерҙә Батыр терт итеп ҡалды. Сөнки ул бынан өс йыл элек булған ваҡиғаларҙы иҫенә төшөрҙө...

Бер көндө ҡис, әсәһе менән икәүләшеп ашап алғандан һуң, Батыр дәрестәрен әҙерләргә булды. Ул балкон тәҙрәһенә арҡаһы менән ултыра ине. Ҡапыл өй эсен сәйер яҡтылыҡ солғап алғандай итте. Батыр быға ул тиклем аптыраманы. Уларҙың янынан аҙ машина үтәме ни! Шуларҙың яҡтылығылыр. Шул мәл балконда нимәлер шаҡылданы. Елме икән? Туҡта, унда кемдер бар түгелме? Тик уларҙың балконында кем йөрөһөн? Батыр артына әйләнеп ҡараны. Әммә ҡорған ябыҡ, шуға балконда ни барлығы күренмәй. Әммә тәҙрәләр зәңгәрһыу төҫтәге сәйер яҡтылыҡҡа күмелгән. Ул һис тә машина фараһының яҡтылығына оҡшамаған.

Батыр ҡаушабыраҡ ҡалды. Ул арала тәҙрә артындағы яҡтылыҡ юғалды. Малай урынынан тороп тәҙрә янына барҙы, ҡорғандарҙы асып ебәрҙе. Әммә тышта шик тыуҙырырлыҡ бер ни юҡ, фәҡәт ҡаршылағы өйҙәрҙең тәҙрәләре генә яҡтырып тора. Урамдан үткән машина күренмәй. Улайһа, әле генә нимә яҡтыртты икән ҡорғандарҙы? Туҡта, бауҙағы трикоһы менән курткаһы ҡайҙа? Уларҙы кисә генә әсәһе йыуып киптерергә элгәйне. Батыр уларҙы көндөҙ үк алырға иткәйне, әллә ниңә бушай алманы.

— Әсәй, — Батыр кухняла булашҡан әсәһенә өндәште, — балкондағы кейемдәрҙе һин алдыңмы?

— Юҡ.

— Ә ҡайҙа һуң улар? Әсәһе килеп етте...

...Батырҙың иҫендә: икәүләшеп бик ныҡ аптырағайнылар. Малай курткаһын бик ярата ине, бигерәк тә уның арҡаһында ҙур хәрефтәр менән «спорт» тип яҙылған һүҙ оҡшай ине. Шуға ла бик ныҡ ҡайғырҙы.

Ә шул көндөң иртәгәһенә Батыр бит тағы ла ғәжәберәк хәлдәргә тарыны. Мәктәптән ҡайтҡас, ишекте асып өйгә инәйем тиһә, плащының кеҫәһендә асҡысы юҡ. Малай аптырауға ҡалды. Ҡайҙа булыуы мөмкин? Төшөп ҡалды тиер ине, бөгөн футбол уйнаманы, улай-былай йүгереп йөрөмәне... Ни эшләһен Батыр, әсәһенең эшенә барып, уның асҡысын алды...

Ошо ваҡиғаларҙың аҙағы бигерәк тә хайран ҡалырлыҡ булды.

Шул кис Батыр балконға ҡараһа, бауҙа трикоһы ла, курткаһы ла эленеп тора. Кем килтергән? Ҡасан? Быны малай ҙа, әсәһе лә һис тә аңлай алманы. Ә инде куртка кеҫәһенән бөгөн генә юғалған асҡысының килеп сығыуын күргәс, улар тамам аптырауға ҡалды. Батыр ҙа, әсәһе лә юҡ-барға ышанмай ине, әммә ошо сәйер ваҡиғаларҙан һуң, әллә йорт эйәһе буламы икән, тип шикләнә башланылар. Әммә был хаҡта бер кемгә лә һөйләп торманылар. Хәйер, кем ышаныр ине икән уларға?

Ике-өс көн аптырашып йөрөнөләр ҙә, башҡа ундай ул-был ҡабатланмағас, әкренләп оноттолар...

Һәм бөгөн килеп ун өс йәшлек Батыр шуларҙы иҫләне. Бына бит сәбәп ниҙә булған! Әҙәм ышанмаҫлыҡ ваҡиға шул! Ошо минутта тегендә, ул фатирҙа, ун йәшлек Батыр курткаһы юғалғанға ҡайғыралыр, ә бында, ҡара ҡумта эсендә, ун өс йәшлек Батыр, нисек итеп үҙ заманына ҡайтырға белмәйенсә, Ирәндек тауҙарына табан осоп бара...

Ҡапыл Батыр бынан өс йыл элек, көҙ, ҡала гәзитендә ғәжәп бер мәҡәләнең баҫылып сығыуы хаҡында хәтерләне. Унда бер көндө кис кешеләрҙең ҡала өҫтөндә осоусы яҡты шарҙы күреүҙәре хаҡында яҙылғайны. Теге ут йомғағы бер түбәнәйеп, бер өҫкә күтәрелеп оҙаҡ ҡына осоп йөрөгән. Шунан ҡала уртаһындағы гараждар артына барып төшкән. Бер мәл шар эсенән кеше килеп сыҡҡан. Ул буйға бәләкәй генә булған. Был йән эйәһе шарҙан ситкәрәк атлаған, әммә үҙенә текәлгән кешеләрҙе күргәс, тиҙ генә кире ут йомғағы эсенә ингән дә осоп киткән. Тегенең кейеме балаларҙың майкаһы менән шортигын хәтерләтә ине, тип һөйләгән күреүселәр... Уларҙың барыһының да тәьҫораттары ҡала гәзитендә баҫылып сыҡты, хатта был мәҡәләне аҙаҡ республика гәзиттәре лә күсереп баҫты. Әммә уларға бер кем дә, шул иҫәптән Батыр ҙа, ышанмағайны.

Ә баҡһаң, ул утлы шар әсенән сыҡҡан кеше Батырҙың үҙе булған! Әҙәм ышанмаҫлыҡ нәмә бит был!

...Батыр әкренләп шундай фекергә килде: ер аҫтындағы станцияны табырға кәрәк. Ур кешеләренә хәлде аңлатып бирергә тура килер. Үҙ заманына ҡайтыу өсөн ошонан башҡаса юл юҡ...

Батыр бында ыҙалай, ә Хәлит ни эшләне икән? Әгәр ул тотолһа, бөтәһен дә онотторop, малайҙы ер өҫтөнә сығарып ебәрәсәктәр. Ул саҡта Хәлит Батырҙың ҡайҙа икәнлеген бөтөнләй хәтеренән сығарасаҡ...

Шулай уҡ үҙ ваҡытына кире ҡайта алмаҫмы? Әмиләне башҡаса бер ҡасан да күрмәҫме икән ни? Ҡыҙ менән осрашыу өсөн ашҡынып килгәйне бит Батыр Сибайға...

## ХӘЛИТ ХӘЛИТТЕ ОСРАТА

— Таптым! — тине Хәлит шат тауыш менән. — Батырҙың ер аҫты станцияһында ҡара ҡумтаға ултырған ваҡытына барайыҡ та, уны туҡтатайыҡ. Йәки нисек кире ҡайтырға өйрәтәйек!

— Ярамай. — Әмилә күңелһеҙ ҡиәфәт менән башын сайҡаны. — Был инде тарихтың үҫешенә ҡыҫылыу була. Батыр инде күптән ҡара ҡумтаға ултырып киткән, ул ҡайҙалыр икенсе ваҡытта йөрөй. Беҙҙең уны табып кире ҡайтарырға ғына хаҡыбыҙ бар, ә сәйәхәттең башына барып туҡтатырға хоҡуғыбыҙ юҡ. Был Ер цивилизацияһының үҫешенә...

— Беләм, беләм! — тип бүлде ҡыҙҙы Хәлит ҡәнәғәтһеҙ тауыш менән. — Оло ҡыйралышҡа килтерәсәк... Улай ярамай, былай ҙа ярамай! Улайһа, нимәгә кәрәге бар был машинаның?

Хәлит ҡара ҡумтаның мөйөшөнә тибеп ебәрҙе.

— Ул тикшереүҙәр өсөн кәрәк.

— Былай йөрөһәк, беҙ бер ҡасан да Батырҙы тапмаясаҡбыҙ! Ә ваҡыт үтә, үтә! Батареяның көсө бөтһә...

— Шуға тиклем табырға кәрәк, тим бит.

— Ә нисек? Нисек?

— Белмәйем. — Әмилә тыштан тыныс булырға тырыша, ә эстән уның да йөрәге әрней...

Инде Әмилә менән Хәлит 87-се йылдың көҙөнә килеп еттеләр. Ҡара ҡумта әүәлгесә гараждар артында ултыра. Малай менән ҡыҙ яҡын-тирәне ҡарап сыға ла, Батыр ҙа, уның аппараты ла күренмәгәс, ваҡыт буйлап бер сәғәткә алға күсәләр. Әмилә Батырҙың өйө тирәһенә барып әйләнә, Хәлит үҙҙәре йәшәгән яҡты барып ҡарай...

Һикһән етенсе йыл Хәлиткә ун йәш булған. Эй, күрәһе

ине үҙенең шул сағын! Шуға ла өйҙәренә инеп сығыу теләге малайҙы ташламай. Әммә Әмилә ваҡытты уғата аҙ бирә. Ул йүгереп йөрөп үҙҙәренең тирәһен ҡарап сығыуға ғына етә. Юғиһә беҙ бер тәүлек эсендә алты йылды урап сыға алмаясаҡбыҙ, ти ҡыҙ. Шуға ла Хәлит үҙҙәренең өйөнә, алыҫта ултырған мәктәптәренә ашығып ҡына ҡараш ташлай ҙа гараждар артына ҡабалана. Шул арала үҙҙәре тирәһендә йәшәгән бер-ике бала-сағаны тап итте. Уларҙың ҡапыл ике-өс йәшкә бәләкәсәйеп китеүҙәрен күреүе Хәлит өсөн ҡыҙыҡ та, сәйер ҙә. Әммә яҡшы таныштар булмағас, барыбер ул тиклем хайран ҡалмай Хәлит. Әгәр бына үҙенең берәй класташын тап итһә, йәки ун йәшлек Батыр менән үҙен осратһа икән!.. Ҡыҙыҡ булыр ине был! Шуға ла ваҡыт машинаһынан сығыу менән малай иң алда мәктәп юлына күҙ һала. Йәнәһе, кемдәр килә ул яҡтан. Ләкин ошоғаса унда фәҡәт таныш түгел балалар күҙенә салынды...

Был юлы ла... Мәктәп яғынан ике малай килә. Береһе йыуантаҡ, килбәтһеҙ кәүҙәле... Таныш түгел. Икенсеһе һонтор буйлы... Туҡта! Был бит Батыр! Бынан өс йыл элекке ун йәшлек Батыр! Ул! Ул! Үҙенең иң яҡын дуҫын танымаҫҡа! Ҡалай бәләкәсәйеп киткән! Көлкө! Ә янындағы килбәтһеҙ кәүҙәлеһе кем булды һуң әле? Бәй! Хәлит терт итеп ҡалды. Был бит малайҙың үҙе, Хәлит! Йыуантаҡ малай, баҡһаң, ун йәшлек Хәлит икән. Шулай йыуанмы ни ул?

Ун өс йәшлек Хәлит, ни эшләргә белмәйенсә, урынында ҡатып ҡалды. Ғәжәп бит был! Хәлит үҙен күрә! Әкиәттә генә була торған хәл дә баһа! Валлаһи, берәйһе һөйләһә, быға ышанмаҫ ине. Ә бына хәҙер үҙе... Әллә төш күрәме? Юҡ, ысын был, ысын!

Ул арала ун йәшлек малайҙар яҡыныраҡ килде. Өлкән Хәлит юлдан ситкәрәк сыҡты. Аралашырға ярамай. Әмилә шулай ти бит. Хәлит үҙ-үҙенә ситтән генә ҡараясаҡ...

Ошо ерҙә Хәлит менән Батырҙың ҡаршыһына ун ике йәштәр тирәһендәге икенсе малай килеп сыҡты.

— Туҡтағыҙ әле, — тине ул. Бының Хәлит менән Батырға ҡарағанда ҙурыраҡ та, көслөрәк тә икәнлеге күренеп тора. — Аҡсағыҙ бармы?

— Юҡ...

— Алдайһығыҙ бит! Күрһәтегеҙ кеҫәләрегеҙҙе! — Теге малай Батырҙың да, Хәлиттең дә елкәләренә берәрҙе ҡундырып алды. — Шәберәк ҡыбырлағыҙ!

Ағастар араһында торған Хәлит бынан бер нисә йыл элек бер Славик тигән малайҙың мәктәптән ҡайтҡан саҡта көн дә тиерлек туҡтатып, аҡса һорап, бирмәһәң, туҡмап йөҙәткәнен хәтерләне...

Өлкән Хәлит ағастар араһынан сыҡты.

— Эй! — тип өндәште ул.

Өс малай ҙа уға әйләнеп ҡараны.
— Кил әле бында! — тине ун өс йәшлек Хәлит.
— Миңә әйтәһеңме? — тип һораны Славик.
— Эйе, һиңә! Кил!
Славик, йомшаҡ ҡына баҫып, Хәлиткә яҡынлашты. Кескәй Хәлит менән кескәй Батыр аптырап ҡарап тора. Батыр бигерәк тә ныҡ ғәжәпләнде, буғай. Сөнки ул ун өс йәшлек Хәлитте танығандай итте. Фәҡәт ун йәшлек Хәлит дуҫының эргәлә тороуы ғына: «Хәлит, һин нисек улай ҙурайып киттең?» — тип һорауҙан тыя...
Славик килеп етеү менән, Хәлит уның елкәһенән эләктереп алды:
— Ниңә кескәйҙәрҙе йәберләйһең?
— Йәберләмәйем... — Славиктың ҡото осто. — Мин бит былай ғына...
— Әгәр тағы үҙеңдән кескәйҙәргә ҡул күтәрһәң, йәки уларҙан аҡса һораһаң!.. Үҙеңә үпкәлә! Аңланыңмы?
— Аңланым! — тине Славик, иламһыраған тауыш менән.
— Бар, юлыңда бул! — Хәлит тегенең елкәһенә төртөп ебәрҙе.
Славик, анһат ҡотолғанына ҡыуанып, йәһәт кенә табанын ялтыратты.
Хәлит артына әйләнеп ҡараны. Ун-ун биш аҙым алыҫлыҡта кескәй Хәлит менән кескәй Батыр уға текәлгән. Күрәһең, уның кем булыуын, ни өсөн шулай яҡлаша башлауын аңларға теләйҙәрҙер.
Әммә өлкән Хәлит үҙенең былай ҙа артығыраҡ ҡыланып ташлағанын тойҙо. Шуға кескәй малайҙарға бер ни өндәшеп торманы, уң ҡулын ғына күтәреп сәләмләне лә ағастар араһына сумды...
Бына ул ҡабаланып гараждар араһындағы ваҡыт машинаһына табан атлай, үҙе теге осор Славиктың бәйләнеүҙәренең нисек тамамланыуын хәтерләргә тырыша...
Туҡта әле! Бер көндө мәктәптән ҡайтып килгәндә Славик тап булып йәнә аҡса таптыра башлағайны, ағастар араһынан... етенсе кластар тирәһендә уҡыған бер малай килеп сыҡты... Ул Славикты янына саҡырып алып ниҙер әйтте, шунан йәнә ағастар араһына инеп юғалды...
Кем булды ул? Ниңә Хәлит менән Батырҙы яҡлашырға булды? Славикка нимә тип әйтте? Былар бөтәһе лә Хәлит өсөн билдәһеҙ ҡалды, әммә шунан һуң Славик уларға аҡса һорап бәйләнмәне...
Бөгөн килеп, Хәлит ағастар араһынан килеп сыҡҡан малайҙың ҡиәфәтен хәтерләй ҙә... Шулай ҙа ул Хәлиттең үҙе булдымы икән ни? Быға ышанғы килмәй! Әммә шулай булды бит барыһы ла, булды!..

## КӨТӨЛМӘГӘН ОСРАШЫУ

Ҡайһы саҡта Батырға Хәлит Әмиләне тап итеп уны эҙләргә сыҡҡан кеүек тойола. Әгәр был ысын булһа... Батыр Әмилә менән осрашырмы икән ни? Ышанғы килмәй. Былтыр, Ур планетаһын ташлап киткән саҡта, мәңгегә хушлашабыҙ тигән ауыр тойғо малайҙың күңеленә ныҡлап инеп ултырғайны, шул һаман китергә теләмәй.

Ә Батыр Әмилә хаҡында йыш уйлана. Имеш, ҡыҙ Ергә килеп төшкән дә Батырҙы тапҡан... Ошо хыялын күпме тапҡырҙар төш итеп күрҙе. Әмиләнең килеп инеүен күрә лә уғата ҡыуана. Ҡыҙ ҙа бик шатлана. Бер-береһен бүлә-бүлә һуңғы йылды нисек йәшәүҙәрен, ҡайһылай һағыныуҙарын һөйләргә тотоналар. Был минутта малайҙың йөрәген оло бәхет солғап ала... Уянып китһә, был төш кенә булған икән. Быны аңлағас, малайға шундай ауыр була ине.

Батырҙың класында матур-матур ҡыҙҙар бар. Уларҙың ҡайһы берәүҙәре, хат яҙып, үҙҙәренең Батырҙы оҡшатыуҙарын, малай менән осрашырға теләүҙәрен дә белдергәйне. Тик ғәжәп: уларҙың барыһы ла матурлыҡ яғынан да, холоҡтары менән дә Әмиләгә ҡарағанда түбәнерәк тора кеүек... Ошондай минуттарҙа, ҡыҙҙы юҡһынған саҡтарҙа, яһаны ла инде Батыр Әмиләнең теге ике портретын. Әлбиттә, бөтәһе лә уның кемлеген белергә теләне. Һеңлем, тип кенә аңлатты Батыр. Ә портреттарҙың береһен «Хыял ҡыҙы», икенсеһен «Ай ҡыҙы» тип атаны...

Ошондай уйҙар менән малай төндө еткерҙе. Ул таң алдынан ғына ике сәғәттәй йоҡлап алды. Уяныу менән Батыр үҙенең асыҡҡанлығын тойҙо. Ҡапҡылап алырға ине лә... Исмаһам, берәй һум аҡсаһы ла юҡ бит. Магазинға инеп берәй нәмә алып сығыр ине...

Ҡапыл бынан өс йыл элек булған сәйер ваҡиғалар Батырҙың йәнә иҫенә төштө. Трико менән курткаһының юғалыуы, иртәгеһенә кеҫәһенән фатир асҡысының юҡ булыуы, шул көнө кис кейемдәренең үҙҙәренән-үҙҙәре балконға килеп эленеүе, ә асҡысының куртка кеҫәһенән табылыуы. Батыр шуларҙың серле бәйләнешен төшөнгәндәй булды.

Малайға хәҙер үҙ фатирының асҡысын ҡулға төшөрөргә кәрәк! Ә инде бәләкәс Батыр (үҙ-үҙең хаҡында сит кеше кеүек һөйләү ҡыҙыҡ икән!) — мәктәпкә, әсәһе эшкә киткәс, өйгә инеп, бер-ике телем икмәк алып сығырға... Ә бына аҙаҡ асҡысты нисек кире бирергә? Өс йыл элек асҡыс балкондағы куртка кеҫәһендә табылды. Ниңә улай килеп сыҡҡан? Бөгөн Батыр ошо заманды ташлап китә алырмы икән ни?

Көн тамам яҡтырҙы. Һалҡынса. Ер өҫтөндә тәүге ҡар ята, ҡояш ихлас йылмайып, уны иретергә маташа.

Батыр ҡара ҡумтаға ситкәрәк китеп ҡараш ташланы. Юҡ, көндөҙ ул һис тә яҡтылыҡ һипмәй. Ҡарап торһаң, ябай, ғәҙәти бер ҡумта... Быныһы яҡшы. Хәҙер уға кешеләрҙең иғтибарын йәлеп итергә ярамай.

Был юлы Батыр ҡалаға инеп торманы, ҡара ҡумтаны йылға буйындағы һарайҙар артына йәшерҙе лә өйҙәренә табан йәйәү атланы.

Тәүге уйы — ситтән булһа ла әсәһен күреү... Әлбиттә, эргәһенә бара алмаҫ. Беренсенән, малайҙың өҫтөндәге кейемде күреү менән әсәһе әллә нәмә уйлар. Икенсенән, Батыр һиҙенә: икенсе замандан килеп был ваҡыттағы кешеләр менән аралашырға уның хаҡы юҡ. Был көтөлмәгән нәмәләргә алып барып сығармаҫмы? Өсөнсөнән, өйҙә ун йәшлек Батырҙың ултырып ҡалғанын белә тороп, ҡапыл ҡаршыһына ун өс йәшлек Батырҙың килеп сығыуын күрһә, әсәһе ни уйлар, нимә кисерер? Былар бит барыһы ла билдәһеҙ...

Батыр әсәһенең эшкә йөрөгән юлында тора. Һигеҙ тулып киләлер. Ошо өй артына йәшенә лә көтә...

Кешеләр эшкә, балалар мәктәпкә ашыға, эргәләрендә генә киләсәктән килгән малай тороуон уйлап та бирмәйенсә үҙ мәшәҡәттәре менән ҡабалана...

Ҡапыл Батыр терт итеп ҡалды. Әсәһе! Малай уны шунда уҡ таныны. Өҫтөнә оҙаҡ кейеүҙән төҫө уңған көрән плащ кейгән, башында — ғүмер буйы ябынған зәңгәр яулығы, аяғында — резина итек, ҡулында — йыш ҡына Батырға ҡуҫтәнәстәр алып ҡайтыусы сумка... Әсәһе! Батыр алға уҡталды. Әсәй, туҡта! Был — мин, Батыр! Мин бит һине бер йыл күрмәнем!.. Бер генә һүҙ әйтсе, әсәй! Был донъяла мин бит хәҙер бөтөнләй яңғыҙ...

Батырҙың тәне зембәрләне, тамағына бер төйөр килеп торҙо... Малай ҡолап китмәҫ өсөн стенаға һөйәлде...

Уның эргәһенән генә әсәһе шәп-шәп атлап үтеп бара. Өйҙә ҡалған улын үҫтереп, кеше итеренә ышанып эшенә ҡабалана. Бер йылдан был яҡты донъя менән хушлашырын да, кескәй Батырының етем ҡаласағын да белмәйенсә ашыға...

Әсәй!.. Батыр түҙмәне, йәшенгән урынынан сыҡты. Әгәр хәҙер әсәһе иғтибар итһә, һөйләшә лә китә Батыр, уны киләсәктәге ҡурҡыныстар хаҡында иҫкәртә.

Тик үҙ уйына батҡан әсәһе малайға боролоп та ҡараманы, шәп-шәп баҫып үтеп китте. Батыр ирекһеҙҙән уға эйәрҙе. Бала саҡтан күреп өйрәнелгән, таныш һын, таныш кейемдәр... Хәҙер ул күҙҙән юғалырмы, шунан бер йылдан үлерме? Юҡ! Батыр иҫкәртергә тейеш! Ни өсөн ул әсәһен ни көткәнен белгәс, быны йәшерергә тейеш? Аралашырға ярамай? Ярамаһын!

— Әсәй!

Әсәһе малайҙың тауышын шунда уҡ ишетте, әйләнеп ҡараны. Шуны ғына көткән малай уның янына йүгереп барҙы:

— Әсәй, был мин — Батыр! Мин...

— Батыр? — Әсәһенең күҙҙәре ғәжәпләнеүҙән ҙурайып асылды. Ул Батырҙы таныманы. — Нисек — Батыр? Батыр өйҙә.

— Мин дә Батыр!

— Бик һәйбәт. Туҡта, ә һин ниңә минең улымдың кейемдәрен кейеп алғанһың? Һин урланыңмы? Ну-ка, сис хәҙер үк!

Урамдағы кешеләр уларға иғтибар итә башланы. Батыр шуға аптырап хәлде әсәһенә аңлатырға тырышты:

— Әсәй, мин — Батыр! Киләсәктән килдем. Миңә ун өс йәш!

— Һин нимә һөйләйһең? Минең Батырым өйҙә, ул бәләкәй әле.

— Эй, әйҙә, булһын! — тине, аптырағас Батыр. — Әсәй, мин шуны әйтергә теләйем. Һиңә һаҡ булырға кәрәк. Юғиһә... һине үлем көтә, аңлайһыңмы? Әсәй?

— Нимә? — Әсәһе малайға ныҡлабыраҡ ҡараны. Ул ун өс йәшлек Батырҙың өйҙә ҡалған ун йәшлек Батырға оҡшағанлығын күрә. Тик уларҙың бер үк кешеләр икәнлеген күҙ алдына килтерә алманы, буғай. — Кемде үлем көтә? Улым, һин юҡты һөйләмә, йәме! Батырҙың курткаһын сис!

Әсәһе Батырҙың еңенән тотто. Был ваҡытта уларҙың янына башҡа кешеләр ҙә йыйыла башлағайны:

— Нимә булды?

— Кем урлаған?

— Ошо малаймы? Вәт, хулиган!

Әгәр хәҙер китмәһә, уны тотоп аласаҡтарын аңланы Батыр. Шуға ашығып әсәһенә:

— Әсәй, ишеттеңме? Мин иҫкәртәм! Зинһар, һаҡ бул! — тине лә, эргәлә торған кешеләрҙе йырып, ситкә ташланды...

## ӘМИЛӘ ЕРГӘ НИСЕК ЭЛӘКТЕ?

Әмиләнең Ергә эләгеүе еңелдән булманы был юлы. Теге саҡта атаһы ер аҫтындағы станцияның етәксеһе ине, шуға кәрәк кешеләр менән һөйләште лә алды ла китте ҡыҙын Ергә. Ә хәҙер уны кем алыҫ та, хәүефле лә юлға алырға риза булһын? Бәлки, йылдар үткәс кенә, Әмилә ҙурайып йыһан гиҙеүсе булыр ҙа Ергә килеп Батырҙы күрә алыр...

Һуңғы йыл Әмилә өсөн бик оҙаҡҡа һуҙылды. Батыр Урҙа саҡта Әмилә уны киноға төшөрөп алғайны. Йыш ҡына шуларҙы ҡараны, бергә йөрөүҙәрен хәтерләп ҡыуанды. Уның һайын Әмиләнең күңелендә тиҙерәк Ергә барып Батырҙы күреү теләге үҫкәндән-үҫә барҙы. Малайҙы Ергә алып киткән караптың командиры хаҡында йыш ҡына уйлай ҡыҙ. Бирген һүҙендә торҙомо икән? Батырҙы онотторо-усы тулҡын аша үткәрмәҫмен, тигәйне бит ул. Шул ағайҙы күреү өсөн бер нисә тапҡыр караптар оса торған урынға барҙы, тик тегене тап итә алманы...

Юҡ! Һиҙенә Әмилә: Батыр онотмаған, ҡыҙҙы хәтерләй. Ошо минутта алыҫ-алыҫ Ер планетаһында Әмиләне юҡһына, киләсәктә осрашыу хаҡында хыяллана. Әммә Батыр Урға килә алмай. Ә бына Әмилә... Ул Ергә бара ала, тимәк, ҡыҙ ғына осрашыу өсөн ни ҙә булһа эшләй ала...

Ошондай уй-тойғо менән йәшәгән ҡыҙ бер көндө йыһан киңлектәрендә эшләү өсөн үҫмерҙәр араһында конкурс үткәреләсәген ишетеп ҡалды. Еңеп сығыусылар алыҫ-алыҫ планеталарҙа алып барылған тикшереү эштәрендә ҡатнашырға хоҡуҡ яулай икән!

Әмиләнең ни кисергәнен белһәгеҙ икән! Был бит яҙмыштың бүләге! Бындай мөмкинселекте һорап та алып булмай ҙа баһа! Ер планетаһына сәйәхәт үҙенән-үҙе Әмиләнең ҡаршыһына килеп торҙо. Әлбиттә, конкурс еңелдән булмаҫ, унда бик күп үҫмерҙәр ҡатнашыр. Әммә Әмилә ышана — ул еңәсәк, Ергә барасаҡ. Сөнки унда бит ҡыҙҙы Батыр көтә!

Шул көндө үк ҡыҙ конкурстың шарттарын барып алды. Ярышта ҡатнашыу өсөн үҙең һайлаған планеталағы телдәрҙе, унда йәшәгән халыҡтың ғөрөф-ғәҙәтен, тарихын белеү менән бергә йыһан карабының, ваҡыт машинаһының төҙөлөшөн өйрәнергә, уларҙы йөрөтөү курсын үтергә кәрәк икән.

Әмилә, әлбиттә, Ер планетаһына барырға теләге барлығын әйтте. Ҡыҙ бит башҡорт телен яҡшы ғына белә.

Халыҡтың ғөрөф-ғәҙәтен тәүге сәйәхәтенең алдынан уҡ яҡшылап өйрәнгәйне. Тимәк, Әмиләгә уларҙы тағы бер ҡабатлап сығырға ла, карап менән ваҡыт машинаһының төҙөлөшөн өйрәнәһе, уларҙы йөрөтөүҙә таҫылланаһы ғына ҡала.

Әмилә һуңғы осор тик конкурс менән генә йәшәне тиһәк, яңылыш булмаҫ. Ул бер генә минутты ла бушҡа ебәрмәҫкә тырышты. Мәктәптән ҡайта ла башҡорт теле дәреслегенә тотона, йә карап менән ваҡыт машинаһын өйрәнә. Ҡыҙ белә: әгәр ошо мөмкинселекте ҡулынан ысҡындырһа, Батырҙы мәңге күрмәүе бар...

Ҡыҙҙың тырышлығы бушҡа китмәне, ул еңеүселәр араһына эләкте.

Ана шулай итеп, Ер планетаһына юлланды Әмилә...

## БАТЫР ҮҘ ӨЙӨНДӘ

Әсәһе янынан киткәс, Батырҙы үкенес тойғолары солғаны. Әллә малай үҙ-үҙен дөрөҫ тотманы, әллә икенсе сәбәп булды, әммә әсәһе бит уны аңламаны, ҡаршыһында торған малайҙың үҙ улы икәнлегенә ышанманы. Тағы бер осрашып ҡарарға ине лә... Тик малай һиҙенә: был файҙаһыҙ. Ышанмаясаҡ уға әсәһе. Хәйер, Батыр үҙе лә ышанмаҫ ине былай хәлдә...

Ошо ерҙә таныш тауыштар малайҙы һағайырға мәжбүр итте. Әйләнеп ҡараһа... Ун аҙымдар артта ҡасандыр Батыр менән бер класта уҡыған ҡыҙҙар килә. Тик бигерәк бәләкәй генәләр! Хәйер, уларға бит барлығы унар йәш... Батыр юлдан ситкәрәк сыҡты. Һағыраҡ булырға кәрәк. Йә берәйһе танып ҡалыр. Хәйер, әсәһе танымағанды... Ун йәшлек Батырға (үҙенә!) күренергә ярамай. Курткаһын күреп ҡалһа, тауыш күтәрер. Хәҙер ошо юлда ул да күренер, моғайын.

Батыр ағастар араһына үтте лә улай-былай йөрөргә тотондо. Балалар үтеп тора, тик ун йәшлек Батыр юҡ та юҡ. Инде тығыҙ тулып килә бит инде. Ниңә шулай оҙаҡлай? Дәрескә һуңлай икән хәҙер!..

Тиҙҙән күренде ун йәшлек Батыр! Тик ун өс йәшлек Батыр тәүҙә уны таныманы. Ҡараһа, кескәй генә Хәлит менән унан саҡ ҡына оҙонораҡ бер малай ҡабаланмай ғына килә ята. Был Хәлит ниндәй таныш түгел малайҙы эйәрткән?

Киләһе секундта Батыр терт итеп ҡалды. Был бит ул — Батыр! — бынан өс йыл элекке, ун йәшлек Батыр! Ҡара, бигерәк килбәтһеҙ икән дә ул. Оҙон буй, тырпайып торған сәс... Өҫтөнә әллә ниндәй плащ кейеп алған булған. Хәйер, курткаһы... Ун өс йәшлек Батырға уңайһыҙ булып китте. Ошо малайҙың курткаһын урланы бит ул... Батыр ирекһеҙҙән ағастар араһына нығыраҡ һыйынды.

Бына Батыр менән Хәлит үтеп китте. Бер аҙҙан ун өс йәшлек Батыр ҙа улар артынан мәктәпкә табан атланы.

Таныш ҡапҡа, таныш тупһа, таныш ишектәр... Дәрес башланған күрәһең, аҫта дежур уҡыусыларҙан башҡа бер кем дә юҡ...

Батыр үҙҙәренең класы сисенә торған урынға күҙ һалды. Кеше-ҡара күренмәй. Иҙән йыуыусы килеп сыҡҡайны, Батыр:

— Плащымда ручкамды онотҡанмын, — тине һәм кейемдәр янына инде. Бына Батырҙың плащы. Аҫҡысты уң яҡ кеҫәгә һала ул гел. Әйе, шунда!

Батыр тыныс ҡына ҡиәфәт менән кейемдәр янынан сыҡты, барып расписаниены ҡарап торған булды. Бөгөн нисәһе икән?..

Батыр урамға сыҡты...

Бына уларҙың өйҙәре...

Ишекте асыр алдынан ҡапыл икеләнеп ҡалды. Ул туҡһанынсы йылда йөрөмәйме икән? Әгәр шулай булһа, был фатирҙа кескәй Батыр менән уның әсәһе түгел, ә бөтөнләй сит кешеләр йәшәй. Хәйер, ул саҡта ҡулындағы асҡыс был ишеккә ярамаҫ...

Ләкин ишек асылды...

Бына Батырҙың фатиры...

Унда бөтәһе лә таныш. Уның дәрес әҙерләгән өҫтәле. Дәфтәрҙәре туҙып ята. Өҫтәл ситендә ашалып бөтмәгән печенье, икмәк валсыҡтары күренә. Әсәһе уға күпме әйтә торғайны, кухняға инеп аша, тип... Урынын йыйған булған, тик одеялы сырышҡан, мендәре бер яҡҡа ауған. Шифоньерҙың ишеге асыҡ тора. Дәрескә һуңлап барғас, ябырға өлгөрмәгән...

Батырҙың күңелен һағыш солғап алды. Ҡапыл ошо заманға әйләнеп ҡайтҡыһы, ошо фатирҙа әсәһе менән икәүләшеп йәшәгеһе килде. Тик был мөмкин түгел, түгел!..

Әсәһенең бүлмәһе. Бында бөтәһе лә бөхтә, таҙа. Ана, халаты эленеп тора. Юҡ, был халат түгел, әсәһенең үҙе!.. Батыр халат янына килде, уға тейеп ҡараны. Әйтерһең, шулай итеп әсәһе менән аралашты...

Күпмелер ваҡыт үткәс, Батыр кухняға инеп бер аҙ ҡапҡыланы ла, дүрт телем икмәк, бер шешә һөт алып, ишеккә йүнәлде...

## ХӘЛИТТЕҢ ТӘҠДИМЕ

Әмилә менән Хәлит Батырҙы инде ун һигеҙ сәғәт тирәһе эҙләй. Улар һикһән етенсе, һикһән һигеҙенсе, һикһән туғыҙынсы йылдарҙы тулыһынса тиерлек ҡарап сыҡтылар. Әммә шул йылдарҙың берәй көнөндә, берәй урынында Батырҙы күрмәйенсә үтеп китмәнек тип әйтә алмайҙар. Сөнки ваҡыт тигән нәмәнең осо ла, ҡырыйы ла юҡ икән. Кеше хәҙер бында булһа, киләһе минутта уның әллә ҡайҙа сығып китеүе мөмкин. Бар табып ҡара һин ошонан һуң уны! Шуға күрә лә Батырҙың да Әмилә менән Хәлит тикшергән йылдарҙың берәй минутында тороп ҡалыуы бар. Ә бит малай менән ҡыҙға туҡһан өсөнсө йылға тиклемге йылдарҙың энәһенән ебенә тиклем тикшерергә кәрәк. Ә уларҙың барлығы алты ғына сәғәт ваҡыты ҡалды. Шунан һуң Батыр ултырған ҡара ҡумтаның көсө бөтә. Ә был инде Батырҙың да икенсе заманда йәшәр биоэнергияһы кәмей башлаясаҡ тигән һүҙ...

— Юҡ, — тине бер мәл Әмилә өмөтө өҙөлгән тауыш

менән. — Беҙ былай эҙләһәк, Батырҙы ғүмерҙә лә таба алмайбыҙ.

— Улайһа, нимә эшләйек? — Хәлит ҡара ҡумтаның иҙәненә ултырҙы ла тынып ҡалды.

— Белмәйем, уйларға кәрәк. Батыр бит бер кемгә лә күренмәй йөрөмәйҙер...

— Күренәлер ҙә... Ул кеше беҙгә әйтәме ни...

— Әйтерҙәй кешене эҙләргә кәрәк, — тине ҡыҙ.

— Кем ул?.. Әгәр берәүһе Батырҙы танып ҡалһа икән...

— Танымаһа ла, ҡара ҡумта менән осоп йөрөгәнен күрһә...

— Ул күренәме ни? — тип һораны Хәлит. — Беҙ бит бына йәшенеп кенә килеп гараждар артына ултырҙыҡ та... Бер кем күрмәне.

— Көндөҙ күренмәй, тиерлек, — тине ҡыҙ. — Көндөҙ ул күҙгә ташланмай ҙа... Ә бына төнөн!.. Төнөн ул ҙур түңәрәк ут булып күренә.

— Түңәрәк ут?! — Хәлит терт итеп ҡалды.

— Эйе. — Ҡыҙ малайға боролоп ҡараны. — Ә ниңә аптырайһың?

— Белдем Батырҙы нисек табырға! — Хәлит урынынан ырғып торҙо.

— Нисек?

— Бынан ике-өс йыл элек ҡала гәзитендә Сибай өҫтөндә осоп йөрөгән түңәрәк ут хаҡында яҙғандар ине! — Әмилә үҙенең тулҡынлана башлауын тойҙо:

— Ысынды әйтәһеңме?

— Әлбиттә! Хатта ул ут ҡала уртаһына төштө, тип яҙҙылар шикелле. Туҡта әле! Уның эсенән... — Хәлит туҡтап ҡалды.

— Нимә?

— Әгәр яңылышмаһам... уның эсенән бәләкәй генә кәүҙәле кеше сыҡты, тигән һүҙҙәр бар ине. Эйе, шулай!

— Ул бит Батыр булған! — Әмиләнең йөҙө яҡтырып китте. Әммә киләһе минутта уны хәүеф солғап алды. — Ә һин бутамайһыңмы? Ысынлап шулай тип яҙылғайнымы?

— Әгәр бутайым икән... Беҙ хәҙер ҡала гәзитенең редакцияһына барабыҙ ҙа ул гәзитте табабыҙ!

— Дөрөҫ! Әгәр ул ысынлап та Батыр хаҡында икән, беҙ уның ниндәй көндә, ниндәй сәғәттә йөрөгәнен беләбеҙ!

Хәлит менән Әмилә шунда уҡ бөгөнгө көнгә, туҡһанынсы йылдың июненә, ҡайттылар ҙа ҡала гәзитенең редакцияһына юл тоттолар.

Бына малай менән ҡыҙҙың алдында гәзиттең һуңғы өс йылғы подшивкалары. Хәлит — һикһән етенсе йылғы гәзиттәрҙе, ә Әмилә һикһән һигеҙенсе йылғыларын ҡарай башланы...

Ярты сәғәттән Хәлит ҡысҡырып ебәрҙе:

— Таптым! Бына!

Гәзиттең дүртенсе битендә: «Ҡала өҫтөндә — осоусы тәрилкә», тигән мәҡәлә баҫылған. Хәлит менән Әмилә уны йотлоғоп уҡырға тотондо.

«25-се сентябрҙә киске сәғәт унда беҙҙең ҡала халҡы ғәжәп бер күренештең шаһиты булды. Сибай өҫтөндә сәғәттән ашыу утлы йомғаҡ осоп йөрөнө. Ҡарап тороуға уның диаметры өс метр самаһы, төҫө — алһыу-зәңгәр.

Ун беренсе ярты тирәһендә ут йомғағы ҡала эсенә төштө. Уның ергә ултырғанын күреүселәр табылды. Шофер Сәлих Хөснуллин һөйләй:

— Мин йоҡларға йыйына инем. Ҡыҙым Юлиә: «Атай, тиҙ бул, һауала әллә нәмә осоп йөрөй», — тигәс, тышҡа сыҡтым да ҡала өҫтөндә осоп йөрөүсе ут йомғағын күрҙем. Бер мәл осоусы «тәрилкә» беҙгә яҡынлаша башланы. Ҡарап тороусы халыҡтың ҡото осто. Ул арала ут йомғағы гараждар артына төшөп юғалды. Беҙ, бер нисә кеше, шунда табан йүгерҙек. Ҡараһаҡ, ут йомғағы гараждар артында ята. Ҡапыл уның ишеге асылып китте лә, эсенән бер кеше килеп сыҡты. Ҡарап тороуға уның буйы ун өс-ун дүрт йәшлек балаларҙыҡы кеүек. Кейемдәре сәйер генә — балаларҙың шорты менән майкаһын хәтерләтә. «Тәрилкә»нән сыҡҡан кеше беҙҙе күрҙе лә, бер аҙ аптырап торҙо, шунан ҡапыл ғына кире машинаһына инде. Шунда уҡ ут йомғағы һауаға күтәрелде һәм күҙҙән юғалды...»

Гәзиттә был ғәжәп ваҡиғаның башҡа шаһиттарының да һөйләгәндәре баҫылған. Әммә Хәлит менән Әмилә мәҡәләне ары уҡып торманы. Иң мөһиме, улар Батырҙың ҡайһы ваҡытта икәнлеген белделәр.

— Хәҙер шул төнгә барабыҙ ҙа... — тип хыялланды Хәлит. — Батырҙы алып ҡайтабыҙ.

— Ә был гәзиттәр менән ни эшләрһең?

— Нисек!

— Әгәр беҙ Батырҙы ҡала өҫтөндә осорға бирмәһәк, гәзиттә яҙылғандар юҡҡа сығасаҡ!

— Сыҡһын!

— Их, һин! Күпме әйттем! Йә, ярай! Киттек! Беҙ ул төнгә түгел, шул көндөң иртәгәһенә барабыҙ. Батыр хәҙер шунда!

— Ә нисек табырбыҙ?

— Эҙләйбеҙ! Ваҡыт билдәле, урыны әйтелгән. Әммә Әмилә анһат ҡына уйлаһа ла, ҙур ҡалала башҡаларҙан йәшенеп йөрөгән Батырҙы табыуы еңелдән түгел ине.

Ҡара ҡумтаны шул уҡ гараждар артына ҡуйҙылар ҙа Батырҙы икеһе ике яҡтан эҙләргә булдылар.

Әмилә тәүҙә Батыр йәшәгән өй янына барҙы. Ҡыҙ һиҙенә: тиҙҙән, бер нисә минуттан, улар Батырҙы табасаҡ, ҡыҙ бер

йыл күрмәй торғандан һуң малайҙы осратасаҡ. Был бер ҡыуаныс булһа, икенсеһе — Батырҙы ҡотҡара бит улар!..

Ҡыҙға малай киләһе секундта анау өй мөйөшөнән ҡаршы килеп сығыр төҫлө. Әгәр шулай көтөлмәгәндә осрашһалар, ни эшләрҙәр икән? Моғайын, икеһе лә юғалып ҡалыр, ни өндәшергә белмәҫ. Тик... Әмилә бик тырышып Батырҙы эҙләп йөрөй ҙә ул. Ер аҫтындағы станцияның етәксеһе быны белеп ҡалһа, ҡыҙҙы бөгөн үк кире Ур планетаһына ҡайтарып ебәрәсәк һәм ҡыҙға Ергә килеү ғүмергә тыйыласаҡ. Әмилә быны яҡшы аңлай, шуға ҡарамай, бөтә донъяһын онотоп Батырҙы эҙләй. Ҡыҙ былдай күңелһеҙ нәмәләр хаҡында уйламаҫҡа тырыша. Иң мөһиме — улар Батырҙы таба, ҡотҡара. Алда уларҙы шундай ҡыуаныслы осрашыу көтә...

Тиҙҙән Әмилә менән Хәлит йәнә ҡара ҡумта янында осрашты. Икеһе лә Батырға юлыҡмаған...

— Әйҙә, ҡаланан ситкәрәк сығабыҙ ҙа бинокль аша күҙәтәбеҙ, — тип тәҡдим яһаны Хәлит. — Ул бит яҡшы күрһәтә. Батырҙың үҙе булмаһа, машинаһы күҙгә эләгер әле...

Ҡара ҡумта ҡаланан ситкә осто. Ҡыҙ машинаны йөрөтә, малай бинокль аша тирә-яҡты байҡап бара.

Ирәндек тауҙарына ултырғас, Әмилә менән Хәлит алмашлап ҡаланы күҙәтергә тотондо. Бинокль яҡшы күрһәтә. Әгәр Батыр килеп сыҡһа, йәки ҡара ҡумта ҡала өҫтөндә күренһә, һис шикһеҙ, улар Хәлит менән Әмиләнең күҙенә эләгәсәк...

Батырҙың ҡара ҡумтаһы һис көтөлмәгән яҡтан, Хәлиттәрҙең машинаһы ултырған тау артынан килеп сыҡты. Уны бинокль аша ҡаланы күҙәткән Хәлит түгел, ә тәҙрә аша тауҙарға ҡарап торған Әмилә күреп ҡалды.

— Хәлит! — тип ҡысҡырып ебәрҙе ҡапыл ҡыҙ. — Ҡара әле!

Малай тәҙрәгә һыйынды. Уларҙан йөҙ илле метр алыҫлыҡта ергә тейә яҙып ҡара ҡумта осоп бара.

— Батыр бит был! — Шатлығынан Хәлит ырғып китте. — Тиҙ бул! Ҡыуып етәйек!

Әмилә ҙур тиҙлек менән үҙҙәренең машинаһын теге ҡара ҡумта артынан алып китте. Бына улар бер-береһенә яҡынлашты. Батыр Әмилә менән Хәлиттең аппаратын күрҙе шикелле, аҫҡа төшә башланы. Былар уға эйәрҙе.

— Тиҙерәк! Тиҙерәк! — тип ашыҡтырҙы Әмиләне тәҙрәнән күҙен ала алмаған Хәлит. — Унда — Батыр! Таптыҡ бит, Әмилә, таптыҡ!

Шунан Хәлит ҡыуанысынан ни эшләргә белмәйенсә ҡыҙҙы ҡосаҡлап алды, ә инде машина ергә ултырыу менән түҙемһеҙләнеп ишекте тартҡыларға кереште:

— Ас, ас тиҙерәк!

Ишек асылыу менән, ул тышҡа ташланды.

Әмилә лә үҙенең нык тулҡынланғанын тойҙо. Ҡапыл аяғының быуындары йомшарып китте. Ысынлап та Батырҙы таптылармы икән ни? Хәҙер осрашырҙармы? Ошо минутты күпме түҙемһеҙләнеп көттө Әмилә, күпме хыялланды! Ҡайһы саҡтарҙа улар ғүмере осраша алмаç кеүек булып китә ине. Уйлап ҡараһаң, икеһе Йыһандың ике осонда йәшәй бит! Шуға ҡарамай ҡыҙ өмөтләнде, ышанды! Һәм бына — Батыр унан биш-алты ғына аҙым алыçлығында. Ошо ишек артына сығырға ғына кәрәк һәм улар осраша!

Ошо ерҙә ҡыуанысынан йөҙө ҡояш кеүек яҡтырған Хәлит йүгереп килеп инде:

— Әмилә! Нимә ҡарап тораһың? Унда — Батыр! Әйҙә!

Хәлит нисек килеп инһә, шулай йүгереп сығып китте. Әмилә кеçәһенән көҙгөһөн алып сәстәрен рәтләне, үҙенә-үҙе бер йылмайып ҡуйҙы һәм, тәрән итеп бер тын алғандан һуң, еңел аҙымдар менән тышҡа атланы...





# ӘҘӘРЛӘҮ

## ӘМИЛӘ МЕНӘН БАТЫРҘЫ ТОТОРҒА!

— Булмаç! — тине Ер аçты станцияһының етәксеһе асыу менән. — Был бит инструкцияны боҙоу! Уның өсөн ни буласағын Әмилә яҡшы белә!

— Ҡыҙғанысҡа ҡаршы — дөрөç! — Станцияның махсус хеҙмәткәре ҡулын йәйҙе. — Ҡыҙ кисә төн станцияға ҡайтманы. Баҡһаң... ул ҡара ҡумта менән...

— Ҡара ҡумта! — Етәксенең асыуы уғата ҡабарҙы. Уның Ергә килеп эшләй башлауына бер ай ҙа үтмәне. Һәм бына шундай хәл! Әгәр был ваҡиғаны Урҙағылар ишетһә, яҡшылыҡ көтмә! — Икенсе ҡара ҡумтаға ултырығыҙ ҙа табығыҙ үҙен!

— Тәүге машинаны Ер малайы урланы, икенсеһен — Әмилә!

— Табырға! Тоторға икеһен дә! — Етәксенең тауышы ҡаты ғына сыҡты. — Бөгөн үк Әмиләне Урға оҙатырға! Һәм уға Урҙан ситкә осоуҙы мәңгегә тыйырға!

— Тотоуы ауыр. — Махсус хеҙмәткәрҙең тауышы бойоҡ. — Әммә беҙ бөтә көсөбөҙҙө һаласаҡбыҙ... Улар ошо ғаса үткән ваҡытта ине. Әммә тиҙҙән бөгөнгө көнгә ҡайтырға тейештәр.

— Ә теге малай? Ул беҙҙең станция хаҡында беләме?

— Әмилә уға барыһын да һөйләгән.

— Яҡшы, — тине етәксе. — Миңә бер Ер кешеһен Урға оҙатырға бойороҡ бирелгән. Унда ерҙә йәшәүсенең тәнен киҫеп-ҡырҡып тикшерергә йыйыналар. Уларҙың организмы беҙҙекенән айырыламы, юҡмы? Ошо малайҙы оҙатабыҙ Урға.

— Беҙгә уны тере көйө тоторғамы? Әллә үлтерергә мөмкинме?

— Тере көйө тотоғоҙ. Ә Әмиләһен махсус тулҡын аша үткәрергә! Ул малайҙы ғына түгел, Ерҙә булғанлығын да онотһон!

— Эшләрбеҙ! — Махсус хеҙмәткәр станция етәксеһенең кабинетынан етеҙ аҙымдар менән сығып китте.

— Бар таҫыллылығығыҙҙы, көсөгөҙҙө һалығыҙ, әммә бөгөн үк тотоп минең янға килтерегеҙ үҙҙәрен!

Был өс кеше менән беҙгә алда йыш ҡына осрашырға тура киләсәк. Шуға улар тураһында тулыраҡ әйтеп китәйек. Быларҙың һәммәһе лә йәш кеше, ә бер-береһенән фәҡәт тышҡы ҡиәфәттәре менән генә айырыла. Берәүһе — нәҙек оҙон буйлы, икенсеһе — тәбәнәк кенә, өсөнсөһө — уртаса кәүҙәле, әммә үгата йыуан. Шуға ла беҙ уларҙы «Һонтор», «Тәпәш», «Йыуан» тип кенә атарбыҙ.

Төркөмдөң етәксеһе итеп Йыуан тәғәйенләнде.

Ярты минут та үтмәне, был өсәү Батыр менән Әмиләне тотоу өсөн ең һыҙғанып эшкә кереште...

## СТАНЦИЯНАН НИСЕК СЫҒЫРҒА?

Ә был ваҡытта үҙҙәренә ниндәй ҡурҡыныс янағанын белмәгән Әмилә, Батыр һәм Хәлит ике ваҡыт машинаһына ултырып үткән замандан бөгөнгө көнгә ҡайтып килә ине. Хәйер, «бер ни белмәгән», тип әйтеү дөрөҫ тә түгелдер. Сөнки ҡыҙҙы күптән бер уй борсой: нисек станцияға ҡайтырға? Унда ҡара ҡумталарҙың юғалыуын белгәндәрме? Әгәр белһәләр, нисек итеп ваҡыт машиналарын һиҙҙермәй генә урындарына илтеп ҡуйырға? Быныһы бер ҡайғы. Йәнә... Әгәр Батыр менән үҙенең мөнәсәбәтен уйлаһа, һорауҙар тағы күбәйә. Тиҙҙән Әмиләгә Урға ҡайтырға ваҡыт етә. Шунан нисек йәшәрҙәр? Батырҙың Урға бара алмаясағы көн кеүек асыҡ. Ә Әмилә үҙе ҡабаттан килеп сыға алырмы Ергә? Ә килә алмаһа? Мәңгегә хушлашырҙармы? Юҡ, юҡ! Быңың булыуы мөмкин түгел!..

Ҡыҙ ҙа, малай ҙа был хаҡта уйламаҫҡа тырыша. Ярай, берәй әмәле килеп сығыр әле. Хәҙергә улар бит бергә... Бөгөнгө көнгә ҡайтыу ҡыйындан булманы. Машиналарҙың «Бөгөн» тигән кнопкалары бар икән. Шуға баҫыуҙары булды,

ике малай менән ҡыҙҙы тейәгән ике ҡара ҡумта бөгөнгө көндә Ер аҫты станцияһының коридорында тора ине.

Өсөһө лә ашығып ҡара ҡумталарҙан сыҡты. Коридорҙа һис кем күренмәй.

— Әйҙәгеҙ, — тине Эмилә тирә-яғына ҡаранып. — Мин һеҙҙе тиҙ генә станциянан сығарып ебәрәм.

— Ә ҡара ҡумталар? — Хәлит юл уртаһында торған ваҡыт машиналарына ымланы.

— Торһондар! Уларҙы табасаҡтар һәм урынына керетәсәктәр. Ә беҙҙең ваҡыт юҡ!

Улар ҡабаланып коридор буйлап атланы. Күп тә барманылар, ҡыҙ ҡапыл туҡтап ҡалды:

— Туҡтағыҙ! Мин бит станцияның ишеген астырыусы паролде белмәйем!

— Ә быға тиклем нисек астыра инең? — тип һораны барыһын да онотҡан Хәлит.

— Паролде көнөнә ике тапҡыр алмаштырып торалар! — Ҡыҙ саҡ ҡына уйланды. — Хәҙер былай итәбеҙ. Һеҙ минең бүлмәлә ултырып тороғоҙ. Ә мин станция етәксеһенә барып паролде белеп киләм.

— Һине тотоп алһалар? — тип шикләнде Хәлит.

— Ниңә тотһондар? — Эмилә йылмайып маташты. — Мин бит һеҙҙең кеүек Ер кешеһе түгел. Ярай, ҡурҡмағыҙ. Мин — тиҙ генә.

Һиҙҙерергә теләмәһә лә, Эмилә лә нык борсола. Уның юғалып йөрөүен һиҙгәндәрме? Ҡара ҡумталарҙың ғәйеп булыуына Эмиләнең ҡыҫылышы барлығын беләләрме? Әгәр тойомлаһалар... Был турала уйлауы ла ҡурҡыныс... Ҡыҙҙы шунда уҡ ҡулға аласаҡтар, Ер тураһында, Батыр менән Хәлит тураһында бар белгәндәрен онотторасаҡтар һәм Урға оҙатасаҡтар! Һәм ҡыҙға Урҙан ситкә осоу тыйыласаҡ. Мәңгегә!.. Юҡ, юҡ! Эмиләнең ҡайҙа йөрөгәнлеген белмәйҙәрҙер! Ҡайҙан белһендәр? Бер кем дә күрмәне. Теге робот ҡына...

— Шулай ҙа һаҡ бул, — тине Батыр. — Ҡурҡыныс тоя башлаһаң, шунда уҡ ҡас!

— Борсолмағыҙ! — Эмилә йылмайҙы. — Бөтәһе лә һәйбәт буласаҡ.

Улар боролдо ла Эмиләнең бүлмәһенә табан атлай башланы. Һаҡ ҡына киләләр. Берәйһе тап була ғына күрмәһен! Нисек тә бер кемгә лә күренмәйенсә сығып китәһе ине...

Бына ҡыҙҙың бүлмәһе... Эскә ингәс, өсөһө лә еңел тын алып ҡуйҙы.

— Һин оҙаҡлама, — тине Батыр.

— Юҡ, юҡ! Мин тиҙ генә! — Ҡыҙ юғалды. Малайҙар икеһе ике мөйөштә өндәшмәй генә ултыра.

Һөйләшер һүҙ ҙә юҡ. Хәйер икеһенең дә башында бер уй: бынан имен-аман сығып китеп булырмы, юҡмы? Әгәр тотолһалар? Хәлит бигерәк тә ныҡ ҡурҡа. Уларҙы бер нәмә эшләтеп ҡуймаһындар. Йәки Урға бөтөнләйгә алып китһәләр? Ул саҡта Хәлиттең ата-әсәһе ни эшләр?

Улар бит ҡайғыһынан үләсәк. Хәлит үҙе лә атайһыҙ, әсәйһеҙ бер көн дә йәшәй алмаҫ...

Батырҙы икенсе нәмә борсой. Уларҙы тотоп, махсус тулҡын аша үткәрһәләр, Батыр менән Әмилә бер-береһе хаҡында онотасаҡ. Ә малай өсөн бөгөнгө көндә ерҙә генә түгел, бөтә Йыһанда Әмиләнән дә яҡшыраҡ, ҡәҙерлерәк кеше юҡ. Әгәр уны юғалтһа, йәшәүҙең йәме, тормоштоң мәғәнәһе булмаясаҡ...

Байтаҡ ваҡыт үтте. Әмилә юҡ та юҡ. Минут һайын малайҙарҙың күңелендәге хәүеф артҡандан-арта бара. Ниңә ҡыҙ ҡайтмай? Тотолдомо? Бына Әмиләнең сығып китеүенә сәғәттән ашыу ваҡыт үтте, ә ҡыҙ һаман ҡайтмай...

## ӘМИЛӘ ТОТОЛА

Әмилә үҙ бүлмәһенән сыҡты ла тура станция етәксеһенең кабинетына табан атланы. Күңелендә әллә ниндәй тынысһыҙлыҡ. Һиҙенә ҡыҙ: алда уны етди һөйләшеү көтә, ҡурҡыныс көтә. Шул уҡ ваҡытта ҡыҙ был тойғоға ышанырға ла теләмәй. Юҡ, юҡ! Станция етәксеһе бер ни ҙә белмәй! Хәҙер инеп анһат ҡына паролде беләсәк һәм малайҙарҙы станциянан сығарып ебәрәсәк. Шунан Батыр менән ваҡытлыса хушлашып, Урға ҡайтып китер. Берәй йыл үткәс, әмәлен табып, йәнә Ергә килеп сығыр, йәнә осрашырҙар... Эйе, юҡҡа борсола, юҡҡа хәүефләнә!..

Бына Әмилә станция етәксеһенең кабинетына килеп етте һәм үҙе хаҡында хәбәр итте. Шунда уҡ ишек асылып китте. Ҡыҙ эскә атланы.

— Был һинме ни? — Етәксе йылмайҙы. — Ҡайҙа юғалып йөрөнөң?

— Ер өҫтөндә булдым. Кешеләрҙең тормошо менән таныштым.

— Һәйбәт. — Был ваҡытта етәксе, ҡыҙға һиҙҙермәй генә, өҫтәл аҫтындағы кнопкаға баҫҡайны. Ул оҙаҡҡа һуҙмайынса, ҡыҙҙы хәҙер үк ҡулға алырға булды. Уның ярҙамында ер өҫтөндәге теге малайын табырҙар. Махсус тулҡын аша үткәргәндән һуң, икеһен дә Урға алып китерҙәр...

— Миңә Ер өҫтөнә сығыу өсөн паролде белергә кәрәк, — тине Әмилә.

— Пароль? Ә нимәгә ул? Һин бит яңы ғына Ерҙән төштөң.

Әмилә былдай һорауҙы көтмәгәйне. Ысынлап та сәйер килеп сыға: Ерҙән төш тә шунда уҡ кире китергә маташ... Ҡыҙ ҡабаланып уйланы.

— Мин... мин ашарға ғына ҡайттым...

— Ашаныңмы?

— Эйе.

— Ғәфү ит, мин тикшереп ҡарарға тейешмен. — Етәксе ҡаршылағы пульттың бер кнопкаһына баҫты. Шунда уҡ экранда төрлө һандар барлыҡҡа килде. Улар Әмиләнең инде икенсе көн станцияла ашамағанлығын һөйләй ине. — Бындағы информация бөтөнләй икенсе төрлө.

— Мин... мин... — Әмилә үҙенең тоҙаҡҡа эләгә барыуын тойҙо. — Эйе, мин ашаманым. Мин һеҙҙе алданым.

— Ниңә? Шулай алдашҡас... Бәлки, һин ерҙә ни менән шөғөлләнеүеңде лә йәшерәһеңдер?

— Юҡ! — Әмилә ни әйтергә лә белмәне. — Ерҙә мин бер ни ҙә эшләмәнем. Мин... тик йөрөнөм... Мин кешеләрҙе күҙәттем...

— Шулай ҙа аңлат әле, ни өсөн станцияға ҡайтыу менән кире Ер өҫтөнә сығырға маташаһың?

Күрәһең, етәксе барыһын да белә. Юғиһә буш ҡына нәмәгә шул тиклем бәйләнмәҫ ине. Хәҙер ни эшләргә? Ул бит паролде әйтмәйәсәк. Тимәк, бында тороу файҙаһыҙ. Тиҙерәк сығып китергә!

— Бында күңелһеҙ, — тине ҡыҙ тыныс тауыш менән. — Шуға ла иренән Ер өҫтөнә күтәрелергә иткәйнем дә... Тик, һеҙ ҡаршы булғас, ярай, сыҡмаҫмын. Хушығыҙ...

Әмилә ишек янына барып торҙо. Йәнәһе, асығыҙ, мин китәм.

Ошо ерҙә ишек башындағы лампа тоҡанды. Был — теге яҡтан кемдеңдер етәксегә килгәнлеген аңлата ине.

— Туҡта! — тине етәксе. — Ашыҡма. Минең һиңә тағы бер һорауым бар. Әлегә ситкә китеп тор. Унда кемдер килде.

— Ер — йәшел планета, — тине етәксе. Шунда уҡ ишек асылды.

Бүлмәгә станцияның махсус хеҙмәткәре килеп инде. Ул Әмиләне күргәс шаҡ ҡатты.

— Әмилә — бында?! Тотолдомо ни?

Был һүҙҙәрҙе ишетеү менән Әмилә барыһын да аңланы. Тимәк, уның ҡайҙарҙа булғанлығын, кем менән йөрөгәнлеген беләләр! «Тотолдомо ни?» Юҡ, Әмилә тотолманы әле! Ҡасырға була! Унда бит Батыр менән Хәлит Әмиләне көтә! Малайҙарҙы ҡотҡарырға кәрәк!

Ҡыҙ ишеккә ташланды.

— Ер — йәшел планета!

Әммә етәксе менән хеҙмәткәр бигерәк яҡын торалар ине шул. Ишек асылырға өлгөрмәне, улар ҡыҙҙы эләктереп тә алды.

— Ҡайҙа ҡасаһың?

— Ебәрегеҙ! Ебәрегеҙ мине!

— Юҡ, — тине етәксе һалҡын тауыш менән. — Һине ҡулға алабыҙ.

— Ни өсөн? Хаҡығыҙ юҡ! — тип ҡысҡырҙы ҡыҙ хеҙмәткәрҙең ҡулынан ысҡынырға маташып. — Ебәрегеҙ!

— Һин инструкцияны боҙҙоң! — Етәксе ҡаты итеп өндәште. — Һин Ер кешеләре менән осрашҡанһың! Уларға станция тураһында һөйләгәнһең!

— Кем әйтә? Мин бер кем менән дә осрашманым!

— Хәҙер былай эшләйбеҙ. — Етәксе хеҙмәткәренә боролдо. — Уны махсус тулҡын аша үткәреп, Ерҙә күргән-белгәндәрен онотторабыҙ.

— Юҡ, юҡ! — Әмилә ҡурҡып артҡа сигенде. Ул Батырҙы оноторға теләмәй! Әгәр уның күңеленән иң ҡәҙерле нәмәне йолҡоп алалар икән... Ни өсөн йәшәргә ул саҡта? — Юҡ! Һеҙ быны эшләмәйәсәкһегеҙ!

— Ә ниңә шулай борсолаһың? — тип йылмайҙы етәксе. — Әгәр ҙә һин Ерҙә бер кем менән дә осрашмағанһың икән, һин ҡурҡмаҫҡа тейешһең.

— Юҡ! Барыбер юҡ! — тип ҡысҡырҙы Әмилә, үрһәләнеп. — Мин ҡаршы!

Ҡыҙ, хеҙмәткәрҙең ҡулынан ысҡынырға тырышып, тартҡысланырға кереште.

Ул арала етәксе кабинетына Һонтор, Тәпәш һәм Йыуан килеп етте.

— Тотоғоҙ үҙен! — тип бойороҡ бирҙе хеҙмәткәр. Коридор буйлап күп тә атламанылар, бер ишеккә төртөлдөләр. Бында махсус тулҡын сығарыусы машина. Эскә инделәр.

— Һинең менән булған малай ҡайҙа йәшәй? Хәҙерге минутта ҡайҙа ул? — тип һораны хеҙмәткәр.

— Бер ниндәй ҙә малайҙы белмәйем. — Әмилә аҙаҡҡаса торорға булды. Шулай ҙа ул ышанырға теләмәй. Ысынлап та уны тулҡын аша үткәрерҙәрме? Батыр менән Хәлитте онотторорҙармы?

— Ярай, улайһа, — тип көлдө хеҙмәткәр. — Бына хәҙер һин уны ысынлап та белмәҫһең.

Машинаны тоҡандырҙылар. Тигеҙ генә геүләү ишетелде, лампочкалар емелдәне. Бер мәл машинаның ишеге асылды...

— Эскә ин! — тине хеҙмәткәр Әмиләгә.

## КҮҘӘНӘК ПУШКАҺЫ

Станция етәксеһе үҙенең ярҙамсыһын саҡырып алды:

— Күҙәнәк пушкаһы әҙерме?

— Күптән, — тине ярҙамсы. — Һеҙҙең бойороҡто ғына көтәбеҙ.

— Хайуандарҙы бөгөн оҙатабыҙ. Ике мең тәлмәрйен менән мең сыйырсыҡ станцияла тупланған. Ә Золо планетаһындағы ҡабул итеү станцияһын тикшерҙегеҙме? Ул ни хәлдә?

— Тикшерҙек. Һәйбәт...

— Улайһа, әҙер булығыҙ, — тине етәксе. — Ярты сәғәттән Золо станцияһына тәлмәрйендәр менән сыйырсыҡтарҙы оҙатыу операцияһын башлайбыҙ. Барығыҙ!

Етәксе менән уның ярҙамсыһы араһында булған был сәйер һөйләшеүҙе аңлатыу өсөн шуны әйтергә кәрәк.

Беҙҙең Йыһан ситендә Золо тигән планета бар. Ундағы цивилизация бик түбәнге кимәлдә. Золола әле кеше юҡ. Планетала Ер менән Ур өсөн бик боронғо иҫәпләнгән диназавр менән ихтиазавр һымаҡ хайуандар йәшәй.

Күптән түгел Золола көслө ер тетрәүе булған. Шул арҡала унда ике төрлө йәнлек — тәлмәрйендәр һәм сыйырсыҡтар юҡҡа сыҡҡан. Был киләсәктә нимәгә килтерер? Компьютерға һалғайнылар ошо һорауҙы, машинаның һығымтаһы ҡыуанырлыҡ булманы. Баҡһаң, тәлмәрйен менән сыйырсыҡтың ҡырылыуы арҡаһында планеталағы тәбиғәттең үҫеше бөтөүгә табан, тупикка табан йүнәлгән. Йәнә илле мең йылдан ошо сәбәпле планетала тәбиғәт үләсәк, тормош бөтәсәк. Бына бит нисек! Ике генә төр йәнлектең юҡҡа сығыуы ла хатта планетаның тәбиғәтен бөтөрә!

Йыһанда цивилизациялар аҙ. Шуға күрә Ур кешеләре морон төрткән цивилизацияның әкренләп һәләк булыуына ғәмһеҙ генә ситтән ҡарап тора алмай әлбиттә. Уларға Золо планетаһының тәбиғәтенә ярҙам итергә кәрәк. Бының өсөн алыҫ планетаға тиҙ генә тәлмәрйендәр һәм сыйырсыҡтар ташларға кәрәк. Йәнлектәрҙең күпме кәрәклеген компьютер һанап сығарҙы.

Шуныһы оло бәлә: Золо планетаһы Урҙан бик алыҫ! Әгәр карап менән осорһалар, был — йылға яҡын ваҡытты ала. Йыл буйына ике мең тәлмәрйен менән бер мең сыйырсыҡты тәрбиәләүе аңһат түгел. Әммә алға киткән цивилизация бында ла сараһын тапты.

Күптән түгел Ур планетаһында күҙәнәк пушкаһын уйлап сығарҙылар. Ул үҙенең эсенә индерелгән нәмәне йәки йән эйәһен күҙәнәктәргә тарата ла, был күҙәнәктәрҙе бер нисә минут эсендә йыһан төпкөлөндә ятҡан планеталарға ебәрә ала. Ә унда махсус станция сигналдарҙы ҡабул итә

һәм күҙәнәк пушкаһы тарҡатҡан әйберҙе йәки йән эйәһен «һә» тигәнсе киренән йыя. Шулай итеп, хәҙер алыҫ араны үтеү өсөн карап кәрәкмәй, күҙәнәк пушкаһы йыһандың теләһә ҡайһы нөктәһенә нимә кәрәк шуны ебәрә ала. Әлегә Ур менән Ер араһын карапта осоп үтәләр, сөнки бындай сағыштырмаса яҡын араға шулай арзанға төшә.

Тәлмәрйендәр менән сыйырсыҡтарҙы алыҫ планетаға Ерҙән осороуҙың сәбәбе шунда: Ер Ур менән Золо планеталары араһында ята. Шулай ҙа йәнлектәрҙе алыҫ планетаға Ерҙән оҙатыу уңайлыраҡ.

Йәнлектәрҙе оҙатыу ваҡыты яҡынлашты. Улар йәшел төҫтәге махсус йәшниктәргә һалынды. Әммә етәксе оҙаҡлай ине. Уны саҡырыу өсөн ярҙамсы тегенең кабинетына йүнәлде.

## «ҺЕҘ КЕМДӘР?»

Батыр менән Хәлиттең өмөтө тамам өҙөлдө. Әмилә сығып киткәнгә инде бер сәғәттән ашты. Ҡайҙа йөрөй ул? Паролде белешергә генә киткәйне бит. Тотолдомо? Ул саҡта... Ул саҡта ни эшләргә? Ярай әле бүлмәнән нисек сығырға беләләр. Ләкин коридорҙа ҡайҙа барырҙар? Барыбер Әмиләһеҙ станциянан сыға алмаясаҡтар бит...

— Тотолған, тотолған, Әмилә! — тине Хәлит улай-былай атлап. — Хәҙер килеп беҙҙе лә тоторҙар!.. Шунан...

— Нимә — шунан?

— Сығарып ебәрһәләр ярай ҙа... Урҙарына алып китһәләр...

— Унда ни эшләтһендәр беҙҙе?

— Уларға төрлө тәжрибәләр өсөн кеше кәрәкмәй тиһеңме? Берәй яңы дарыуын беҙҙә һынай башларҙар. Мине юғалтһа әсәйем...

Хәлиттең тауышы ҡалтыранды.

— Ярай, илама! — тине Батыр.

— Илаған кеше юҡ та... — тине Хәлит. Әммә үҙенең тауышы һаман да бик бойоҡ сыҡты.

— Әйҙә бынан сығабыҙ! — Батыр ишеккә йүнәлде.

— Туҡта! Унда ни эшләрбеҙ? Һин бит барыбер ер өҫтөнә сығарыусы паролде белмәйһең!

— Ишек янына йәшенәбеҙ. Ҡасан да булһа берәйһе күтәрелер бит өҫкә. Бәлки, беҙ ҙә уға ҡушылып...

Башҡаса сара юҡ. Хәлит Батырға эйәрҙе. Әммә улар коридорға сығырға өлгөрмәне. Ҡапыл ишек асылып китте лә, бүлмәгә Әмилә килеп инде.

Малайҙар ҡыуанышып уға ташланды:

— Ҡайҙа йөрөнөң?

— Ниңә шулай оҙаҡ?
— Паролде белдеңме?
Әммә Әмилә малайҙарҙы тамам шаҡ ҡатырҙы. Ҡыҙ, көтмәгәндә, ҡурҡкан күҙҙәрен Батыр менән Хәлиткә төбәне лә ишеккә һыйынды: — Һеҙ кем? Нимә эшләйһегеҙ бында?
Бер ни аңламаған Батыр менән Хәлит бер-береһенә ҡарап алды.
— Ярай, шаярма әле! — Хәлит беренсе булып телгә килде. — Ваҡыт юҡ. Тиҙерәк әйтә һал: паролде белдеңме?
— Ниндәй пароль? Кем индерҙе һеҙҙе минең бүлмәгә?
— Һин беҙҙе иҫәргә һанайһыңмы әллә? — Хәлиттең асыуы килә башланы. — Беҙ был баҙҙан сыға алабыҙмы, юҡмы?
— Туҡта әле, Хәлит. — Батыр дуҫын туҡтатты. — Әмилә, тыныслан. Һине махсус тулҡын аша үткәрҙеләрме?
— Үткәрҙеләр икән, ти? Шунан?
— Беҙ һинең дуҫтарың. Ер малайҙары. Беҙҙе оноттороу өсөн үткәргәндәр һине ул тулҡын аша.
Әмилә, һаман да бер ни аңламайынса, малайҙарға ҙур асылған күҙҙәре менән ҡарап тора. Ҡыҙ ниҙер хәтерләргә маташа ине шикелле был минутта. Шулай уҡ иҫләмәҫме? Уның күңелендә малайға ҡарата бер генә лә йылы хис ҡалманымы икән ни? Батыр үҙен упҡын ситенә килеп торғандай тойҙо ошо ерҙә. Уның тамағына әллә ниндәй ҡаты төйөр килеп тығылды...
Ул арала. Батыр менән Әмиләгә Хәлит яҡынлашты:
— Нимә, әллә ул беҙҙе онотҡанмы?
— Эйе, — тине Батыр. — Онотторғандар...
— Нисек инде? — Хәлит ышанырға теләмәне. — Яңы ғына ул ошонда ине. Бөтәһен дә хәтерләй ине. Шул ғына арала...
— Мин һеҙҙе белмәйем, — тине Әмилә ҡапыл. — Хәҙер үк сығып китегеҙ бүлмәмдән!
— Әмилә, туҡта! — тине Батыр. — Һин хәтерләргә тырыш. Мин һинең күптәнге танышың, дуҫың. Мин һинең менән Ур планетаһында булдым. Бер йыл элек кире Ергә ҡайттым. Һин бында мине күреү өсөн килдең. Бөгөн генә ике ваҡыт машинаһы менән үткән заманда булдыҡ. Беҙ... Беҙ күптәнге дуҫтар... — Батырҙың тауышы ҡалтыранды. Әмилә уны мәңгегә оноттомо? Ниңә эшләгәндәр быны рәхимһеҙ әҙәмдәр?! — Беҙ... яҡын дуҫтар. Беҙ бер-беребеҙҙе оноторға тейеш түгел, Әмилә. Зинһар мине хәтерләргә тырыш, Әмилә. Ярраймы?..
Ошо ерҙә ҡыҙҙың күңелен аңлайышһыҙ тойғолар солғап алды. Ҡаршыһында торған малайҙарҙы ул бөтөнләй белмәй. Ләкин бына ошоһоноң, оҙон буйлыһының күҙҙәре!.. Улар шундай таныш, улар шундай яҡын!.. Уларҙы ҡасан-

дыр күргән кеүек!.. Ҡыҙҙың күңеле төбөндә ниндәйҙер тулҡын барлыҡҡа килгән һымаҡ булды ҡапыл. Ул талпынып-талпынып ҡуя. Ошо тулҡын ныҡ ҡына һелкенер ҙә тышҡа килеп сығыр, һәм Әмиләгә барыһы ла аңлашылыр төҫлө. Әммә юҡ шул. Ул тулҡындың тирбәлеүе шул тиклем сибек, шул тиклем бәләкәй, шуға ла ул эстә, күкрәктә ҡала бирҙе...

Ә Әмилә ғәжәпләнгән күҙҙәрен Батырға төбәгән килеш тороуын белде...

— Әмилә, — тине Батыр үҙенең көсһөҙлөгөн тойоп. Әмилә уны онотҡан! Уны танымай! Ошонан да ҡурҡынысыраҡ нимә бар донъяла Батыр өсөн? Хәҙер ни эшләргә? Нисек йәшәргә? Ни өсөн йәшәргә? — Әмилә, ярай... Һин беҙҙе танымайһың... Әммә беҙгә ышанаһыңмы?

Батыр менән Хәлит тынып ҡалды. Бер аҙҙан Әмилә әкрен генә башын һелкте. Йәнәһе, ышанам.

— Исмаһам, исемдәребеҙҙе хәтерләмәйһеңме?

— Юҡ.

— Минең исемем — Батыр.

— Мин — Хәлит.

— Ә мин һеҙҙе ҡайҙан беләм? — тип һораны Әмилә. — Һин ҡасан Урҙа булдың? Һөйлә барыһын да.

— Беҙ былтыр таныштыҡ, — тип башланы һүҙен Батыр...

## ҠАМАУҘА

— Мин хәтерләнем! — тине Әмилә Батыр һөйләп бөткәс. — Хәтерләнем! Тәүҙә һин һөйләгәндәрҙең береһе лә минең менән булмаған кеүек ине. Тик һинең әсәйеңдең үлеме!.. Мин быны ғүмерҙә лә онотмаясаҡмын! Шул иҫемә төштө! Ә уны хәтерләгәс, башҡа ваҡиғалар ҙа күҙ алдыма килә башланы. Урҙа, иҫеңдәме, атайым больницала ятҡанда беҙ, баҫҡысҡа баҫып, икенсе ҡаттағы бүлмәнең тәҙрәһенән ҡараныҡ... Ә һине Урҙан ҡайтарғанда караптар осҡан урынға ҡойма аша индек! Хәтерләнем!

— Ә Ергә мине күреү өсөн килгәнлегеңде иҫләнеңме? — тип һораны Батыр.

— Иҫләнем, — тине ҡыҙ. — Ә һин мине күреү өсөн Өфөнән килдең. Шулай бит?

— Дөрөҫ?

Ошо минутта малайҙар ҙа, ҡыҙ ҙа шатлыҡтарынан һикереп төшөп бейер хәлгә еттеләр. Машина алдай алманы уларҙы! Ул махсус тулҡын ярҙамында кешенең мейеһендәге хәтирәләрҙе юя алалыр. Әммә унда нимәлер ҡала. Күрәһең, тулҡын аша үткән кешегә ваҡиғаларҙы бер-бер артлы һөйләп бирһәң, уның бар хәтирәләре киренән терелә...

Әммә Әмиләнең барыһын да иҫкә төшөрөүенә ҡыуаныу оҙаҡҡа һуҙылманы. Ҡыҙ менән малайҙар йәнә үҙҙәренең ниндәй хәлгә эләккәндәрен хәтерләне. Әйе, малайҙарға нисек тә бынан сығырға кәрәк. Уныһы — бер булһа, Әмиләне иртәгә үк кире Урға оҙатасаҡтары — тағы бер ҡайғы. Етмәһә, ҡыҙға башҡаса Ергә килергә бер ҡасан да рөхсәт итмәйәсәктәр. Тимәк, улар Батыр менән мәңгегә айырылышамы? Был ҡатмарлы ла, ҡурҡыныс та хәлдән ҡотолоу юлын табып булмаҫмы икән ни?

— Тәүҙә беҙгә Ер өҫтөнә сығырға кәрәк, — тине Хәлит.

— Мин бит паролде белмәйем, — тип ҡайғырҙы Әмилә. — Улар хәҙер уны миңә әйтмәйәсәктәр ҙә. Сөнки мин ҡулға алынғанмын. Инструкция боҙған өсөн. Бер көн ошонда тотасаҡтар ҙа... Иртәгә Урға карап китә, шуның менән мине лә ҡайтарып ебәрәсәктәр.

— Улайһа, нимә эшләргә? — Хәлит бер Әмиләгә, бер Батырға ҡараны.

— Станцияның ишеге янына барайыҡ, — тип тәҡдим яһаны Батыр. — Бәлки берәйһенән паролде ишетербеҙ?

Башҡа сара юҡ ине. Коридорға сыҡтылар. Әлегә бер кем дә күренмәй. Ҡыҙ менән малайҙар ашығып алға атланы.

Ярты юлды хәүеф-хафаһыҙ үттеләр. Алда — һуңғы боролош... Шунан станцияның ишегенә лә күп ҡалмай...

Боролошҡа килеп еткәйнеләр тиерлек...

Көтмәгәндә уларҙың ҡаршыһына бер нисә кешене эйәрткән станция етәксеһе пәйҙә булды. Тегеләр уны-быны уйлағансы, Әмилә менән малайҙар боролдо ла кире йүгерҙе. Әммә күп тә үтмәнеләр, бер төркөм роботтар менән йөҙгә-йөҙ осраштылар. Ҡамалдылармы икән ни? Хәҙер нимә эшләргә?

Әмәлгә ҡалғандай, эргәнән бер генә кескәй коридор уңға табан китә икән. Шунда боролдолар. Ләкин алда ла тауыштар ишетелә! Бында ла ҡасып ҡотолоп булмаҫмы? Ни өсөн шул тиклем кеше бер юлы коридорға сыҡҡан? Әллә уларҙы тотоу өсөн йыйылғандармы?

— Бына бер ишек! — тине Хәлит. — Шунда йәшенәйек!

Ишекте асҡайнылар, уныһы бер генә кеше һыйырлыҡ шкаф булып сыҡты.

— Һин ошонда йәшен! — тине Батыр Хәлиткә. — Бер-бер хәл булһа, станцияның ишеге янында осрашырбыҙ.

Хәлит шкаф эсенә сумды, ә Батыр менән Әмилә йәшенерҙәй урын эҙләп, алға уҡталды. Бында ҙур ғына ике йәшел йәшник ултыра.

— Ниндәй йәшниктәр? — тип һорай һалды Батыр йәшниктәрҙең тотҡаһын тартҡыслап.

— Белмәйем.

Малай ул арала бер йәшниктең ҡапҡасын асып ебәрҙе.

Йәшник эсенә ниндәйҙер ҡумталар тултырылған. Әммә эргәләрендә йәшеренерҙәй урын бар.

Батыр йәһәт кенә эскә сумды.

— Ә һин, бар, кит, — тине Батыр Әмиләгә, ҡапҡасты ябырға әҙерләнеп. — Станцияның ишеге янында осрашырбыҙ.

— Юҡ! — тине ҡапыл ҡыҙ. — Мин дә һинең менән! Улар мине Урға оҙатырға теләй. Мин ҡасам станциянан!

Батыр саҡ ҡына уйланды. Әгәр хәҙер айырылышһалар, уларҙың мәңге осрашмауы бар. Ул арала коридорҙа яҡынлашып килгән аяҡ тауыштары ишетелде.

— Улайһа, тиҙ бул, ин! Улар етеп килә!

Киләһе секундта Әмилә Батыр янына йәшник эсенә инеп ултырҙы. Малай ҡапҡасты япты. Һәм икеһе лә тынып ҡалды...

## ЙЫҺАН ТӨБӨНӘ СӘЙӘХӘТ

Тәлмәрйендәр менән сыйырсыҡтарҙы Золоға оҙатыу сәғәте килеп етте. Был ваҡытҡа станцияның бар хеҙмәткәрҙәре тиерлек күҙәнәк пушкаһы янына йыйылды. Фәҡәт бер хеҙмәткәр менән ике-өс робот ҡына станцияла күренеп ҡалған малайҙар менән Әмиләне тотоу менән мәшғүл.

Етәксе үҙе пульт артына баҫты.

— Күҙәнәк пушкаһы әҙерме? — тип һораны ул.

— Әҙер! — тине уның ярҙамсыһы.

— Йәнлектәр тейәлгән йәшниктәр әҙерме?

— Әҙер!

— Золо планетаһындағы ҡабул итеү станцияһы әҙерме?

— Әҙер!

— Йәшниктәрҙе тейәргә!

Шунда уҡ робот-кран йәшел йәшниктәрҙең береһен эләктереп алды ла күҙәнәк пушкаһының эсенә тыҡты. Киләһе минутта икенсе йәшник тә уның янында ултыра ине.

— Тейәлде! Бөтәһе лә әҙер ине.

Күҙ алдына ла килтереүе ауыр, әммә йәшниктәр бер минуттан йәһәннәм төбөндәге, йыһандың арғы ситендәге Золо планетаһында буласаҡ. Ул урынға хатта яҡтылыҡ та үҙенең иҫ киткес тиҙлеге менән фәҡәт бер айҙан ғына барып етә ала!

Күҙәнәк пушкаһы янындағылар тынып ҡалды. Һәр кем ошо минутта Золоға тиклемге араны күҙ алдына килтерергә маташҡандыр, ә бәлки йәшел йәшник эсендәге йәнлектәрҙең күҙәнәктәргә тарҡалып, күҙгә күренмәҫ тулҡындар рәүешендә, нисек итеп һә тигәнсе алыҫ Золоға барып етерен аңларға теләгәндер.

Күҙәнәк пушкаһы эшкә тотоноуға бер минуттай ваҡыт үтте. Инде йәшниктәр Золо планетаһында булырға тейеш.

Хәҙер ҡабул итеү станцияһы үҙенә килгән күҙәнәктәрҙе тәртипкә килтерәләр. Уйҙарының дөрөҫлөгөнә ышанырға теләгәндәй, станция етәксеһе күҙәнәк пушкаһын асырға ҡушты. Бойорок шунда уҡ үтәлде. Ысынлап та, машина эсендәге ике йәшник тә юҡҡа сыҡҡайны.

— Телевизорҙы тоҡандырығыҙ! — тине етәксе.

Экранда алыҫ Золо планетаһында урынлашҡан ҡабул итеү станцияһының бүлмәһе күренде. Ана, ике йәшел йәшник! Станция уларҙы ҡабул итергә лә, йыйырға ла өлгөргән! Киләһе секундта йәшниктәрҙең асылып китеүе күренде. Уларҙың эсенән тәлмәрйендәрҙең ырғый-ырғый, сыйырсыҡтарҙың фырылдап осоп сыҡҡанлығы хасил булды.

Экранға текәлгән кешеләрҙең барыһының да ҡиәфәте ҡәнәғәт ине был минутта. Шундай алыҫ араға күҙ асып йомғансы осороп ҡара әле ошо йәнлектәрҙе! Аҡылға һыйырлыҡ түгел бит был!

Әммә киләһе секундта станцияның етәксеһе ҡорт саҡҡан кеүек урынынан ырғып торҙо:

— Нимә был? Нисек улар унда?

Телевизор янындағы бар кеше, ҡоттары осоп, экранға төбәлде. Ә унда алыҫ Золо планетаһында ҡабул итеү станцияһынан сығып барған малай менән ҡыҙ күренде. Ҡыҙҙы барыһы ла шунда уҡ таныны. Был — Әмилә! Ә малай? Кем ул? Нимә эшләй ул Әмилә янында? Бында, ерҙә Әмилә менән аралашҡан малай ошомо? Улар нисек Золоға эләккән? Йәшел йәшниктәр эсендә булғандармы? Әгәр шулай икән, ул йәшниктәр эсенә малай менән ҡыҙҙы кем һалған? Ниңә пушка эсенә һалыр алдынан ул йәшниктәр тикшерелмәгән?

Асыуынан ҡып-ҡыҙыл булған станция етәксеһе үҙенең ярҙамсыһына ябырылды:

— Был ниндәй яуапһыҙлыҡ? Һеҙ быны өсөн язаһын аласаҡһығыҙ!

Хәҙер ни эшләргә? Нисек ул ҡыҙ менән малайҙы кире ҡайтарырға? Золола бит күҙәнәк пушкаһы юҡ! Ә арттарынан карап ебәреү бик ҡиммәткә төшәсәк. Хәйер етәксегә быны эшләргә бер кем дә рөхсәт итмәйәсәк. Хәҙер Урҙағылар етәксегә ябырылыр! Эшләй алмайһың! Иғтибарһыҙһың... Быныһы — бер. Икенсенән, Золола ҡыҙ менән малайҙы аҙым һайын ҡурҡыныс көтә, үлем янай. Әгәр бөгөн үк уларҙы ергә ҡайтармаһалар, иртәгә үк берәй йыртҡыстың тырнағына эләгәсәктәр! Уларҙы үлемгә дусар итергә етәксенең хаҡы юҡ. Әмиләне лә, теге малайҙы ла ул Урға алып ҡайтырға тейеш. Станция етәксеһе ни эшләргә белмәйенсә, ике ҡулы менән башын тотто.

## ЗОЛО ПЛАНЕТАҺЫ

Әмилә, әлбиттә, күҙәнәк пушкаһы хаҡында белә ине. Әммә йәшел йәшник эсенә йәшенгән саҡта үҙенең шул машина ярҙамында алыҫ планетаға барып сығырын күҙ алдына ла килтермәне.

Ҡыҙ йәшникте күтәреп ҡайҙалыр күсергәндәрен тойҙо. Шунан ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа иҫен юғалтҡандай булды. Киләһе секундта Батыр менән Әмилә йәшенгән йәшник үҙенәнүҙе асылып китте. Ул ғына ла түгел, эргәләге кескәй генә һауыттар асыла башланы. Улар эсенән бер-бер артлы тиҫтәләгән, йөҙәрләгән сыйырсыҡтар осоп сығырға кереште.

Әмилә Ер аҫтындағы станцияға сыйырсыҡтарҙы ниңә йыйғандарын белә. Шуға ла ҡаушап ҡалды. Ниңә ҡоштарҙы кире ебәрәләр? Уларҙы бит Золоға оҙатырға кәрәк.

Әммә ошо ерҙә ҡыҙҙың тәне зымбырлап китте. Ул барыһын да аңланы. Күҙәнәк пушкаһы Батыр менән Әмиләне алыҫ Золоға осорған!

Ҡыҙ, үҙ уйҙарына ышанырға теләмәйенсә, йәшниктәр торған бүлмәнән тышҡа йүгереп сыҡты.

Һис шикһеҙ, был — Золо планетаһы! Эргәлә генә ғүмерҙә лә күрелмәгән сәйер үҫемлектәр үҫеп ултыра. Күктә Ерҙекенә ҡарағанда ике тапҡыр ҙурыраҡ ҡояш йөҙөп йөрөй. Уның ипкене Әмиләнең сикәләрен бешереп алғандай итте.

Ул арала ҡыҙ янына Батыр килеп етте.

— Был ниндәй ер? Беҙ ҡайҙа? — тип һораны малай тирә-яғына аптыраған ҡарашын ташлап. — Ниндәй матур күренеш!

Тирә-йүн, ысынлап та, ғәжәйеп матур ине. Эргәлә генә күҙҙе иркәләгән йәшкелт төҫтәге үләнгә оҡшаған бейек ағастар үҫә. Икенсе бер ағастың япраҡтары ашъяулыҡ ҙурлыҡ! Быларының да күбеһе йәшел төҫтә. Әммә күгерәктәре лә, ҡыҙғылттары ла бар. Шул арҡала был сәйер урманға ҡарап туйып булмаҫ кеүек. Арыраҡ кеше ҡулы менән эшләнгәндәй осло түбәле тауҙар күренә. Күк йөҙө лә һис тә ерҙәгегә оҡшамаған — ул бер урында — ҡыҙыл, икенсе ерҙә — һары, ә өсөнсө яҡта күм-күк төҫтә...

— Беҙ ҡайҙа? — тип һораны Батыр йәнә. — Әллә Африкаға килеп сыҡтыҡмы?

— Юҡ, — тип уфтанды ҡыҙ. — Алыҫҡараҡ киткәнбеҙ. Беҙ — Золо планетаһында.

— Ниндәй Золо? Ишеткәнем юҡ. Ә нисек бында әләктек? Бер минут әлек беҙ Ерҙә инек бит!

Ошо ерҙә уларҙың эргәһенән, аяҡтары араһынан йөҙәрләгән тәлмәрйен ырғый-ырғый тышҡа сыға башланы.

— Тәлмәрйендәр! — тип ҡысҡырҙы тамам аптыраған Батыр. — Былар ҡайҙан килеп сыҡты?

— Ҡамасаулама, үтһендәр.

Малай менән ҡыҙ ситкәрәк күсте һәм байтаҡ ҡына ваҡыт эстән сыҡҡан иҫәпһеҙ-һанһыҙ тәлмәрйендәрҙең урманға инеп юғалғанын өндәшмәй генә ҡарап торҙо. Ә сыйырсыҡтар күптән осоп сығып урман өҫтөнә таралғайны.

— Әмилә. — Малай ҡыҙға боролдо. — Һин берәй нәмә аңлайһыңмы? Нимә был? Тәлмәрйендәр, сыйырсыҡтар. Мин бер ни ҙә төшөнә алмайым...

Әмилә яуап бирер өсөн ауыҙын асты, әммә бер һүҙ ҙә әйтергә өлгөрмәне.

Көтмәгәндә урман эсенән үрмәксегә оҡшаған, әммә фил кеүек ҙур йәнлек килеп сыҡты ла, йән-фарман йүгереп, ҡыҙ менән малайға яҡынлаша башланы. Йыртҡысты беренсе булып Әмилә күреп ҡалды:

— Батыр! Ҡара!

Малай йылт итеп ҡыҙ күрһәткән яҡҡа боролдо һәм бөтәһен дә аңланы. Батыр ҡыҙҙы беләгенән тотоп эскә тартты. Киләһе секундта улар станция эсенә инә һалып ишекте бикләп тә ҡуйҙылар. Ошо ерҙә стенаға ауыр нәмәнең килеп бәрелеүенә бөтә станция һелкенеп ҡуйҙы.

— Әгәр саҡ ҡына күрмәй ҡалһаҡ... — тине Батыр, ул саҡта ни булырын күҙ алдына килтереп.

Был Золо планетаһында аҙым һайын осрап торасаҡ ҡурҡыныстарҙың тәүгеһе икәнлеген ҡыҙ ҙа, малай ҙа белмәй ине әле.

## ЕТӘКСЕНЕҢ УЙЫ

Етәксе яҡшы белә: Әмиләнең Золоға барып сығыуы өсөн уның башынан һыйпамаҫтар. Шуға ла ул ҡыҙҙы, шул иҫәптән малайҙы ла, ҡайтарыу өсөн бөтә көсөн һалырға мәжбүр булды. Иң тәүҙә балалар станциянан йыраҡҡа китеп бармаһын өсөн бынан кешеләр ебәрергә кәрәк. Һонтор, Тәпәш, Йыуан китәсәк алыҫ планетаға. Быны эшләүе ҡыйын түгел. Бөтә бәлә шунда: аҙаҡтан был биш кешене нисек кире Ергә ҡайтарырға? Золола бит күҙәнәк пушкаһы юҡ. Карапты Ур планетаһындағыларға һиҙҙермәй генә ебәреп булмай. Әйтеп тораһы юҡ — шау-шыу ҡубасаҡ. Аптыраны етәксе. Шунан кабинетына ярҙамсыларын саҡырып алды:

— Нимә эшләйбеҙ?

— Карап ебәрергә кәрәк, — тине береһе.

— Карап менән барып еткәнсе улар үләсәк, — тине икенсеһе. — Унда диназавр, ихтиазавр кеүек йыртҡыстар тулып йөрөй. Шуларҙың тырнағына эләкмәһә, астан үләсәк. Минең тәкдимем шул: уларҙы ҡотҡарайыҡ тип баш ватмайыҡ, онотайыҡ уларҙы.

Станция етәксеһе ҡаршы төштө:

— Ә Урға Әмиләнең юғалыуын ни тип әйтербеҙ? Юҡ, беҙ уларҙы Золонан алып ҡайтырға тейешбеҙ.

Төрлөсә уйлап ҡаранылар, әммә аныҡ ҡына бер ниндәй ҙа ҡарарға килә алманылар.

Был ваҡытта Йыуандың командаһы Золоға осорға әҙер ине инде. Улар үҙҙәре менән ике көнгә етерлек ризыҡ, башҡа кәрәк-яраҡтар алдылар. Бойороҡ ҡына булһын, шунда алыҫ планетаға юлланасаҡтар.

Ваҡыт әкренләп алға тәгәрләне. Кискә табан Әмилә менән Батыр тураһында туҡтауһыҙ уйлаған етәксенең башына ғәжәп ябай һәм иҫ киткес шәп фекер килде. Әгәр теге пушка кешенең үҙен күҙәнәктәргә тарҡатып алыҫ планетаға ташлай ала икән, ә ни өсөн ул үҙе кеүек икенсе бер пушканы Золоға ебәрә алмаҫҡа тейеш? Дөрөҫ, станцияла күҙәнәк пушкаһы берәү генә. Әммә уның нисек эшләнгәнлеге, нимәләрҙән торғанлығы хаҡында тулы документация бар бит. Берәй шәп компьютерға бирһәләр, ул ошо ҡағыҙҙарға ҡарап, пушканың ниндәй күҙәнәктәрҙән торғанлығын иҫәпләп сығарасаҡ. Шуны Золоға ебәрәсәктәр, ә унда ҡабул итеү станцияһы һә тигәнсе күҙәнәк пушкаһы ҡороп ҡуясаҡ. Уның ярҙамында кире ҡайтасаҡтар ҙа инде Ергә малай менән ҡыҙҙы тотҡан әҙәрләүселәр.

## ҺАРЫ ҺАЙЫҪҠАН

Ҡоттары осҡан Әмилә менән Батыр оҙаҡ ҡына ҡабул итеү станцияһының ишеген асырға ла ҡурҡтылар. Әммә бында мәңге ултырып булмай бит. Инде үҙҙәренең асыҡҡанын да тоя башланылар. Нимә ашарға?

Был ваҡытта Әмилә Батырға тәлмәрйен менән сыйырсыҡтарҙың тарихын һөйләгәйне, үҙҙәренең нисек итеп алыҫ планетаға килеп сығыуҙарын да аңлатҡайны. Батыр быға бик ғәжәпләнде, бик күп һорауҙар бирҙе. Шулай итеп ике сәғәткә яҡын ваҡыт үтеп китте. Йәнә асығыу үҙен һиҙҙерергә тотондо.

Малай һиҙенә: был таныш түгел планетала аҙыҡ табыуы еңел булмаясаҡ. Тапҡан хәлдә лә, уны бешерергә кәрәкһә, уларҙың шырпыһы, һауыт-һабаһы ла юҡ. Ярай әле Батырҙың сәғәте бар — күпме ваҡыт үткәнлеген белергә була.

Бер мәл, тышта тауыш-тын ишетелмәгәндәй тойолгас, әкрен генә ишекте астылар. Ысынлап та, тирә-йүндә улбыл һиҙелмәй. Шулай ҙа Батыр менән Әмилә оҙаҡ ҡына ишектән алыҫ китергә ҡурҡып торҙо. Станциянан саҡ ҡына ситкәрәк атлау менән урмандан теге фил ҙурлыҡ үрмәксе килеп сығыр ҙа өҫтәренә ташланыр һымаҡ...

— Күренмәй, — тине Әмилә.
— Киткән, күрәһең...
Баш өҫтөндә һоро төҫтәге сәйер генә ҡоштар осоп йөрөй. Арҡаһында, ҡойроғонда ҡара таптары ла бар. Бер ҡараһаң, һайыҫҡанға ла оҡшағандар, тик тауыҡ кеүек ҙурҙар. Ҡоштар малай менән ҡыҙҙы күреп, сырылдашырға керештеләр.
— Батыр, ҡара әле, — тине Әмилә. — Улар нимә ашай ул?
Һары һайыҫҡандар, ваҡыт-ваҡыт үләнгә оҡшаған ағастарға ҡунып, унан нимәлер суҡып ала ине. Бер аҙ яҡынайғас, тегеләрҙең суҡыған нәмәһенең ике йоҙроҡ ҙурлыҡ сәтләүек икәнлеге күренде.
— Улар ашағас, беҙгә лә ярайҙыр, моғайын, — тине Батыр.
Малай үлән-ағасҡа тотондо. Әммә ул һабынланған кеүек шыуғалаҡ булып сыҡты. Үҙенә тейеүе лә сирҡаныс.
Урала торғас, Батыр ерҙә уралып-уралып үҫеп ятҡан сәйер үләнгә иғтибар итте. Арҡанға оҡшап тора. Ныҡмы икән? Тартып ҡараны — өҙөлмәй. Әгәр уның менән...
Тиҙҙән Батыр шул үләндең бер осон тоҙаҡ кеүек итеп бәйләне лә шыуғалаҡ ағастың башына ырғытырға тотондо. Осона эләктерһә, ошо «арҡанға» йәбешеп өҫкә менә. Тырыша торғас, тоҙаҡ үлән-ағастың бер тармағына эләкте. Малай тартҡыслап ҡараны — ысҡынмай. Әммә Батыр өҫкә генә үрмәләй башлағайны, үлән-ағас, малайҙың ауырлығынан бөгөлөп төштө. Быны көтмәгән малай сак-сак артҡа тәкмәсләмәне. Шулай ҙа, бар таҫыллығын йыйып, ҡулын арҡандан ысҡындырманы.
— Әмилә! — тип ҡысҡырҙы ул. — Сәтләүекте өҙөп ал!
Бына дүрт ҙур сәтләүек малай менән ҡыҙҙың ҡулында. Тик уларҙың тышы һабынланған кеүек шыуғалаҡ.
— Ана йылға, — тине Әмилә. — Йыуайыҡ.
Ярға яҡынлаштылар. Шул ерҙә был таныш түгел планетала үҙҙәрен аҙым һайын ҡурҡыныс һағалап торғанлығын йәнә аңланылар. Батыр, ҡулындағы сәғәтен сисеп үлән өҫтөнә һалды ла, сәтләүекте тотоп йылға өҫтөнә эйелгәйне, һыу аҫтынан ҙур бер бүрәнәнең күтәрелә башлауын шәйләне. Тәүҙә Батыр ҡаушабыраҡ китте. Ниндәй бүрәнә? Ниңә сығып килә? Яҡшылабыраҡ ҡарағас, бүрәнәнең ике күҙе барлығын күрҙе? Етмәһә, ул туп-тура Батырға ынтыла икән!
Малай йәһәт кенә артына әйләнеп ҡараны: Әмилә ҡайҙа? Ҡыҙ арттараҡ тора икән. Ул, уны-быны уйламайынса, һауалағы һары һайыҫҡандарҙы күҙәтә.
— Әмилә! — тип ҡысҡырҙы Батыр һәм йылғанан ситкә ырғыны. — Ҡас!
Ҡыҙ менән малай бар көстәренә урманға табан йүгерҙе. Бер аҙ барғас, Батыр артына әйләнеп ҡараны. «Бүрәнә»

уларҙы баҫтырырға йыйынмай ине. Ул, ярҙа ятҡан дүрт сәтләүекте оҙон теле менән ялмап ауыҙына оҙатты ла, кире һыуға сумды.

— Бур! — тип ҡысҡырҙы Батыр йән асыуы менән. Күпме ыҙаланып алғайны ул сәтләүектәрҙе! Ә был һә тигәнсе юҡҡа сығарҙы ла ҡуйҙы.

Ошо ерҙә Батыр сәғәтенең ярҙа ятып ҡалғанлығын хәтерләне. «Бурәнә» күренмәй шикелле. Батыр ярға яҡынлашырғамы, юҡмы тип икеләнеп торған арала, һары һайыҫҡандарҙың береһе шыҡыйып ергә төштө лә малайҙың сәғәтен суҡышына эләктереп осоп та китте.

— Һай, һай! — тип ҡысҡырып ҡараны малай. Әммә һайыҫҡан тауышҡа иғтибар итмәне, әкрен генә осоп күҙҙән дә юғалды.

— Бурҙар! — Батыр ҡоштарға йоҙроғон һелтәне. — Талаусылар планетаһы!

— Ерҙәге кеүек йөрөйбөҙ, — тине Эмилә. — Әгәр былай ҡыланһаҡ... Ярай әле сәтләүектәр менән сәғәтте генә юғалттыҡ.

Был ваҡытта Золо ҡояшы байыуға табан яҡынлаша ине. Күк йөҙө кинәт ҡара-йәшел төҫ ала башланы. Урман эсенән таныш булмаған, сәйер ҙә, уҫал да тауыштар нығыраҡ, хәүефлерәк ишетелде. Тирә-йүн күҙгә күренеп ҡараңғыланды. Хәҙер сәтләүек ҡайғыһы китте. Ҡараңғыла әллә ниндәй йыртҡыстың ауыҙына эләгеүҙәре бар.

— Станцияға ҡайтайыҡ, — тине Эмилә. — Төндө шунда үткәрербеҙ...

Малай менән ҡыҙ кирегә атланы. Ана, станция күренә. Тик ниңә уның ишеге асыҡ. Йәнлектәр инә алмаһын өсөн Батыр уны ныҡ итеп бикләгәйне.

— Туҡта, — тине Батыр. — Кем асты икән ишекте?

— Ҡара! — Ҡыҙ шомло тауыш менән өндәште. — Эстә ут бар!

Ысынлап та станцияның эсендә ут тоҡандырғандар! Кем йөрөй унда? Эмилә яҡшы белә: Золола кешеләр булырға тейеш түгел. Әммә утты йәнлектәр тоҡандырмағандыр бит? Улайһа, кем? Хәҙер ни эшләргә? Барырғамы станцияға, юҡмы? Әгәр унда ҡыҙ менән малайҙы һис уйламаған ҡурҡыныс көтөп торһа?

Әммә Батыр менән Эмиләгә был хаҡта оҙаҡ баш ватырға тура килмәне. Ҡапыл станцияның ишегенән йыуан кәүҙәле бер кеше пәйҙә булды. Уны күргәс, ҡыҙ шаҡ ҡатты:

— Был бит... Беҙҙең Ер аҫтындағы станцияла эшләгән кеше!

Батыр ҙа хайран ҡалды:

— Нимә ҡарап йөрөй ул бында? Нисек килгән? Ҡыҙ яурындарын һелкетте:

— Мин ҡайҙан беләйем?

Ул арала Йыуан тышҡа сыҡты. Унының артынан икенсе оҙон һәм тәбәнәк кәүҙәле йәнә ике кеше хасил булды.

— Ә былары кемдәр?

— Улар ҙа беҙҙең станциянан, — тине Әмилә. — Мин аңланым! Уларҙы беҙҙең арттан ебәргәндәр. Алып ҡайтыу өсөн!

— Аңлашыла, — тине Батыр. — Алып ҡайтырға ла икебеҙҙән дә бер-беребеҙҙе онотторорға!

— Шунан мине оҙатасаҡтар Урға. Мәңгегә... Әммә Батыр ҙа, ҡыҙ ҙа Ер аҫты етәксеһенең Батырҙы ла Урға алып китеп, кеше тәнен тикшереүселәрҙең бысағы аҫтына бирергә йыйыныуын белмәй ине...

— Нимә эшләйбеҙ?

— Минеңсә, уларға күренергә ярамай.

— Эйе, — тине ҡыҙ. — Ә ҡайҙа ҡунырбыҙ? Бында бит аҙым һайын ҡурҡыныс...

— Яйын табырбыҙ әле, — тине малай.

Улар боролдо ла инде тамам ҡараңғылыҡҡа күмелгән урманға табан атланы...

## ХӘЛИТ ТОТҠОНДА

Хәлит йәшенгән урынында оҙаҡ ҡына ултырҙы. Эргәһенән шаулашып улай-былай йүгерешкән кешеләрҙең тауыштарын ишетте: хатта ишек ярығынан ҡайһыларын күргеләне: тауыш-тынһыҙ ғына үтеп киткән роботтар ҙа күҙенә салынып ҡалды. Бер мәл кешеләр юғалды, коридорҙа тынлыҡ урынлашты.

Ярты сәғәттәй көткәндән һуң Хәлит, ишекте киңерәк асып, тирә-йүнгә күҙ һалды. Коридор буп-буш. Күптән түгел генә ошонда торған ике йәшел йәшник тә юҡҡа сыҡҡан.

Хәлит бер аҙ уйланып торҙо. Хәҙер ҡайҙа барырға? Батыр менән Әмиләне нисек табырға? Ни өсөн ошоғаса улар үҙҙәре Хәлит янына килмәне? Тотолдолармы? Бәлки үҙенә был станциянан сығыу сараһын күрергә кәрәктер? Ә нисек? Әлеге лә баяғы, станция ишеге янына йәшеренергәме?

Хәлит йәшенгән урынынан сыҡты ла, һаҡ ҡына баҫып, коридор буйлап атланы. Станцияның ишеге ошо яҡта булырға тейеш. Тиҙерәк барып етергә лә йәшенергә!

Ике боролошто үткәнсе Хәлиткә ул-был осраманы. Әммә өсөнсө боролошҡа етеп барғанда, ҡабырғалағы бер ишек асылып китте лә унан ике кеше килеп сыҡты. Тегеләр Хәлитте күргәс, шаҡ ҡатты, хатта ни эшләргә белмәйенсә, ары-бире ҡарашып алдылар. Шул арала Хәлит алға ташланды. Тиҙерәк берәй ергә йәшенергә! Боролошто үткәндә артына күҙ ташларға өлгөрҙө: тегеләр малайҙың артынан төшкән.

Хәлит йәшен тиҙлеге менән йәнә ике боролошто үтеп китте. Шул арала ҡасыусы менән ҡыуыусыларҙың араһы ҙурайғандай тойолдо. Әммә алда коридорҙың осо күренде. Хәлит ялт-йолт тирә-яғына ҡараны. Ҡайҙа ҡасырға? Тоҙаҡҡа эләктеме? Тиҙерәк йәшенергә! Ҡайҙа? Үс иткәндәй, эргәлә ултырғыс ҙурлыҡ та әйбер күренмәй. Ишектәр ҙә юҡ!

Ул арала боролошта теге ике кеше күренде. Малай, ауға эләккән балыҡ шикелле улай-былай итте, шунан тегеләргә ҡаршы китте. Хәҙер уларҙы йырып үтәсәк тә, барыбер ҡасасаҡ! Ул тотолорға тейеш түгел! Алыҫ Урға алып китеп барһалар?! Уның ата-әсәһе был ҡайғыға түҙә алмаясаҡ бит.

## ЗОЛО ТӨНӨ

Урман эсендә төрлө-төрлө ҡурҡыныс тауыштар ишетелә. Бер йәнлек баҡыра, икенсеһе илаған һымаҡ ҡысҡыра — әллә ярҙам һорай, әллә йырлауы шул. Әмилә менән Батыр туҡтап ҡалды — әгәр һаман алға атлаһалар, берәй йыртҡыстың ауыҙына барып эләгеүеңде көт тә тор.

Инде тамам ҡараңғыланды. Бына бер мәл тирә-йүн күҙгә төртһәң дә күренмәҫлек хәлгә килде. Малай менән ҡыҙ бер-береһенә һыйынып тынып ҡалды. Уларға теге фил кеүек үрмәксе, йәки йылға эсендә йөрөгән бүрәнәгә оҡшаған хайуан эргәгә килеп сығыр ҙа һөжүм итә башлар һымаҡ... Бәлки бөтөнләй башҡа, әле улар күрмәгән йыртҡыс эргәлә һаҡлап торалыр...

Юҡ, юҡ! Өндәшмәй торорға ярамай. Ул саҡта мейе береһенән-береһе ҡурҡынысыраҡ һүрәттәрҙе күҙ алдына килтерә башлай. Бына, имеш, уларға бер йыртҡыс яҡынлашып килә. Бына ул Батыр менән Әмиләгә ырғырға әҙерләнә! Хәҙер ырғый! Бына ырғый! Ырғыны!!

— Батыр!

— Әү!

— Беҙ ошонда ғүмергә ҡалырбыҙмы икән?

— Белмәйем. Бында әлегә кешеләр юҡ тиһеңме?

— Юҡ.

— Тимәк, беҙ Зололағы беренсе кешеләр булабыҙмы?

— Ә теге өс кеше? Беҙҙе эҙәрләүселәр?

— Улар бит ҡайтып китәсәк. Ә беҙ ҡалабыҙ.

— Әгәр тотмаһалар. Улар бит беҙҙе алып ҡайтыу өсөн килгән.

— Тотолмаясаҡбыҙ, — тине Батыр ышаныслы тауыш менән.

— Асыҡтырҙы... Етмәһә өшөтә... — Ҡыҙҙың тауышы сибек кенә сыҡты. Ҡапыл ул ҡысҡырып ебәрҙе. — Батыр!

— Ни булды?

— Анау ағас артында кемдер тора!
— Ҡайһы ағас?
— Ана теге!
— Бер нәмә лә күрмәйем.
— Мин күрҙем! Нимәлер ҡыбырланы! — Ҡыҙ Батырға һыйынды. — Мин ҡурҡам!
— Тыныслан! Бер кем дә юҡ.
— Һалҡын...
— Мин яҡтыла ҙур япраҡлы ағастар күргәйнем... Шуларҙы өҙөп алып ябынғанда...
— Уларҙы хәҙер нисек табаһың?
— Эҙләп ҡарарға кәрәк.
— Китмә, Батыр. Тирә-йүн тулы йыртҡыстар! Нисек ҡысҡырышалар! Ҡурҡам! Тиҙерәк таң атһын ине!..
— Ҡурҡма, Әмилә. Һин ошонда ғына тороп тор...
— Юҡ! Мин дә һинең менән!..
Улар һаҡ ҡына баҫып бер-ике аҙым яһаны.
— А-а-а! — тип ҡысҡырып ебәрҙе ҡыҙ ҡапыл. Батыр ҡото осоп артына әйләнә һалды. Ҡараңғыла бер ни күренмәй...
— Әмилә, ни булды?
— Мин нимәгәлер баҫтым!
— Йәнлеккәме? Тешләмәнеме?
— Йомшаҡ ҡына.
— Бер нәмә лә юҡ бит.
— Ырғып торҙо ла ҡасты...
Йәнә алға атланылар. Бына бер ағасҡа килеп бәрелделәр. Тик быныһы үләнгә оҡшағаны булып сыҡты. Батыр һәрмәнеп йәнә алға атланы. Ҡапыл ул нимәгәлер эләгеп ҡолап китте. Ҡулына еүеш тә, шыуғалаҡ та әйбер ҡағылды. Батыр шунда уҡ ырғып торҙо. Йөрәге дөп-дөп тибә. Ниндәй сирҡаныс!
— Батыр! — тип ҡысҡырҙы Әмилә. — Ҡайҙа юғалдың?
— Мин бында...
Йәнә бер ағасҡа килеп төртөлдөләр. Быныһының япрағы ҙур булып сыҡты. Тик аңһат ҡына йолҡоп алырмын тимә! Малай улай итте, былай итте, әммә япраҡ еңел генә өҙөлөргә теләмәне. Ҡаҙаҡлап ҡуйғандармы ни! Етмәһә ҡараңғы, ҡайһы тирәһенән йолҡорға кәрәклеге күренмәй. Малай тирләп китте. Ә эргәлә торған Әмилә был минутта өшөүҙән ҡалтырана ине.
Туҡта! Был япраҡ шул тиклем нык йәбешкән икән... Батыр уның осона йәбешеп ҡараны. Күтәрә. Улайһа, ниңә уның өҫтөнә генә менеп ятмаҫҡа? Өҫтәге япрағы аҫтындағыһына тейә яҙып тора — уныһы юрған булыр!
Малай тәүҙә ҡыҙға япраҡ өҫтөнә күтәрелергә ярҙам итте, шунан үҙе менде.

Япраҡ әкрен генә тирбәлә, әммә уның өҫтөндә ятырға була. Ә урын күп бында. Улар икәүҙән башҡа тағы бер-ике кеше һыйыр ине, моғайын. Тик бына өҫтәге япраҡ ҡына алыҫыраҡ — тәнгә тейеп тормай, шуға өшөтә. Бер-береһенә арҡаларын терәп ятҡас, саҡ ҡына йылынғандай булдылар. Улар, урмандың шомло тауыштарын тыңлай-тыңлай, ара-тирә һөйләшеп, оҙаҡ ҡына йоҡлай алмай яттылар.

Бына улар Ерҙән уй етмәҫлек планетала. Күпме булырҙар бында? Ҡайта алырҙармы? Әллә мәңге ҡалырҙармы бында? Нимә ашарҙар? Әллә үҙҙәренә ризыҡ таба алмайынса астан үлерҙәрме?

Ашау тураһында уйлағас, икеһе лә үҙҙәренең ныҡ асыҡҡанын тойҙо. Батыр әсәһе тере саҡта бешергән бәлештәрҙең ниндәй тәмле булғанлығы тураһында һөйләне, ә Әмилә компьютерҙың нисек итеп аш бешергәнлеген аңлатты малайға...

Улар йоҡоға талғанда, Золо планетаһының көнсығышында таң һыҙыла башлағайны инде.

## ӘҘӘРЛӘҮ

Беренсе булып Батыр уянды. Тәүҙә малай үҙенең ҡайҙа икәнлеген аңлай алманы. Шунан барыһын да иҫләне. Ошо арҡала күңелен бошонҡолоҡ солғап алды...

Золо ҡояшы урман өҫтөнә күтәрелгән дә аяуһыҙ ҡыҙҙыра. Тирә-йүндә тауыштар ҙа кәмегән кеүек. Ныҡлап ҡолаҡ һалһаң ғына урман төпкөлөнән сәйер өндәр килгәнлеген ишетергә була. Эргәләге ағаста бер нисә һары һайыҫҡан ултыра. Уларҙың барыһы ла Батыр менән Әмиләгә төбәлгән. Күрәһең, таныш түгел «йәнлектәрҙе» тикшерәләр — былардан ҡурҡырғамы, әллә киреһенсә, үҙҙәренә һөжүм итергәме?

Батыр һайыҫҡандарға ҡул һелтәне:

— Көш!

Шуны ғына көткәндәй, ошоғаса тыныс ҡына ултырған ҡоштар бер-береһенә ҡарашып шаулашырға тотондо. Асыуҙары килде буғай. Әммә осоп китмәнеләр, бер аҙ тынyслана төшөп, йәнә малай менән ҡыҙға текәлделәр.

Батырҙың тауышын ишетеп, Әмилә лә уянды.

— Ә мин төш күрҙем, — тине ҡыҙ. — Имеш, Ергә ҡайтҡанбыҙ ҙа, унда икәүләшеп йәшәргә булғанбыҙ.

— Нисек икәүләшеп?

— Бер ғаилә булып. Һеҙҙә уны «өйләнешеү» тиҙәр, эйеме?

— Эйе... Ә һин ерҙә ғүмергә ҡала алыр инеңме?

— Белмәйем... һине юғалтҡым килмәй... Тик Урҙа бит минең атайым бар. Ул минһеҙ... Белмәйем...

Ҡыҙ моңһоуланды. Шуға малай һүҙҙе тиҙерәк икенсегә борҙо:

— Әйҙә, төшәйек. Хәҙер беҙгә ниҙер булһа ла ҡапҡылап алырға кәрәк. Югиһә астан үләбеҙ бит!

Ергә төшөүгә, ағас төбөнән ниндәйҙер йәнлек ситкә ырғыны. Малай менән ҡыҙҙың ҡото осто. Әммә теге йәнлек уларға ҡарағанда ла нығыраҡ шөрләгәйне, буғай. Күҙ асып йомғансы ағастар араһына инеп юғалды.

Батыр менән Әмилә тыныслана төшөп бер-береһенә ҡараштылар.

— Нимә булды ул? — тип һораны Батыр.

— Кәзәгә оҡшаған ине шикелле.

— Миңә лә шулай тойолдо...

Әргәләге ағаста өс сәтләүек күренде. Батыр уларҙы өҙөп алыу өсөн, арҡанға оҡшаған үлән эҙләргә керешә.

Ҡапыл урман эсенән сәйер тауыштар ишетелде. Ниндәйҙер геүләүгә лә оҡшаған, кеше һөйләшкән кеүек тә булып китә.

Малай һағайҙы:

— Әмилә, ишетәһеңме? Ниндәйҙер тауыш...

— Кешеләр һөйләшә түгелме?

Тауыштар яҡынайғандан-яҡыная. Малай менән ҡыҙ ағас араһына сумды. Нимә был? Әллә теге өс кеше уларҙы эҙләргә сыҡҡанмы?

Күп көтөргә тура килмәне. Бер аҙҙан урман эсенән өс кеше килеп сыҡты. Былар Йыуан, Һонтор һәм Тәпәш ине. Бер-ике аҙым яһайҙар ҙа ергә эйелеп нимәлер ҡарап алалар. Шунан йәнә алға атлайҙар.

— Улар беҙҙең эҙҙән килә, — тип шыбырланы Әмилә. — Китәйек бынан тиҙерәк!

— Туҡта! — Малай тирә-яғына ҡаранды. — Бынан сыҡһаҡ, улар беҙҙе күрәсәк!

— Китмәһәк, хәҙер тотолабыҙ! Күрәһеңме — эҙҙәребеҙ ярылып ята!

Ысынлап та уларҙың эҙҙәре ап-асыҡ булып күренә икән! Батыр ҡабаланып уйланы. Әгәр тик торһалар, хәҙер тотоп аласаҡтар. Ҡасырға маташһалар, тегеләрҙең күҙҙәренә эләгәләр. Ни эшләргә?

Ул арала теге өсәү эҙ буйлап малай менән ҡыҙ төн үткәргән ағасҡа табан атланы. Хәҙер Батырҙар быларҙың артында тороп ҡалды.

Батыр Әмиләгә ым менән: «Минең арттан!» — тине лә һаҡ ҡына баҫып ситкә атланы. Тиҙерәк! Һонтор дуҫтары менән теге ағасҡа барып еткәнсе, урманға инеп юғалырға! Малай менән ҡыҙ ҡабалана, әммә бында урман һирәк, һис тә тегеләрҙең күҙҙәренән тиҙ генә ҡотолорлоҡ түгел!

Ҡапыл аяҡ аҫтына эләккән бер ағас шыртлап һынды. Был тауыш бөтә урманға таралғандай булды. Ошо ерҙә Батыр менән Әмиләнең йөрәктәре саҡ-саҡ өҙөлөп төшөп

китмәне. Икеһе лә йылп итеп арттарына әйләнеп ҡараны: ишеттеме тегеләр?

Бәхеткә ҡаршы тегеләр Батырҙар йоҡлаған ағас төбөндә урала икән, шул арҡала, күрәһең, тауышҡа иғтибар итмәнеләр.

Малай менән ҡыҙ ашығып алға атланы. Саҡ ҡына барһалар, ҡуйыраҡ урынға етәләр. Тиҙерәк, тиҙерәк!.. Ошо ерҙә, көтмәгәндә, тегеләрҙең береһе көслө тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе. Батыр менән Әмилә артҡа әйләнеп ҡараны. Күргәндәр! Ана, ашығып, был яҡҡа йүгерә башланылар.

— Ҡалма минең арттан! — Батыр алға уҡталды.

Батыр бер үҙе булһа, анһат ҡына эҙ яҙлыҡтыра алыр ине. Ҡыҙ менән булғас... Әмилә шәп йүгерә алмай. Ул ике тапҡыр йығылып китте, тубығын һыҙырып ебәрҙе. Батыр нисек тә ярҙам итеү өсөн ҡыҙҙы етәкләп алды.

Урман ҡуйыра төштө. Ағастар кейемгә йәбешеп артҡа тарта, аңғармаҫтан битте тырнап ала. Арҡыры ятҡан ағастарҙы ырғып үттеләр, ниндәйҙер соҡорҙарға барып төштөләр. Тиҙ-тиҙ үрмәләп үргә күтәрелделәр ҙә йәнә йүгерҙеләр...

— Арыным! — тине ҡыҙ бер мәл, саҡ-саҡ тын алып.

— Түҙ, Әмилә, түҙ! Тағы саҡ ҡына йүгерәбеҙ ҙә...

Ҡыҙ, көс-хәл менән йәнә бер-ике аҙым яһаны ла, ергә ултыра төштө:

— Бөттө!.. — Әмиләнең күҙҙәренән йәштәр күренде. — Хәлем юҡ!..

— Тыныслан, Әмилә. — Батыр уның янына сүкәйҙе. — Ярай... Уларҙы артҡа ҡалдырҙыҡ шикелле... Ҡасан эҙ буйынса беҙҙе тапҡансы...

Шулай ҙа тирә-яғына ҡаранып алды. Күренмәйҙәр, тауыштары ла ишетелмәй, буғай...

— Әмилә, һин ошонда ултырып тор...

— Ә һин?

— Асыҡтырҙы бит. Шуға хәл юҡ. Анау ағас башындағы сәтләүектәрҙе өҙөп алам.

— Ә тегеләр килеп етһә?

— Улар ярты сәғәтһеҙ беҙҙе таба алмаясаҡтар.

Батыр арҡанға оҡшаған үлән эҙләргә кереште. Ниңәлер был тирәлә ул күренмәй. Малай алғараҡ үтте. Шунан артына әйләнеп ҡараны. Әмиләне юғалтып ҡуймаһын! Шунан йөрөрҙәр бер-береһен табыша алмай. Ана ултыра Әмилә. Батыр унан егерме-егерме биш аҙым ситкә китергә лә өлгөргән...

Көтмәгәндә эргәлә генә үкергән тауыш ишетелде.

Малай йылп итеп артына әйләнеп ҡараны һәм ҡото осоп янындағы ағасҡа һыйынды. Батырға ике яҡтан ике ҙур һәм ғәйәт ҡурҡыныс йыртҡыс яҡынлашып килә ине. Уларҙың ҡиәфәттәрен күреү менән малайҙың тубыҡтары

ҡалтырай башланы. Береһенең бейеклеге дүрт-биш метр булыр. Тау кеүек кәүҙәһе, әкренләп ҡойроҡҡа әүерелеп, ағастар араһына инеп юғала. Бүрәнә кеүек оҙон муйыны осонда өҫтәл ҙурлыҡ башы бар. Икенсе йыртҡыстың бейеклеге ун-ун биш метр тирәһе булыр. Ул йомранға оҡшаған. Үҙе арт аяҡтарына баҫып йөрөй. Башы крокодилдыҡы кеүек оҙон, тештәре хәнйәр кеүек осло.

Ошо ике йыртҡысты күргәс, Батыр урынынан ҡыбырлай алмайынса ҡатты ла ҡалды. Ҡасыр ине — хәле юҡ, көсө ҡайҙалыр китеп юғалды. Әмилә ҡайҙа? Батыр йәһәт кенә ҡыҙ ултырған яҡҡа боролоп ҡарап алды. Ҡыҙҙың йөҙө ап-аҡ булған, күҙҙәре ҙур итеп асылған...

Ул арала теге ике йыртҡыс, күк күкрәгәндәй үкерешеп, яҡынлашҡандан-яҡынлаша ине.

Ошо ерҙә генә уларҙың үҙенә түгел, ә бер-береһенә һөжүм итергә йыйыныуҙарын аңлап алды малай. Йыртҡыстарҙың күҙҙәренә ҡан һауған, улар үлемесле алышҡа әҙерләнә, шул арҡала үҙҙәре өсөн ҡырмыҫҡа ҙурлығындағы малайҙы бөтөнләй күрмәй. Улар асыуҙарына сыҙай алмайынса, юлдарында тап булған ағастарҙы төбө-тамыры менән йолҡоп ситкә бырағтыра, ерҙе тырнап-тырнап ала...

Бына бер мәл улар бер-береһенә килеп йәбеште. Шунда уҡ бер ҡарауҙа ҙур, килбәтһеҙ йыртҡыстар иҫ киткес етеҙлек, таҫыллыҡ күрһәтергә кереште, ҡот осҡос тауыш менән үкереүҙәренә бөтә урман һелкенә башланы.

Ер киҫәктәре ағастар менән үләндәргә ҡушылып, мамыҡ кеүек өҫкә осто. Батырҙан бер нисә генә аҙым ситтәрәк ике йыртҡыстан торған ҙур йомғаҡ тәгәрләп йөрөй...

Иң хәүефлеһе: Батыр менән Әмилә был ҡурҡыныс алыш барған майҙандың ике яғында тороп ҡалды.

Батыр әкренләп иҫенә килде һәм артҡа сигенде. Юғиһә, хәҙер был ике йыртҡыстың ҡойроғо килеп тейәсәк, йә булмаһа, тырнаҡтары аҫтынан осҡан ер киҫәге башына эләгәсәк...

Әмилә күренмәй. Юғалып ҡына ҡуймаһын! Әллә теге өсәү килеп етеп уны алып та киттеме? Булмаҫ! Улар килеп етергә тейеш түгелдәр әле.

Тиҙерәк был йыртҡыстарҙы урап ҡыҙ янына барырға. Малай, ағас-үләндәрҙе йыра-йыра, алға йүгерҙе.

— Әмилә, Әмилә! — тип ҡысҡырҙы малай, тик үҙенең тауышын үҙе ишетмәне. Сөнки йыртҡыстарҙың үҙәк өҙгөс үкереүе бөтә донъяны ялмап алғайны.

Бына Батыр алыш барған майҙанды урап сыҡҡандай булды. Әмилә ошо тирәлә ҡалғайны, ҡайҙа ул? Ниңә күренмәй? Әллә Батыр яңылыш икенсе урынға килеп сыҡтымы? Юҡ! Ошонда ҡалғайны Әмилә. Бына уның ултырған урыны. Бына эҙҙәре. Әммә Әмилә юҡ!

— Әмилә! — тип ҡысҡырҙы ҡото осҡан малай. — Әмилә!

Батыр алан-йолан тирә-яғына ҡаранды. Юҡ Әмилә, юҡ! Бер ҡайҙа ла юҡ!

Малай, ни эшләргә белмәйенсә, берсә үкерә-үкерә ҡанға батып алышыусы йыртҡыстарға ҡараны, берсә әле генә ҡыҙ ултырып ҡалған урында уралды.

Әммә Әмилә, ер йотҡан кеүек, юҡҡа сыҡты...

## ХӘЛИТ ХӘТЕРЛӘРГӘ ТЫРЫША

Хәлит балыҡтан ҡайтып килә. Ана Сибай күренде. Тиҙҙән өйөндә буласаҡ...

Бөгөн каникулдың нисәнсе көнө әле? Ғөмүмән, бөгөн нисәһе? Малай ҡапыл хәтерләй алманы. Әллә икенсе июнь бөгөн, әллә инде дүрте...

Нисәһе генә булһа ла, каникул башланды. Нисек үткәрергә йыйына әле ул йәйге ялдарын? Ниңәлер ошоғаса был хаҡта уйлағаны булманы... Хәйер, май баштарында Батыр менән хат алышҡайнылар. Дуҫы: «Һеҙгә ҡунаҡҡа килермен», — тип яҙғайны... Ә ниңә килмәне әле ул?.. Әллә килдеме ул? Юҡ шикелле, юҡ...

Ошо ерҙә Хәлитте сәйер бер тойғо солғап алды. Күңелендә ниндәйҙер тынғыһыҙлыҡ барлыҡҡа килде... Нимәнән ул? Батырҙың килгәнме, юҡмы икәнлеген белмәүҙәнме, әллә икенсе сәбәп бармы бында?

Хәлит һуңғы көндәрҙә нисек йәшәгәнлеген хәтерләй башланы, әммә бер ни ҙә иҫләй алманы. Ниңә улай?

Уҡыуҙарҙың нисек тамамланғанын хәтерләй, шунан һуң... Шунан ни булды әле? Ниңәлер Батыр килгән кеүек, шул уҡ ваҡытта дуҫын инде бер йыл күргәне юҡ бит...

Ошондай сәйер уйҙарға бирелеп ҡайтып инде Хәлит өйөнә. Ә бында әсәһенең тәүге һорауы Хәлитте бөтөнләй шаҡ ҡатырҙы:

— Батыр ҡайҙа?

— Ниндәй Батыр? — тип һораны Хәлит. — Ул килдеме ни?

Хәҙер әсә аптырауға ҡалды:

— Һин — нимә? Иҫәрләнеп бараһыңмы? Уның килгәнлегенә нисә көн? Кисә икәүләшеп балыҡҡа киткәйнегеҙ бит. Ҡайҙа ул?

Хәлит ҡойолоп төштө. Батыр ысынлап та килгән. Әсәһе алдашмайҙыр бит. Ана нисек асыулана... Тик ниңә Хәлит бер ҙә хәтерләмәй? Быныһы — бер. Икенсенән, бергәләп балыҡҡа киткәндәр икән, Батыр ҡайҙа булған? Малайҙың күңеленә шом инеп ултырҙы. Етмәһә, әсәһе лә ябырылды:

— Батыр ҡайҙа!? Батыр ҡайҙа? — Малай уны тынысландырыу өсөн:

— Тышта ҡалды, хәҙер ҡайта, — тине. Шунан үҙенең бүлмәһенә инеп, бөтә был ғәләмәтте аңлау өсөн уйға ҡалды.

Нимәне аңлата был сәйер ваҡиғалар? Ниңә Хәлит үҙенең балыҡҡа китеүҙәрен хәтерләмәй? Нисек итеп балыҡ тотоуҙарын да онотҡан, ҡармаҡтары ла әллә ҡайҙа ятып ҡалған. Әммә үҙенең балыҡтан ҡайтып килеүен ул ниңәләр белә ине. Бына ғәжәп!

Күрәһең, бында ниндәйҙер сер бар. Бәлки, бөтә бәлә Батырҙалыр? Әгәр ул, ысынлап та, килгән булһа, әгәр икәүләшеп балыҡҡа киткәндәр икән... Ошо ерҙә Хәлит ток һуҡҡандай урынынан ырғып торҙо. Әллә Батыр батып ҡуйҙымы? Улайһа, ҡайҙа ул? Бәлки, Батырҙың һыуға батыуын күргән саҡта бик ныҡ ҡурҡҡандыр Хәлит һәм шул арҡала барыһын да онотҡандыр, хәтерен юғалтҡандыр?..

Юҡ! Быныӊ булыуы мөмкин түгел! Батыр һыуға батҡан, имеш. Булмаҫ! Беренсенән, уның дуҫы бик шәп йөҙә белә. Икенсенән... Хәлит быға ышанмай! Батыр тере! Ул ҡайҙалыр тороп ҡалған! Ниндәйҙер сәбәп арҡаһында. Хәҙер уны эҙләп табырға ғына кәрәк. Тик ҡайҙан эҙләргә? Һәм ни өсөн Хәлит һуңғы көн үҙе менән ни булғандарын хәтерләмәй? Күрәһең, ныҡ ҡына итеп уйларға кәрәк, барыһын да хәтерләргә тырышырға кәрәк. Һәм һуңғы ике көн эсендә булған ваҡиғалар иҫенә төшөр.

Ошо уйға килгәс, Хәлит карауатына ятты ла түбәләге бер нөктәгә төбәлде...

## ЗОЛО КӘЗӘҺЕ

Әмилә ғәйеп булғандан һуң, Батыр тыныс ҡына уйлау һәләтлеген юғалтты. Ул йә бер яҡҡа, йә икенсе яҡҡа ташланды. Хатта теге ике йыртҡыстың үлемесле хәлгә килеп ауыуҙарына ла иғтибар итеп торманы, уларға күҙ генә һирпте лә, йәнә йүгерә-йүгерә ҡыҙҙы эҙләргә кереште:

— Әмилә! Әмилә! — тип ҡысҡырҙы малай туҡтауһыҙ.

Бер мәл ул бөтөнләй хәлдән тайҙы, шул арҡала тынысланa төштө һәм, әгәр былай итеп уйһыҙ-ниһеҙ йүгерәңләп йөрөһә, ҡыҙҙы бер ҡасан да таба алмаясағын аңланы. Киренән Әмилә ҡалған урынға барырға ла ҡыҙҙың эҙен табырға кәрәк.

Малай кире яҡҡа боролдо. Ошо ерҙә ниндәйҙер өҙөк-өҙөк тауыш ишетелгәндәй булды. Батыр ҡатып ҡалды. Ҡолағына салындымы? Әллә берәйһе ҡысҡырамы? Малай тын да алмай тора. Урмандың йөҙәрләгән сит ауаздары араһында Батыр өсөн ҡәҙерле булған тауыш та ишетелгән һымаҡ.

Малай үҙе һиҙмәй ҡалды, ҡысҡырып ебәрҙе:

— Әмилә!

Теге тауыш яуап ҡайтарҙы. Малай терт итеп ҡалды. Был, һис шикһеҙ, Әмилә ине.

— Әмилә! Әмилә! — Батыр ҡыҙҙың исемен ҡысҡыра-ҡысҡыра тауыш килгән яҡҡа йүгерҙе.

— Батыр! — Бына ҡыҙҙың тауышы малайҙың ҡолағына ап-асыҡ салынды.

Күп тә үтмәне, Батыр бер тәрән ярыҡ ситенә килеп туҡтаны. Уны бер ҡарауҙа абайлап та булмай. Бәлки, Батыр нисек йүгереп килһә, шул көйө ярыҡ эсенә тәгәрләп төшөп тә китер ине; малайҙы Әмилә иҫкәртергә өлгөрҙө. Баҡһаң, ҡыҙ ярыҡ эсенә ҡолаған икән.

Ярыҡтың тәрәнлеге һигеҙ-туғыҙ метр тирәһе бар. Ярҙары текә, эсенә төшкән кеше сығырлыҡ түгел.

— Бер ерең дә ауыртмаймы?

— Аяғым ауырта.

Батыр тирә-яғына күҙ һалды. Бына арҡанға оҡшаған үлән. Малай уның бер осон ярыҡ эсенә ташланы:

— Йәбеш!

Тиҙҙән ҡыҙ өҫкә күтәрелде.

Баҡһаң, урталарында теге ике йыртҡыс һуғыша башлағас, Әмилә малайҙы юғалтыуҙан ҡурҡҡан һәм, алыш майҙанын урап, Батыр ҡалған яҡҡа сығырға уйлаған. Ҡабаланып йүгереүе арҡаһында, ошо ярыҡты абайламай ҡалған...

Хәҙер уларға был урындан мөмкин тиклем алыҫҡараҡ китергә кәрәк. Сөнки эҙәрләүселәр етеп килергә тейеш. Был юлы малай менән ҡыҙ хәйләкәрләштеләр. Баралар-баралар ҙа, шул уҡ эҙҙәренә баҫып кире киләләр. Шунан ҡапыл ситкә ырғыйҙар һәм бөтөнләй икенсе яҡҡа атлайҙар. Ә эҙҙәрен юя баралар...

Был хәйлә уларға ярты көн тиерлек тыныс йәшәргә мөмкинселек бирҙе. Шул арала Батыр менән Әмилә ике тапҡыр ағастарҙан өҙөп алған сәтләүек ашап өлгөрҙө. Шунан ер кәзәләренә оҡшаған йәнлектәрҙе тап иттеләр. Уларҙың бәрәстәре лә бар икән. Батырҙың башына кәзәләрҙең берәүһен тотоп һауып ҡарарға тигән уй килде.

Бына малай үлән-арҡандан тоҙаҡ яһаны ла кәзәләр көтөүенә яҡынлашты. Хайуандар утлап йөрөгән еренән туҡтап, Батырға аптырап ҡарап тора. Йәнәһе, был ниндәй таныш түгел хайуан? Ҡапыл малай эргәһендәге кәзәгә тоҙағын ырғытты. Үлән-арҡан йәнлектең мөгөҙөнә эләкте. Кәзә ҡурҡышынан үрә торҙо, ҡасырға маташты. Әммә малай ҙа һаҡ тора ине, ул арҡанға сат йәбеште. Башҡа кәзәләр, ҡоттары осоп, шунда уҡ юҡҡа сыҡты. Ә Батыр, тырыша торғас, тыпырсынған йәнлекте ергә йығып һалды. Әмилә уның тояҡтарын бәйләшергә ярҙамлашты. Шунан Батыр кәзәне

һауырға тотондо. Тырыша торғас, сәтләүектең ҡабығы һөт менән тулды. Ул тәме менән һис тә ер һыйырының һөтөнән айырылмай ине тиерлек. Тик саҡ ҡына шәрбәтлерәк.

Малай менән ҡыҙ һауып алынған һөттө эсеп бөтөрөргә лә өлгөрмәне, урман эсендә һөйләшкән тауыштар ишетелде.

Батыр менән Әмилә урындарынан ырғып торҙо. Әҙәрләүселәр! Тиҙерәк ҡасырға! Әммә күп тә атламанылар, тәрән ярыҡҡа килеп төртөлдөләр. Нисек эсенә төшөп китмәнеләр?!

Улай-былай иттеләр ҙә ярыҡ буйлап йүгерҙеләр. Һәм ҡапыл ҡоттары осоп баҫҡан урындарында ҡатып ҡалдылар: әҙәрләүселәр уларға табан килә ине. Улар малай менән ҡыҙҙы күреп шатлыҡтарынан ҡысҡырып ебәрҙеләр.

Батыр менән Әмилә артҡа ташланды. Әммә улар хәҙер шәп ҡаса алмайҙар — ҡыҙҙың аяғы ауырта. Ул баҫҡан һайын йөҙөн сирылта, күҙҙәрен йома.

— Түҙ, Әмиләкәй, түҙ! — ти Батыр. — Саҡ ҡына китәбеҙ ҙә туҡтайбыҙ!

Тегеләрҙең ниҙер ҡысҡырғаны, аяҡтары аҫтында ағастарҙың сытырлап һынғаны яҡында ғына ишетелде. Етеп киләләр!

Ҡапыл Батыр менән Әмиләнең баш осонан ҙур ҡара шәүлә үтеп китте. Уның еле саҡ-саҡ ҡолата һуҡманы. Малай йүгереп барған көйө өҫкә ҡараны.

Уларҙың өҫтөндә генә кеҫәрткегә оҡшаған йәнлек осоп йөрөй. Уның оҙонлоғо алты-ете метр самаһы. Ҡанаттары ярғанаттыҡына оҡшаған — урта тирәһендә оҙон тырнаҡлы аяҡтарының бишәр бармағы ла бар.

Осоусы кеҫәртке, кирегә боролоп, малай менән ҡыҙға ташланыу өсөн шыҡыя башланы.

— Әмилә, сүкәй! — тип ҡысҡырҙы Батыр. Эргәлә генә ҙур япраҡлы ағастар үҫә. Ул ҡыҙҙы шунда табан тартты. — Йәшен тиҙерәк!

Улар бер япраҡ аҫтына сумды. Шунда уҡ был осоусы кеҫәртке был япраҡты йолҡоп алып китте. Шунан, ҡорбандарының тырнағына эләкмәгәнен күргәс, асыулы итеп ҡарҡылданы ла япраҡты ергә ырғытты.

Батыр менән Әмилә урындарынан ырғып тора һалып, эргәләге ағас төбөнә һыйынды. Ул арала кеҫәртке йәнә түбәнәйә башланы. Ошо ерҙә малай менән ҡыҙ янына Йыуан, Һонтор һәм Тәпәш килеп етте. Осоусы ғифрит, малай менән ҡыҙҙы онотоп, әҙәрләүселәргә ташланды.

Был минутта Һонтор, йүгереп килеп, Батыр менән Әмиләне эләктереп алғайны инде. Ә һауалағы йыртҡыс ҡот осҡос тиҙлек менән Һонторға яҡынлаша. Хәҙер эләктереп аласаҡ! Малай менән ҡыҙ ҡурҡышынан күҙҙәрен йомдо. Һонтор балаларҙан ҡулдарын ысҡындырҙы ла бар көсөнә аҡырып ебәрҙе.

Ошо секундта арттараҡ ҡалған Тәпәш, кесәһенән пистолет кеүек нәмә сығарып, осоусы кесәрткегә төбәне. Шунда уҡ көбәктән мендәр ҙурлығы ут йомғағы сыҡты ла кесәрткенең аяҡтарын ялап алды. Йыртҡыс тәүҙә быға иғтибар итмәне кеүек, нисек осоп килһә, шул көйө түбәнәйеп, ҡанаттары менән Һонторға һелтәнде. Әммә ялҡын да үҙ эшен эшләне — кесәртке ҡапыл ҡурҡыныс тауыш менән аҡырып ебәрҙе лә, ҡырҡа өҫкә күтәрелеп китте. Тирә-йүнгә янған йөн есе таралды.

Урынынан ырғып торған Батыр ҡыҙҙың ҡулынан тартты:

— Әмилә, ҡастыҡ!

Тәпәш менән Йыуан, балалар хаҡында онотоп, ерҙә ятҡан Һонторға эйелгәйне. Ә осоусы, ҡорбандарын ташлап китергә теләмәйенсә, яңынан һөжүм яһарға әҙерләнде.

Урмандың ҡуйы урынына инеп китер алдынан Батыр шуны күреп ҡалды: Йыуан ултырған Һонтор янында сүгәләгән, ә Тәпәш пистолетын түбәнәйеп килеүсе йыртҡысҡа төбәп тора...

## СЕБЕН МЕНӘН АЛЫШ

Батыр менән Әмилә урман шырлығын йырып алға атлай. Мөмкин тиклем алыҫыраҡ китергә. Юғиһә әҙәрләүселәр хәҙер ҡыуып етәсәк. Улар инде осоусы кесәрткенән ҡотолоп Батырҙарҙың эҙенә төшкәндәрҙер.

Әмиләнең аҡһауы көсәйгәндән-көсәйә. Малай уға бер ағас һындырып бирҙе. Хәҙер ҡыҙ шуға таянып атлай. Һыҙланыуы йөҙөнә сыҡҡан. Күрәһең, аяғы уғата ныҡ ауырта.

Алда осло түбәле бер тау күренде. Туҡта, ул таныш түгелме? Ҡабул итеү станцияһы эргәһендәге тауға оҡшаған да баһа! Әллә ҡасып йөрөй торғас, өйөрөлөп, йәнә киткән урындарына килеп сыҡтылармы?

Малай менән ҡыҙ туҡтап тирә-яғына ныҡлап күҙ ташланылар.

Алда станция күренә! Был тирәлә йөрөмәү хәйерле. Сөнки әҙәрләүселәрҙең бында ҡайтасағы көн кеүек асыҡ.

Бер аҙ барғас, яланға килеп сыҡтылар. Бында күҙҙең яуын алып төрлө төҫтәге сәскәләр үҫеп ултыра. Батыр менән Әмилә был матурлыҡҡа һоҡланып туҡтап ҡалды.

— Батыр, ҡара әле! — тип шыбырланы ҡыҙ, ҡапыл яландың арғы осона күрһәтеп.

Тегендә бик сәйер ҡиәфәттәге ике йәнлек үлән ашап йөрөй ине. Уларҙың баштары ҙур, аяҡтары нәҙек кенә, ҡанаттары йоҡаҡ, үтәнән-үтә күренеп тора.

— Себен түгелме? — тип һораны Батыр. — Һыйыр ҙурлыҡ себен буламы?

Ул арала себенгә оҡшаған йәнлектәр ҙә малай менән ҡыҙҙы күреп ҡалды. Шунда уҡ улар анһат ҡына өҫкә күтәрелделәр ҙә был яҡҡа табан яҡынлаша башланылар.

Ҡаушаған Батыр менән Әмилә урындарында ҡатып ҡалды. Нимә эшләмәкселәр? Һөжүм итмәкселәрме? Малай тирә-яғына ҡараны. Әгәр ул-был була ҡалһа, ҡайҙа ҡасырға? Улар сәскәләр менән һоҡланып яландың уртаһына килеп еткәндәр, ә бында йәшенерлек нәмә юҡ. Батыр тиҙ генә Әмиләнең ҡулындағы таяҡты тартып алды. Әгәр һөжүм итһәләр, ошоноң менән һаҡланып ҡарар.

Себендәр батырҙарға биш-алты аҙым етмәйерәк ергә төштөләр ҙә малай менән ҡыҙға ҡарап ҡатып ҡалдылар. Шунан береһе йәнә өҫкә күтәрелеп, осоп килгән килеш оҙон суҡышы менән Батырҙы суҡып алырға итте.

Әммә малай һаҡ тора ине. Ул ҡулындағы таяғы менән йыртҡыстың башына эләктерҙе. Теге «Ха-ап!» тип ҡысҡырып ебәрҙе, шунан йәһәт кенә боролоп, йәнә Батырға ташланды. Батыр тағы таяғын күтәреп йыртҡысҡа һелтәне. Был юлы себен дә таҫыллыҡ күрһәтте, тиҙ генә башын ситкә алды.

Өҫкә күтәрелеп алғандан һуң, йыртҡыс өсөнсө тапҡыр Батырға ташланды. Малай йәнә таяғын күтәрҙе... Ул тағы тегенең маңлайына тос ҡына эләктерҙе. Хатта йыртҡыстың башынан йәшел төҫтәге шыйыҡса аға башланы. Әммә себен дә бер аяғы менән малайҙы сапсырға өлгөрҙө. Малайҙың майкаһы йыртылып тегенең тырнағына эләгеп китте. Малайҙың яурынында оҙонса ҡыҙыл эҙ ҡалды. Унда ҡан тамсылары күренде.

Себен башҡаса һөжүм итеп торманы. Ул ситтәрәк ултырған дуҫы янына барып ҡунды ла ҡәнәғәт тауыш менән ҡорҡолдай-ҡорҡолдай майка киҫәген өҙгөсләргә кереште. Күрәһең, улар дошманын еңгәненә ышанды һәм шуны байрам итә башланы.

Ә малай менән ҡыҙ, һыйыр дәүмәлле себендән анһат ҡотолоуҙарына ҡыуанып, тиҙерәк был яландан китеү яғын ҡараны.

## ЗОЛО ТЕТРӘЙ

Яландан бер аҙ алыҫлашҡас, Батыр менән Әмилә бер ағас төбөнә ултырып, тынып ҡалды. Улар инде күптән тамаҡ ялғағандары юҡ. Тимәк, йәнә ризыҡты ҡайғыртырға кәрәк.

Бер аҙ хәл алғандай булғас, Батыр ағас башында үҫеүсе сәтләүекте өҙөп алыу өсөн килешле үлән-арҡан эҙләргә кереште.

Әмилә урынында ултырып ҡалды. Тағы ла бер-берeһен юғалтмаç өсөн, Батыр ҡыҙға ултырған урынынан бер ҡайҙа ла китмәскә ҡушты.

Бына Батыр арҡан тапты. Ана сәтләүекле ағастар. Хәҙер берeһенә тоҙаҡ ырғытасаҡ та...

Ҡапыл ҡайҙандыр килгән әкрен генә геүелдәү ишетелде. Малай һағайып ҡалды. Нимә был? Тауыш бик йыраҡтан килә кеүек. Әммә яңынан тыңлап ҡараһаң, эргәлә генә ишетелә һымаҡ. Бар ҡош-ҡорт шаулаша башланы, урман эсенән төрлө йыртҡыстарҙың үкергәне, баҡырғаны ишетелде.

Ул арала теге сәйер геүләү ҙә көсәйә төштө, хатта аяҡ аҫтындағы ер һелкенгәндәй тойолдо. Күңелдe аңлатып булмаған шом яулап алды.

Батырҙа сәтләүек ҡайғыһы китте. Ул ҡулындағы үләнарҡанды ергә ырғытып, Әмилә ҡалған яҡҡа йүгерҙе. Ҡапыл малайҙың аяғы аҫтындағы ер ситкә шылды. Батыр тәкмәс атып барып төштө. Шунда уҡ Батырҙың эргәһендә ер, бысаҡ менән теленгән ҡарбуз кеүек буйынан-буйына ярылып китте. Секунд һайын был ярыҡ киңәйә, тәрәнәйә башланы. Геүләү, күк дөбөрләүенә оҡшап, бар донъяны ялмап алды. Ярыҡ эсенән ялҡын телдәре күренде.

Батыр, урынынан ырғып тороп, ни эшләргә белмәй ҡатып ҡалды. Әмилә бит ярыҡтың теге яғында ҡалды! Ырғып сығырғамы? Юҡ, мөмкин түгел! Ярыҡтың киңлеге инде ете-һигеҙ метр тирәһе булып китте. Ә аҫта — ут, ялҡын! Батыр, башын борғослап тирә-яғына ҡаранды, ярыҡтың осо күренмәй.

Ялҡын, төтөн аша ярыҡтың теге яғында йүгергеләгән Әмилә күренеп ҡалды. Уларға хәҙер нисек осрашырға? Ярыҡ бит уң яҡта ла, һул яҡта ла урман эсенә инеп юғала. Мең йәшәр йыуан-йыуан ағастар, үлән кеүек анһат ҡына ҡайырылып, ярыҡ эсенә ҡолай. Ялҡын шунда уҡ уларҙы ялмап ала. Бер-ике йыртҡыстың да аҡыра-аҡыра утлы упҡынға төшөп киткәнлеге күренде. Нимә был? Планета уртаға ярылдымы? Әллә уның тетрәүе ошо буламы?

Нимә эшләргә белмәгән малай, ҡыҙға ҡараны ла, уң яҡҡа күрһәтеп ҡулын һелтәне, йәнәһе, әйҙә, шул яҡҡа табан атлайыҡ. Ҡасан да булһа ярыҡ бөтөр, шунда беҙ осрашырбыҙ... Әмилә башын һелкте, йәнәһе, аңланым... Ә үҙенең күҙҙәре тулы йәш...

Батырға ҡыҙ йәл булып китте. Ниңә уларҙың башына шул тиклем күп һынауҙар төшә? Кем ғәйепле быға? Үҙҙәренең бер-берeһен юғалтырға теләмәүеме? Әллә башҡа сәбәп бармы бында?

Батыр ошо хаҡта уйлай-уйлай ут, төтөн бөркөп торған ярыҡ буйлап алға атлай. Теге ярҙа, унан ҡалышмаҫҡа тырышып, ҡыҙ йүгерә. Ә тирә-йүндә ҡолаҡ тондорғос геүләү тора...

## ӘМИЛӘ ТАҒЫ ТОТОЛА

Батыр менән Әмилә ут йылғаһының ике яры буйлап инде ярты сәғәттән ашыу атлай. Ярыҡ йә киңәйә, йә бер аҙ тарая, әммә тамамланырға һис тә уйламай...

Малай ҡыҙ өсөн хафалана. Уның бит аяғы ауырта. Икенсенән, әгәр хәҙер Әмиләгә берәй ҡурҡыныс янаһа, Батыр бер ниндәй ҙә ярҙам күрһәтә алмаясаҡ. Иң үкенеслеһе ошо. Тиҙерәк ялҡын йылғаһының осона барып етергә кәрәк!

Күпмелер барғас, Батыр урман шырлығынан ниндәйҙер йәнлектеңме, әллә кешенеңме Әмиләгә яҡынлашып килгәнлеген шәйләп ҡалды. Малай туҡтай һалып, урманға ныҡлабыраҡ текәлде. Нимә унда? Йыртҡысмы? Әллә әҙәрләүселәрме? Икеһе лә ҡурҡыныс хәҙер Әмилә өсөн.

Унда, ысынлап та, нимәлер бар. Ул ҡыҙға яҡынайғандан-яҡыная. Ниндәйҙер ҡара күләгә. Ул ағастар араһынан арлы-бирле күренгеләп ҡала ла йәнә юғала.

— Әмилә! — тип ҡысҡырҙы Батыр ҡыҙҙы иҫкәртергә теләп. — Әмилә!

Әммә ярыҡтан килгән көслө геүләү арҡаһында, Батыр үҙ тауышын үҙе ишетмәне. Ә Әмилә, был яҡҡа ҡарарға онотоп, алға атлауын ғына белә.

Малай ҡыҙҙың иғтибарын йәлеп итеү өсөн ҡулдарын болғарға кереште. Ниһайәт, ҡыҙ уның яғына боролоп ҡараны. Батыр ым менән Әмиләгә ҡурҡыныс янауын аңлатырға тотондо. Артыңа әйләнеп ҡара. Унда кемдер ҡыуып килә һине. Хәҙер үк ҡас. Тиҙерәк ҡас!

Бына ҡыҙ артына боролдо. Һәм унда бик ҡурҡыныс нәмәне күрҙе шикелле, сөнки күҙҙәре ҙурайып асылды, йөҙөн оло хәүеф ялманы. Бына ул, ҡурҡышынан нимә эшләргә белмәйенсә, бер-ике аҙым артҡа сигенде, шунан ҡырҡа боролдо ла, аҡһаҡлай-аҡһаҡлай йүгерә башланы.

Батыр уның тапҡырынан бара. Малай инде үҙенең алдына ҡарамай. Уның бар уйы, ҡарашы, йөрәге теге яҡта. Кем ҡыуа ҡыҙҙы? Ул шул тиклем ҡурҡынысмы? Әгәр ул йыртҡыс Әмиләне ҡыуып етһә? Өҫтөнә ташланһа? Ул саҡта Батыр ни эшләр? Ҡул ҡаушырып был яҡта ҡарап торормо? Бәлки, утлы ярыҡ эсенә ырғып төшөп, теге яҡҡа сығырға маташып ҡарарғалыр? Батыр аҫҡа күҙ һалды. Юҡ шул! Уның төбө күренмәй. Эсенә төшһәң, ғүмерҙә лә сыға алмаҫһың.

Ул арала теге билдәһеҙ йәнлек Әмиләгә тамам яҡынлашты. Был үрмәксегә оҡшаған йыртҡыс ине. Ҙурлығы һыйыр тиклем. Тиҫтәгә яҡын оҙон аяҡтары һайғауға оҡшап тора. Башы ҙур, ауыҙынан ҡайсы кеүек бер нисә теше күренеп тора. Ҡурҡыныс!

Йыртҡыс, Әмиләнең әҙенә танауын төрткән дә, ашығып алға саба. Әмилә ҡасып ҡотолорға итә. Әммә йыртҡыстың тиҙҙән ҡыҙҙы ҡыуып етәсәге көн кеүек асыҡ! Үҙенең көсһеҙлегән аңлауҙан һәм ҡурҡыштан Батырҙың бөтә тәне ҡалтырай. Нисек ярҙам итергә? Әмилә, туҡта! Хәҙер ҡасыу файҙаһыҙ. Ҡулыңда бит таяғың бар! Шуның менән һаҡланырға тырыш!

Юҡ! Ҡыҙ ишетмәй. Ул һаман ҡаса...

Бына үрмәксенән Әмиләгә тиклем бер-ике аҙым ғына ара ҡалды. Йыртҡыс ҡыҙҙың өҫтөнә ташланыу өсөн сүкәйә башланы.

Ошо ерҙә Әмилә артына әйләнеп ҡараны һәм ҡото осоп ҡысҡырып ебәрҙе. Уның тауышын ишетмәне малай. Ауыҙының ҡырҡа асылыуын ғына күрҙе.

— Таяғың менән! — тип ҡысҡырҙы Батыр йәнә. — Таяғың!

Малайҙың кәңәшен ишеткәндәй, ҡыҙ ҡулындағы таяғын өҫкә күтәрҙе. Әммә йыртҡыс быға иғтибар биреп торманы, нисек сабып килһә, шул көйө ҡыҙҙың өҫтөнә ташланды. Ошо ерҙә Әмилә нисектер ситкә ялтанырға өлгөрҙө һәм таяғы менән үрмәксегә һуғып ебәрҙе. Тегеңә ныҡ ҡына эләкте шикелле, ул артҡараҡ сигенде, бер аҙ аптырабыраҡ торҙо. Шунан үҙенең төп дошманы кем икәнлеген аңлап, таяҡҡа ташланды. Киләһе секундта ул ағас киҫәген ауыҙына эләктерҙе һәм ҡыҙҙың ҡулынан йолҡоп та алды. Әмилә быны көтмәгәйне. Ҡоралһыҙ тороп ҡалғас бөтөнләй ҡаушаны, баҫҡан ерендә торорға ла, ҡасырға ла белмәне. Ул арала йыртҡыс таяҡты ҡайсы менән ҡырҡҡан кеүек бер-ике киҫәккә өҙгөләп ситкә быраҡтырҙы. Бына ул сүкәйҙе лә ҡыҙға ырғыны...

Батыр ҡурҡышынан күҙҙәрен йомдо. Әмиләне юғалтыуы ошомо?!

Малайҙың тубыҡтары ҡалтыраны, йөрәге туҡтап ҡалғандай булды. Ул үҙенең нисек итеп ергә ултыра төшкәнлеген тойманы...

Күпмелер ваҡыт үтте...

Малай әкрен генә ҡарашын теге яҡҡа күсерҙе.

Ә унда...

Унда Әмилә янында Йыуан, Һонтор һәм Тәпәш тора ине. Тәпәштең ҡулында пистолет. Уның көбәгенән төтөн ағыла. Күрәһең, Тәпәш пистолетының ялҡыны менән үрмәксене ауҙарған. Йыуан һәм Һонтор ерҙә ултырған Әмиләгә эйелгән...

Яңы ғына Батыр был өсәүҙән ҡурҡып ҡаса ине. Ә хәҙер уларҙың килеп сығыуына ысын йөрәктән ҡыуанды. Әгәр улар килеп етмәһә, Әмилә яҡты донъя менән хушлаша ине бит!..

Тик хәҙер Әмилә тотолдо. Уны хәҙер Ергә алып ҡайтасаҡтар ҙа Батырҙы онотторасаҡтар. Шунан мәңгегә Урға оҙатасаҡтар. Һәм улар бер ҡасан да осраша алмаясаҡ. Ҡот осҡос! Ә нимә эшләргә һуң? Уның бит ҡыҙҙы юғалтҡыһы килмәй...

Батыр урынынан торҙо. Ни эшләргә? Ҡайҙа барырға? Был планетала япа-яңғыҙ тороп ҡалырмы?

Батыр, ҡайҙа барғанлығын тоймайынса, ағас-үләндәрҙе йыра-йыра, Әмилә менән үҙен айырыусы утлы ярыҡтан ситкә атланы...

## ХӘЛИТ ХӘТЕРЛӘЙ

Әгәр Батыр, ысынлап та, уларға килгән икән, дуҫының берәй әйбере ҡалғандыр бит бүлмәлә. Хәлит ҡорт саҡҡандай, урынынан ырғып торҙо. Шунда уҡ уның күҙенә стенаға һөйәлгән ике портрет салынды. Кемдең һүрәттәре былар. Батыр килтергәнме? Ул бит рәссамлыҡҡа уҡый... Хәлит, портреттарҙы ҡулына алып, әйләндереп-әйләндереп ҡарарға тотондо.

Ҡара әле. Уларҙың икеһенең дә артына Батырҙың исем-фамилияһы яҙылған. Батырҙың һүрәттәре! Ул килгән, килгән!..

Тик ниңә Хәлит быны хәтерләмәй?

Малай йәнә һүрәттәрҙе әйләндерергә кереште. Кемдәр яһалған бында? Икеһе лә бер үк ҡыҙ түгелме? Исеме нисек? Портреттар «Ай ҡыҙы» һәм «Хыял ҡыҙы» тип атала...

Туҡта! Малай терт итеп ҡалды. Ул был ҡыҙҙы ҡайҙалыр күргән кеүек. Эйе, эйе! Күрҙе! Тик ҡайҙа? Ҡасан? Хәлит күпме генә уйлаһа ла быны иҫенә төшөрә алманы.

Батырҙың юғалыуы ошо ҡыҙға бәйле түгелме икән?

Хәлит йәнә бүлмәгә күҙ йүгертте. Был кемдең курткаһы, күлдәге? Был ниндәй салбар? Батырҙыҡы бит! Ул килгән!.. Тик ҡайҙа икән һуң ул? Ҡайҙа? Батып ҡына ҡуймаһа ярар ине. Хәҙер иң ҡурҡытҡаны ошо...

Ҡарана торғас, Хәлит өҫтәлдәге бер ҡағыҙға иғтибар итте. Унда Батырҙың ҡулы менән ниндәйҙер адрес яҙылғайны. Кемдең адресы был? Нимә кәрәк булған унда Батырға? Бәлки, ошо минутта дуҫы шундалыр? Хәҙер үк унда барып әйләнергә кәрәк!

Ярты сәғәт тә үтмәне, Хәлит был өйҙөң ишеге алдында тора ине инде. Тупһала урта йәштәрҙәге бер ағай күренде:

— Ә-ә-ә, һаумы, һаумы, улым! Йәнә килдеңме? Тағы нимә аңлашылмай?

Хәлит ҡаушабыраҡ ҡалды. Нимә һөйләй ул? Хәлит бит

бында тәүге тапҡыр килде. Ә ағай: «Йәнә килдеңме?» — тип һорай. Әллә килеп тә, бында булғанлығын онотҡанмы? Батырҙы хәтерләмәгән кеүек. Ә ҡасан килгән? Бер үҙеме, Батыр менәнме? Ниңә килгән?

— Э-э-э, тағы килдем... — тине Хәлит, ни эшләргә белмәйенсә. — Үткәндә...

— Иптәшең ҡайҙа?

— Ҡайһы иптәшем?

— Һуң, бер ҡыҙҙың ике һүрәтен алып килгәйнегеҙ бит. Шул ҡыҙҙы күрҙем бит мин теге саҡта. Һеҙ киткәс, мин ул хаҡта оҙаҡ уйланым. Шунан аптырауға ҡалдым. Иптәшең дә ул ҡыҙҙы күргәнме ни? Ә ҡайҙа күргән? Ниңә һөйләп торманы һис тә?

Хәлит был ағай янында оҙаҡ ҡына ултырҙы. Һөйләшә торғас, малай шуны аңланы: был ағай ҡасандыр осоусы «тәрилкә» күргән. Уның эсенән сыҡҡан ир кеше менән ҡыҙҙың йөҙөн хәтерләгән. Теге һүрәттәр шул ҡыҙҙың портреты икән.

Ағай осоусы «тәрилкә»нең ҡайһы тирәлә ер аҫтына төшөп китеүен әйтте. Хәлит аптырауға ҡалды. Уның бөгөн иҫенә килеүе лә шул тирәнән башланды. Унан алда ни булғанлығын хәтерләмәй.

Хәлит ҡайтырға атланы.

Батыр менән Хәлит ике көн элек был ағайҙан осоусы «тәрилкә»нең ҡайһы тирәлә ер аҫтына төшөүен белешкән. Шунан улар ни эшләгән? Ер аҫтына эләктеләрме? Әллә дуҫы аҫта ҡалдымы? Бәлки Батырҙы берәй тәжрибә үткәреү өсөн алып ҡалғандарҙыр, ә Хәлитте, кешегә һөйләп йөрөмәһен өсөн, барыһын да онотторол сығарып ебәргәндәрҙер...

Әгәр былар ысын икән, Батырҙы ҡотҡарырға кәрәк бит! Тик нисек?

Ни генә булһа ла осоусы «тәрилкә» ер аҫтына төшөп киткән урынға барырға кәрәк. Бәлки, берәй сараһы килеп сығыр. Һәм Хәлит дуҫын бәләнән ҡотҡарыр.

Хәлит өйөнә ҡайтып тормаҫҡа булды һәм боролоп яланға табан атланы.

## ҺАРЫ ҺАЙЫҪҠАН БҮЛӘГЕ

Нимә эшләргә, ҡайҙа барырға белмәйенсә, урман буйлап Батыр байтаҡ атланы. Яңы ғына хәле бөткән, асыҡҡан малай, хәҙер үҙенең арығанлығын да, ашағыһы килгәнлеген дә тойманы.

Әмилә тотолдо. Ни эшләргә? Мәңгегә яңғыҙы ошо планетала ҡалырмы? Быны күҙ алдына ла килтереүе мөмкин

түгел! Әллә эҙәрләүселәргә бирелергәме? Ләкин ул саҡта... Ҡыҙ ҙа, малай ҙа бер-береһен онотасаҡ! Онотorға мәжбүр итәсәктәр! Нисек итеп был рәхимһеҙ яҙмышҡа ҡаршы торорға? Ҡайһылай итеп көрәшергә? Ҡайҙан килеп сыҡты был тетрәүе? Әгәр ул булмаһа, Батыр менән Эмилә бергә булырҙар ине, эҙәрләүселәргә лә тотолмаҫтар ине. Әгәр уларҙан эҙ яҙлыҡтыра алһалар, икәүләшеп мәңгегә ошонда ҡалыр ҙа ҡуйырҙар ине...

Ә хәҙер был уйҙар буш хыял ғына. Эмилә тотолдо!..

Күпмелер атлағас, Батыр йылға ярына килеп сыҡты. Малай арығанлығын тойоп эргәләге япраҡ өҫтөнә ултырҙы.

Урман эсенән Ер кешеһе өсөн сәйер тауыштар ишетелә. Улар хәүефле лә, шомло ла. Әммә малайҙа тамсы ла ҡурҡыу тойғоһо юҡ. Уға бөтәһе лә барыбер... Әгәр хәҙер иң ҡурҡыныс йыртҡыс һөжүм итһә лә, ҡурҡып тормаҫ, үлгәнсе алышыр ине. Бар асыуын, бөтә ҡайғыһын һалып һуғышыр ине. Хатта был иң һәйбәте булыр ине. Әгәр яңғыҙы ҡалған икән, әгәр Эмиләне мәңгегә юғалтҡан икән, әгәр Ергә бер ҡасан да ҡайта алмай, дуҫтарын осрата алмай икән, ниңә йәшәргә?..

Баш осонда әлеге лә баяғы һары һайыҫҡандар осоп йөрөй. Күрәһең, улар был планетала бик күптер, сөнки ҡайҙа барма, ошо һайыҫҡандар көтөүенә тап булаһың. Ана, хәҙер ҙә уларҙың бер төркөмө Батыр янындағы ағасҡа ултырғандар ҙа ҡыҙыҡһынып малайға текәлгәндәр...

Ҡапыл малайҙың күҙенә ике сыйырсыҡ салынды. Ер сыйырсыҡтарына оҡшағандар. Хәйер, был сыйырсыҡтарҙы Ерҙән алып килделәр бит! Малай иң яҡын дуҫтарын тап иткәндәй ҡыуанды. Шул уҡ ваҡытта күңелен әллә ниндәй ауыр тойғо солғап алды. Был ҡоштар ҙа Батыр хәлендә бит — бер ҡасан да тыуған Еренә ҡайта алмаясаҡтар. Ҡыйын түгелме икән уларға? Хәйер, ҡоштар бит яңғыҙ түгел — яндарында бергә үҫкән туғандары, дуҫтары бар...

Ошо ерҙә Батыр һайыҫҡандарҙың береһенә иғтибар итте. Тегенең суҡышында ҙур ғына бер әйбер ялпылдай. Нимә ул? Япраҡ тиер ине, аҡ төҫтә. Ҡағыҙ тиер ине, был планетала ниндәй ҡағыҙ булһын?

Бер мәл баяғы аҡ әйберҙе тешләгән һайыҫҡан башҡалар янына барып ҡунды. Былары шаулашып китте. Күрәһең, тегенең ят та, билдәһеҙ ҙә нәмә алып килеүен яратманы. Шуға бер нисә һайыҫҡан аҡ нәмәне иптәшенең ауыҙынан тартып алырға маташты. Әммә теге ныҡ тешләгән, бирмәне. Шул саҡ был табышҡа башҡа һайыҫҡандар ҙа килеп йәбеште. Китте сыр-сыу, китте талаш. Мәҙәк!

Бына аҡ нәмә һайыҫҡандарҙың ауыҙынан ысҡынып Батырҙан бер нисә аҙым ситкәрәк ергә килеп төштө. Был ҙур ғына ҡағыҙ киҫәге булып сыҡты. Унда нимәлер яҙылған.

Малай бер карауҙа аңланы — Ур телендә! Хатта уҡырға маташты. Әммә ул Ур телен яҡшылап белмәй шул. Ләкин иң өҫкә яҙылған һүҙҙәрҙе аңланы: «Күҙәнәк пушкаһын эшләтеү инструкцияһы». Малай менән ҡыҙҙы был планетаға ташлаған пушканыҡымы икән? Ундай машина бында ла бармы? Барҙыр. Юғиһә эҙәрләүселәр нисек ҡайтыр Урға?

Тамам төшөнкөләккә бирелгән малайҙың күңелендә өмөт уянды. Әгәр ундай машина Золола бар икән, әгәр күҙәнәк пушкаһын эшләтеү инструкцияһы Батырҙың ҡулында икән, ниңә Ергә ҡайтырға маташып ҡарамаҫҡа?

Батыр урынынан ырғып торҙо. Теге станция ҡайһы яҡта ине әле? Ул алыҫ китмәне шикелле. Иң алда шуны табырға. Шунан... Шунан ни эшләргә кәрәклеге барғас беленер...

## «БАТЫРҺЫҘ ОСМАЙЫМ!»

Үрмәксегә оҡшаған йыртҡыс Әмиләнең ҡулын ныҡ ҡына ауырттырырға өлгөргәйне. Тәпәш ҡыҙҙың яраланған урынын әллә ниндәй майҙар һөртөп, бәйләп ҡуйҙы.

Был ваҡытта ярыҡтың теге яғында Батыр урман эсенә инеп юғалғайны.

Һонтор, Тәпәш һәм Йыуан, бер аҙ кәңәшләшкәс, Батырҙы эҙләп тормаҫҡа булды.

— Ярыҡтың теге яғына сығыу мөмкин түгел, — тине Тәпәш.

— Сыҡһаҡ та ҡайҙан табабыҙ беҙ уны. Хәҙер малай әллә ҡайҙа ҡасып өлгөргәндер инде, — тине Һонтор.

— Тимәк, — тип һығымта яһаны Йыуан. — Етәксе һораша башлаһа, үлде тиербеҙ ҙә ҡуйырбыҙ. Барыбер бер нисә көндән ул үләсәк.

Был һүҙҙәрҙе ишетеүе Әмиләгә бик ауыр. Батырҙы бында яңғыҙ ҡалдырып китеүҙе ул күҙ алдына ла килтерә алмай.

— Уны ҡалдырып китергә хаҡығыҙ юҡ! — тине ҡыҙ.

— Бәлки, юҡтыр, — тине Йыуан тыныс ҡына. — Әммә ул ярыҡтың теге яғында. Ә ярыҡ күпмегә һуҙыла? Быны бер кем дә белмәй.

— Һеҙ бит ярыҡтың осон эҙләп тә ҡараманығыҙ! — Әмилә асыулы өндәште.

— Уның осон таптыҡ та ти. — Йыуан һаман ғәмһеҙ генә һөйләшә. — Ләкин ул малайҙы табыу өсөн беҙгә кәм тигәндә ике-өс көн кәрәк буласаҡ. Ә беҙҙең алған запастарыбыҙ бөгөн бетә.

Һонтор менән Тәпәш Әмиләне етәкләп алды, Йыуан арттан төштө.

— Һеҙ — йыртҡыстар! — тине Әмилә. — Үҙегеҙ Ер кешеләренә тейеү түгел, улар менән аралашырға ла ярамай

тигән булаһығыҙ, ә үҙегеҙ, күрә тороп, бер Ер малайын үлемгә этәһегеҙ!

— Беҙҙең өсөн башҡа сара юҡ!

Ҡыҙ ҡапыл туҡтап ҡалды:

— Әгәр һеҙ уны тапмаһағыҙ, мин Ергә лә, Урға ла ҡайтмайым! Ә етәксегә, һеҙ малайҙы юрамал ҡалдырып киттегеҙ, тип әйтәсәкмен!

Ҡыҙҙың һуңғы һүҙҙәре Йыуанды һағайырға мәжбүр итте. Сөнки етәксе уға балаларҙың икеһен дә мотлаҡ алып ҡайтырға ҡушҡайны. Йыуан дуҫтары менән килешеп: «Малай үлде», — тип алдашыр, әлбиттә, әммә улар Әмиләнең ауыҙын яба алмай бит...

— Һин аңла! — Йыуандың асыуы килә башланы. — Беҙҙең уны эҙләп йөрөргә ваҡытыбыҙ юҡ!

— Үлтерергә хаҡығыҙ бармы?

— Ярай, станцияға ҡайтайыҡ әле, — тине Йыуан йомшағыраҡ тауыш менән. — Унда һөйләшербеҙ.

Станцияға килгәс, Йыуан дуҫтары менән кәңәшләште лә ҡалған ярты көндө малайҙы эҙләп ҡарарға булды. Әгәр ҙә инде кискә тиклем тапмаһалар, хәл юҡ — ҡалдырып китәләр... Урға тикшереү өсөн башҡа берәй Ер кешеһен алып китерҙәр әле. Әлбиттә, бер юлы ике Ер кешеһен юҡҡа сығарыу бик ҡурҡыныс. Әммә ваҡиғалар шулай боролоп киткәс, ни эшләйһең?..

Эҙләргә китер алдынан Йыуан Әмилә янына килде:

— Әмилә, беҙ һиңә ышанмайбыҙ. Станциянан ҡасыуың бар. Шуға күрә бәйләргә тура килә.

Әмилә ҡаршылашып маташты, әммә уны тыңлап та торманылар...

Бәйләнгән хәлдә күпме ултырғанлығын Әмилә хәтерләмәй. Йоҡлап та алды шикелле. Бер мәл ишек артында әкрен генә ҡыштырлау ишетелде. Ҡыҙ һағайҙы. Нимә унда? Теге өсәү ҡайтты тиер ине, улар һаҡ ҡыланып тормаҫ. Берәй йыртҡысмы? Ишек эстән эленмәй, ябылып ҡына ҡуйыла. Әгәр ул йәнлек ишекте аса алһа?

Бер ваҡыт ишек әкрен генә асыла башланы. Ҡыҙ унда әллә ниндәй ҡурҡыныс йыртҡысты күрергә әҙерләнде...

Ә ишектә... Батыр тора ине.

— Батыр! — тип ҡысҡырып ебәрҙе ҡыҙ шатлығынан. — Был һинме?

— Тс-с! — Малай бармағын иреннә тейгеҙҙе. — Ҡайҙа улар?

Батыр уның ҡулдарын ысҡындырған арала, Әмилә малайға бөтәһен дә һөйләп өлгөрҙө.

— Һине эҙләп киттеләр.

— Бында күҙәнәк пушкаһы бармы? — тип һораны Батыр.

— Бар. Тик мин уны эшләтә белмәйем.

Ошо ерҙә малай теге инструкцияны килтереп сығарҙы. Ҡыҙ ҡағыҙға күҙ йүгертеү менән, урынында ырғып китте.

— Батыр! Беҙ хәҙер үк Ергә ҡайтабыҙ!

Малай был инструкцияның нисек итеп үҙенә эләгеүен һөйләгән арала, ҡыҙ машинаны эшләтергә әҙерләне.

— Күрәһең, һайыҫҡандар инструкцияны ошонан урлаған, — тине ҡыҙ.

Бына Ерҙәге ҡабул итеү станцияһынан сигнал алынды. Ул әҙер ине.

Батыр менән Әмилә пушканың йәшниге эсенә инеп ултырҙы. Бер минуттан күҙәнәк машинаһы уларҙы күҙәнәктәргә таратты ла Ерҙәге станцияға тапшырҙы. Теге һә тигәнсе малай менән ҡыҙҙы киренән йыйҙы.

Тағы ике минуттан Батыр менән Әмилә Ер аҫтындағы станцияның коридорында тора ине инде.

Батырҙың ҡапыл бығa ышанғыһы ла килмәне. Нисек шулай анһат ҡына ҡайта алды улар? Әллә был күргәндәре өн түгел, ҡурҡыныс төш кенә булдымы? Ни генә булһа ла, Батыр йәнә Ерҙә! Әле Ер өҫтөнә күтәрелеү бик еңелдән түгеллеген аңлаһа ла, малай ысын күңелдән шатланды ошо минутта.

Батыр менән Әмилә станцияның ишегенә табан атланы. Хәҙер ошо тирәгә йәшенергә кәрәк. Берәйһе Ер өҫтөнә сыҡҡанда паролде әйтәсәк. Малай менән ҡыҙ уны ишетер ҙә, үҙҙәре лә өҫкә күтәрелер.

Станцияның ишеге янына йәшенә башлағайнылар, ҡайҙандыр... Хәлит килеп сыҡты. Батыр менән Әмиләнең күҙе шар булды.

— Һин һаман да бындамы ни әле? — тип һораны Батыр.

— Юҡ, — тине Хәлит Әмиләгә шикле ҡараш ташлап. — Мин бер сәғәт элек кенә төштөм. Ә был ниндәй ҡыҙыҡай?

Тәүҙә Батыр ҙа, Әмилә лә малайҙың был һорауына аптыраны, әммә тиҙҙән барыһын да аңланылар. Тимәк, Хәлитте онотторoусы тулҡын аша үткәреп өҫкә сығарып ебәргәндәр. Улайһа, нисек яңынан Ер аҫты станцияһына эләккән?

Һораша торғас, барыһы ла аңлашылды. Батыр менән Әмилә үҙҙәренең мажараларын, Хәлит бер көн эсендә күргәндәрен бер-береһенә һөйләп бирҙе.

Ошо ерҙә Хәлит йәнә бер хәбәр әйтеп ҡыуандырҙы. Баҡһаң, ул станцияның ишеге төбөндә сәғәттән ашыу йәшенеп тора икән. Шул арала ул ишекте астырыусы паролде ишеткән! «Ер — зәңгәр планета!»

Тиҙҙән ике малай менән ҡыҙ Ер өҫтөндә торалар ине инде.

Ә был ваҡытта Золо планетаһында Батырҙы таба алмайынса ҡайтып ингән Һонтор, Тәпәш һәм Йыуан станцияла

Әмиләнең юҡлығын күреп аптырап ҡалды. Әммә күҙәнәк пушкаһы янында ятҡан инструкцияны күргәс, нимәлер аңлағандай булдылар. Тиҙҙән компьютер уларҙың яңылышмағанлығын раҫланы: ул күптән түгел генә Ергә ике кешенең осҡанлығын әйтте.

Шунда уҡ Йыуан Ер аҫты станцияһының етәксеһе менән бәйләнешкә керҙе. Ашығыс рәүештә Ер аҫты станцияһын һөҙөп сыҡтылар. Ҡабул итеүсе машина малай менән ҡыҙҙың ҡайтыуын раҫлай, әммә улар бер ҡайҙа ла юҡ ине...

— Хәҙер үк ҡайтығыҙ! — тип бойороҡ бирҙе етәксе. — Улар Ер өҫтөнә күтәрелгән! Тиҙ арала икеһен дә табып станцияға килтерергә кәрәк!

Шунда уҡ Йыуан дуҫтары менән Ергә ҡайтырға әҙерләнә башланы. Хәҙер Әмилә менән теге малай Ерҙә икән — тотоуы ҡыйын булмаҫ. Сөнки Йыуан, һиҙҙермәй генә, ҡыҙҙың тәненә радиосигнал биреп тороусы кескәй генә датчик ҡаҙаны. Ул Әмилә ҡайҙа ғына ҡасһа ла, Йыуанға сигнал биреп торасаҡ...

## «ЕРҘӘ ҠАЛ, ӘМИЛӘ!»

Балаларҙы күргәс, Хәлиттең әсәһе ҡыуанып китте:

— Ҡайҙа йөрөйһөгөҙ? Асыҡҡанһығыҙҙыр бит! Ә был ҡыҙ кем була? Тәүге тапҡыр күрәм.

— Ул минең класташым, — тине Хәлит. Шунан, әсәһе шикле ҡараш ташлағас, өҫтәп ҡуйҙы. — Беҙҙең ҡалаға күсеп килгәндәренә бер генә ай. Һинең күргәнең юҡ уны.

Әсә ашарға әҙерләү өсөн кухняға йүнәлде, ә балалар Хәлиттең бүлмәһенә инде.

Станциянан сығып киттеләр ҙә ул. Ә ары ни эшләргә? Барыһының да башында ошо уй.

— Әмилә, ерҙә ҡал да ҡуй, — тине ҡапыл Хәлит. Был уй Әмиләнең дә башына килгәне бар. Тик Урҙа бит атаһы бар. Нисек уны ташламаҡ кәрәк? Батырҙы ла юғалтҡыһы килмәй. Әгәр Әмиләне Урға шул көйө генә ҡайтарып ебәрһәләр — бер хәл. Барыһын да онотторасаҡтар! Был инде Батырҙы юғалттым тигән генә һүҙ түгел...

Шуға ла Әмилә бошонҡо, өндәшмәй ултыра.

Батыр ҙа ләм-мим. Ни тиһен инде малай? Ҡал, тиер ине. Ул үҙе Урҙа түҙә алманы бит теге саҡта, Ерҙе һағынып ҡайтып китте. Етмәһә, Урҙа Әмиләнең атаһы бар. Ул нисек ҡыҙын башҡаса күрмәйенсә түҙер?..

— Ниңә өндәшмәйһегеҙ? — тип һораны Хәлит бер Батырға, бер Әмиләгә ҡарап. — Минеңсә, был бик шәп булыр ине!

— Юҡ, — тине Әмилә. — Мин Урға ҡайтырға тейешмен.

Шулай тине лә, ҡыҙ, урынынан тороп, тәҙрә янына килде. Ҡыйын ине уға. Әле Батыр эргәлә генә. Әммә нисек кенә борһаң да, алда уларҙы айырылышыу көтә. Мәңгегә айырылышыу! Ҡыҙҙың күҙҙәрендә йәштәр күренде...

Малайҙар ни тиергә белмәй баштарын эйеп ултыра.

Ҡапыл тәҙрәгә ҡарап торған ҡыҙ терт итеп ҡалды. Көтмәгәндә ҡаршылағы өйҙөң мөйөшөнән өс кеше килеп сыҡты. Был — Йыуан, Һонтор һәм Тәпәш ине! Улар атлаған һайын тирә-яҡҡа ҡаранып ала. Йыуандың ҡулында кескәй генә ҡумта. Ул ара-тирә шуға күҙ һала...

Әмилә тиҙ генә тәҙрәнән ситкәрәк шылды. Улар бит Золо планетаһында ҡалғайны. Ҡайһы арала ҡайтҡандар? Ә хәҙер Әмилә менән Батырҙы эҙләргә сыҡҡандармы? Әлбиттә, шулай!

Ҡыҙ Батырға боролдо:

— Батыр, ҡара!

Малай тәҙрәгә яҡынлашты ла әкрен генә шыбырланы:

— Улар!

— Кемдәр? — Бер ни аңламаған Хәлит тә тәҙрә янына килде. Әмилә уға был өс кешенең кемлеген төшөндөрөргә кереште.

Ә Батыр ашығып уйланы. Ни эшләргә? Тик торһалар, хәҙер быларҙың ҡулына эләгәсәктәр. Әмилә — бер хәл. Ул ҡасан да булһа, станцияға ҡайтырға тейеш. Әммә Батырҙың махсус тулҡын аша үтеп Әмиләне онотоорға теләге юҡ!

Ҡасырға! Тиҙерәк бынан, Сибайҙан китергә! Был өсәү Хәлиттәрҙең өйөн тапҡансы, улар подъездан сығып китергә өлгөрә! Шунан киске поезға ултырырға ла һыпыртырға Өфөгә!

Малай Әмиләнең янына килде:

— Әмилә! Киттек минең менән!

— Ҡайҙа?

— Өфөгә! Интернатҡа урынлашырһың. Бергә уҡырбыҙ! Әйҙә!

— Мин бит... — Ҡыҙ ҡапыл ни тиергә белмәне.

— Улар бит һине лә теге тулҡын аша...

— Беләм.

— Киттек! Һин бит Урға теләгән ваҡытыңда ҡайта алаһың!

Малайҙың һуңғы һүҙҙәре ҡыҙҙы шаҡ ҡатырҙы. Ысынлап та, ниңә ҡурҡа әле ул Ерҙә ҡалырға? Ул бит ҡасан теләй, шунда ҡайта ала атаһы янына! Тимәк... Ҡала

Әмилә Ерҙә ҡала, Батыр янында! Ниңә ошоғаса был уй башына килмәгән?

— Әйҙә! — тине ҡыҙ тәүәккәл тауыш менән.

— Беҙҙең менәнме?! — Батыр ҡыҙға ышанмайыраҡ ҡараны.

— Һеҙҙең менән!

— Улайһа, хәҙер үк китәбеҙ!

— Нисек инде? — Бындай боролошто көтмәгән Хәлит аптырап ҡалды.

— Беҙгә китергә кәрәк, — тине Батыр. — Юғиһә теләләрҙең ҡулына эләгәбеҙ.

Батыр тиҙ-тиҙ генә әйберҙәрен төйнәне. Хәлиттең әсәһе ашарға саҡырырға ингәндә, балалар, әҙерләнеп бөтөп, ишеккә йүнәлгәйне.

— Ҡайҙа киттегеҙ? — Әсә аптырап ҡалды. — Ашамайһығыҙмы ни?

— Апай, рәхмәт, — тине Батыр. — Беҙ бик ашығабыҙ!

...Ярты сәғәттән Батыр менән Әмилә поезда Өфөгә ҡарай елә ине. Алда ни көтә? Эҙәрләүҙән ҡотола алырҙармы? Ҡыҙ күпме булыр Ерҙә?

Быны әлегә Батыр ҙа, Әмилә лә белмәй. Улар был минутта тәҙрә артында елпелдәп артта ҡалыусы тәбиғәт менән һоҡлана һәм һаман да бергә булыуҙарын тойоп ҡыуана ине...





# «ҠАРСЫҒА» МЕНӘН АЛЫШ

## ТЕЛЕГРАММА

Батыр менән Әмилә интернаттың ятағына инеүҙәре булды, вахтер әбей ҡыуанып ҡаршы торҙо:

— Батыр! Һиңә — телеграмма! Һин булмағас, мин уның менән ни эшләргә белмәй ултыра инем. Әллә белеп килдеңме?

Малай аптырап ҡалды. Ниндәй телеграмма? Кемдән? Уларҙың бөгөн Өфөгә килерен Хәлиттән башҡа бер кем дә белмәй бит... Ә телеграмма Хәлиттең үҙенән булып сыҡты.

«Дүртенсе июнь Сибай — Өфө самолеты менән киләм. Ҡаршылағыҙ. Хәлит».

Дүртенсе июнь — бөгөн. Хәлит кисә генә уларҙы оҙатып ҡалды. Унда малайҙың Өфөгә килере хаҡында бер һүҙ ҙә булманы. Киреһенсә, бик оҙаҡҡа айырылышҡан кеүек хушлашҡайнылар. Шул арала ни булған? Ниңә Хәлит бында ашыға?

Батыр сәғәтенә ҡараны. Сибайҙан самолет бер сәғәттән килә. Аэропортҡа тиклем юл оҙон ғына. Ҡабаланырға кәрәк!

Батыр менән Әмилә вахтер әбей менән хушлашты ла, уның янына сумкаларын ҡалдырып, тышҡа сыҡты.

— Әллә беҙҙе эҙәрләүселәр Хәлитте тоттомо икән? — тип борсолдо Әмилә.

— Юҡтыр. — Батыр ҡыҙҙы тынысландырҙы. — Улар бит Хәлитте белмәй.

Улар аэропортҡа килеүгә, радио аша Сибай самолетының ергә төшөүе хаҡында хәбәр иттеләр. Малай менән ҡыҙ пассажирҙар сыға торған ишек төбөнә йүгерҙе. Бына ул асылды, беренсе булып өҫтөнә куртка менән шортик кейгән, ҡулына спорт сумкаһы тотҡан Хәлит күренде.

Кисә генә айырылышыуҙарына ҡарамай ярты йыллап күрешмәгән кешеләр кеүек ҡыуаныштылар. Хәлит һүҙҙе оҙаҡҡа һуҙмайынса хәлде аңлатып бирҙе.

Кисә Батыр менән Әмиләне поезга ултыртып ебәргәс, Хәлит өйөнә табан атлаған. Ишек алдына ингән мәлдә мөйөштәге эскәмйәлә ниндәйҙер таныш түгел кешеләр менән ултырған Мансур ағаһын күрә малай. Хәлиттең ул ағаһы Өфөлә йәшәй. Әле эш менән бер аҙнаға Сибайға килгән. Хәлит өйгә инмәйенсә тегеләрҙең янына бармаҡсы була. Көтмәгәндә Мансур ағаһы, яҡынлашып килгән ҡустыһын күреп ҡала ла, уны ҡыуырға тотона:

— Нимә кәрәк һиңә? Бар кит! Кит!

Хәлит аптырап ҡала. Сөнки Мансур ағаһы бик йомшаҡ күңелле кеше. Ошоғаса ул Хәлит менән һәр саҡ матур ғына итеп һөйләшкән, буш ваҡыттарында үҙенең һөнәре хаҡында — ул төҙөүсе-архитектор булып эшләй — мауыҡтырғыс нәмәләр һөйләгән. Һәм ҡапыл шулай тупаҫ ҡылана...

Малай кире боролған, әммә ағаһының шулай ҡырҡа үҙгәреүендә ниндәйҙер сер булырға тейешлеген тойомлаған. Бының сәбәбе — эргәһендәге таныш түгел кешеләр түгелме икән? Ошо ерҙә малайҙың башына бер уй килә. Ул өйөнә ҡайтҡан кеше кеүек ҡылана ла, подъездға еткәс, ҡырҡа боролоп, эргәләге ағастар араһына сума. Шунан йәшеренеп кенә Мансур ағаһы таныш түгел кешеләр менән һөйләшеп ултырған эскәмйә янына килә.

Ят әҙәмдәрҙең Мансур ағайға дуҫ түгеллеге бер ҡарауҙа уҡ күренә — тегеләр бик уҫал тауыш менән өндәшә, Хәлиттең ағаһы ла, быларҙан нисек ҡотолорға белмәгәндәй, өҙөк-өҙөк яуап бирә. Тәүҙә Хәлит уларҙың нимә хаҡында һөйләшеүен яҡшылап ишетә алмай. Шунан малай, ағастарға ышыҡланып, эскәмйәгә яҡынлаша.

— Улай, булғас, — ти шул саҡта ят ирҙәрҙең береһе, — беҙ һине Өфөгә алып китәбеҙ.

— Мин бара алмайым, — тине Мансур ағай ҡәтғи тауыш менән. — Бында эштәрем бөтмәне.

— «Ҡарсыға» беҙгә асыҡ әйтте! — Ир ҡаты ғына өндәште. — Икеһенең береһе: йә һин урынды әйтәһең, йә үҙең «Ҡарсыға» менән осрашаһың! Ул ике һөйләмәй.

Ошо ерҙә Хәлиттең аяғы аҫтындағы ағас шартлап һына, теге ирҙәрҙең береһе боролоп ҡарай. Әммә малай эргәләге йыуан ағастың олонона ышыҡланырға өлгөрә.

— Ул һыра батшаһына әйтегеҙ! — Мансур ағайҙың шулай тигәнен асыҡ ишетә Хәлит. — Мин уға бер ниндәй ҙә урынды күрһәтмәйем!

Ары ни булғанлығын малай аңламай ҙа ҡала. Ҡапыл эскәмйә янында ниндәйҙер ығы-зығы булып ала. Бер нисә секунд үтеүгә эргәлә торған «Жигули» машинаһы ҡуҙғалып та китә. Эскәмйәлә бер кем дә ҡалмай. Ят ирҙәр Мансур ағайҙы үҙҙәре менән алып киткәндәр.

Хикәйәһенең ошо урынына еткәс, Хәлит туҡталып ҡалды.

— Шунан? — тип һораны Батыр. — Уны ҡайҙа алып киткәндәр? Белештеңме? Шуға ашығып килдеңме Өфөгә?

— Туҡта, һөйләп бөткәнде көт! — Хәлит, ауыр эш башҡарғандай, күкрәген тултырып тын алды. — Мин күргәндәремде атайыма һөйләргә өйгә йүгерҙем. Юл ыңғайында почта йәшнигенән гәзиттәрҙе алһам, араһынан бер ҡағыҙ киҫәге килеп төштө. Бына ул!

Батыр менән Әмилә Хәлит биргән ҡағыҙға күҙ йүгертте.

«Мансурҙы беҙ урланыҡ. Милицияға хәбәр итеп тороу кәрәкмәҫ. Юғиһә һеҙ уны башҡаса тере килеш күрә алмаҫһығыҙ».

Батыр менән Әмилә бер-береһенә ҡарашып алды, шунан ҡараштарын Хәлиткә күтәрҙе.

— Ошоно уҡығас, мин барыһын да аңланым, — тип дауам итте һүҙен Хәлит. — Мансур ағайымды Өфөгә алып киткәндәр. Унан нимәнелер әйттерергә итәләр. Уны ыҙалатасаҡтар! Ә милицияға әйтергә ярамай! Мин уйланым да... атайым менән әсәйемә лә бер ни һиҙҙермәҫкә булдым. Улар ҡайғырасаҡ... Милицияға шылтырата башлаясаҡ. Шунда уҡ почтаға барып һеҙгә телеграмма бирҙем. Ә өйҙәгеләргә: «Мансур ағай менән Өфөгә киттем», — тигән ҡағыҙ ҡалдырҙым.

— Хәҙер ни эшләргә уйлайһың? — тип һораны Батыр.

— Мансур ағайҙы ҡотҡарабыҙ! — тине Хәлит ышаныслы тауыш менән.

— Ә нисек? — тип һораны Әмилә. — Беҙ бит уны кем урлағанын да белмәйбеҙ!

— Ниңә белмәй, ти? Ул һыраханатирәһендә эшләй. Ҡушаматы — «Ҡарсыға»!

— Өфөлә һыраханаларҙың иҫәбе-һаны юҡ! — Батыр йөҙөн һытты. — Милицияға хәбәр итергә кәрәк.

Хәлит дуҫына асыу менән ҡараны:

— Был запискала ни яҙылғанын аңламаныңмы ни?

— Улар юрамал яҙған! Ҡурҡытыр өсөн. Һеҙ бер кемгә лә хәбәр итмәһен өсөн!

— Юҡ! — Хәлит Батырға тишә яҙып ҡараны. — Улар шунда уҡ Мансур ағайҙы үлтерәсәк!.. Һеҙ нимә — миңә ярҙам итергә теләмәйһегеҙме?

— Үҙең уйлап ҡара... — Батыр Хәлиткә аңлатыу өсөн ауыҙын асты.

— Их, һеҙ! — Хәлит ҡапыл дуҫтарына үпкәләгән ҡараштарын сәнсте. — Мин, һеҙ тип... Ярай! Мин үҙем дә!..

Хәлит Батыр менән Әмиләне ике яҡҡа этте лә ситкә атланы. Секунд һайын ул алыҫлаша. Батыр менән Әмилә ни эшләргә белмәй Хәлиткә ҡарап тора. Ул бит Өфөнө бөтөнләй белмәй. Икенсенән, бер үҙе ни ҡыла ала? Әммә малайҙы туҡтатып та булмай...

Ҡапыл Әмиләнең күҙҙәре ҙурайып асылды, ул малайҙың беләгенән тотоп алды. Батыр, ҡырҡа боролоп, ҡыҙ ҡараған яҡҡа ҡараш ташланы. Аэропорт эсенән Ер аҫты станцияһы кешеләре — Йыуан менән Һонтор сығып килә ине...

## ХӘЛИТ ЮҒАЛА

Шик юҡ — Йыуан менән Һонтор Өфөгә Әмилә менән Батырҙы эҙләп килеп еткән. Тик ҡайһы арала малай менән ҡыҙҙың аэропортта икәнлеген белгәндәр? Ҡотолдоҡ, инде эҙәрләүселәр тиҙ арала беҙҙең эҙгә төшә алмаҫ, тип өмөтләнгәйнеләр. Баҡһаң, улар малай менән ҡыҙҙың Өфөлә икәнлеген белеү генә түгел, әллә ҡайһы арала аэропортта йөрөгәнлеген һиҙгәндәр.

Оҙаҡ уйлап торорға ваҡыт юҡ ине. Ана Хәлит ҡалаға китеүсе автобусҡа инеп тә бара. Батыр менән Әмилә, эҙәрләүселәргә күренмәҫкә тырышып, туҡталышҡа табан йүгерҙе. Хәҙер нисек тә Хәлитте юғалтып ҡуймаҫҡа...

Әммә малай менән ҡыҙ туҡталышҡа барып етергә өлгөрмәне, Хәлит ултырған автобустың ишектәре ябылды, ул ҡуҙғалып та китте. Батыр менән ҡыҙ, ни эшләргә белмәйенсә, аптырап ҡалды. Бер бәләгә икенсеһе өҫтәлергә тора. Һонторҙарҙың етеп килеүе — бер, хәҙер бына Хәлит юғалһа...

Батыр эргәнән үтеп барған таксиға ҡул күтәрҙе. Әгәр уға эләкһәләр, ҡалаға киткән Хәлитте табыуы ла, былардан ҡотолоуы ла еңелерәк булыр. Әммә такси, буш булыуына ҡарамай, туҡтамайынса үтеп китте. Икенсеһе менән дә шулай булды. Ситтәрәк торған Әмилә Батыр янына йүгереп килде:

— Батыр, ҡара!

Малай Әмилә күрһәткән яҡҡа күҙ һалды. Туҡталышҡа табан Йыуан менән Һонтор ҡабаланып атлай. Һонторҙоң усында шырпы ҡабынан саҡ ҡына ҙурыраҡ ниндәйҙер әйбер күренә. Ул ваҡыт-ваҡыт шуға ҡарап ала.

— Унын кулында — прибор! — тине кыз курккан тауыш менән. — Миңә улар радионөктә йәбештергәндәр! Ул туктауһыҙ радиосигнал бирә. Шуға ла улар беҙҙе тиҙ генә таба!

Батыр был һүҙҙәргә нык ғәжәпләнде:

— Ниндәй радионөктә? Ул бит һиндә күренмәй.

— Ул шундай бәләкәй! Күҙгә лә күренмәй!

— Уны һинән алып ташлап булмаймы?

— Юк! Уның өсөн махсус прибор кәрәк!

Ул арала Йыуан менән Һонтор туктальшка килеп етте.

— Кастык бынан! — Батыр кыҙҙың кулынан тотто. — Юғиһә хәҙер эләгәбеҙ!

Кыҙ менән малай тыныс кына киәфәттә эргәләге ағастар араһына инде лә йән-фарманға алға ташланды. Хәҙер мөмкин тиклем был тирәнән алыҫлашырға кәрәк. Юғиһә тегеләр приборҙарына карап Әмиләнең ошо тирәлә икәнлеген аңлағандарҙыр, шуға кыҙҙы йәһәтерәк эләктерергә тырышасактар.

— Хәҙер оло юлға сығабыҙ, — тине Батыр йүгереп барған көйө. — Ул бынан алыҫ түгел. Шунан берәй машинаға ултырып Өфөгә китәбеҙ.

Урман куйы ғына. Ашығып барғас, аҙым һайын берәй ботак йә биткә сәпәй, йә кейемдән эләктереп ала. Ә Батыр уның һайын кабаландыра:

— Әмилә, тиҙерәк! Сак кына түҙ! Оло юлға күп тә калманы!

Улар йүгерә. Кыҙҙың инде тамам хәле бөттө. Тағы сак кына барһалар, ул арып ергә йығылыр кеүек. Ә оло юл һаман юк та юк...

## ХӘЛИТ ӨФӨЛӘ

Дуҫтарына Хәлиттең бик нык асыуы килде. Уларға ышанып юлға сыкты, ярҙам итерҙәренә тамсы ла шиге юк ине. Ә улар... Курккактар!.. Хәлит бит Өфөнө бөтөнләй белмәй. Ә Батыр, ни тиһәң дә, баш калала бер йыл йәшәне. Икенсенән, Мансур ағаһын өсәүләшеп эҙләүе күпкә еңелерәк тә булыр ине... Һатлык йәндәр! Хәлит башкаса улар менән һөйләшмәйәсәк тә!

Малай аэропортта автобуска ошондай уйҙар менән инеп ултырҙы. Батыр менән Әмилә тороп калған якка боролоп та карамам тиһә лә, автобус куҙғалып киткәс, Хәлит түҙмәне, тәҙрәгә күҙ һалды. Батыр менән Әмилә туктальшка табан йүгерә ине. Әллә уйҙарынан кире кайттылармы икән?.. Их, өлгөрмәнеләр! Малайҙың күңелен юкһыныу солғап алды. Дуҫтарына асыуы килһә лә, уларҙан айырылыуы кыйын ине...

Бына туҡталышта тороп ҡалған Әмилә менән Батыр күҙҙән юғалды. Хәлит уйға сумды. Хәҙер ни эшләргә? Эҙләүҙе нимәнән башларға? Дөрөҫ, йәбешеп китерлек ике урын бар. Мансур ағайҙы урлаған кешеләрҙең башлығы «Ҡарсыға» тигән ҡушамат йөрөтөргә тейеш. Ул һыраxана тирәһендә эшләй. Тик былар ғына Мансур ағайҙы табырға мөмкинселек бирерме? Етмәһә, Батыр Өфөлә һыраxаналар бик күп тине. Уларҙы урап сығырға бер үҙенең хәле етерме? Хәйер, ҡурҡырға ярамай, ваҡыты күп, аҡсаһы бар. Мәктәп участкаһында ул быйыл яҙ яҡшы ғына аҡса эшләп алғайны. Магнитофон алырмын, тип хыяллана ине. Мансур ағаһын ҡотҡарырға кәрәк саҡта һаранланып тормаҫ. Тик шуныһы борсолдора — төндәрен ҡайҙа йоҡлап йөрөр? Батырҙың интернатына өмөт бағлағайны ла бит...

Автобус шәп кенә елдерә, әммә Өфө һаман да күренмәй әле. Туҡта, ниңә Хәлит ваҡытты әрәм итә? Эргәлә бер оло ғына ағай ултыра. Ул ошо тирәләге һыраxаналарҙың ҡайҙа урынлашҡанын беләлер бит.

Ағай кеше, малайҙың һорауын ишеткәс, уға аптырап ҡараны:

— Һиңә һыраxананы эҙләргә иртә бит әле!

— Минең ағайым һыраxанала эшләй, — тип күҙ ҙә йоммайынса алданы Хәлит. — Ҡайһыныһында икәнлеген онотҡанмын. Адресын да белмәйем.

— Улай икән, — тине теге ир. Шунан нисек итеп Өфөгә ингән ерҙәге һыраxаналарҙы табырға кәрәклеген өйрәтә башланы.

Тиҙҙән Хәлит тәүге һыраxананың янында тора ине инде. Бында бик күп ирҙәр ҡайнаша. Сибайҙа ла һыраxана янында халыҡ ошолай күп була. Ул һыраның нимәһен табаларҙыр, малай аңламай.

Хәлит һыраxанаға инде. Бында шау-шыу, тәмәке төтөнө, сират. Ун өс йәшлек малайға иғтибар итеүсе лә булманы. Хәлит алғараҡ үтеп, һыра һатыусы иргә яҡынлашты. Шунан, уңайы сығыу менән тегеңә өндәште:

— Миңә «Ҡарсыға» кәрәк ине.

— Кем, кем? — тип һораны һыра һатыусы эшенән айырылмайынса.

— «Ҡарсыға».

— Кем ул?

— Һеҙ белмәйһегеҙме?

— Тәүге тапҡыр ишетәм.

Хәлит, ары ни эшләргә белмәйенсә, улай-былай итте лә, аптырағас, ишек алдына сыҡты.

Көн йылы. Урамдан кешеләр үтеп тора. Ана Хәлит йәшендәге ике малай ҡулдарына ҡармаҡ тотоп алған. Өс ҡыҙ туңдырма ашап китеп бара... Һәр кемдең үҙ эше. Уларға

рәхәт — баштарында сиселешһеҙ һорауҙар ҙа юҡ, ашығырға ла кәрәкмәй. Ә бына Хәлит... Хәҙер ни эшләргә тейеш ул? Әгәр икенсе, бишенсе, унынсы һыраханала ла «Ҡарсыға»ны белмәһәләр? «Ҡарсыға»ны тапҡан хәлдә лә, ни эшләргә тейеш малай? Теге бит Мансур ағайҙы ҡайҙа иткәнлеген шунда уҡ әйтеп һалмаҫ. Малайҙың башында һорауҙар күп, әммә береһенә лә әлегә яуап юҡ...

## ХӘЛИТ ҠАЙҘА?

Оло юлда Әмилә менән Батырға оҙаҡ ҡына торорға тура килде. Күпме генә ҡул күтәрһәләр ҙә, уларҙы алырға теләүсе машина булманы. Ә малай менән ҡыҙға бер урында оҙаҡ тороу ҡурҡыныс. Көтмәгәндә урман эсенән Йыуан менән Һонторҙоң килеп сығыуы бар. Шуға күрә лә Батыр менән Әмилә, оҙаҡ уйлап тормайынса, юл буйлап ҡалаға табан атланылар. Арттан машина тауышы ишетелһә, туҡтап ҡул күтәрәләр. Әммә әлегәсә уларҙың береһе лә туҡтаманы.

Малай менән ҡыҙ ашыға. Сөнки улар һиҙә: эҙәрләүселәр ҙа оло юлға етеп килә. Шуға күрә урман ситенән атлайҙар, ураған һайын арттарына әйләнеп ҡарайҙар. Иң мөһиме — тегеләрҙең күҙенә салынмау. Әгәр улар күреп ҡалһалар — ҡотолоп булмаясаҡ.

Тағы бер машина туҡтамайынса үтеп китте. Киләһе машина күренгәнсе, Батырҙар урман эсенә инә һалдылар ҙа алға ашыҡтылар. Ағастар араһынан атлауы уғата ауыр. Ботаҡтар күҙгә инеп бара. Уларҙан һаҡланам тип, өҫкә ҡарап атлаһаң, аҫта ятҡанына эләгеп ҡолап бараһың. Эргәлә генә тап-таҡыр асфальт юл ятҡанлығын белгәс, урман эсенән атлауы бигерәк тә ауыр. Ләкин башҡаса сара юҡ.

Батыр йәнә артына әйләнеп ҡараны ла ҡапыл сүкәйҙе, ҡыҙҙы үҙе янына тартты. Сөнки уларҙан өс йөҙ аҙымдар тирәһе арттараҡ урман эсенән Йыуан менән Һонтор сығып килә ине. Һонтор атлаған һайын усына ҡарап ала. Унда — прибор! Тимәк, улар Әмиләнең ошо тирәлә икәнлеген белә!

Хәҙер юлға сығып машина туҡтатыу тураһында уйларға ла ярамай. Берҙән-бер юл — урман араһынан Өфөгә табан ҡасыу.

Батыр ҡыҙҙы етәкләп алды:

— Әйҙә!

Улар юлдан алыҫҡараҡ, урман эсенәрәк инде лә алға йүгерҙе. Тиҙерәк! Тегеләрҙең күҙенә салынмаҫҡа, уларҙан мөмкин тиклем алыҫайырға кәрәк.

Күп барманылар, бер аҡланға килеп сыҡтылар. Уның арғы осонда кескәй генә өйҙәр күренде. Батыр белә: был Өфө халҡының баҡсалары. Уларҙы үткәс, Ағиҙел йылғаһы

булырға тейеш. Тимәк, Өфөгә тиклем алыҫ ҡалмаған. Тик бына уларҙың хәле бөтә башланы.

Бер аҙҙан Әмилә артҡа тартыла бирҙе лә бөтөнләй туҡтап ҡалды:

— Арыным! — тине ул ауыр итеп тын ала-ала. — Ял итеп алайыҡ!..

Улар аҡлан уртаһында тора.

— Беҙгә бында ҡалырға ярамай! — Малай ҡыҙҙы алға тартты. — Аҡланды үтәйек. Шунан, өйҙәр араһына ингәс, туҡтап алырбыҙ.

Малай менән ҡыҙ, һуңғы көстәрен йыйып, йәнә алға йүгерҙе. Батырҙы тағы бер нәмә борсой. Хәлит ҡайҙа? Их, бая үҙҙәре иҫәр булды! Ниңә инде Хәлиткә ҡаршы һүҙ әйтеп торорға? Сибай тиклем Сибайҙан килгән икән Мансур ағаһын табам тип, ул инде барыбер үҙ уйынан баш тартмаясаҡ бит. Дуҫының йәненә теймәгән булһа, хәҙер, исмаһам, бергә китеп барырҙар ине. Уны ҡайҙан табырға? Хәлит бит Өфөнө бөтөнләй белмәй. Икенсенән, ағаһын ҡотҡарам тип, үҙенең тегеләр тырнағына эләгеүе бар. Тиҙерәк ҡалаға барып етергә лә берәй иҫәрлек эшләп ташламаҫ борон Хәлиттең үҙен табып алырға кәрәк...

Өйҙәр араһына инеү менән уңайлыраҡ урын табып ял итергә ултырҙылар. Бынан бөтә аҡлан ус эсендәге кеүек күренеп тора. Әгәр урман эсенән эҙәрләүселәр килеп сыҡһа, улар шунда уҡ малай менән ҡыҙҙың күҙенә салынасаҡ.

Батыр үҙенең асыҡҡанлығын тойҙо. Шулай булмай ни! Улар бит инде бер тәүлек тиерлек ауыҙҙарына тәғәм дә ҡапҡандары юҡ! Батыр нисек тә түҙер ул, ә бына Әмилә... Малай һиҙҙермәҫкә тырышып ҡыҙға ҡарап алды. Арығанлығы Әмиләнең йөҙөнә сыҡҡан. Ул хатта ябығып киткән кеүек күренде. Күпме ыҙа-михнәттәр күрҙе улар ошо көндәрҙә! Рәтләп ял иткәндәре, һәйбәтләп тамаҡ ялғағандары юҡ. Гел генә аяҡ өҫтө, гел генә ҡасып-боҫоп йөрөү. Бөтәһе лә бер-береһен юғалтырға теләмәүҙән... Батыр бит ҡыҙға бик ныҡ күнекте. Унан башҡа үҙенең тормошон күҙ алдына ла килтерә алмай. Әмилә уның өсөн Ер шарында, юҡ, бар ғаләмдә иң яҡын кеше! Шуға күрә, Батыр бөтә ҡыйынлыҡтарға түҙергә риза, фәҡәт Әмилә генә һәр саҡ янында булһын. Ә ҡыҙ нисек уйлай икән был хаҡта? Һуңғы көндәрҙә күргән ауырлыҡтарҙан һуң үҙ уйынан кире ҡайтмаҫмы? Юҡтыр. Юғиһә ҡыҙ бындай ниәтен күптән һиҙҙерер ине. Ана бит, арыған булһа ла, малайҙың ҡарашын һиҙеп, уға боролдо ла, маңлайына төшкән сәстәрен артҡа һирпеп, матур ғына йылмайҙы. Йылмайыу уға шундай килешә!..

— Ниңә шулай ҡарайһың? — тип һораны үҙе.

— Арыныңмы? — Батыр уйҙарын һиҙҙермәҫкә тырышты.

— Саҡ ҡына.
— Һиңә ҡыйындыр инде...
— Ә ниңә ҡыйындыр тип уйлайһың?
— Һуң... — Батыр ҡапыл ни әйтергә белмәне. — Әгәр Урғаҡайтып китһәң, ошолай ыҙаланып та йөрөмәҫ инең...
— Һин минең ҡайтып китеүемде теләйһеңме?
— Юҡ, — тине Батыр. — Юҡ, Эмилә...
— Әгәр ҡайтып китһәм... — Ҡыҙҙың тауышы ҡапыл ҡалтыраны. — Мин һинһеҙ... Батыр...

Ҡыҙ әйтеп бөтөрмәне, ҡарашын ситкә алды, шунан ни өсөндөр:

— Көн шундай матур, эйе бит, — тип кенә ҡуйҙы. Көн, ысынлап та, матур ине. Күк йөҙөндә бер болот әҫәре юҡ. Ара-тирә генә ел иҫеп ҡуя. Баш өҫтөндә япраҡтар серле ҡыштырлай. Әргәлә ҡоштар һайрай, сиңерткәләр серелдәшә. Эйе, бөгөн йәй башында була торған иҫ киткес матур көндәрҙең береһе ине.

— Беҙҙең Урҙа ла ошондай көндәр була, — тине Эмилә. — Хатта ҡайсаҡ миңә икәүләшеп беҙҙең планетала йөрөйбөҙ кеүек...

Батыр өндәшмәне. Ҡыҙҙың ҡапыл Урҙы иҫкә төшөрөүе юҡҡа түгеллеген аңлай ул. Үҙе лә Урҙа саҡта кәрәккәндә лә, кәрәкмәгәндә лә Ер хаҡында һөйләргә ярата торғайны. «Ер» һүҙен әйткән һайын үҙ планетаһына ҡайтып әйләнгәндәй була ине малай. Тыуған төйәкте нык һағыныу билдәһе был... Эмиләнең Урҙы бик тә күргеһе килә. Тик Батыр ғына уны бында тота. Ниңә ошондай хәлгә эләкте улар? Мәңге ошолай ыҙаланырҙармы икән ни? Бынан берәй төрлө ҡотолоу юлы бармы?..

Тойғоларға бирелеп оҙаҡ ултырырға тура килмәне — аҡландың арғы осонда Йыуан менән Һонтор күренде. Бына улар туҡтап тирә-яғына ҡаранды, үҙ-ара кәңәшләшеп алды, шунан бында табан йүгерҙе. Улар ҙа ошолай эҙәрләп йөрөүҙән ялҡҡандыр, шуға күрә Эмиләне оҙаҡҡа һуҙмай тоторға, Ер аҫты станцияһына алып ҡайтырға булғандыр. Тегеләрҙең Батырҙы ла эләктереү уйы барлығын малай, әлбиттә, белмәй ине...

## ХӘЛИТТЕҢ ХАТАҺЫ

Икенсе һырахана беренсеһенән йыраҡ түгел ине. Хәлит, йәнәш урамға сығып күп тә атламаны, алда ирҙәрҙең өйкөләшеп тороуон күрҙе. Шик юҡ — был һырахана ине. Һәм ул яңылышманы.

Хәлит тышта туҡталып тормайынса эскә үтте. Бында һыра менән бер йыуан ғына ҡатын һатыу итә икән. Ни

эшләргә кәрәклеге алдан уйланылған. Малай тегеңә яҡынлаша биреп шул уҡ һүҙҙәрҙе әйтте:

— Миңә «Ҡарсыға» кәрәк ине.

— «Ҡарсыға»? — Ҡатын малайға тишә яҙып ҡараны. — Нимәгә ул һиңә?

Хәлиттең күңеленә йылы йүгерҙе. Тимәк, был ҡатын белә «Ҡарсыға»ны!

— Йомошом бар.

— Ниндәй йомош? — Ҡатын эшенән айырылмай ғына һораны. Үҙе ваҡыт-ваҡыт малайға ҡарап ала.

— Мин уның үҙенә генә әйтә алам.

Ҡатын өндәшмәй генә көрәшкәләргә һыра ҡойоуын белде. Малай сабыр ҡиәфәт менән көтөп тора. Ниңә шымып ҡалды ҡатын? Хәлиттән шикләнәме? Әллә «Ҡарсыға»ны саҡырып килтерергә итәме? Ысынлап та, «Ҡарсыға» тигәндәрен ҡапыл ғына бында килтерһә, малай ни эшләргә тейеш? «Ағайымды ҡайҙа иттегеҙ?» — тип туранан-тура һорай алмай ҙа баһа! Күрәһең, иң алда «Ҡарсыға»ның кем икәнлеген белергә, уны танып алырға. Аҙаҡ уның артынан күҙәтеп, Мансур ағайҙың ҡайҙалығын белергә!..

Ул арала ҡатын сираттағы ирҙәргә:

— Саҡ ҡына көтөгөҙ, мин — хәҙер, — тип өндәште. Шунан Хәлиткә боролдо. — Әйҙә!

«Ҡарсыға»ны эҙләп йөрөүенә ҡарамай, малай быны көтмәгәйне. Нисек? Ул хәҙер «Ҡарсыға» менән осрашырға тейешме? «Ниңә килдең?» — тип һораһа, ни әйтер. Хәлит бит бөтөнләй әҙерләнмәгән! Әллә кире боролоп сығырға ла китергәме? Улай итһә, бер ҡасан да Мансур ағаһын таба ла, ҡотҡара ла алмаясаҡ! Хәлит ҡабаланып уйланы, әммә бер ниндәй ҙә аныҡ фекергә килә алманы.

Ә ҡатын үҙенең артындағы ишекте асҡан да малайҙы көтөп тора. Малай йөрәгенең дарҫлап тибә, тәненең ут кеүек яна башлауын тойҙо. Аяҡтары ауырлашты. Ҡурҡыныс! Ләкин ҡатынға эйәрергә кәрәк, кәрәк!.. Ни булһа, шул булыр!..

Хәлит бар көсөн йыйып үҙен алға атларға мәжбүр итте. Бына уның артынан ишек ябылды. Улар коридор кеүек ерҙе үттеләр. Бында ҙур-ҙур мискәләр тора, бер мөйөшкә йәшниктәр өйөлөп ҡуйылған. Коридор осондағы ишек янында ҡатын туҡтаны:

— Һин көтөп тор. — Ул эскә инеп китте.

Шунда уҡ малайҙы йәнә ҡурҡыу, икеләнеү тойғоһо солғап алды. Ҡасып китергә иң уңайлы мәл! Ул бит бәләкәй! Ул ҡотҡара алырмы Мансур ағаһын?! Юҡ бит! Бер үҙе нисек шул бандиттарға ҡаршы көрәшһен?! Ҡасырға ла китергә! Шулай хәүефһеҙерәк булыр! Юғиһә үлтереп ҡуйыуҙары бар!

Хәлит инде боролоп китәм тигәндә, теге ишек асылып китте, баяғы ҡатын килеп сыҡты:

— Бар ин! — Үҙе, Хәлиттең эскә атлауын көтөп тормайынса, коридор буйлап китте.

Бүлмә кескәй генә ине. Мөйөштәге өҫтәл артында ҙур кәүҙәле, ҡара сәсле, мыйыҡлы ир ултыра. Тәҙрә төбөндәге ултырғыста шаҡмаҡ кепка кейгән нәҙек кәүҙәле, уртаса буйлы егет урынлашҡан. Улар икеһе лә ишектән килеп ингән Хәлиткә ҡыҙыҡһынып ҡараны. Быларҙың ауыр ҡараштары бер ниндәй яҡшылыҡ вәғәҙә итмәүен малай шунда уҡ аңланы. Бүлмәнән анһат ҡына сығып китә алмаясағын да тойомланы.

— Һиңә кәрәкме «Ҡарсыға»? — тип һораны ул арала өҫтәл артында ултырған ир.

— Эйе, — тине Хәлит артабан ни әйтерен белмәйенсә.

— «Ҡарсыға» мин булам, — тине ир. — Һин ҡайҙан беләһең минең ҡушаматты?

— Бер ағай әйтте.

— Ниндәй ағай? Кем ебәрҙе һине? Ниңә килдең?

Ошо ерҙә Хәлиттең башына бер уй килде.

— Мин һырахана янынан үтеп бара инем. Ниндәйҙер бер ағай тотоп алды ла: «Бында «Ҡарсыға» тигән кеше булырға тейеш, — тине. — Уның эҙенә төшкәндәр. Тиҙерәк сараһын күрһен», — тине.

Бүлмәләге ирҙәр бер-береһенә ҡарашып алды. Шунан йәнә Хәлиткә текәлделәр. Уларҙың малайға ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәгәндәре күренеп тора ине... Хәлит «Ҡарсыға»ны күрҙе, хәҙер китергә кәрәк. Ул ишек тотҡаһына йәбеште.

— Ярай, мин киттем.

— Туҡта! — Өҫтәл артындағы ир ҡаты итеп өндәште. Шунда уҡ шаҡмаҡ кепкалы егет урынынан тороп, Хәлиттең юлына арҡыры торҙо.

— Ашыҡма!

Хәлиттең арҡаһы буйлап һалҡын тулҡындар йүгереп үтте. Ул үҙенең тоҙаҡҡа эләккәнен, бынан инде анһат ҡына сығып китә алмаясағын асыҡ тойҙо.

— Ниңә ул әҙәм үҙе инмәгән? Ниңә һине ебәргән? — тип һораны «Ҡарсыға».

Шаҡмаҡ кепкалы егет Хәлитте бүлмә уртаһынараҡ, өҫтәлгә яҡыныраҡ этте.

— Мин ҡайҙан беләйем? — тине Хәлит иламһыраған тауыш менән. — Ул әйт тигәс... Шулай кәрәктер тип уйланым.

Ошо ерҙә «Шаҡмаҡ кепка» Хәлиттең beләгенән шаҡырайтып тотто:

— Ниңә юҡты һөйләйһең? Ниндәй эҙ? Кем төшкән?

— Әйтәм бит, мин бер нәмә лә белмәйем! — Хәлит илар сиккә етте. Шулай уҡ быларҙан ысҡына алмаҫмы икән ни?

— Етер! — Өҫтәл артындағы ир ҙә урынынан тороп Хәлит янына килде. — Һинең алдашыуың күҙеңдән күренеп тора! Әйт дөрөҫөн: кем ебәрҙе һине?

— Бер кем дә ебәрмәне! — Ҡурҡышынан Хәлиттең күҙҙәрендә йәштәр күренде.

«Шаҡмаҡ кепка» Хәлиттең елкәһенән тотоп алды:

— Әгәр әйтмәһәң... Һин бынан тере сыҡмаясаҡһың!

— Ағай, ебәр! — Хәлит ауыртыуға түҙә алмайынса, ҡысҡырып ебәрҙе.

— Һөйлә! — «Кепка» бармаҡтарын саҡ ҡына бушатты. — Һөйлә, тим!

Хәлит, быларҙың тырнағынан ҡотола алмаясағын тойоп, күҙҙәрендәге йәштәрен һөртә-һөртә, һөйләргә тотондо...

## ИҪКӘРТЕҮ

Батыр менән Әмилә, ҡалаға килгәс тә, тәүге магазинға инеп икмәк, һөт һатып алдылар, шунан эргәләге эскәмйәгә ултырып тамаҡ ялғанылар.

Икеһенең дә башында бер үк уй: теге «Ҡарсыға»ны нисек табырға? Хәлитте ҡайҙан эҙләргә? Нисек кенә фараз итһәң дә, эште шул һыраханаларҙан башларға кәрәктер.

Тәүге һыраханa магазиндан алыҫ түгел ине. Былай һөйләштеләр: һыраханаға барғас, Батыр «Ҡарсыға»ны һораша, ә Әмилә Хәлит хаҡында белешә...

Иң баштағы өс һыраханала уларҙың юлы уңышһыҙ булды. Әммә дүртенсеһе янында...

Әмилә сиратта торған ағайҙарҙан Хәлит хаҡында һорашҡайны, бер ир:

— Күрҙем мин ундай малайҙы, — тине көтмәгәндә. — Ҡулында ҡара сумка, үҙе шортиктан, йыуантаҡ ҡына...

— Хәлит! — тип ҡыуанды Әмилә. — Ҡайҙа күрҙегеҙ уны?

— Мин уны теге урамдағы һыраханa янында күрҙем, — тине ир. — Бынан... ярты сәғәт элек. Был малай һыраханала нимә ҡарап йөрөй икән, тип уйланым. Ул һатыусы ҡатын менән нимәлер хаҡында һөйләште. Шунан икәүләшеп эскә инеп киттеләр. Бер аҙҙан ҡатын яңғыҙы ғына килеп сыҡты.

— Ә малай? — Батырҙың күңеленә хәүеф инеп ултырҙы.

— Мин уны башҡаса күрмәнем. Ун минуттай торғайным сиратта, һыра бөттө, мин бында килдем...

— Ул һыраханa ҡайҙа?

Батыр менән Әмилә ир өйрәткән юлдан ашығып атланы.

Ошо минутта Хәлит ниндәй хәлдә? Ниңә эскә инеп киткән? «Ҡарсыға»ның эҙенә төшкәнме? Һырахана эсендә ҡалғанмы, әллә сыҡҡанмы? Сыҡһа, ҡайҙа киткән?..

Бына — һырахана. Уның янында бер кем дә юҡ. Сөнки һыра һатылмай. Быныһы насар. Ул-был була ҡалһа, кешеләр араһында ҡасып ҡотолоу еңелерәк булыр ине. Хәҙер улар, ус төбөндәге кеүек, тирә-йүнгә күренеп торалар...

Малай менән ҡыҙ кәңәшләшеп алды. Эште ниҙән башларға? Әгәр Хәлит тотолған булһа, «Ҡарсыға»ны һорашыу хәүефле. Ул саҡта Батыр менән Әмиләне лә эләктерәсәктәр. Әлегә Хәлит тураһында ғына белешергәләр, бәлки?..

Һыраханаың ишеге икәү икән. Береһе — ал яҡта, икенсеһе — артта. Икеһе лә бикле. Әгәр эстә кеше булһа, улар арттағы ишек тирәһендәлер. Батыр шуны шаҡырға тотондо. Ҡапыл уларҙың янына әллә ҡайҙан бер ир килеп сыҡты. Тәбәнәк кенә буйлы, йыуантаҡ кәүҙәле, иҫке генә костюм-салбарҙан, башында — һалам эшләпә.

— Ни булды, балалар? Нимә кәрәк? — тип һораны ул берсә Батырға, берсә Әмиләгә ҡарап.

— Беҙгәме? — Батыр ирҙе баштан-аяҡ ҡарап сыҡты. Кем был? Осраҡлы үткенсеме? Әллә тегеләрҙең береһеме? Уға асылып барыу кәрәкме икән? Ошо һорауҙарына яуап көткәндәй, Батыр Әмиләгә ҡарап алды.

— Беҙ бер иптәшебеҙҙе юғалттыҡ, — тине ул арала Әмилә теге иргә. — Ярты сәғәт элек ул ошонда инеп киткән. Һеҙ бында эшләйһегеҙме?

— Уға нисә йәш?

— Ун өс.

Ирҙең киләһе һорауы ҡыҙҙы ла, малайҙы ла шаҡ ҡатырҙы:

— Һеҙгә Хәлит кәрәкме?

Батыр менән Әмилә быны көтмәгәйне. Улар бер-береһенә ҡараштың. Тимәк, был кеше Хәлитте белә. Белеү генә түгел, уның ҡайҙа икәнлеген дә әйтә алырға тейеш!

— Аңланым, — тине ул арала ир. Үҙе тирә-яғына ҡаранып алды. — Һеҙ был тирәнән тиҙерәк китегеҙ! Юғиһә...

Ошо ерҙә һыраханаың ишеген эске яҡтан аса башланылар. Ирҙең йөҙөндә хәүеф барлыҡҡа килде. Ул эйелә бирерәк тиҙ генә шыбырланы:

— Мине мөйөштәге магазинда көтөгөҙ! — Шунан ҡыҙ менән малайҙың арҡаһынан ситкә этте. — Тиҙ! Китегеҙ!

Күп тә үтмәй ишек асылып китте. Унда шаҡмаҡ кепка кейгән баш күренде. Батыр менән Әмилә, ары ни булырын көтөп тормайынса, ашығып ситкә атланы. Әммә тегеләрҙең үҙ-ара һөйләшеүе уларға асыҡ ишетелде:

— Кемдәр улар? — тип һораны ишектән күренгән «баш».

— Ә-ә, бала-сағалар, — тине «Һалам эшләпә» ғәмһеҙ генә тауыш менән. — Салауат кинотеатрын эҙләп йөрөйҙәр.

— Ниңә уны бында эҙләйҙәр?

— Ситтән килгән балалар, аҙашҡандар. Әйҙә. Ишектең ябылғаны ишетелде. Батыр шунда уҡ артына әйләнеп ҡараны. Инде һырахана янында бер кем дә юҡ ине.

## МАГАЗИН ЯНЫНДА

Батыр менән ҡыҙ туҡталып ҡалды.

— Улар Хәлитте тотҡан! — тине Әмилә ҡурҡҡан тауыш менән.

— Ҡайҙан беләһең? — Батырҙың күңелендә лә шундай шик тыуҙы. Тик быны ул үҙенә лә һиҙҙерергә ҡурҡып бара ине. Әгәр хәҙер Әмилә Хәлиттең тотолоуы хаҡында юҡ-бар дәлилдәр килтерһә, уны юҡҡа сығара, шулай итеп, Хәлиттең иректә икәнлеген иҫбат итә.

— Тотолмаһа, эшләпәле ир уның исемен белмәҫ ине. Икенсенән, һеҙ ҙә тотолоп ҡуймағыҙ, тигән кеүек, беҙҙе тиҙерәк ҡыуып ебәрҙе.

Батыр бер ни өндәшмәне. Сөнки үҙе лә тап ҡыҙ әйткәнсә уйлай ине.

— Ә был ир кем икән? — тип һораны ҡыҙ. — Ниңә ул беҙҙең тотолоуҙы теләмәй?

— Күрәһең, тегеләрҙең береһе, — тине Батыр үҙ алдына һөйләнгән кеүек. — Тик улар кеүек йәшәргә теләмәй.

— Бәлки, ул беҙҙе тоҙаҡҡа эләктерергә итәлер? — тип хәүефләнде ҡыҙ.

— Бәлки, шулайҙыр, — тип килеште малай.

Икеһе лә уйға ҡалды. Хәҙер ни эшләргә? Әгәр Хәлит тотолған икән, «Ҡарсыға» ошо тирәлә булырға тейеш. Малай уны эҙләп тоҙаҡҡа эләккәндер. Күрәһең, әлегә мөйөштәге магазинға инеп эшләпәле ирҙе күтөүҙән башҡа сара юҡ. Ул юҡҡа ғына: «Мине көтөгөҙ», — тимәгәндер. Тимәк, ниҙер әйтергә итә. Тоҙаҡ ҡороуҙары ла ихтимал. Шулай ҙа һаҡ булырға кәрәк. Осрашыу урынына икеһенең береһе генә барыр, ә икенсеһе ситтән йәшенеп ҡарап торор. Әгәр был тоҙаҡ икән, исмаһам, икеһенең береһе генә эләгер...

Былай һөйләштеләр. Хәҙер Батыр шул магазинға бара, ә Әмилә күпмелер ваҡыт ситтә йөрөп килә. Сөнки уға бер урында оҙаҡ торорға ярамай, юғиһә «һә» тигәнсә Йыуан менән Һонторҙоң тырнағына эләгәсәк. Хәҙер, исмаһам, ҡыҙ уларҙы ваҡытлыса булһа ла ситкә алып китер. Ун биш минут һайын Әмилә магазин янына урап килер...

Мөйөшкә етәрәк Батыр ағастар араһына инде һәм кеше күрмәҫтәй ергә сүкәйеп ултырҙы. Бынан магазинға илтеүсе

тротуар ҙа, магазинға инеп сығыусылар ҙа, уның эсе лә апасыҡ күренә. Әгәр «Һалам эшләпә» үҙенә эйәртеп ярҙамсыларын алып килһә, улар малайҙың күҙенә шунда уҡ ташланасаҡ.

Күпмелер ваҡыт үтте. Бына урам осонда Әмилә күренде. Тимәк, Батырҙың йәшенеп ултырыуына ун биш минут тирәһе булған. Ҡапыл малай урынынан ырғып торғанлығын да һиҙмәй ҡалды. Сөнки ул Әмиләгә ҡаршы килгән Йыуан менән Һонторҙо күрҙе. Ҡыҙ бер ни белмәйенсә ашығып атлай. Уларҙың аралары күҙгә күренеп яҡыная. Тағы ла бер минуттан Әмилә үҙен эҙәрләүселәрҙең ҡосағына барып инәсәк!

Батыр ағастар араһынан Әмиләгә табан йүгерҙе. Тиҙерәк! Ҡыҙҙың тапҡырына еткәс, урам аша сыға ла уны туҡтата! Ағастар йүгерергә ҡамасаулай. Малай тротуарға сыҡты. Ошо тирәнән Әмилә килгән яҡҡа үтергә кәрәк. Юл тулы машина! Батыр, оҙаҡ уйлап тормайынса, алға ташланды. Сыйылдап киткән тормоз тауышы ҡолағына салынды. Әммә был ваҡытта малай урамдың икенсе яғына сығып, ағастар аша ырғый-ырғый, Әмиләгә табан оса ине. Үҙенә табан йәнтәслимгә йүгереп килеүсе Батырҙы күргәс, ҡыҙҙың күҙҙәре ҙурайып асылды.

— Әмилә! — Батыр ҡыҙҙың ҡулынан эләктереп алды. — Тиҙ бул! Унда Йыуан менән Һонтор!

Яҡын-тирәләге кешеләрҙе шаҡ ҡатырып, улар ағас араһына сумды. Йыуан менән Һонтор күрергә өлгөрҙөмө уларҙы? Ни генә булһа ла, хәҙер бында ҡалыу хәүефле.

Батыр менән Әмилә ағас араһынан байтаҡ ҡына йүгерҙе. Тегеләрҙе яңылыштырыу өсөн бер йүнәлештә баралар-баралар ҙа, ҡапыл уң яҡҡа тарталар, шунан һулға боролалар. Инде магазиндан арыу ғына алыҫлаштылар, буғай.

— Хәҙер мин йәнә магазин янына барам, — тине Батыр. — Беҙгә «Һалам эшләпә»не күрергә кәрәк бит. Һин бында ҡалаһың. Әммә тик ултырмайһың. Анау тирәнән урап киләһең. Егерме минуттан ошо урында осрашабыҙ.

Батыр магазинға табан атланы. Уның күңеле тыныс түгел. Малай үҙе өсөн һис тә борсолмай. Үҙенең теләһә ниндәй ауырлыҡтан да ҡотола алырына ышана. Тик Әмилә менән генә берәй хәл булып ҡуймаһын инде. Ул саҡта... Әмиләһеҙ уға был донъяла йәшәүҙең йәме ҡалмаясаҡ...

Магазинға етәрәк Батыр һағая төштө. Беренсенән, Йыуан менән Һонторға тотолмаҫҡа ине, икенсенән, «Һалам эшләпә»не алдан күрергә кәрәк. Әгәр яңғыҙ булмаһа, уның менән осрашмау хәйерле.

Ул-был күренмәй шикелле. Малай магазинға яҡынлашып, тәҙрә аша эскә күҙ һалды.

Ҡапыл кемдер Батырҙың яурынына ҡулын һалды. Малай ҡырҡа артына әйләнде. Уның ике яғында Йыуан менән Һонтор баҫып тора ине...

## ҺАЛАМ ЭШЛӘПӘЛЕ ИР

Батыр менән osрашырға һөйләшкән урынға Әмилә инде ике тапҡыр килеп китте. Әммә малайҙы тап итә алманы. Әкренләп ҡыҙҙың күңеленә хәүеф инеп ҡунаҡланы. Батыр ҡайҙа? Ниңә осрашаһы урынға килмәй? Тотолдомо? Әгәр малай тегеләрҙең тырнағына эләкһә, ул ни эшләр? Әмилә бит был ҡалала бер кемде лә белмәй. Төнөн йоҡлар урыны ла, тамаҡ ялғар өсөн бер тин аҡсаһы ла юҡ... Юҡ, Батыр тотолорға тейеш түгел! Ул бит шундай тәүәккәл, сос малай. Иң ҡурҡыныс хәлдә лә һис ҡасан юғалып ҡалмай. Тик ниңә һуң осрашаһы урынға килмәй?.. Әллә магазин эргәһенә барып урарғамы? Эйе, шунһыҙ Әмилә бер ни белә алмаҫ. Тәүәккәлләргә кәрәк.

Ҡыҙ саҡ ҡына бара ла, туҡтап, тирә-яғына ҡаранып ала. Әлегә ул-был һиҙелмәй. Ана теге магазин күренде. Әмилә, мөмкин тиклем һаҡ булырға тырышып, уға яҡынлашты. Урамда ҡурҡырлыҡ нәмә юҡ. «Һалам эшләпә» эстә көтөп тормаймы икән? Әмилә саҡ ҡына икеләнде лә магазинға инде. Бында «Эшләпә» лә, Батыр ҙа күренмәй. Ҡыҙ ашығып урамға сыҡты. Бөтә бәлә шунда: уға бер урында оҙаҡ туҡталып тороу хәүефле. Йыуан менән Һонторҙоң ҡулына эләккәнеңде һиҙмәй ҙә ҡалырһың.

Әмилә тирә-яғына ҡараны. Бер кем дә юҡ. Ни эшләргә? Китергәме, әллә тағы бер аҙ көтөргәме? Башына бер йүнле уй килмәй. Көтмәгәндә Йыуан менән Һонтор килеп сығыр тип ҡурҡыу башҡа нәмә хаҡында уйларға бирмәй.

Әмилә ағастар араһына инде. Иң яҡшыһы — тирә-йүнде ошонан күҙәтеү булыр...

Ләкин ҡыҙға йәшенеп оҙаҡ ултырырға тура килмәне. Ҡапыл уның күҙенә мөйөштән килеп сыҡҡан «Һалам эшләпә» салынды.

Әмилә һағайҙы. Яңғыҙы, буғай. Бик һаҡ килә, тирәяғына ҡаранып ала. Бына магазинға етте, тәҙрә аша эскә күҙ һалды, әммә ишеккә боролманы, бер ни булмағандай үтеп китте.

Ҡыҙ ҡаушаны. Ни эшләргә? Ҡыуып етергәме? Әллә сығып күренмәҫкәме? Ләкин эшләпәле ир юғалһа, Әмилә ер менән күк араһында аҫылынып ҡаласаҡ. Бәлки «Һалам эшләпә» менән осрашҡандан һуң ниҙер асыҡланыр, ары ни эшләргә кәрәклеген белер, исмаһам, ҡыҙ.

Әмилә йәшенгән урынынан сыҡты ла йүгерҙе. Ҡапыл «Һалам эшләпә» артына әйләнеп ҡараны. Ул шунда уҡ Әмиләне шәйләне. Бына ҡыҙ ирҙең янына килеп етте.

— Иптәш малайың ҡайҙа? — «Һалам эшләпә» Әмиләне өй ышығына тартты.

— Улмы? — Ҡыҙ был кеше алдында тулыһынса асылып

бармаҫҡа ҡарар итте. — Ул бынан алыҫ түгел. Ә һеҙ Хәлиттең ҡайҙа икәнлеген беләһегеҙме?

— Беләм, тиерлек, — тип аңлайышһыҙ яуап бирҙе ир, борсоулы ҡиәфәт менән тирә-яғына ҡаранып.

— Нисек? — «Эшләпә»нең һүҙҙәре ҡыҙҙы хәүефкә һалды. — Хәлит тереме, юҡмы?

— Ана шул-шул, — тине ир. — Белмәйем. Уны үлтереүҙәре лә бар.

Ҡыҙҙың тәне өшөп китте. Әмилә был һүҙҙәргә ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәне. Бынан ике сәғәт элек кенә аэропортта күргән Хәлиттең ошо минутта үлек икәнлеген ул күҙ алдына ла килтерә алмай.

— Ниңә эҙләй ул «Ҡарсыға»ны? Һеҙ ҙә уның менән бергәме?

— Ниндәй «Ҡарсыға»? — тип һораны Әмилә. — Мин бер нәмә лә белмәйем. Беҙгә Хәлитте табырға кәрәк. Әйтегеҙ, ул ҡайҙа?

«Һалам эшләпә»нең күҙҙәре асыулы йылтыраны.

— Мин һеҙҙе иҫкәртәм. Соҡсонмағыҙ был тирәлә. Юғиһә...

Ул ары һөйләп торманы, боролдо ла ситкә атланы. Был нимәне аңлата? Ҡыҙ бит һис нәмә белмәне? Хәлит ҡайҙа? Батыр тотолғанмы? Әмилә ирҙең артынан йүгерҙе. Әммә ул бер аҙым да яһарға өлгөрмәне, ҡыҙҙың ике беләгенән тотоп алдылар. Ҡото осҡан Әмилә бер уңға, бер һулға ҡараны. Уның ике яғында ике таныш түгел кеше тора ине...

## БАТЫР АУЫР ХӘЛДӘ

Йыуан менән Һонтор, Батырҙы эләктергәс, уйға ҡалды. Малай менән ни эшләргә? Ер аҫты станцияһына илтеп йөрөүе оҙаҡ, уның менән бергәләп Әмиләне эҙәрләү уғата уңайһыҙ. Ә Батыр уларға кәрәк. Ер аҫты станцияһынан ҡәтғи бойороҡ алынған: «Әмилә менән бергә ҡасып йөрөгән малайҙы мотлаҡ тоторға!» Станцияға илткәс, уның хәтеренән Әмилә хаҡында ни бар, бөтәһен дә юйҙырасаҡтар, шунан Урға алып китәсәктәр. Был малай бер ҡурҡыныс эксперимент өсөн кәрәк. Йыуан менән Һонтор ул эксперименттың маҡсатын да, нисек үткәреләсәген дә белмәй, фәҡәт малайҙың тере ҡалмаясағы тураһында ғына ишеттеләр... Ана шуға ла уларға Батырҙы күҙҙең ҡараһы кеүек һаҡларға кәрәк. Хәҙер нисек тә Әмиләне эләктерһәләр... Хәйер, быныһы тотолғас, ҡыҙҙы аулауы ҡыйын булмаҫ. Ошоғаса барыһын да ошо малай бутап йөрөнө бит.

Йыуан менән Һонтор Ур телендә ошо хаҡта һөйләшеп алдылар. Батырҙың барыһын да аңлауы уларҙың башына ла инеп сыҡманы, әлбиттә.

Шунан Йыуан:

— Эмилә ҡайҙа? — тип һораны башҡортсалап.

— Белмәйем.

— Нисек белмәйһең? — Һонтор малайҙың иңбашынан тотоп һелкетеп алды. — Ул бит һинең менән ине. Ҡайҙа осрашырға һөйләштегеҙ?

— Һөйләшмәнек. Мин Эмиләне юғалттым.

— Алдаша! — тине. Һонтор асыулы тауыш менән. — Тик юҡҡа өмөтләнмә. Беҙ уны барыбер тотасаҡбыҙ! Бына ҡара: был прибор Эмиләнең алыҫ түгеллеген күрһәтә.

Батыр Һонтор усындағы шырпы ҡабынан саҡ ҡына ҙурыраҡ әйбергә күҙ һалды. Уның экран кеүек урынында ниндәйҙер һандар үтеп тора.

— Был һандар ошо минутта Эмиләгә тиклемге араны аңлата.

Уңға атлаһаҡ, һандар үҫә. Тимәк, ҡыҙҙан алыҫлашабыҙ. Һулға атлаһаҡ — кәмей. Эмилә шул яҡта. Күпкә бармаҫ, эләктерәбеҙ уны ла!

Ҡапыл экрандағы һандар арта башланы. Күрәһең, Эмилә икенсе яҡҡа боролдо. Йыуан менән Һонтор ҙа, приборҙы тотҡан килеш улай-былай атлап ҡаранылар. Ниһайәт, ҡыҙҙың ҡайһы яҡҡа йүнәлгәнен белделәр һәм малайҙың ике беләгенән эләктереп шул тарафҡа ашыҡтылар.

— Шәберәк ҡыбырла! — тине бер аҙ барғас Һонтор. Батыр, ысынлап та, быларға ҡамасаулау өсөн һөйрәлә биреп атлай ине.

— Минең аяғым ауырта, — тип алдашты малай. Шунан бөтөнләй туҡталып ҡалды.

Йыуан менән Һонтор Ур телендә үҙ-ара кәңәшләшә башланы.

— Алдаша! — тине Йыуан.

— Алдашамы, юҡмы — ул барыбер рәтләп атламаясаҡ, — тип әсенде Һонтор. — Эмиләне ҡыуып етһәк тә, был беҙгә ҡыҙҙы тоторға бирмәйәсәк.

— Берәй ергә бикләргә кәрәк, — тигән тәҡдим яһаны Йыуан. — Шунда ултырып торор. Эмиләне тотҡас, барып алырбыҙ.

Йыуан менән Һонтор тынып ҡалдылар. Батырҙы ҡайҙа бикләргә икән, тип уйландылар, күрәһең. Малай ҙа үҙ уйҙарына сумды. Быларҙан нисек ҡотолорға? Шунан ҡайһылай итеп Эмиләне табырға? Ул осрашаһы урынға ҡат-ҡат барғандыр ҙа, хәҙер бөтөнләй икенсе яҡҡа киткәндер. Эмиләне эҙләүҙән башҡа уны тағы күпме ауыр һәм ғүмерҙә лә тормошҡа ашыра алмаҫтай эштәр көтә: Хәлитте табыу, ҡотҡарыу, шунан Мансур ағайҙың эҙенә төшөү...

Ҡапыл Һонтор туҡталды:

— Таптым! — тине ул Ур телендә. — Таптым был малай

менән ни эшләргә кәрәклеген! Беҙҙең бит билдек бар! Уның йоҙағы серле. Урмандың кеше йөрөмәҫтәй урынына индереп шул билдек менән был малайҙы бер ағасҡа бәйләйбеҙ. Ике-өс сәғәттә бер ни ҙә булмаҫ.

— Дөрөҫ! — тип килеште уның менән Йыуан. — Тик йоҙаҡтың сере бит билдектең өҫтөнә яҙылған.

— Бында Ур телен белгән кеше бар тиһеңме? Ҡысҡырып кеше саҡырмаһын өсөн ауыҙына сепрәк тығабыҙ. Ҡулын бәйләйбеҙ.

«Бынынһы хөрт, — тип уйланы Батыр. — Ҡулды бәйләһәләр, билдекте сисә алмам бит.»

Йыуан менән Һонтор Батырҙы Ағиҙел буйына алып төштө. Шунан ағастарҙың ҡуйыраҡ еренә индереп, бер йыуан ғына ҡайынға Һонторҙоң биленән сиселгән билдек менән бәйләп ҡуйҙылар.

— Ҡулымды бәйләмәгеҙ, — тине малай. — Бында серәкәй күп. Был билдекте барыбер сисә алмайым бит.

— Ярай, — тине Йыуан. — Тик ҡысҡыра башлаһаң, кире киләбеҙ ҙә ауыҙыңа сепрәк тығып, ҡулдарыңды шаҡырайта бәйләп китәбеҙ.

Тиҙҙән Йыуан менән Һонтор күҙҙән юғалды. Шуны ғына көтөп торған Батыр билдектәге яҙыуҙарҙы уҡырға керешге. Әлбиттә, ҡайһы бер һүҙҙәр аңлашылмай. Әммә билдекте нисек сисергә кәрәклегенә төшөнөргә була! Бик хәйләкәр эшләнгән дә икән йоҙағы! Ер кешеһенең башына килерлек түгел. Әммә Ур телен белгән кешегә уны ысҡындырыуы бик үк ауыр булманы.

Ярты минут үтеүгә Батыр тотҡондан ҡотолдо. Шунан билдекте үҙенең биленә тағып алды. Кәрәге булыуы бар. Хәҙер иң мөһиме — Әмиләне табыу.

## БАТЫР ӘМИЛӘНЕ ЭҘЛӘЙ

Тәүҙә Батыр осрашырға һөйләшкән урындарына йүгерҙе. Бәлки, Әмилә шунда ултыралыр. Тик ҡыҙ унда юҡ ине. Батыр бер аҙ көтөп ҡараны. Йәнәһе, ҡыҙ килеп сыҡмаҫмы? Әммә бында ике минуттан артыҡ туҡталып торорға түҙеме етмәне. Әмиләгә һәр минут һайын ҡурҡыныс янағанда нисек бында ултырып сыҙарға мөмкин?! Тиҙерәк ҡыҙҙы табырға, яҡларға!

Батыр мөйөштәге магазинға табан йүгерҙе. Әмилә уны шул тирәлә эҙләйҙер. Бәлки, «Һалам эшләпә» менән осрашҡандыр. Ул әҙәмгә бик ышанып барырға ярамай. Бик хәйләкәр кешегә оҡшаған. Ул, моғайын, ҡыҙ менән малайҙы тоҙаҡҡа эләктереү өсөн йөрөй.

Ана магазин! Батыр ағастар араһынан ҡарап тора.

Яҡын-тирәлә ҡурҡырлыҡ нәмә юҡ шикелле. Магазин эсенә күҙ һалырға кәрәк. Йәшенгән урынынан сығып барған малай ҡапыл ҡатып ҡалды. Сөнки ул урам осонан был яҡҡа табан килә ятҡан Йыуан менән Һонторҙо күрҙе. Бик ашығып атлайҙар. Тимәк, Эмилә ошо тирәлә. Уны ҡотҡарырға кәрәк! Батыр ағас араһынан башын сығарып алға ҡараны. Юҡ, ҡыҙ күренмәй. Малай ҡыуаҡтар араһынан Йыуан менән Һонтор атлаған йүнәлештә йүгерҙе. Бер аҙ барғас, шып туҡтап ҡалды.

Урамдың арғы яғында, өй ышығында, Эмилә менән «Һалам эшләпә» һөйләшеп тора! Батыр уларға табан сапты. Тиҙерәк теге яҡҡа сығырға, Эмиләне иҫкәртергә! Йыуан менән Һонтор етеп килә бит! Әмәлгә ҡалғандай, юл тулы машина! Береһенә-береһе менә яҙып килә, һис тә араларынан йүгереп үтерлек түгел.

— Эмилә! — тип ҡысҡырҙы Батыр.

Малайҙың тауышы машиналар геүләүенә күмелеп юғалды. Ни эшләргә? Күрә тороп тәгәрмәстәр аҫтына ташланып булмай ҙа баһа! Ә Йыуан менән Һонтор Эмиләгә яҡынлаша! Ә Эмилә, үҙенә ниндәй ҡурҡыныс янағанын белмәйенсә, «Һалам эшләпә» менән һөйләшеп тик тора! Ул арала эҙәрләүселәр өй мөйөшөнә барып етте. Улар Эмиләне күреп ҡалды! Тик ҡыҙ янында сит кеше булғанға ғына туҡталдылар. Бына улар мөйөшкә ышыҡланып кәңәшләшергә керештеләр.

Ошо ерҙә машиналар араһында йүгереп үтерлек ара барлыҡҡа килде. Батыр күп уйлап тормайынса алға ташланды. Тиҙерәк! Эмиләне етәкләп ала ла ҡаса! Башҡаса сара юҡ! Әгәр йәнтәслимгә йүгерһәләр, бәлки, ҡотола алырҙар!

Батыр йүгерә! Ул барып еткәнсе генә һалам эшләпәле ир китмәй торһасы! Инде Эмиләгә тиклем илле аҙым тирәһе генә ҡалды!..

Туҡта! Батыр ни күрә?! «Һалам эшләпә» Эмиләне яңғыҙ ҡалдырып китә башланы! Их, өлгөрмәй! Хәҙер бит тегеләр Эмиләне эләктерәсәк!

Ошо ерҙә бөтөнләй көтөлмәгән хәл булды. Һалам эшләпәле ир ун аҙым да китмәне, Йыуан менән Һонтор мөйөштән сығып Эмиләгә табан атланы. Ләкин улар ҡыҙҙы тоторға өлгөрмәне, ҡайҙандыр таныш булмаған ике егет килеп сыҡты ла, ни эшләргә белмәйенсә торған ҡыҙҙы икеһе ике беләгенән эләктереп алды. Шунда уҡ улар Эмиләне тротуар ситендәге «Москвич» машинаһына табан алып китте.

Йыуан менән Һонтор быны көтмәгәйне, шуға шаҡ ҡатып туҡтаны. Әгәр ҡыҙҙы машинаға ултыртып алып китһәләр, уны тиҙ генә таба алмаясаҡтар, тапҡан хәлдә лә был билдәһеҙ кешеләрҙән ҡыҙҙы тартып алып булмаясаҡ!

Ур кешеләре алға ташланды. Шунда уҡ Әмиләне ике яҡтан тотҡан егеттәр ергә тәгәрләп китте. Йыуан ҡыҙҙың ҡулынан эләктерҙе, әммә ул арала теге ике егет ырғып торҙо. Йыуан быларҙан һаҡланыу өсөн ҡыҙҙы ысҡындырырға мәжбүр булды.

Ошо ваҡыт эсендә алыш башланған урынға Батыр йүгереп килеп етте. Ул шунда уҡ ҡыҙҙың beләгенән тотто ла ситкә тартты:

— Әмилә, әйҙә!

Һуңғы секундта малай Һонтор менән Йыуандың теге ике егеткә сат йәбешкәнлеген күреп ҡалды. Ары ни булырын ҡарап торманы Батыр менән Әмилә, улар, көтөлмәгәндә килеп тыуған ирекТән файҙаланып, был урындан ситкә ташландылар...

## «ҠАРСЫҒА» ТЕШЕН КҮРҺӘТӘ

Күпмелер йүгергәс, малай менән ҡыҙҙың тамам хәлдәре бөттө. Бер эскәмйә янында улар, алдан һөйләшкән кеүек, икеһе лә туҡталып ҡалды. Шунан бер-береһенә ҡаранылар ҙа ҡапыл көлөргә тотондолар. Көтмәгәндә ошолай осрашыуҙары ла, уйламаған ерҙән дошмандарының тырнағынан ҡотолоуҙары ла бик мәҙәк килеп сыҡты бит! Тегеләр хәҙер ни эшләй икән? Һуғышып-һуғышып туҡтаһалар, эргәләрендә Әмилә юҡ! Эй, хайран ҡаласаҡтар ҙа һуң!

Көлөп туйғас, ҡыҙ менән малай бер-береһен юғалтышып торған арала үҙҙәре менән ниҙәр булғанлығын һөйләргә тотондолар. Шунан тынып ҡалдылар. Ары ни эшләргә? Хәҙер шул хаҡта уйларға кәрәк.

— Теге һыраханаға барайыҡ, — тип тәҡдим яһаны Әмилә. — Хәлит шунда булырға тейеш.

— Дөрөҫ, — тип килеште Батыр. — Тик беҙгә бик һаҡ булырға кәрәк. Теге ике егеттең һине эләктерергә маташыуы юҡҡа түгел. Улар беҙҙе йә тоторға, йә юҡ итергә теләй.

Ун минуттан малай менән ҡыҙ «Ҡарсыға»ның һыраханаһы янында тора ине. Бында йәнә ир-ат йыйылып киткән, тимәк, тағы һыра һата башлағандар. Быныһы һәйбәт, ул-был килеп сыҡһа, күмәк кеше араһында эҙ яҙлыҡтырыу еңелгә төшөр...

Һыраханa эсенә инеп сыҡтылар. Арыраҡ тағы бер ишек бар. Әгәр Хәлит бында булһа, уны фәҡәт ана шул ишектән эскә инеп эҙләргә кәрәк. Ләкин ҡатынға һиҙҙермәйенсә нисек эскә үтергә?

Шик тыуҙырмаҫ өсөн киренән урамға сыҡтылар. Уларға бер урында оҙаҡ уралырға ярамай — шуныһы оло бәлә. Сөнки Йыуан менән Һонтор «һә» тигәнсе килеп етәсәк.

— Былай итәбеҙ, — тине Батыр. — Һин ҡатынды әүрәтәһең. Шул арала мин һиҙҙермәй генә теге ишеккә инеп китәм. Шунан һин китерһең. Бер ярты сәғәттән... Салауат һәйкәле янында осрашырбыҙ.

Бер минуттан һыра һатыусы янында шундай сәхнә булды.

Эмилә ҡатынға яҡынлашты ла:

— Миңә бер стакан һыра ҡойоғоҙ! — тине. Сиратта торған ирҙәр көләшә башланы:

— Оятһыҙ, ошо йәшеңдән эсмәһәң!

— Башың ауыртамы әллә?

— Ҡой инде, йәлләмә! — тиеүселәре лә табылды. Һатыусы күҙ ҡырыйы менән ҡыҙға ҡараны:

— Аҡсаң бармы һуң?

— Юҡ, — тине Эмилә. — Ярты стакан булһа ла ҡойоғоҙ әле!

— Аҡсаң булмағас, йөрөмә бында! — Ҡатын асыулы ғына өндәште.

Эмилә, шуны ғына көткән кеүек, ҡапыл һатыусы янындағы бер тулы көрөшкәгә ынтылды. Ҡатын бесәй тиҙлеге менән ҡыҙҙың ҡулына һуғып ебәрҙе. Быны күреп бер нисә ир Эмиләне яҡлаша башланы. Шау-шыу ҡупты. Шул арала прилавка янында йәшенеп ултырған Батыр һатыусы артындағы ишеккә сумды. Уға Эмиләнән башҡа бер кем дә иғтибар итмәне.

Ары ғауғалашып тороу кәрәкмәй ине. Ҡыҙ тыныс ҡына ҡиәфәт менән һырахананан сығып китте...

Батыр, артынын ишек ябылғас та, эргәләге ҙур мискәләргә ышыҡланып, тирә-йүнгә ҡолаҡ һалды. Һыраханалағы ирҙәрҙең шаулауы бик ҡамасаулай, шулай ҙа теге мөйөштә кемдәрҙеңдер һөйләшеүен шәйләргә була. Малай алғараҡ үтте.

Бында бер нисә ишек бар. Батыр тәүгеһен тартып ҡараны — бикле. Икенсеһе лә асылмай. Өсөнсөһөнөң артында тауыштар ишетелә.

Батыр йәшниктәр артына сумып тыңларға кереште.

— Кем ине улар? — тип һораны ҡалын тауышлы ир.

— Белмәйем. — Икенсе ерәү аҡланған тауыш менән өндәште.

— Милициянан түгел инеләрме?

— Былай бик оҫта һуғышалар. Беҙ ҡыҙҙы тотоп ҡына алғайныҡ, килеп йәбештеләр...

Батыр һағайҙы. Бында магазин янында яңы ғына булған алыш хаҡында һүҙ бара! Тимәк, теге ике егет ошо ҡалын тауышлы ирҙең ҡушыуы буйынса йөрөгән! «Ҡарсыға»ның үҙе шул түгелме икән? Хәҙер ул егеттәр, бында ҡайтып, хужалары алдында аҡланып ултыралар.

Ҡапыл коридор осондағы ишектең асылыуы ишетелде. Батыр йәшниктәр араһына нығыраҡ һыйынды. Йөрәге

атылып сығырҙай булып тибә! Әгәр эләктерһәләр, ул да Хәлит кеүек юғаласаҡ!.. Быларҙың ҡулынан ҡотолоуҙары — ай-һай!.. Ошо ерҙә, малай нығыраҡ һыйындымы икән, өҫтәге бер йәшник дөбөр-шатыр иҙәнгә төшөп китте. Батыр ҡурҡышынан күҙҙәрен сытырлатып йомдо.

Шунда уҡ эргәләге ишек асылды. Унан өс ир килеп сыҡты.

— Кем бар бында? — тип өндәште уларҙың ҡалын тауышлыһы.

Уға ишектән инеп коридор буйлап атлап килгән кеше яуап бирҙе:

— Ни булды? Ниңә ҡоттарығыҙ осҡан?

— Нимәлер дөпөлдәп төштө.

— «Ҡарсыға», һин ҡурҡаҡҡа әйләнә бараһың! — тип көлдө тегеһе. — Мин ишекте шартлатып яптым. Шуны ишеткәнһегеҙҙер.

Барыһы ла бүлмәгә инеп китте. Батыр еңел итеп тын алды. Тотолдом, тип уйлағайны бит!.. Тимәк, теге ҡалын тауышлы ир — «Ҡарсыға»!..

— Бына, эшкинмәгәндәр! — Йәнә «Ҡарсыға»ның тауышы ишетелде. — Теге ҡыҙҙы тота алмағандар!

— Нисек? — тип хайран ҡалды яңы ғына килеүсе ир. — Мин бит уларҙың ауыҙына ҡаптырып киттем!

Бәй, был бит «Һалам эшләпә»! Тимәк, ул Батыр менән Әмиләне тотторoу өсөн йөрөгән!

Ул арала бүлмәләгеләр «Һалам эшләпә»гә магазин янында булған алышты йәнә һөйләп сыҡтылар. Йыуан менән Һонторҙоң китеп барыуҙары уларҙы бик нык аптыратты. Әгәр милициянан булһа, улар егеттәрҙе ҡулға алырға маташыр ине бит!

— Улар беҙҙе бутарға итмәйме икән? — тине «Ҡарсыға». — Был бала-саға юҡҡа йөрөмәй! Тотолған малай бындамы әле?

— Бында, — тине егеттәрҙең береһе.

— Һыраханала тентеү ойошторoуҙары бар. «Йәшел һарай»ға илтеп бикләгеҙ. Хәҙер үк!

— Аңлашылды.

— Әгәр теге малай менән ҡыҙ беҙҙең менән ҡыҙыҡһынһа, икеһен дә юҡ итергә! Тик эҙ ҡалдырмағыҙ!

Батырҙың йөрәге ҡыҫылды. Улар бит Әмилә менән Батырҙы үлтерергә итәләр! Хәлит әле тере. Әммә уны ла шул яҙмыш көтә, әлбиттә. Уны бер нәмәгә ҡарамай ҡотҡарырға кәрәк! Хәлит әлегә бында. Ләкин хәҙер алып китәләр! Ул саҡта дуҫын бөтөнләй табып булмаясаҡ!

Бәлки, милицияға хәбәр итергәлер? Юҡ, улар килеп еткәнсе Хәлитте ситкә оҙатырҙар. Унан һуң бер ни ҙә иҫбат итеп булмаясаҡ!

Ни эшләргә?

Дуҫы өсөн ҡурҡыу арҡаһында Батыр был минутта һаҡ ҡыланырға кәрәклеген дә онотто. Ул, урынынан ырғып тороп, бикле ишектәрҙең береһе янына йүгереп килде, йәнә тартып ҡараны. Шунан әкрен генә өндәште:

— Хәлит!

Эстән шылт иткән дә тауыш ишетелмәне. Малай икенсе ишеккә ташланды:

— Хәлит! Һин бындамы?

Батыр ҡолағын ишеккә терәне. Ҡапыл эстә нимер ҡыштырланы. Бына Батырҙың ҡолағына сибек кенә тауыш салынды:

— Батыр! Һинме?

Хәлит! Ул бында! Ошо ишек артында!

— Мин! Мин! — Батырҙың тамағына төйөр килеп тығылды.

— Батыр! Улар мине... Ҡотҡар мине, Батыр!..

Ошо минутта бүлмәнең ишеге асылып китте. Батыр йәшен тиҙлеге менән эргәләге мискә артына сумды. Эргәгә генә ике егет килеп туҡтаны. Әгәр бында саҡ ҡына яҡтыраҡ булһа, улар һис шикһеҙ Батырҙы күрер ине...

Егеттәрҙең береһе кеҫәһенән асҡыс сығарып ишекте асты. Унда Хәлит күренде.

— Батыр? — Ул тирә-яғына ҡараны. Яңы ғына ишек аша һөйләшкәс, Батыр уны ҡотҡара тип уйлағандыр инде.

— Ниндәй Батыр? — тине егеттәрҙең береһе. — Әйҙә!

Хәлит! Бына эргәлә генә! Әгәр көсөнән килһә, Батыр ырғып торор ине лә дуҫын бандиттарҙың ҡулынан йолҡоп ҡына алыр ине. Тик был мөмкин түгел!

Ә Хәлит һаман улай-былай ҡараны. Яңы ғына уның тауышын ишетте бит ул! Шул арала ҡайҙа булған?

Ҡапыл Хәлит мискә артында йәшенеп ултырған дуҫын күрҙе. Һәм барыһын да аңланы. Шуға ашығып ҡарашын ситкә алды. Тик һуң ине инде. Хәлиттең сәйер ҡылығына тегеләр иғтибар итте...

Батыр бөтә тәне менән һиҙҙе: егеттәр уны күрҙе! Күрҙе!! Ары йәшенеп ултырыуҙың файҙаһы юҡ! Батыр урынынан ырғып торҙо ла эргәһендәге мискәне тегеләргә табан этеп ебәрҙе. Үҙе коридор буйлап ишеккә ташланды. Залға сыҡҡас та малай прилавка артында торған һатыусыға бәрелде. Теге ултыра төштө, ҡысҡырып ебәрҙе. Зал тулы кеше. Батыр кемгәлер һуғылды, ҡолап китә яҙҙы. Батыр тышҡа килеп сыҡты ла ҡапыл уңға тартты. Эргәлә генә бер ир һыра эсеп торған икән. Шуны төкөнө. Тегенең ҡулындағы көрөшкәһе төшөп китте. Батыр алға сапты. Ҡыуыусыларҙан уйламаған ергә йәшенергә! Тик ҡайҙа ундай урын? Батыр һыраханаһың артына килеп сыҡты. Эргәлә генә бер «Москвич» тора. Малай уны таныны, теге егеттәрҙең машинаһы.

Батыр йәһәт боролоп артына ҡараны. Ҡыуып килеүселәр күренмәй әле. Аяҡ тауыштары мөйөш артында ишетелә. Батыр күп уйлап торманы, «Москвич»тың багажнигын асты ла эскә сумды. Шул ыңғайы ҡапҡасын шапылдатып ябып та ҡуйҙы. Бына машина эргәһенә йүгереп килеп еттеләр. Ҡурҡыуҙан Батырҙың йөрәге туҡтап ҡалғандай булды. Күрҙеләрме, юҡмы? Аяҡ тауыштары машинаға яҡынлашты. Оҙонлоғо сәғәт кеүек тойолған бер нисә секунд үтте...

## ХӘҮЕФЛЕ МИНУТТАР

Хәҙер Әмиләнең бар маҡсаты — нисек тә Йыуан менән Һонторҙоң ҡулына эләкмәү. Шуға бер урында туҡтап оҙаҡ торорға ярамай. Ярты сәғәттән ул Салауат һәйкәле янында Батыр менән осрашыр. Унан һуң Хәлит менән Мансур ағайҙы ҡотҡарырға тырышырҙар. Шунан... Эҙәрләүселәрҙән бер ҡасан да ҡотолоп булмаясаҡ! Әмилә туҡталып ҡалыу менән теге прибор Йыуан менән Һонторҙо ҡыҙ янына алып киләсәк! Ләкин һәр ваҡыт ошолай йәшәп булмай бит! Ни ҙә булһа эшләргә кәрәк!..

Әмилә белә: эҙәрләүселәр бер ҡасан да үҙ уйҙарынан баш тартмаясаҡ. Уларға Әмиләне станцияға алып ҡайтырға, Ерҙә күргәндәрен хәтеренән юйырға бойороҡ бирелгән. Йыуан менән Һонтор шул фарманды бер нәмәгә ҡарамайынса тормошҡа ашырырға тейеш.

Ошоларҙы уйлаһа, ҡыҙҙың кәйефе селпәрәмә килә. Алда өмөт юҡ! Иң ҡыйыны шул!..

Ярай, төшөнкөлөккә бирелергә ярамай. Ҡыуаныстары ла бар бит Әмиләнең! Батыр уның янында. Малайҙы юғалтмаҫ өсөн Ерҙә ҡалды бит Әмилә. Урҙы нисек кенә һағынһа ла, ҡыҙ бынан китмәйәсәк. Сөнки ул үҙенең тормошон Батырһыҙ күҙ алдына ла килтерә алмай. Бына хәҙер Әмилә Салауат һәйкәле янына барыр, Батырҙы осратыр һәм... бөтә ҡайғылар онотолор!

Ҡыҙ ашығып атлай, ара-тирә ҡырҡа рәүештә йүнәлешен үҙгәртә, шунан артына әйләнеп ҡарап ала. Әлегә эҙәрләүселәр күренмәй.

Әмилә сәғәтенә күҙ һалды. Батыр менән айырылышыуҙарына барлығы ун биш минут үткән. Тағы йөрөргә кәрәк әле. Алда йәнә Батыр инеп киткән һырахана күренде. Уның янында әүәлгесә оҙон сират тора. Ҡыҙ бер кемгә лә иғтибар итмәйенсә ары үтә башланы.

Шул мәл кемдер уға өндәште:

— Эй, ҡыҙыҡай!

Әмилә тертләп ҡалды. Кем ул? Нимә кәрәк уға? Ҡыҙ тауыш килгән яҡҡа ҡараны. Уға табан бер ир ҡабаланып

атлай. Ҡыҙ ашығып уйланы. Таныш түгел. Әмиләне бында аҙым һайын ҡурҡыныс һағалап тора. Был әҙәм ниндәй уй менән яҡынлаша? Ни эшләргә? Ҡасырғамы, юҡмы?

— Нимә кәрәк һеҙгә? — тип һораны Әмилә теге ир килеп етмәҫ борон.

— Һеҙ Хәлиттең дуҫымы?

— Ниндәй Хәлиттең? — Әмилә бер ни аңламаған булып ҡыланды. Кем белә — бәлки, ул «Һалам эшләпә» кеүек уны тоторға итәлер.

— Минән ҡурҡма. — Пеләш ир тирә-яғына ҡарап алды. — Мин һеҙгә ярҙам итергә теләйем. Һеҙ һаҡ булығыҙ. Улар һеҙҙе юҡ итергә йыйына!

— Һеҙ ни һөйләйһегеҙ? — Әмилә ғәжәпләнгән күҙҙәрен иргә төбәне. — Мин бер ни аңламайым. — Шунан боролдо ла ситкә атланы. — Күңеле һиҙә — уға был тирәлә ҡурҡыныс янай.

— Туҡтағыҙ! — тине пеләш ир. — Мин һеҙгә Хәлиттең ағаһы ҡайҙа икәнлеген әйтәм!

Ҡыҙ артына әйләнде. Ошо ерҙә тротуар буйлап ҙур тиҙлек менән яҡынлашып килеүсе аҡ «Жигули»ҙы күрҙе Әмилә. Тапай бит! Ситкә ырғырға, тигән уй килде ҡыҙҙың башына. Тик һуң инде, өлгөрмәй!.. Әмиләнең ҡото осто! Үлеүе ошомо? Күҙ асып йомғансы ниндәйҙер көс ҡыҙҙы ағастар араһына алып ырғытты. Шунда уҡ машина эргәнән генә шыжлап үтеп китте. Ана ул кире юлға төштө һәм күҙҙән дә юғалды.

Әмилә ергә йығылғанда ҡулының ауыртҡанлығын тойҙо. Башҡа ере иҫән-һау. Ҡыҙ урынынан тороуға сираттағы ирҙәр йүгерешеп килеп етте.

— Ни булды? Тапанымы? Хулигандар! — тигән тауыштар ишетелде. Әмиләне уратып алдылар. — Бер ерең дә ауыртманымы?

Ҡыҙ кешеләрҙе йырып сыҡты. Пеләш ир ҡайҙа? Әгәр ул Әмиләне ситкә ырғытмаһа, ошо минутта ҡыҙға яҡты донъя менән хушлашырға тура килер ине.

Пеләш ир ситтәрәк тора. Ҡурҡышынан йөҙө ап-аҡ булған. Әмиләне күргәс, йылмайғандай итте.

— Рәхмәт һеҙгә, — тине ҡыҙ ихлас күңелдән. — Мин ысынлап та Хәлиттең дуҫы. Әгәр белһәгеҙ, әйтегеҙ: Хәлит менән уның ағаһы ҡайҙа?

Ҡапыл ир һағайҙы. Йөҙөндә оло ҡурҡыу барлыҡҡа килде. Ҡыҙ йәһәт боролоп ир текәлгән яҡҡа ҡараны. Аллея осонан уларға табан өс ир йүгереп килә ине.

— Уларға һин кәрәк! Ҡас! — тине ир. — Минең адрес: Ҡояшлы урамы, илле дүртенсе йорт!

Ир шунда уҡ юҡ та булды. Теге өс ир яҡынлаша! Әмилә оҙаҡ уйлап тормайынса алға ташланды...

## БАТЫРҘЫҢ СОСЛОҒО

Батыр «Москвич»тың багажнигында ята. Эҙәрләүселәр эргәлә генә. Күрҙеләрме, юҡмы уның бында йәшенгәнлеген? Бына кемеһелер багажникка таянды! Батыр тын да алмай. Ниһайәт, аяҡ тауыштары алыҫлаша башланы. Шунан тынлыҡ урынлашты.

Күпмелер ваҡыт үтте. Батырға хәҙер сығырға ла булалыр. Ләкин хәҙер бит ошо машина менән Хәлитте ниндәйҙер «йәшел һарай»ға алып китәсәктәр. Әгәр багажникта йәшенеп бармаһа, нисек табыр ул ерҙе Батыр? Тик бына Әмилә менән осрашаһы урынға ваҡытында бара алмай. Ҡыҙ Батырҙы көтөп ыҙаланыр инде... Малай был хаҡта уйламаҫҡа тырышты. Әмилә, ни тиһәң дә әле иректә, ә Хәлитте ҡотҡарырға кәрәк.

Йәнә машина эргәһендә аяҡ тауыштары ишетелде. «Москвич»тың ишектәре асылды.

— Ҡайҙа алып бараһығыҙ?

Хәлиттең тауышы! Батыр ҡыуанысынан, үҙе лә һиҙмәҫтән, һелкенеп ҡуйҙы. Башы менән ныҡ ҡына итеп эргәлә ятҡан тәгәрмәстең тимеренә һуғылды, телен тешләп алды. Хәлитте икенсе урынға күсерәләр! Тимәк, юҡҡа ятмай Батыр багажник эсендә!

Бына машина ҡуҙғалып китте. Багажник эсендә йөрөүе бик уңайһыҙ икән. Малай туп кеүек тәгәрләп йөрөй. Башы, терһәге, тубығы әллә нәмәләргә һуғылып бөттө. Етмәһә, тын алмаҫтай булып туҙан күтәрелде. Батырҙың тамағына, танауына саң тулды. Ул бер нисә тапҡыр саҡ-саҡ сөскөрөп ебәрмәне. Шунан кеҫәһенән ҡулъяулығын сығарып танауын ҡапланы.

Ун минуттай барғас, машина һелкенә-һелкенә борола башланы, шунан туҡтаны. Бына Хәлитте ҡайҙалыр алып киттеләр. Алыҫта ишек асылып ябылғаны ишетелде. Шунда уҡ Батыр әкрен генә багажникты асты һәм тирә-яғына күҙ һалды.

Машина төрлө яҡтан йорттар менән уратып алынған урында тора. Кеше-ҡара күренмәй. Батыр тиҙ генә йәшенгән урынынан сыҡты ла мөйөштәге таҡталар артына сумды.

Батырҙың артында — «Г» хәрефенә оҡшатып төҙөлгән ике ҡатлы йорт, ҡаршыһында оҙон, бейек һарай. Ул йәшел төҫтә. Туҡта! Бая «йәшел һарай» тип һөйләгәндәре ошомо икән? Улайһа Хәлитте бында күсерҙеләр бит! Батыр һарайҙы тышҡы яҡтан тикшерә башланы. Тәҙрәләре бар, ишеге берәү генә. Уның алдында бейек кенә тупһа, баҫҡыстар...

Бер аҙҙан ишек асылды, унан теге ике егет килеп сыҡты. Күп тә үтмәне улар, «Москвич»ҡа ултырып китеп тә барҙылар.

Батыр, тағы бер аҙ көттө лә, башҡаса бер кем дә күренмәгәс, ишеккә йүгереп барҙы. Эстә бер ниндәй тауыш ишетелмәй, буғай. Ләкин унда кем дә булһа булырға тейеш бит. Тоҙаҡҡа эләкмәҫме? Малай икеләнде. Ләкин инмәйенсә лә китә алмай бит. Ни булһа, шул булыр! Батыр алға атланы.

Ул бәләкәй генә солансыҡҡа килеп инде. Алда йәнә ике ишек. Батыр ҡолаҡ һалды. Тағы ла йөрәкте тишеп алып барған шомло тынлыҡ! Әллә бер кем дә юҡмы бында? Хәлиттең яңғыҙын ғына бикләп киттеләрме?

Ҡапыл асыҡ итеп аяҡ тауыштары ишетелде. Кемдер ишектең береһенә яҡынлашып килә! Батыр ҡабаланып тирә-яғына ҡараны. Йәшенер урын юҡ! Икенсе ишекте тартты — бикле! Малай урамға илтеүсеһенә ташланды. Ҡапыл мөйөштә ятҡан бәләк йыуанлыҡ бер нисә ағас күҙенә салынды. Батыр ныҡлап уйлап та торманы, шуларҙың береһен ҡулына тотоп ишек артына боҫто. Йөрәге күкрәгенән сыға яҙып тибә! Ни булыр? Һуғырға ҡыйыулығы етерме? Әгәр яҙа эләктерһә?

Бына ишек асыла башланы. Секундтар шундай оҙаҡ һуҙыла!.. Солансыҡҡа йыуантаҡ бер ир килеп сыҡты. Батыр оҙаҡ уйлап тормайынса, тегенең башына ағас менән ҡундырҙы. Ир стенаға һөйәлде, шунан әкрен генә иҙәнгә шыуып төштө. Батыр үҙенең эшенән үҙе ҡурҡып, бер аҙ урынынан ҡыбырлай алмай торҙо. Был ир юрамал ғына ята һымаҡ, ҡапыл ырғып торор ҙа Батырға ташланыр кеүек... Әммә ул ҡыбырларға ла уйламай ине. Әллә үлдеме? Батыр, бик ҡурҡһа ла, эйелеп тегенең күкрәгенә усын һалды. Йөрәге тибә! Малай, ҙур бәләнән ҡотолғандай, еңел итеп тын алды...

Батыр ир сыҡҡан ишектән эскә инде. Оҙон коридор. Ос-та ике яҡта ла бер нисә ишек бар. Батыр шунда табан йүгерҙе. Ишектәрҙең береһен тартҡайны, асылып китте. Был бәләкәй генә бүлмә булып сыҡты. Унда өҫтәл, ултырғыс, карауат тора. Теге кеше ҡарауылсы, күрәһең. Был уның бүлмәһе. Башҡа ишектәр бикле булып сыҡты. Батыр уларҙың һәр береһен һелкетергә кереште:

— Хәлит! Хәлит!

Ишектәрҙең береһенең артынан тауыш килде:

— Батыр! Һинме был?

Хәлит! Бына ҡайҙа бикләгәндәр уны!

— Мин! Хәҙер асам! Саҡ ҡына көт!

Батыр ҡарауылсының бүлмәһенә ташланды. Стенала асҡыстар күренмәй. Малай өҫтәлде аҡтарырға тотондо. Юҡ асҡыс! Ҡарауылсының үҙендәме икән? Батыр коридорға йүгереп сыҡты ла тегенең янына килде. Уның кеҫәһен ҡарарға кәрәк! Ҡапыл иҫенә килһә? Икеләнеп ваҡытты һуҙыуы ла ҡурҡыныс, ысынлап та, тороп баҫыуы бар!

Малай, бар ҡыйыулығын йыйып, ҡарауылсының кеҫәләрен тикшерергә тотондо. Тәүге кеҫәһе буш ине, ә бына икенсеһенән бер бәйләм асҡыстар килеп сыҡты. Батыр Хәлит бикләнгән бүлмә янына йүгереп килде. Быларҙың ҡайһыһы ишекте асыр? Ашыҡҡан саҡта ҡулы ла ҡалтырай башлай бит! Ә йөрәге ярыла хәҙер! Күңеленә ҡарауылсы иҫенә килеп бында табан атлай кеүек! Йәиһә, башҡа кешеләр килеп сыҡмаһын!..

Ниһайәт, ишек асылып китте. Шунда уҡ Хәлит дуҫын ҡосаҡлап алды. Уның күҙҙәрендә йәштәре күренде.

— Мин инде... Һине башҡа күрә алмам, тигәйнем... — Хәлит танауын һөртөп алды.

— Тиҙерәк, ҡасайыҡ бынан! — тине Батыр.

Ярты минут та үтмәне, малайҙар урам буйлап йүгереп килә ине. Был үҙәк баҙар тирәһе икән. Салауат һәйкәленә тиклем ара йыраҡ ҡына. Батыр менән Хәлит трамвай туҡталышына ашыҡты...

## ОСРАШЫУ

Салауат һәйкәле янында Әминә юҡ ине. Уның урынына малайҙар телецентр яғынан килә ятҡан Йыуан менән Һонторҙо күрҙе. Тәүҙә Батыр ҡаушап ҡалды, аҙаҡ ҡыуанды. Улар был яҡҡа табан ҡабалана икән, тимәк, Әминә ошо тирәлә булырға тейеш. Тиҙерәк ҡыҙҙы табырға!

Батыр менән Хәлит тирә-яғына ҡараны. Юҡ, ҡыҙ бер ҡайҙа ла күренмәй. Аҫта, ағастар араһындамы икән ни? Малайҙар һәйкәлде ике яҡтан урап аҫҡа төшә башланылар.

— Әминә! — тип ҡысҡырҙы Батыр. — Әминә!

Көтмәгәндә, аҫтанырак яуап килде:

— Батыр!

Был бит Әминә! Малайҙар тауыш килгән яҡҡа йүгерҙе. Күп тә үтмәнеләр, бында табан күтәрелеп килгән ҡыҙға тап булдылар. Шул саҡ өсөһөнөң ҡыуанышыуын күрһәң! Әйтерһең, йылдар буйы күрешмәгәндәр!.. Ниһайәт, улар бергә! Тик оҙаҡ шатланып торорға ваҡыт юҡ. Йыуан менән Һонтор — эргәлә. Улар ҙа аҫҡа төшөп киләләр әле!

Ағастар араһынан йылға буйына төштөләр һәм күпергә табан ашыҡтылар. Шул арала һәр кеме айырылышып торған арала үҙҙәре менән ниҙәр булғанлығын һөйләне. Әминә теге өс ирҙән саҡ ҡасып ҡотолған. Йыуан менән Һонторға ла эләгә яҙған. Шуға аҫҡа төшөп киткән. Ҡыҙ баҡһаң, был юлдан икенсе тапҡыр үтә. Батырҙы эҙләп һәйкәл янына килә икән дә, йылға буйына төшә, шунан күпер тапҡырынан ҡалаға күтәрелә... Теге пеләш ир хаҡында ла һөйләне малайҙарға, адресын әйтте. Батыр менән

Хәлит аптырап ҡалды. Барырғамы унда, юҡмы? Әгәр тоҙаҡ булһа?..

Хәлит үҙенең нисек тотҡонға эләгеүен һөйләне. Уның милиция менән бәйләнеше бармы, юҡмы икәнлеген белергә маташҡандар. Бер үҙе генә Мансур ағаһын эҙләргә сыҡҡанлығын аңлағас, малайҙы «юҡ итергә» тигән һүҙҙәр ысҡындыра башлағандар. Әгәр Батыр ҡотҡармаһа, Хәлиттең яҙмышы нисек боролоп китер ине, билдәһеҙ.

Ул арала ҡараңғы төшә башланы. Балалар үҙҙәренең ныҡ ҡына асыҡҡандарын тойҙо. Берәй ергә инеп ашап алабыҙ, тиһәләр, ашханалар ябылып бөткән. Магазиндан алған икмәк менән ҡатыҡты туҡталыштағы эскәмйәгә ултырып ҡапҡылауҙан башҡа сара ҡалманы. Хәҙер ҡайҙалыр йоҡларға урын табырға кәрәк. Күрәһең, Батырҙың интернатына барырға тура килер. Тик тәүҙә пеләш ағайҙың өйөнә һуғылырға булдылар. Әгәр унан Мансур ағайҙың ҡайҙа йәшерелгәнлеген белһәләр... Әлбиттә, элэгеүҙәре лә бар. Шуға күрә өсәүләшеп бармаҫтар.

Тамам ҡараңғыланды. Бағана башындағы уттар ҡабынды.

Ҡапыл Әмилә ҡысҡырып ебәрҙе:

— Теге өсәү! Ҡастыҡ!

Малайҙар ҡыҙ күрһәткән яҡҡа ҡараны. Урам осондағы фонарь яҡтылығында был яҡҡа табан йүгереүсе өс шәүлә күренде. Балалар эскәмйәнән ырғып торҙолар ҙа ситкә ташландылар.

Шик юҡ — былар «Ҡарсыға»ның кешеләре. Улар бит бер нәмәгә ҡарамай Батырҙарҙы эләктерергә итә. Әгәр Хәлиттең дә ҡасып киткәнлеген белһәләр, бигерәк тә асыуҙары килгәндер.

— Минең арттан! — тип өндәште Батыр иптәштәренә. — Артҡа ҡалмағыҙ!

Батыр ағастар араһына ырғыны. Бер аҙ барғас, тротуарға килеп сыҡтылар. Шунан ҡырҡа уңға боролдолар ҙа ниндәйҙер ҡапҡа эсенә инеп киттеләр. Батыр артына ҡараны. Хәлит менән Әмилә ҡалышмай килә. Тегеләрҙән ҡотолдолармы икән?

Улар туҡтаны. Өсөһө лә өҙөк-өҙөк итеп тын ала. Ҡолаҡ һалдылар. Аяҡ тауыштары ишетелә! Киләләр! Ана ҡапҡанан инделәр! Ҡыҙ менән малайҙар ситкә ташланды. Алда ҡойма! Тотолдолармы? Ана, тишеге бар икән! Батыр шунда сумды. Хәлит менән Әмилә уға эйәрҙе. Әгәр хәҙер эләкһәләр, уларға ҡотолоу юҡ!.. Тротуар! Ике яҡта ла ҡойма! Әгәр бынан тура ҡасһалар, тегеләр ҡыуып етәсәк! Ул арала ҡыуыусылар ҙа тишектән тротуарға килеп сыҡтылар. Балалар йән-фарман алға саба. Уларҙың инде хәле юҡ. Бандиттар яҡынлашҡандан-яҡынлаша. Бөттө! Улар Мансур ағайҙы ла ҡотҡара алманы, үҙҙәре лә тотолдо! Хәҙер өсөһөн дә юҡ итерҙәр!..

Ҡапыл Батыр ҡаршыларына атлаусы ике кешене күреп ҡалды. Ҡараңғы. Әммә береһенең Йыуан, икенсеһенең оҙон буйлы икәнлеген шәйләргә була. Әмиләне эҙәрләүсе Ур кешеләреме икән ни? Балалар улар янына йүгереп килеп етте. Тегеләр юлға арҡыры торҙо. Йыуан менән Һонтор! Ҡыҙ менән малайҙар, ни эшләргә белмәйенсә, ике уртала туҡталды. Бына ҡыуып килеүселәр яҡынлашты. Улар шунда уҡ балаларҙың беләктәренән эләктереп алды.

— Ҡәбәхәттәр! — тине береһе асыу менән. — Күпме ҡанды ашанылар!

— Юҡ итергә үҙҙәрен! — тине икенсеһе. — Шуның менән эш тә бөттө!

Ошо ерҙә Йыуан менән Һонтор һүҙгә ҡушылды.

— Һеҙ кем? Был балаларҙы нимә эшләтәһегеҙ? Бандиттарҙың береһе тегеләргә ҡаршы сыҡты:

— Унда ни эшегеҙ бар? Юлығыҙҙа булығыҙ! Юғиһә!..

— Беҙгә ошо балалар кәрәк! — Йыуан Әмилә менән Батырға күрһәтте.

— Ха-ха! — тип көлдө бандиттарҙың береһе. — Тағы нимә кәрәк? Китегеҙ юлдан!

Бандит Йыуанды этеп ебәрҙе. Ләкин әллә ҡайһы арала үҙе ергә тәгәрләп китте. Әмиләне тотоп торған егет Йыуанға ырғыны, икенсеһе Һонторға ташланды. Кемдеңдер ҡулынан нимәлер шаҡылдап төштө. Китте алыш. Хәҙер быларҙа эргәлә торған балалар ҡайғыһы бөттө.

— Ҡастыҡ! — тип шыбырланы Батыр. Һуңғы минутта ул ергә төшкән нәмәне ҡулына эләктерҙе. Был бит Әмиләнән сыҡҡан радиосигналдарҙы тотоусы прибор! Малай уны кеҫәһенә тыҡты.

Урам осона етеп боролор алдынан Батыр артына әйләнеп ҡараны. Ур кешеләре менән бандиттар һаман да һуғыша ине әле...

## ҠОЯШЛЫ УРАМЫНДА ТӨН

Ҡояшлы урамын табыуы ҡыйын булманы. Бында Батырҙың булғаны бар. Интернатта бергә уҡыған малайҙың апайҙарына бергәләшеп килгәйнеләр.

Ҡала ситендәге был урам кескәй генә ағас йорттарҙан тора, һәр ишек алдында бейек-бейек ағастар үҫә.

Ҡырҡ алтынсы йортҡа еткәс, туҡтанылар. Илле дүртенсе өйгә тиклем күп ҡалманы. Эргәлә генә автобус туҡталышы. Хәлит менән Әмилә шунда ҡаласаҡ. Ә Батыр теге өйгә барып килә. Әгәр ул ярты сәғәттән әйләнмәһә, тотолған, тигән һүҙ. Ул саҡта ни эшләрҙәр? Ул саҡта Хәлит менән Әмилә Батырҙы нисек тә ҡотҡарырға тырышыр... Башҡа ни эшләй ала улар?..

— Һин тотолорға тейеш түгелһең! — тине Әмилә оҙатҡан саҡта.

Бына Батыр илле дүртенсе йортҡа яҡынлашты. Ни өсөндөр тәҙрәләрендә ут күренмәй. Өйҙә кеше юҡмы икән ни? Батыр уйланып торҙо. Юҡ, бер килгәс, инмәйенсә китергә ярамай. Бәлки пеләш йоҡлап ятАлыр, йәки уның менән берәй хәл булғандыр. Әгәр уның Батырҙарға ярҙам итергә теләүен белһәләр, теге бандиттар... Был хаҡта уйлауы ла ҡурҡыныс!.. Әгәр «Пеләш»те үлтереп, Батырҙарҙың килеүен көтөп торһалар? Һаҡ булырға кәрәк!..

Батыр ҡапҡаны этте. Ул сыйылдап асылды. Малайҙың йөрәге жыу итте, ул ҡатып ҡалды. Әгәр өйҙә кешеләр булһа, ишеттеләр! Иплӓберәк ҡыланырға кәрәк. Малай тирә-йүнгә ҡолаҡ һалды. Тып-тын. Батыр үҙ йөрәгенең дарҫлап тибеүен генә ишетә. Ҡараңғы. Болоттар араһынан ҡараған ай ишек алдын саҡ ҡына яҡтыртып алды. Мөйөштә торған бер шешә ялтыраны. Бына ай йәнә юғалды, һәм тирә-йүн тағы ҡараңғылыҡҡа күмелде.

Батыр ишек алдына үтте. Ҡапҡа йәнә йәмһеҙ итеп сыйылдап ҡуйҙы. Малай ҡоймаға һыйынды. Ҡапыл һарай янында кемдер ҡыбырланы! Йөрәк күкрәктән ысҡына яҙып тибә башланы. Кем унда? Батырҙы күрҙеме? Шәүлә уға яҡынлаша!.. Малай ҡурҡышынан артҡа сигенде... Бәй, был бит бесәй булып сыҡты! Ул килеп малайҙың аяғына һарылды.

— Брыс! — тине Батыр әкрен генә һәм эйелеп алға атланы.

Тупһаның беренсе баҫҡысына баҫыуы булды, таҡта йөрәк өҙгөс тауыш менән шығырланы. Малай шунда уҡ ишек артына йәшенде. Әгәр тәҙрәнән күҙәтһәләр... Һаҡ булырға кәрәк.

Ишеккә тотонор алдынан Батыр һуңғы тапҡыр икеләнде. Бәлки бында инеп торорға кәрәкмәйҙер? Ләкин башҡаса улар бит Мансур ағайҙың ҡайҙалығын белә алмайҙар!

Батыр ишекте этте. Ул анһат ҡына асылып китте. Бикле түгел! Тимәк, өйҙә кемдер бар! Ниңә утты яндырмаған? Әллә был — Батырҙың тоҙаҡҡа инеп барыуымы?

Солан эсендә бөтөнләй ҡараңғы. Ҡапыл арттағы ишек шығырлап ябылды. Малай быны көтмәгәйне, шуға ҡурҡышынан сәстәре ҡыбырлағандай булды. Үҙе ябылдымы, әллә берәйһе яптымы? Малай тын да алмай тора. Тып-тын. Әкренләп күҙе ҡараңғылыҡҡа өйрәнгәндәй булды. Алда өйҙөң ишеге төҫмөрләнә. Мөмкин тиклем һаҡ баҫып шуға табан китте малай. Бына — тотҡа. Тартты. Йәнә йөрәк өҙгөс сыйылдау! Өйҙә мәйет ятһа ла һиккереп торор.

Батыр эскә инде. Шылт иткән дә тауыш ишетелмәй.

Әммә малай бөтә тәне менән һиҙә — өйҙә кемдер бар! Ул күҙәтә, көтә Батырҙы!..

Тәҙрәләрҙән тоноҡ ҡына яҡтылыҡ төшә. Әммә мөйөшһәйештәр ҡап-ҡараңғы! Унда тиҫтәләгән кеше йәшенеп торһа ла күренмәҫ!

Малай әкрен генә алға атланы. Алда өҫтәл күренә.

Туҡта! Уның артында кемдер ултыра! Малайҙың тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте! Ул әҙәм Батырға текәлгән дә ҡатып ҡалған! Уны көтә! Йә, хоҙай, ни эшләргә? Сығып ҡасырғамы? Малайҙың тәне ҡурҡышынан таш кеүек ҡатты. Теге әҙәм дә ҡыбырламай...

Туҡта, ул кешенең башы эйелгән дә баһа! Эйе, эйелгән шул! Йоҡлаймы? Малай кешегә яҡынлашты. Башы — пеләш! Тимәк, был Әмилә менән һөйләшкән ир. Батыр бит уны күрергә килде.

— Эй! — тине Батыр әкрен генә.

Кеше шул көйө ултырыуын белде. Малай йәнә өндәште. Юҡ, ыжламай ҙа. Батыр, бар ҡыйыулығын йыйып, ирҙең яурынына тейеп алды. Батыр ҡото осоп ситкә ырғыны. Сөнки малай ҡағылыу менән, ултырғыстағы ир бер яҡҡа ҡыйшайып китте лә иҙәнгә ауҙы. Батыр ҡурҡышынан стенаға һыйынып тора. Ни булды? Ниңә ул тормай, уңайһыҙ ҡиәфәттә ята? Башына килгән уйҙан малай өшөп китте: ул үлгән! Ошонда ғына Батыр ирҙең күкрәгендә торған бысаҡты күрҙе. Үлтергәндәр!.. Малай ишеккә сигенде. Шунан туҡтаны, кире килде. Үҙ күҙҙәренә ышанмағандай йәнә ҡарап торҙо. Ни эшләргә? Милицияға хәбәр итергәме?

Ҡапыл Батырҙың ҡолағына ниндәйҙер сыйылдау ишетелде. Малай һағайҙы. Был бит ҡапҡа тауышы! Кемдер инеп килә! Кем? «Ҡарсыға»ның кешеләреме? Әгәр «Пеләш» бында Батырҙарҙың килергә тейешлеген әйткән булһа... Батыр ишеккә уҡталды. Юҡ, өлгөрмөй! Ана аяҡ тауыштары инде тупһала! Тәҙрә аша ҡасырғамы? Малай тәҙрәне аса башланы ла туҡтаны. Сөнки унда кемдер бар кеүек тойолдо. Батыр улай-былай итте. Шунан тәҙрә шаршауының телевизор артындағы стенаны ҡаплап торған өлөшөнә йәшенде.

Өйгә кемдәрҙер инде. Аяҡ тауыштарынан бер нисә кеше икәнлеге беленде. Әммә өндәшмәйҙәр. Тып-тын. Бер минуттай ваҡыт үткәс, тегеләрҙең береһе өҫтәл янына килде.

— Ҡайҙа ул? — тип һораны хәүефле тауыш менән. — Өҫтәл артына ултыртып ҡалдырғайныҡ бит!

Ишек янындағылар уның янына ашығып килде.

— Бына ята бит! Теге малай ҡолаттымы икән? Батырҙың йөрәге туҡталғандай итте. Уның хаҡында һөйләшәләрме?

— Ул ингән тиһеңме? — тип һораны ҡалын тауышлы ир.

— Мин асыҡ күрҙем, ул өйгә инеп китте. — Бынының тауышы нәҙек кенә.

— Утты яндыр! — тине өсөнсө ир. — Ул малай беҙҙе эҙәрләүсе тип уйлайһығыҙмы?

Шунда уҡ өй эсе яҡтырҙы. Батыр тын алырға ла ҡурҡып тора. Тегеләрҙең төрлө урындарҙы ҡараштырғаны, шифоньерҙы асып япҡандары ишетелде.

— Бер кем дә юҡ! — тине ирҙәрҙең нәҙегерәк тауышлыһы.

— Булырға тейеш! Теге бүлмәне ҡара! Бер ҡайҙа ла китмәгәндер!

Батырҙың эргәһенән генә бер ир күрше бүлмәгә үтте. Утты яндырҙы, нимәнелер асып ҡараны, шунан кире сыҡты.

— Юҡ! Бер кем дә килмәгән, килергә лә тейеш булмаған!

— «Пеләш»тән әйттерҙек бит, теге эҙәрләүселәргә адресты бирҙем, тине. Мин күрҙем, кемдер инде бында! Ул шуларҙың береһе! — тине нәҙек тауышлы.

— «Ҡарсыға» беҙҙең кәрәкте бирәсәк, — тине өсөнсө ир. — Бынының ауыҙға килеп ингән ерҙән тота алманыҡ, тегенеһе ҡасҡан!

— Әйттем мин һеҙгә, ишек алдына ингәс тә тотайыҡ тип!

— Ул арт яҡҡа сығып ҙа китер ине! Тәҙрә асыҡ бит! Эй, һеҙ! — Ҡалын тауышлы тәҙрәне асып тышҡа өндәште. — Бынан берәйһе сыҡманымы?

— Юҡ! — тип яуап бирҙеләр тыштан.

— Аңралар! Тәҙрәнән сығып киткән! Күрмәй ҡалғанһығыҙ! Ярай, китәбеҙ. Хәҙер беҙгә Мансурҙы «йәшел һарай»ға алып барырға кәрәк. «Ҡарсыға» уның менән һуңғы тапҡыр һөйләшеп ҡарай ҙа сиселергә теләмәй икән... Киттек!

Утты һүндерҙеләр. Ирҙәрҙең соланға сыҡҡанлығы, ишектәрҙең шығырлап ябылғаны ишетелде. Ана, урам ҡапҡаһы ла сыйылдап алды. Киттеләр! Шулай ҙа Батыр йәшенгән урынында ултыра бирҙе. Бында кемдер ҡалған кеүек ине уға...

«Пеләш» Мансур ағайҙың ҡайҙалығын әйтә алманы уларға. Әммә Батыр шуны белде: хәҙер Мансур ағайҙы «йәшел һарай"ға алып барасаҡтар. Әгәр ярты сәғәт эсендә унда өлгөрһәләр, Мансур ағайҙы ҡотҡаралар...

Батыр йәшенгән урынынан сыҡты ла ҡапыл туҡтаны. Сөнки бүлмәнең теге башында иҙән шығырланы! Кемдер бар! Кире йәшенергәме? Ләкин уны инде күргәндәрҙер! Малайҙың йөрәге ярыла яҙып тибә. Ул кемдеңдер тын алышын ишеткәндәй булды. Эргәлә генә диван. Батыр шуның артына ырғырға итте.

Ошо ерҙә кемдер көслө тауыш менән: — Туҡта! — тип өндәште. Батыр урынында ҡатып ҡалды...

## ӘМИЛӘ МЕНӘН ХӘЛИТ ЯРҘАМҒА КИЛӘ

Ҡыҙ менән малай туҡталыш будкаһында оҙаҡ ҡына ултырҙылар. Күптән килергә тейеш Батыр. Ә ул юҡ та юҡ. Берәй хәл булдымы икән? Ҡырҡ минуттан ҡайтып етмәһә, Әмилә менән Хәлит Батырҙы ҡотҡарырға барырға тейеш.

Ары кәтмәҫкә булдылар. Ҡараңғы төн. Һирәк кенә бағана баштарында ут бар. Тик уларҙың да яҡтылығы алыҫ китә алмай, урам буйлап үҫкән бейек ағастар ҡамасаулай...

Бына илле дүртенсе йорт. Тәҙрәләре ҡараңғы. Батыр унда булһа, ни өсөн утты яндырмағандар? Әмилә менән Хәлит туҡталды. Ни эшләргә? Әмилә өйгә инеп сығырға тәҡдим итте. Батырҙың ундамы, түгелме икәнлеген белмәйенсә улар ни ҡыла ала?

Ҡапҡаның сыйылдауы төндөң тын һауаһын тирбәлдереп ебәрҙе. Малай менән ҡыҙ ҡоймаға ышыҡланды. Тәҙрәлә шәүлә күренгәндәй булды. Әллә Хәлит менән Әмиләгә шулай тойолдомо? Әгәр эстә көтөп торһалар? Әгәр улар күп булһа? Ни эшләргә? Боролоп та китеп булмай — Батыр бит бында булырға тейеш! Эстә бандиттар булһа, уларҙы алдаштырырға кәрәк. Тик нисек? Бер аҙ уйлағандан һуң, Хәлит эргәләге утынлыҡтан алып ҡыҙға бер оҙон ғына таяҡ тотторҙо:

— Әмилә, — тине ул. — Мин тупһаға күтәрелгәс тә, һин ситтәнерәк тороп ошо таяҡ менән тәҙрәне шаҡылдат. Тик үҙең эстәгеләргә күренмә. Мин шул саҡта эскә инәм.

Бына Әмиләнең ҡулындағы таяҡ тәҙрәне яра яҙып шаҡылдата башланы. Шул ваҡытта Хәлит соланға, аҙаҡ өйгә инде. Ул бер тауыш та сығарманы шикелле, сығарһа ла, ишектәрҙең шығырлауы тәҙрә шаҡылдауына күмелеп ҡалғандыр.

Хәлит ишек төбөндә туҡталып тирә-яғына ҡараны.

Ҡапыл:

— Кем унда? — тигән тауыш ишетелде эргәлә генә. Хәлит тәҙрә яҡтылығында бер шәүлә күреп ҡалды.

Бейек кәүҙәле ир! Ул Хәлиткә табан килә! Сығып ҡасырғамы? Юҡ, өлгөрмәй! Теге тоттом тигәндә, ҡапыл Хәлит иҙәнгә ятты. Һәрмәнеп килгән бандит, малайға эләкте лә, башы менән эргәләге мейескә шаҡ итеп һуғылды, иҙәнгә барып төштө. Хәлит шунда уҡ ырғып торҙо. Ҡасырға!.. Тик теге ир юлға арҡыры ятҡан, үҙе ниңәлер тормай.

— Хәлит, һинме? — Эргәлә генә Батырҙың тауышы ишетелде.

Хәлиттең эсенә йылы йүгерҙе:

— Батыр!

— Ни булды? — тип һораны Батыр. — Теге кеше ҡайҙа?

— Бына ята.

— Ул бит иҫһеҙ! — тип аптыраны Батыр. — Һин һуҡтыңмы?

— Юҡ, ул үҙе... Миңә эләкте лә... Башын мейескә төкәнә шикелле.

— Молодец! — Батыр дуҫын ҡосаҡлағандай итте. — Әгәр һин килеп сыҡмаһаң... Кем унда тәҙрәне шаҡылдата?

— Әмилә.

— Шәп уйлағанһығыҙ! — тип маҡтаны Батыр. — Тәҙрә шаҡылдап, солан ишеге асылып-ябылғас, быныҡ ҡото осто, буғай.

Ошо мәлдә урамда машина тауышы ишетелде. Ул илле дүртенсе өй тапҡырында туҡтаны түгелме? Малайҙар тәҙрәгә ташланды. Әйе, туҡтаған! Эсенән кешеләр төшә!

— Тиҙерәк! — Батыр ишеккә табан йүгерҙе. «Ҡарсыға»ның кешеләре!

Улар «һә» тигәнсе тупһаға килеп сыҡты. Әмилә көтөп тора икән.

— Баҡсаға! — тип шыбырланы Батыр. Ҡойма янына йүгереп килделәр. Ҡайҙа ҡапҡа?

— Аша төшәбеҙ!

Кемдеңдер кейеме йыртылып китте. Батыр ағастар араһына сүгеп артына ҡараны. Хәлит менән Әмилә эргәһендә! Әммә тегендә кемдер был яҡҡа йүгерә! Балалар ырғып торҙо ла алға ташланды. Йәнә бер ҡойма аша төштеләр, кемдеңдер ишек алдына килеп сыҡтылар. Абалап эт өрә башланы. Өйҙә ут тоҡанды, ишек асылғаны ишетелде. Эт бәйһеҙ булған икән, Батырҙың балағына килеп йәбеште. Малай уны тибеп осорҙо. Әллә ҡайһы арала Хәлит ҡапҡаны асырға өлгөргән. Тиҙ генә шунан сығып, урам буйлап йүгерҙеләр. Күпмелер барғас, арттарына әйләнеп күҙ һалдылар. Ҡыуып килеүселәр күренмәй. Шуға ҡарамай балалар тағы байтаҡ йүгерҙеләр әле.

Бына улар трамвай туҡталышына килеп сыҡтылар. Батыр үҙенең планын асып һалды.

— Хәҙер һин, Хәлит, милицияға бараһың да илле дүртенсе йортта мәйет ятҡанлығын әйтәһең.

— Ниндәй мәйет? — тип аптыраны Хәлит. — Мин башына һуҡҡан кешеме?

— Юҡ. Ул үлтереүселәрҙең береһе. «Пеләш»те үлтергәндәр. Бөтәһен дә һөйлә.

— Ә һеҙ ҡайҙа бараһығыҙ? — тип һораны Хәлит.

— Беҙ Әмилә менән «йәшел һарай»ға барабыҙ. Хәҙер унда Мансур ағайҙы килтерергә тейештәр. Беҙ уны ҡотҡарырға тырышып ҡарайбыҙ.

— Бәлки, милиция менән бергә... — Хәлит дуҫына һораулы ҡараны.

— Милицияға оҙаҡ аңлатырға тура киләсәк, — тине Батыр. — Улар беҙгә әллә ышана, әллә юҡ. Һинең, минең кемлегебеҙҙе тикшерә башлаясаҡтар. Әмиләнең ҡайҙан икәнлеген белһәләр, уларҙа енәйәт ҡайғыһы китәсәк. Ваҡытты әрәм итмәйек. Улай йөрөһәк, Мансур ағайҙы бөтөнләй юғалтыуыбыҙ бар.

— Ярай, улайһа, — тип килеште Хәлит.

## ЙӘНӘ «ЙӘШЕЛ ҺАРАЙ»ҒА

Бына Батыр менән Әмилә серле бина янына килеп еттеләр. Һарайҙың мөйөшөндәге тәҙрәлә генә ут бар. Унда ҡарауылсы бүлмәһе.

Малай барып ишекте тартып ҡараны. Ул бикле ине. Батыр менән Әмилә тәҙрә янына килде. Уға буй етерлек түгел. Малай эҙләнә торғас, бер йәшник табып килтерҙе. Бер ваҡыт шунын өҫтөнә баҫып эскә күҙ һалды.

Унда күргән күренеш малайҙы шаҡ ҡатырҙы. Бүлмәлә ҡарауылсынан башҡа дүрт кеше бар. «Ҡарсыға» өҫтәл артында ултыра. Уның ике яғында — ике егет. Уларға ҡаршы ...Мансур ағай баҫып тора! Ҡарауылсы бер яҡ ситтәрәк карауатҡа урынлашҡан.

Батыр яңылыш күрмәйемме икән тигәндәй, күҙҙәрен сытырлатып йомдо һәм тағы эскә ҡараны. Шул ерҙә малайҙың аяғы аҫтындағы йәшниктең бер таҡтаһы шатырлап һынды. Батыр тәкмәсләп ергә барып төштө. Үҙе шунда уҡ ырғып торҙо. Тиҙерәк ҡасырға! Юғиһә эләгәләр!

Малай менән ҡыҙ урамға ташланды. Һуңғы секундта малайҙың башына бер уй килде.

— Һин ҡас! — тине ул Әмиләгә. Үҙе ҡырҡа боролоп ишеккә табан йүгерҙе.

Һарайҙың тупһаһы бейек кенә. Уның эргәһенә һуҙылып ятһаң... Тышта хәҙер ҡараңғы, йәшенеп ҡалырға була! Батырға хәҙер нисек тә эскә инергә кәрәк!

Күп тә үтмәне һарайҙың ишеге асылып китте, тупһаға яҡтылыҡ ҡоланы. Шунда уҡ тышҡа ике кеше килеп сыҡты. Улар тупһанан төшөп тәҙрә яғына китте. Ә Батыр урынынан һаҡ ҡына торҙо ла эскә йомолдо. Шунан ишекте эстән бикләне. Хәҙер Мансур ағай янында ике генә кеше. Әгәр Батыр ярҙам итә алһа... Тик нисек?

Эргәлә көндөҙ ҡарауылсының башына ҡундырған кеүек таяҡтар ята. Малай уларҙың береһен ҡулына алды. Үҙе ҡабаланып уйланы. Әгәр утты һүндерһә? Әйе, бында бит бөтә һарайҙағы утты һүндерә торған урын булырға тейеш. Батыр коридорға инде. Бына ул! Малай йәшникте асты һәм оло тумблерҙы шаҡылдатып аҫҡа төшөрҙө. Шунда уҡ

һарайҙың эсен күҙгә төртһәң, күренмәҫлек ҡараңғылыҡ солғаны.

Ишекте тыштан йоҙроҡ менән дөмбәҫләй башланылар. Батыр ҡарауылсының бүлмәһенә ташланды. Унда дөбөр-шатыр килгән тауыш ишетелде. Күрәһең, Мансур ағай ҡараңғылыҡтан файҙаланып ҡасырға иткән, тегеләр уға йәбешкән.

Батыр таяғын уңайлыраҡ тотоп бүлмәгә барып инде.

— Кем унда? Кем? — тип һораны бер ир. «Ҡарсыға»ның тауышын малай шунда уҡ таныны.

Тәҙрәнән төшкән шыйыҡ ҡына яҡтылыҡта Батыр иҙән уртаһында барған алышты күрҙе. Ике ир берәүһен иҙәнгә ҡолатып, торғоҙмаҫҡа маташа.

Малай яйын тура килтереп таяғы менән өҫтәгеләрҙең берәһевең башына ҡундырҙы. Теге шунда уҡ әйләнеп төштө. Икенсеһе, хәлде аңлап, ҡапыл малайға ташланды. Әммә ул арала Мансур ағай ырғып торҙо һәм малайға йәбешкән бандитҡа эргәләге ултырғыс менән килтереп һуҡты.

Ҡапыл тәҙрә селпәрәмә килде. Эскә инеп килеүсе кешенең башы күренде. Тышта тороп ҡалған ике бандит дуҫтарына ярҙамға килә ине.

Мансур ағай Батырҙың ҡулындағы таяҡты ҡулына алды. Бандит инде инеп бөттөм тигәндә генә Мансур ағай уға һелтәнде. Теге һаҡ торған икән, ситкә ялтанды. Ләкин тәҙрә төбөндә ҡала алманы, тышҡа тәгәрләп төшөп китте. Тыштағылар хәлдәренең мөшкөллөгөн аңланы, буғай, башҡаса эскә ынтылып торманылар. Ҡапыл боролдолар ҙа ситкә йүгерҙеләр...

Мансур ағай өҫтәлдә торған телефонға үрелде, үҙе шул арала Батырҙан һораны:

— Был ниндәй урын? Адресын беләһеңме?

— Үҙәк баҙар эргәһе, — тине Батыр. — Һеҙ милицияға шылтыратаһығыҙмы?

— Эйе.

— Хәлит унда булырға тейеш. Ул юлды белә. Мансур ағай трубкаға ҡысҡырҙы:

— Алло! Милиция! Һеҙгә Хәлит исемле малай килдеме? Тиҙ генә ул күрһәткән ергә килеп етегеҙ! Бында бандиттар ояһы! — Мансур ағай өндәшмәйенсә, сымдың теге осонда һөйләүсене тыңлап торҙо ла асыуланып ҡысҡырҙы. — Минең кемлекте килгәс белерһегеҙ! Тиҙ булығыҙ! Юғиһә улар хәҙер...

Мансур ағайҙың һүҙен раҫлағандай, бандиттарҙың береһе ҡыбырлай башланы. Мансур ағай тиҙ генә трубканы һалды ла, өҫтөндәге күлдәген сисеп, теге бандиттың ҡулдарын шаҡарҙы. Икенсеһенең ҡулын Батырҙың билендәге билдек менән бәйләнеләр. Малай таныны — быныһы «Ҡарсыға» ине.

— Ну был милицияны! — тип әсенде Мансур ағай. — Хәлиткә ышанмайҙар икән. Уның кемлеген, ҡайҙан кил-

гәнлегән тикшерә башлағандар! Бында етеҙлек кәрәк! Ә һин, Батыр, молодец! Нисек оҫта эшләнең!

Батыр урынынан торҙо:

— Мансур ағай, мөмкин булһа, мин китәм.

— Ҡайҙа?

— Әмилә менән бергә килгәйнек. Ул йәшенеп ҡалды. Миңә уны табырға кәрәк.

— Бәлки, милиция килгәс... — Юҡ, улай оҙаҡ була.

— Ярай, улайһа. Тик һаҡ бул, бандиттарға тотолоп ҡуйма. Әйҙә, оҙатып ҡуям.

Мансур ағай тупһанан Батыр урамға сығып киткәнсе ҡарап торҙо, шунан кире эскә инде. Малай аллея буйлап йүгерҙе. Ҡараңғы.

— Әмилә! — тип ҡысҡырҙы ул. — Әмилә!

Батыр туҡтап тыңлап алды. Яуап биреүсе юҡ. Ул бит алыҫ китергә тейеш түгел. Батыр ҡысҡыра-ҡысҡыра ярты саҡрымдай бер яҡҡа барғас, кире боролдо.

— Әмилә!

Тынлыҡ. Батыр икенсе яҡҡа йүгерҙе. Ҡапыл уның ҡолағына өҙөк кенә тауыш ишетелде. Малайҙың йөрәге ҡыуаныстан һәм түҙемһеҙлектән дарҫлап тибергә кереште. Әмилә! Уның тауышы! Малай, юлды-ниҙе ҡарамай, тауыш килгән яҡҡа осто:

— Әмилә!

— Батыр!

Малай ағастар араһындағы ҡараңғылыҡҡа йәшенгән бер эскәмйәгә килеп сыҡты. Уның бер осонда тубыҡтарын ҡосаҡлап Әмилә ултыра. Ул өшөгән! Шуға әкрен генә ҡалтырай. Шулай булмай ни! Төн һалҡынса, ә ҡыҙҙың өҫтөндә йоҡаҡ ҡына күлдәк. Ҡыҙ шундай йәл булып күренде малайға. Батыр йүгереп килде лә уның ҡаршыһына сүкәйҙе. Ҡыҙ әкрен генә илай ине.

— Әмилә, ни булды?

— Мин... ҡурҡтым... Һине башҡаса бер ҡасан да... Батыр!..

Малай ҡыҙҙың ҡулынан тотто. Ул һыуыҡ ине.

— Һин өшөгәнһең! — Малай ни эшләргә белмәне.

— Мин һине башҡаса бер ҡайҙа ла ебәрмәйем! — тине ҡыҙ илауҙан туҡтай алмайынса. — Мине яңғыҙ ҡалдырма, яраймы?

— Әмилә, тыныслан! — Батыр, аптырағас, күлдәген сисеп ҡыҙҙың яурынына ҡапланы. — Илама, Әмилә, Мансур ағайҙы ҡотҡарҙым!

— Батыр, һин!.. — Ҡыҙ йәшле күҙҙәре менән дуҫына һоҡланып ҡараны. — Һин шундай һәйбәтһең... Миңә һинһеҙ... Миңә бик ҡыйын булды...

Батыр ҡыҙҙың яурынынан ҡосаҡлап үҙенә ҡыҫты. Тышта төн ине. Болот араһынан йылмайып ҡына ай ҡарай ине.

## ЭПИЛОГ УРЫНЫНА

Шул төн «Ҡарсыға»ның ояһы туҙҙырылды. Улар Мансур ағайҙы оло мәкерлек менән урлағандар икән. Ул, төҙөүсе-рәссам булараҡ, ярты йыл элек үҙәк музейҙы биҙәүҙә ҡатнашҡайны. Шунда бик күп алтын-көмөш әйберҙәрҙе һаҡлау өсөн икенсе урынға күсергәндәр. Ул байлыҡтың хаҡы йөҙәр мең һум менән иҫәпләнә. Бандиттар Мансур ағайҙан шуларҙың ҡайҙа икәнлеген, унан нисек алырға кәрәклеген әйттерергә маташҡандар...

Батыр, Әмилә, Хәлит ике көн Өфөлә булды. Мансур ағай уларға баш ҡаланың күп кенә матур урындарын күрһәтте. Шунан Хәлиткә ҡайтырға ваҡыт етте. Уны вокзалға оҙатырға Әмилә менән Батыр килде. Юл буйы ҡыҙ ниңәлер моңһоу булды, артыҡ һөйләшмәне лә. Быға Батыр шунда уҡ иғтибар итте. Шуға ла кассаға билетҡа торғас, һорамай булдыра алманы:

— Әмилә, ни булды?

Ҡыҙ малайға ҡарамаҫҡа тырышты:

— Батыр, мин Сибайға китәм.

— Ниңә? — тип аптыраны малай.

— Миңә Урға ҡайтырға кәрәк...

Тынлыҡ урынлашты. Быны Батыр ҙа, Хәлит тә көтмәгәйне. Әмилә бит үҙе Ерҙә ҡалырға теләк белдергәйне. Хәҙер Йыуан менән Һонтор тотоп алыр тигән ҡурҡыныс юҡ... Шулай ҙа Батыр Әмиләне аңлай. Бынан бер йыл элек ул үҙе ошо хәлдә ине бит... Ҡыҙға бында һәйбәт, уның Батырҙан айырылғыһы килмәй. Әммә туған планетаның тартыу көсө барыһынан да көслөрәк... Ә һағыныу тойғоһо — иң ауыр, иң ғазаплы хис, унан ҡотолоп булмай...

— Мин дә барам Сибайға, — тине Батыр... Иртәгеһенә көндөҙгө бер тирәһендә улар өсәүләшеп Сибайҙың ситенә сыҡты.

— Ары бармағыҙ, — тине ҡыҙ. — Юғиһә улар һеҙҙе тотоп барыһын да онотторасаҡтар.

— Ә һине оноттормаҫтармы? — тип һораны Хәлит.

— Юҡ. — Ҡыҙҙың тауышы ышаныслыһыҙ сыҡты. — Мин үтенәсәкмен. Улар аңларға тейеш мине...

Батыр ҡыҙға ҡараны. Ул хәҙер мәңгегә китәме? Әллә улар ҡасан да булһа осрашырмы?

— Әмилә... — Батыр ниҙер әйтергә итте, тик үҙен солғаған тойғоларҙы аңлатырҙай һүҙ тапманы.

— Батыр...

Хәлит ситкә боролдо. Әкрен генә ел иҫте. Эргәләге сәскәләр һағышлы төҫ менән баштарын эйҙе.

— Хушығыҙ, малайҙар... — Әмиләнең тауышы ҡалтыраны.

— Хуш, Әмилә, — тине Хәлит.

— Мин... ҡасан да булһа... — Ҡыҙҙың күҙендә йәштәр күренде.

— Әмилә... — Батырҙың тамағына ҡаты төйөр килеп тығылды, һүҙ әйтергә ҡамасауланы. — Әмилә... — Малай башҡаса бер ни ҙә әйтә алманы.

— Әгәр килә алмаһам... — Әмилә йылмайырға маташты. — Мин һеҙҙе онотмам... бер ҡасан да!..

Ҡыҙ, ҡулын күтәреп хушлашты ла, китә башланы. Малайҙар өндәшмәй генә ҡарап тора. Ел ҡыҙҙың итәге менән уйнай, малайҙарҙың сәстәрен туҙҙыра. Әмилә китә. Әмилә минут һайын алыҫлаша. Туҡта, Әмилә! Һине бит Батыр башҡаса бер ҡасан да күрә алмаясаҡ! Китмә!.. Батыр күҙенә килеп эркелгән йәштәрҙе тыйырға тырыша, ләкин уларҙы туҡтатыр көс юҡ һәм улар малайҙың сикәһе буйлап ағып китә...

Әмилә! Һин бит Батырҙың иң яҡын кешеһе инең! Нисек йәшәр ул һинһеҙ?..

Ә Әмилә китә, йыраҡлашҡандан-йыраҡлаша... Хуш, Әмилә! Мәңгегә хуш, алыҫ Ур ҡыҙы!..



## Йөкмәткеһе

Үҙем һәм сит планета ҡыҙы хаҡында . . . . . . . . . . 3
Ҡара ҡумта . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 5
Хушлашыу . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 36
Сит планетала . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 84
Ҡара ҡумта-2 . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 123
Эҙәрләү . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 163
«Ҡарсыға» менән алыш . . . . . . . . . . . . . . 206

*Литературно-художественное издание*

**ГАИТБАЕВ Наиль Асхатович**

**ИНОПЛАНЕТЯНКА**

*(на башкирском языке)*

Редакция мөдире *С. Н. Шәрипов*
Мөхәррире *Г. Й. Фазлиәхмәтова*
Рәссамы *А. Р. Ғарипов*
Биҙәүсе мөхәррир *А. Р. Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *Г. Ә. Янғужина*
Корректоры *Э. М. Шәйхетдинова*

Нәшр. лиц. № 04380, 26.03.01. Йыйырға бирелде 29.05.03. Баҫырға ҡул ҡуйылды 23.06.03. Форматы 60 х $90^{1}/_{16}$. Офсет ҡағыҙы. Мәктәп гарнитураһы. Шартлы баҫма таб. 15,5+0,25 форзацы. Шартлы буяу отт. 16,25. Иҫәп-нәшер таб. 14,84+0,45 форзацы. Тиражы 3000 дана.
Заказ № 822.

Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.

Әҙерләп бирелгән диапозитивтарҙан баҫылды.
Өфө полиграфия комбинаты дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

## Наил Ғәйетбайҙың пьесалары

1. Ҡойма ямғырҙа. *Драма. 1984 й.*
2. Дүрт кешелек табын. *Драма 1987 й.*
3. Әстәғәфирулла. *Комедия. 1988 й.*
4. Илама, һылыу. *Драма. 1989 й.*
5. Төн. *Трагедия. 1990 й.*
6. Юлдар ярҙа өҙөлә. *Драма. 1991 й.*
7. Тойғолар ниңә һүнә. *Драма. 1991 й.*
8. Ҡурай моңо. *Әкиәт-пьеса. 1991 й.*
9. Һөйәркәнде шкафҡа йәшер. *Комедия. 1991 й.*
10. Мәктәп мажаралары. *Драма. 1991 й.*
11. Аты барҙың, дәрте бар. *Комедия. 1992 й.*
12. Йондоҙ нисек ҡабына. *Комедия. 1993 й.*
13. Ҡомартҡы, рэкитер һәм мөхәббәт. *Комедия. 1994 й.*
14. Батыр әтәс. *Әкиәт-пьеса. 1995 й.*
15. Кем эшләмәй, шул ашамай. *Әкиәт-пьеса. 1997 й.*
16. Ауылға ҡыҙҙар килде. *Комедия. 1998 й.*
17. Нисек кейәүгә сығырға. *Комедия. 1999 й.*
18. Ҡыҙҙар, ишек асығыҙ. *Комедия. 2000 й.*
19. Алыш бармы, атыш бармы. *Әкиәт-пьеса. 2000 й.*
20. Ос аҡсарлығым, ос. *Пьеса. 2000 й.*
21. Әйт, ҡайҙа йөрөнөң? *Комедия-шоу. 2000 й.*
22. Аҡмулланың аҡ көндәре. *Драма. 2001 й.*
23. Үҙ бисәмә өйләнәм. *Комедия. 2001 й.*
24. Ирҙәрҙең хыялы. *Комедия. 2002 й.*
25. Салауат алты йәшендә. *Пьеса. 2002 й.*

## Китаптары

1. Алтын ямғырҙар миҙгеле. *Повесть. Өфө. 1979 й.*
2. Һары тәҙрәләр. *Повесть һәм хикәйәләр. Өфө. 1981 й.*
3. Буран. *Повестар һәм хикәйәләр. Өфө. 1983 й.*
4. Офоҡҡа ҡаса юлдар. *Хикәйәләр. Өфө. 1985 й.*
5. Үҙ маҡсатыңды тап. *Повестар һәм хикәйәләр. Өфө. 1987 й.*
6. Светят окна в ночи. *Повести и рассказы. Москва. 1988 г.*
7. Ҡара ҡумта. *Повестар. Өфө. 1990 й.*
8. О чем говорят трупы. *Повесть. Сибай. 1992 г.*
9. Ҡапҡан. Повестар. *Өфө. 1993 й.*
10. Уҙыш. Роман. *Өфө. 1994 й.*
11. Әстәғәфирулла. *Драмалар һәм комедиялар. Өфө. 1996 й.*
12. Пьеса нисек яҙыла. *Мәҡәләләр һәм пьесалар. Өфө. 1997 й.*
13. Инопланетянка. *Роман, повести и пьесы. Уфа. 1998 г.*
14. Ауылға ҡыҙҙар килде. *Пьесалар. Өфө. 2001 й.*
15. Биобиблиография. *Мәҡәләләр һәм библиография. Өфө. 2002 й.*
16. Нисек кейәүгә сығырға? *Пьесалар. Өфө. 2002 й.*
17. Сит планета ҡыҙы. *Мажаралы-фантастик роман. Өфө. 2003 й.*

НАИЛ ҒӘЙЕТБАЙ



Наил Ғәйетбай (Наил Әсхәт улы Ғәйетбаев) 1948 йылда Баймаҡ ҡалаһында тыуған. Сибайҙа урта мәктәп тамамлай. Магнитогорск тау-металлургия институтында инженер-механик һөнәре алғас, Себерҙә, Сибайҙа эшләй, артабан Башҡортостан Яҙыусылар союзында, Мәҙәниәт министрлығында төрлө вазифалар башҡара.

Әлеге көндә Милли әҙәбиәт музейының генераль директоры һәм «Тамаша» журналының баш мөхәррире.

Наил Ғәйетбай мәҙәниәт министрының урынбаҫары булараҡ (1992—1998 й.) «Тамаша» һәм «Рампа» журналдарын ойоштороуға, Өфөлә республика уҡыу-методик үҙәген, Стәрлетамаҡта — филармония һәм бейеү театрын, Сибайҙа — махсус музыка лицейын, «Сулпан» балалар театрын, филармония һәм сәнғәт училищеһын асыуға, йыл һайын йәш драматургтар семинарын (Баймаҡ ял йортонда) һәм «Театр яҙы» фестивалдәрен үткәреүҙә ҙур өлөш индерә.

Драматург һәм прозаик Н. Ғәйетбай Башҡортостан Яҙыусылар союзының драма секцияһы рәйесе, Өфө сәнғәт институты доценты. Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре. 17 китап, 25 пьеса, 2 роман, 10 балалар өсөн повесть авторы.

КИТАП